# Ағиҙел

**Өфө,**
**август**
**2011**

**8(1060)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Азамат ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.08. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 214 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0139.11.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2011 (8,1060)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Абдулхаҡ Игебаев.** Арнауҙарым – ихлас моңдарым. Ш и ғ ы р ҙ а р. ....................5
**Радик Хәкимйән.** Бер йылға булһам ине… Ш и ғ ы р ҙ а р. ....................15
**Риф Дауыт.** Һаҡмар батыр. Ҡ а р һ ү ҙ. ....................20
**Фирҙәүес Бәширова.** Башҡорт ҡыҙы. Ш и ғ ы р ҙ а р. ....................33

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Тимерғәле Бүләков.** Баҫым. С и ҙ ә м с ә х и ф ә л ә р е. Башы. ........38
**Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллина.** Быйылғы яҙ йоҡоларҙан яҙҙым. Х и к ә й ә. ....................83

*Күмертау яҙыусылар ойошмаһына – 15 йыл*

**Кинйәғәли Абдуллин.** Башҡортостан; **Руша Солтанғолова.** Көйөргәҙе ере; **Нәсимә Йосопова.** Мин тормошто яратам; **Хәлиҙә Алтынбаева.** Һәйкәл; **Хәмзә Ишдәүләтов**. Урап үттең. Ш и ғ ы р ҙ а р. ....................92

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Әнғәм Хәбиров.** Аҫыл икән затың – һүҙең булһын алтын *(Шағирәләребеҙҙең быуат башында “Ағиҙел” биттәрендәге ижадына бер ҡараш)*. Башы. ....................102
**Миләүшә Ҡолмөхәмәтова**. Башҡорт әҙәбиәтендә фельетон. ......120

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Таһир Байышев.** Тырышҡан – ташҡа ҡаҙау ҡаҡҡан. Урта быуаттарҙа уртаҡ яҙма телдәр. *(Таһир Байышевтың тыуыуына 125 йыл)*. ....................126
**Фәнил Күзбәков.** Мәғәнәһеҙлектәге мәғәнә. *(Рус яҙыусыһы Сергей Довлатовтың тыуыуына 70 йыл)* ............142

ПУБЛИЦИСТИКА

**Мәхмүт Хужин**. Тубыҡланған килеш. ....................144

ТЕРЕ ХӘТЕР

**Дилара Мәхмүтдинова-Мутикова**. Иле менән бергә күрҙе. Башы. ....................173

МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ

**Хажи Әхмәтйәнов**. Төбәк тарихы сағыла. ....................188

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**А. Игебаев, Радик Хакимьян, Риф Даут, Ф. Баширова**. *Стихи*.

ПРОЗА

**Т. Буляков.** Нажим. Летопись целины. *Начало*.
**Г. Гайсарова-Гиззатуллина.** Этой весной я лишилась снов. *Рассказ.*

*15 лет – Кумертауской писательской организации*

**К. Абдуллин, Р. Султангулова, Н. Юсупова, Х. Алтынбаева, Х. Ищдавлетов.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**А. Хабиров.** Слово благородных – золото. *Начало*.
**М. Кульмухаметова.** Фельетон в башкирской литературе.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Т. Баишев.** Старательный в камень гвоздь вколотил.
Общеписьменные языки в средние века *(125 лет со дня рождения Т. Баишева)*.
**Ф. Кузбеков.** Смысл бессмыслицы *(70 лет со дня рождения русского писателя С. Довлатова)*.

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Хужин.** На коленях.

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Д. Махмутдинова-Мутикова.** Перенес вместе со всей страной. *Начало*.

МУЗЕИ – ЗЕРКАЛО КУЛЬТУРЫ

**Х. Ахметьянов.** История региона.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

**Абдулхаҡ**
**ИГЕБАЕВ**



## *Арнауҙарым – ихлас моңдарым*

*Күргән-кисергәндәр эҙһеҙ ҡалмай,*
*Маңлайҙарға ята юлағы, –*
*Хәтирәләр ебен сорнай-сорнай,*
*Елеп бара ғүмер йомғағы.*
*Асмандарҙа көмөш Ай ҡалҡамы,*
*Ҡыҙарамы таңдар шаңдағы, –*
*Тыуған ерҙең тартыу көсөн тойоп,*
*Елеп бара ғүмер йомғағы.*

*Эйе, тормошта һәр кемдең үҙ ғүмер йомғағы, үҙ йәшәү рәүеше, үҙ күрәсәге була. Ҙур, ҡатмарлы тормош юлдары үткән ихлас йөрәкле, изге теләкле, мәрхәмәтле әҙәмдәргә хөрмәтем дә, рәхмәтем дә, мөхәббәтем дә сикһеҙ! Ил яҙмышын, тел яҙмышын, милли моң яҙмышын ҡурсып, уның өсөн борсолоп йәшәгән ижадсылар айырыуса ҡәҙерле миңә. Ана шуға күрә лә уларҙы ололоҡлап, ил азаматтары хаҡында, йәнгә ғәзиз ҡәләмдәштәрем хаҡында яҙыуҙы үҙемә маҡсат итеп ҡуйҙым.*

*Бына ошо айбарлы ижадсыларға, ысын ватансыларға бағышлап төрлө йылдарҙа яҙған бер шәлкем шиғырҙарымды аҡ күңелле «Ағиҙел» журналында күргем килә минең. Амин, шулай булһын!*

**Автор.**

*Абдулхаҡ Игебаев (1930) Баймаҡ районының Күсей ауылынан. Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, 40-лап китап авторы. Әҫәрҙәре рус, татар һ.б. телдәргә тәржемә ителгән.*

## *Мөхәммәтсәлим олатай*

Был мәҙхиәне XIX быуаттың күренекле башҡорт
ғалимы һәм йәмәғәт эшмәкәре, мәғрифәтсе-шағиры
Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа бағышлайым

*Ҡыҙылғы ла буйы*
*ҡыҙырым сауҡа,*
*Сауҡалары бер көй һамаҡлай,*
*Баҡтиһәң, был көйҙө*
*таң атҡанда*
*Ысыҡ кисеп йырлап уҙған, тиҙәр,*
*Беҙҙең Мөхәммәтсәлим олатай.*

*Ағиҙелкәй алҡын,*
*тулҡындары*
*Шуҡ колондар һымаҡ уйнаҡлай.*
*Уйнаҡлаған тулҡындарға ҡарап*
*Күңеленә илһам алған, тиҙәр,*
*Беҙҙең Мөхәммәтсәлим олатай.*

*Табын ырыуының төйәккәйе*
*Әллә күпме сер һәм моң һаҡлай...*
*Ошо ерҙә,*
*мөкиббәндәр китеп,*
*Бер һылыуға ғашиҡ булған, тиҙәр,*
*Беҙҙең Мөхәммәтсәлим олатай.*

*Аяҡ эҙкәйҙәре юйылһа ла,*
*Исемкәйен меңдәр ҡабатлай,*
*Сал быуаттар аша киләсәккә,*
*Гүйә, бөркөт һымаҡ ҡарап тора*
*Беҙҙең Мөхәммәтсәлим олатай.*

*Хаҡ һүҙҙәрен елдәр осорманы,*
*Ҡола далалағы ҡамғаҡтай,*
*Моң-саздарын,*
*шиғри гәүһәрҙәрен*
*Илгә йәдкәр итеп ҡалдырҙы бит*
*Беҙҙең Мөхәммәтсәлим олатай.*

*Уның бай ижады хисте ялмай,*
*Зауыҡтырғыс яҙғы сыуаҡтай,*

*Милли әҙәбиәттең,*
*мәҙәниәттең*
*Мөхәббәтле пәйғәмбәрелер ул*
*Беҙҙең Мөхәммәтсәлим олатай.*

**1991**

## *Халыҡ шағиры*

Рәшит Ниғмәтиҙең яҡты иҫтәлегенә

*Ғүмер бит ул ике ҡабат килмәй,*
*Һанаулы шул йөрәк тибеше...*
*Иллә-мәгәр фани донъяларҙа*
*Һәр кемдең дә була торғандыр ул*
*Өлөшөнә төшкән көмөшө.*

*Бәғзеләргә ғүмер мул бирелә,*
*Татып йәшәй улар барын да.*
*Ә кемдеңдер ғүмер елкәндәре,*
*Көтмәгәндә селпәрәмә килеп,*
*Туҡтап ҡала йәшлек ярында.*

*Их, был ғүмер...*
*Серле йондоҙ төҫлө,*
*Бер балҡый ҙа ҡапыл юғала.*
*Ләкин, әжәлгә лә буйһонмайса,*
*Килер быуаттарға күкрәп барған*
*Ҡаһармандар була донъяла!*

*Шағир Ниғмәти ҙә шундай заттан,*
*Был түгелдер һис тә тиктәҫкә.*
*Әҙәм күңелдәрен нурлар өсөн,*
*Атайсалын данлап йырлар өсөн*
*Ергә килгән бит ул китмәҫкә!*

*Ижадына күскән Ниғмәтиҙең*
*Бөтә ғүмере, йөрәк тибеше...*
*Тимәк, үлемһеҙлек,*
*йәшнәп йәшәү –*
*Ҙур йырсының,*
*ысын ватансының*
*Өлөшөнә төшкән көмөшө.*

*Уның имәндәй ныҡ тамырҙары*
*Тыуған тупраҡ, тыуған ерлектә.*

*Шул ерлектән ижад һуты алып*
*Ил йәненә ҡушылып үҫкәнгә лә,*
*Батыр халҡы һымаҡ ябай ҙа ул,*
*Ғорур ҙа ул, мәңге бөйөк тә!*

**1979**

## *Йырың гиҙә илдәр араһын*

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә

*Шиғырҙарың нурҙан туҡылғанмы,*
*Әллә ҡойолғанмы көмөштән?*
*Әллә алдыңмы һин йырҙарыңды*
*Сылтыр-сылтыр аҡҡан инештән?*

*Әллә зәңгәр Димдең былбылдары*
*Шат йырҙарын бүләк иттеме?*
*Әллә халҡым моңо, шишмә булып,*
*Һинең йөрәк аша үттеме?*

*Аҙашҡанға тоғро юлдаш булып,*
*Яралының бәйләп яраһын,*
*Һинең шиғырҙарың, тынғы белмәй,*
*Гиҙеп йөрөй илдәр араһын...*

*Ғаләм телендә лә һөйләшә ул,*
*Әҙәм телендә лә һөйләшә,*
*Ауыр саҡта, йөгөм күтәрешеп,*
*Атлап бара бит ул йәнәшә!*

*Хәтәр минуттарҙа, йәнем өшөп,*
*Көмегәндә өмөт нурҙарым,*
*Шиғыр утың менән иреттең һин*
*Күңелдәге ҡайғы боҙҙарын!*

*Шиғырҙарың мең-мең дуҫ өйөнә*
*Килеп керә ырыҫ-ҡот булып,*
*Мәкер дошмандарҙың йөрәгенә*
*Ҡаҙала ул үткер уҡ булып!*

*Аҙашҡанға тоғро юлдаш булып,*
*Яралының бәйләп яраһын,*
*Шиғырҙарың, Мостай, һәр саҡ шулай*
*Гиҙеп үтһен илдәр араһын!*

**1969**

## *Шағир йырын йырлай аҡҡоштар...*

Ваҡытһыҙ вафат булған кешелекле,
мәрхәмәтле кеше һәм оло йөрәкле әҙип
Баязит Бикбайҙың яҡты иҫтәлегенә

*Һис тә көтмәгәндә, ҡапыл ғына*
*Күңел ҡылҡайҙары өҙөлдө,*
*Йылдар буйы янған йөрәгемдә*
*Өмөт ҡуҙым кинәт һүрелде.*

*Урмандарҙан һары япраҡ булып*
*Һары һағыш осто ҡырҙарға.*
*Бәғерҙәрҙе телеп, көҙгө елдәй,*
*Моң-зар килеп инде йырҙарға.*

*Йәш мөлдөрәй гөлдәр керпегендә,*
*Хәсрәт уты йота имәндәр,*
*Тәлгәш ҡайындарым, сағандарым*
*Моңайышып башын эйгәндәр...*

*Ҡабат инде таныш һуҡмаҡ буйлап*
*Шағир үтмәҫ йәй һәм көҙҙәрен.*
*Уфтанмағыҙ әммә, имәндәрем,*
*Моңаймағыҙ, таныш гөлдәрем...*

*Шағир йыры йәшәр күңелдәрҙә,*
*Иҫкә алыр уны бар дуҫтар:*
*Шағир йырын тартыр моңло ҡурай,*
*Шағир йырын йырлар аҡҡоштар!*

**1963**

## *Һин илаһи талант эйәһе*

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы
Зәйнәб Биишеваға

*Ажарланып,*
*мамыҡ ҡар туҙҙырып,*
*Дыулағанда ғинуар бураны,*
*Был ни ғәжәп әле,*
*был ни ғәжәп,*
*Хистәремде аҡ бурандар түгеп,*
*Ҡапыл серле моңдар сорнаны.*

*Зәйнәб апай,*
*һинең тыуған көнөң*
*Хатта ҡышҡы һалҡын миҙгелдә,*
*Гүйә, йылы яҙҙар килтерҙе лә*
*Сәскәләрҙең хуш еҫтәрен бөркөп,*
*Ҡош һайратты минең күңелдә.*

*Эй, кинәнеп,*
*шашып шатланамын,*
*Әйтерһең дә, мин бер диуана...*
*Булһа булһын,*
*мәгәр шуныһы хаҡ:*
*Әҙибәбеҙ,*
*һинең байрамыңа*
*Бөтә Башҡортостан ҡыуана!*

*Үҙ халҡыңа ҡайнар һөйөү булып*
*Ҡояш йөрөй йөрәк түрендә,*
*Ана шуға ла бит шәфҡәтлелек,*
*Мәрхәмәтлек нуры балҡый төҫлө*
*Сал сәсеңдең һәр бер төгөндә!*

*Яҡты донъяларға яратылған*
*Һин илаһи талант эйәһе,*
*Аҫыл талантыңдың*
*тамырҙарын*
*Киҫер өсөн аҙмы хаслыҡ ҡылды*
*Көнсөллөктөң хәтәр көйәһе!*

*Сәмле хеҙмәт менән күкрәп үтте*
*Йәшел яҙың,*
*ап-аҡ ҡыштарың...*
*Тылсымлы йән өрөп,*
*ҡанат ҡуйып,*
*Тормош ҡиблаһына осорҙоң һин*
*Ижадыңдың сихри ҡоштарын!*

*Мең хәүефтән,*
*мең бәләнән ҡурсып,*
*Тыуған телде,*
*тыуған төйәкте,*
*Ҙур йөрәкле Ил әсәһе булып,*

*Оло мөхәббәттең ҡанатында*
*Күтәрҙең һин тотош милләтте!*

*Заманыңдың моңон йырланың һин,*
*Сал тарихын яҙҙың быуаттың.*
*Мин инанам:*
*матурлыҡҡа әйҙәп,*
*Быуындарҙан быуындарға күсер*
*Гәүһәрҙәре һинең ижадтың!*

*Алтындарҙан ҡиммәт әҫәрҙәрең*
*Һәр беребеҙ өсөн ҡоттор ул!*
*Һөйөклөбөҙ беҙҙең,*
*Зәйнәб апай,*
*Уралтауҙай бай мираҫы булған*
*Һинең кеүек*
*әҙибәләр хатта*
*Шәреҡ донъяһында юҡтыр ул!*

**1993**

## *Һалдат булдың*

Лоҡман-Хәким Ғиләжевҡа

*Яңы ғына сыуаҡ яҙ йылмайһа,*
*Алтынланып йәнә көҙ етә,*
*Ниңә шулай,*
*иҫкән ел шикелле,*
*Йәшлек тигәндәре тиҙ үтә.*

*Йылдар... Йылдар...*
*бик тә ҡабаланып,*
*Сәстәреңә һипкән аҡ ҡарын.*
*Әле һинең, алпамыша һымаҡ,*
*Ғәйрәт сәсеп йәшәр саҡтарың.*

*...Һулҡ-һулҡ итеп,*
*һыҡрап һыҙлай ине*
*Тыуған илкәйемдең яраһы.*
*Ике ҡоштай ҡапыл яҡынайғайны*
*Йәшәү менән әжәл араһы...*

*Шул саҡ һин дә*
*ярһып яуға киттең,*

*Дошмандарҙан ҡурсып илеңде,*
*Яуҙа нисә тапҡыр күҙмә-күҙ бит*
*Осраттың һин әрһеҙ үлемде!*

*Ләкин дауылда ла ҡайырылманы*
*Ғүмер-шоңҡарыңдың ҡанаты...*
*Уттарын да, һыуҙарын да кистең,*
*Ватанымдың яугир һалдаты!*

*Һуғыш һуғыш инде,*
*ниндәй генә*
*Ҡайғы-хәсрәт төшмәй баштарға.*
*Һин дә яуҙа ҡаты яраланып,*
*Аҡһап ҡайттың тыуған яҡтарға.*

*Аҡһап ҡайттың... Яраң әрнегәндә,*
*Ете төндә ете уяндың...*
*Ә таң тыуғас, барын онотҡандай,*
*Еңдәреңде эшкә һыҙғандың...*
*Ҡара ҡурғаш яуған яуҙа ла:*
*Погонлымы йәки погонһыҙмы —*
*Һин бит һалдат булдың ҡайҙа ла!*

**1973**

## *Мин ишетәм Агиш тауышын*

Оло әҙип Сәғит ағай Агишҡа

*Туҡта, ниңә һиҫкәнеп үк киттем*
*Тыңлағанда тулҡын ағышын?*
*Тулҡын шауын үтеп, әйтерһең дә,*
*Мин ишетәм Агиш тауышын.*

*Әллә өнөм,*
*әллә төшөммө был,*
*Таныш тауыш ниҙер өндәшә.*
*Тыңлағыҙсы, зинһар, беҙҙең менән*
*Сәғит ағай үҙе һөйләшә:*

*— Яҙ гөлдәре мөлдөрәшеп кенә*
*Ҡөтәләрҙер мине таңдарҙа.*
*Һандуғастар,*
*зар-интизар булып,*

*Болоҡһойҙор һары талдарҙа.*
*Шанлы Ырымбурҙа,*
*Туҡсоранда*
*Хәтерләйҙер әле яҡташтар,*
*Юҡһыналыр алыҫ йәшлектәге*
*Үрһәләнеп янъан усаҡтар.*
*Мәгәр донъя менән хушлашһам да,*
*Күрмәһәм дә ҡояш нурҙарын,*
*Һәр көн рухым менән байҡайым мин*
*Тыуып үҫкән илем ҡырҙарын.*
*Ҡыҙҙарымдың үйсан ҡарашы ла,*
*Фәрдәнәмдең* моңһоу йөҙө лә,*
*Улар бәъеренә ъүмерлеккә*
*Уйылып ҡалъан һаъыш эҙе лә —*
*Бөтәһе лә йөрәк  парәһендә,*
*Ул һиҙмәй, тип фараз итмәгеҙ.*
*Сәъит ҡайтмаҫ ергә китте шул, тип*
*Бөтөнләй үк төңөлөп бөтмәгеҙ!*
*Фани донъяларҙан китһәм дә мин,*
*Һаман үҙем һеҙҙең арала.*
*Моңайһаъыҙ,*
*мин дә моңаямын,*
*Ҡыуанһаъыҙ,*
*ҡайъым тарала,*
*Һәр ъүмерҙең үҙ яҙмышы була,*
*Һәр кемдең дә була тәҡдире.*
*Ахыры, тәҡдир үҙе ҡушҡанъалыр,*
*Халҡым күңелендә — Мин тере!*
*Бөгөн дә мин, офоҡтаръа баъып,*
*Ҡаршы алам төҫлө ал таңды...*
*Сая рухым минең һис ҡасан да*
*Ташлап китмәҫ тыуъан Ватанды!*

**1975**

## *Шаъир яҙмышы*

Яҡуп ағай Ҡолмойға

*Донъяларҙа йәшәү еңелме ни?!*
*Шатлыҡтарҙан күберәк һаъыштары.*
*Әле һаман заман ауазында*
*Иңрәп ҡуя йөрәк тауыштары.*

---

**Фәрдәнә — Сәғит Агиштың ҡатыны.*

*Ҡайһы саҡта юҡҡа-бинахаҡҡа*
*Рәнйетелә шағир яҙмыштары!*

*Һинең яҙмышта ла,*
*ҡараһана,*
*Йән тетрәткес мәлдәр булғылаңы,*
*Бәғереңде кинәт сағып китте*
*Мәкерлектең хәтәр ҡылйылаңы...*
*Ләкин, нахаҡтарҙан интекһәң дә,*
*Һөйөп туялманың был донъяны!*

*Бәғзе яһил заттар һинең хаҡта*
*«Ҡара һағыҙ» сәйнәп ҡаңғырҙылар,*
*«Имеш-мимеш» хәбәр йыйған булып,*
*Өҫтәреңә ғәйбәт яуҙырҙылар.*
*Бара торғас,*
*япа-яңғыҙыңды*
*Һағыш утрауында ҡалдырҙылар.*

*Һин донъяла бармы,*
*әллә юҡмы, —*
*Һанға һуҡманылар талантыңды,*
*Илһам күктәрендә осмаһын тип,*
*Ҡайырҙылар хатта ҡанатыңды.*
*Әммә һыр бирмәнең,*
*гел хаҡлыҡҡа*
*Төбәнең һин сая ҡарашыңды!*

*Яҙмышыңдың шырлыҡтарын ярып,*
*Арып, хәлдән тайҙы быуындарың,*
*Мәгәр аҙап-баҙап ҡалғанда ла*
*Һүндермәнең ижад йондоҙҙарын,*
*Шөкөр, тимен, күк Уралды данлап*
*Һайрап тора күңел былбылдарың!*

**1989**



**Радик**
**ХӘКИМЙӘН**

# БЕР ЙЫЛҒА БУЛҺАМ ИНЕ...

## *Тыуған якта*

*Ыласынташым, ғорур Мәхмүт тауым*
*Ҡаршы сыға, ҡайтһам йыраҡтан.*
*Улар мине, шулай яҡын күреп,*
*Сәләмләйҙәр ҡайнар йөрәктән!*

*Зәңгәр тауҙар зәңгәр күккә ашҡан,*
*Саф шишмәләр аға сылтырап,*
*Зәңгәр билбау булып еркәйемдә*
*Әй йылғаһы ята ялтырап!*

*Йәшел күлдәк кейгән урмандарым,*
*Аҡ ҡайындар яулыҡ ябынған.*
*Ҡошҡайҙарым һуҙа дәртле йырҙар,*
*Әллә инде мине һағынған?!*

*Үләндәрҙең тәмен тәмләп-татып,*
*Ҡаҙҙар йөрөй йәшел сиҙәмдә,*
*Бәпкәләре һары ялҡын һымаҡ, —*
*Малай сағым, гүйә, эргәмдә!*

*Йылдар үткән — ҡыңғырауҙар сыңы*
*Ишетелә йыраҡ болондан.*
*Күңелемдең бар ҡылдарын сиртеп,*
*Сабып үтте, ана, ҡолондар!*

---

*Радик Хәкимйән (1941) Ҡыйғы районы Үрге Ҡыйғы ауылынан. БДУ-ны тамамлай. Тиҫтәгә яҡын китабы донъя күрҙе.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ.*

*Күҙҙең яуын алған шау сәскәләр*
*Ҡосаҡларға әллә йүгерә?*
*Һаумыһығыҙ, наҙлы яҡташтарым,*
*“Ҡояшлы көн!” — тимен һәр гөлгә!*

*Яна миндә һағыныу, һөйөү хисе,*
*Яҡташтарым өсөн ғорурлыҡ.*
*Тыуған ерҙә, тыуған яҡта ғына —*
*Шундай сафлыҡ, киңлек, хозурлыҡ!*

*Онотола бөтә арығандар,*
*Тупрағымдың тойғас йылыһын;*
*Йәшәүҙәрҙең йәме, тәме арта,*
*Шатлыҡтарҙың тоям олоһон!*

*...Тыуған ерең, яҡташтарың булыу —*
*Һәр кем өсөн бәхет, ныҡ терәк.*
*Айырылғас та тойҙом, аңланым мин:*
*Һиндәй гүзәл, ғәзиз ер һирәк!*

## ***Эҫем үре***

*Эҫем үре, Эҫем тауы аша*
*Ҡайтҡан һайын тыуған яғыма*
*Гүзәл ерҙе күреп һоҡланһам да,*
*Тынғылыҡ юҡ никтер йәнемә.*

*Урап-урап тауға үрләгәндә,*
*Шик-шөбһәләр йәнгә һыйына,*
*Аҫта шаулай йүгерек Эҫем һыуы —*
*Тайып китерҙәй үк тойола.*

*Ике ҡитға сиктәренә баҫҡан,*
*Күккә ашып, Эҫем тауҙары.*
*Улар шаһит: был ерҙәрҙән үҙған*
*Салауат һәм Бүгәс яуҙары.*

*Бейек тауҙар тарих һөйләй беҙгә,*
*Тауҙар телен әгәр аңлаһаң.*
*Елдәр бында батырҙарҙың рухын*
*Яңырта ул, ихлас тыңлаһаң!*

*Сал Уралдың армыт тармаҡтары*
*Балҡып тора әллә ҡайҙарҙан.*
*Мөғжизәләр илен бөркөттәр ҙә*
*Оя ҡороу өсөн һайлаған!*

*Тау, үҙәндәр бигерәк күркәм инде*
*Йәйге аяҙ, хозур көндәрҙә.*

*Ҡаяларҙа шат йондоҙҙар бейей*
*Айлы, нурлы сихри төндәрҙә.*

*Дауыл ҡупһа, тауҙар ҡалҡан була,*
*Бәлә-ҡазаларҙан яҡлаусы.*
*Әй, кешеләр! Имен булһын донъя,*
*Ут-ялҡындан ерҙе һаҡлағыҙ!*

## Өҙөлмәһен

*Тормош йөгөн төпкә егелеп тарта*
*Ғүмер буйы ауыл кешеһе.*
*Сәсә, ура, илде туйындыра —*
*Шулдыр ерҙе һөйөү билгеһе!*

*Тырыш бит ул ауыл кешеләре,*
*Түҙемлеләр, сабыр, уңғандар.*
*Барыһы өсөн янып-көйөп йәшәй —*
*Таң һарыһы менән торалар!*

*Тыуған ерҙең ҡара тупрағына*
*Күпме әсе тирҙәр түгелгән!*
*Үлән, игендәр бит көйгән саҡта,*
*Теште ҡыҫып аҙмы түҙелгән?!*

*Бесән булһа, иген уңһа әгәр,*
*Шатлыҡтарҙың юҡтыр сиктәре;*
*Ауыл балҡый, күптәр ҡыуаныстан*
*Доға ҡыла, ҙурлап күктәрҙе!*

*...Еңел түгел бөгөн яҙмыштарың,*
*Ауылҡайым, ниндәй хәлдә һин?*
*Бер кем белмәй, бер кем ишетмәй ҙә:*
*Күпме ауыл ҡалған илдә һүң?!*

*Мин ауылдың төрлө сағын күрҙем,*
*Гөрләп торған сағын һағынам.*
*Ҡайғыларың ҙур шул, изге ерем,*
*Яҡты өмөттәргә табынам!*

*Һәр кемгә лә тыуған яғы ғәзиз,*
*Иген ҡыры, шишмә моңдары,*
*Их, тиҙерәк таратырға ине*
*Замананың хәтәр томанын!*

*...Әйләнә ер! Донъя — ҡуласа ул,*
*Теләгем бер: уңһын юлдарың,*
*Үҙгәрһә лә заман, өҙөлмәһен*
*Ауылымдың нурлы йылдары!*

## *Йәшәү көсө*

*Иген уңа, гөрләп үҫә,*
*Һынатмаһаң һабанда.*
*Икмәк — ҡөҙрәт, йәшәү көсө.*
*Муллыҡ ул һәр заманда!*

*Күңелдәргә көс-дәрт бирә*
*Туҡ башаҡтар сыңлауы,*
*Һөйөнөстәр тула йәнгә,*
*Ниндәй рәхәт тыңлауы!*

*Икмәк — оло хазина ул,*
*Балҡып торһон һәр өйҙә.*
*Тормош күрке — икмәкте мин*
*Алыштырмам бер нигә!*

*...Ҡайҙа барһаҡ та, иң тәүҙә*
*Икмәк ауыҙ итәбеҙ,*
*Игенсегә беҙ бурыслы —*
*Мең рәхмәттәр әйтәбеҙ!*
*Мең рәхмәттәр әйтәбеҙ!*

## *Йәмдәр өләштең гел*

Күренекле фронтовик-шағир Хәниф Кәримгә

*Ауылымдың тәүге шағиры һин,*
*Һыуҙары саф шиғри шишмәңдең.*
*Аҫыл һүҙҙәр, ынйы-мәрйен эҙләп*
*Ниндәй генә юлдар кисмәнең?!*

*Ҡайсаҡ атта, ҡайсаҡ йәйәү үттең*
*Ҡыйғы менән Өфө араһын,*
*Оҙон юлда йырҙар көйләй-көйләй,*
*Яҡты үрҙәргә һин барғанһың!*

*“Һаҡсы йыры”, “Тантана”лар менән*
*Күтәрелдең ижад үренә,*
*“Имән”дәрҙе хатта, шаулаттың һин,*
*Ҡалдың һәр саҡ “Йәшлек илендә”.*

*Үҙең теләп яу ҡырына киттең,*
*Үттең ауыр һуғыш юлдарын,*
*Мәскәү, Литва аша Берлинғаса*
*Алып барҙың еңеү йырҙарын.*

*Ижадыңда ябай кешеләрҙе,*
*Батыр һалдаттарҙы ҙурланың,*
*Һин “Тормошто һөйҙөң”, ерҙе биҙәп,*
*“Яҡты йондоҙ” булып нурланың!*

*“Яҙғы баҡса”ларҙа үҫтерҙең һин*
*Шиғри гөлләмәләр халҡыңа,*
*“Алтын башаҡ” тарҙы бүләк иттең*
*Менгән саҡта тауға, яҡтыға!*

*...Беҙ бәхетле һинең менән, шағир:*
*Йәм өҫтәнең илгә, күңелгә.*
*Шуғалыр ҙа, көс-дәрт биреп йәнгә,*
*Йырҙарың бит йәшәй бөгөн дә!*
*Йырарың бит йәшнәй бөгөн дә!*

## Бер йылға булһам ине

*Шишмәләрҙән башлай юлын*
*Ер йөҙөндә һәр йылға —*
*Даръяларға ҡушылғансы*
*Инештәрҙән көс йыя.*

*Минең дә юлым шишмәнән,*
*Инештәрҙән башланды.*
*Яҙмыш ҡайҙарға илтмәне,*
*Уппындарға ташланы.*

*Һиҫкәндерҙе, тетрәндерҙе*
*Даръяларҙың геүләүе.*
*Юғарыға юлдар ауыр,*
*Бик ҡыйын шул үрләүе.*

*Даръяларҙа ҡолас ташлау*
*Еңел түгел икән шул.*
*Мине шулар сыныҡтырҙы —*
*Донъя серле икән ул!*

*Баш эймәҫкә өйрәттеләр,*
*Ҡыйыулыҡҡа — даръялар,*
*Маҡсаттарға барған саҡта*
*Нурға сумды донъялар.*

*Офоҡтарға илтһен юлым,*
*Тулҡындар яра-яра.*
*Тырыштарға, ныҡыштарға*
*Ҡояш та һөйөп баға!*

*...Булһам ине халҡым өсөн*
*Шифа һыулы бер йылға.*
*Һыуһағанда йәндәрегеҙ*
*Тулһын ине моң-нурға!*



**Риф**
**ДАУЫТ**

## ҺАҠМАР БАТЫР

**ҠАРҺЫУҘ**

*Борон-борон заманда,*
*Урал батыр үлгән һуң;*
*Халҡы уны ғәзиз Ер*
*Ҡуйынына биргән һуң;*
*Илдә далай халыҡҡа*
*Эсергә һыу етмәгәс;*
*Тәңре лә һауанан*
*Тамсы ямғыр һипмәгәс;*
*Халыҡ өсөн һыу юллап,*
*Тау яғалап, ҡыр ҡырлап,*
*Иҙел, Нөгөш уң тараф*
*Ҡарап сығып киткән һуң;*
*Яйыҡ батыр һул ҡарап*
*Дала буйлап елгән һуң;*
*Ҡеүәт тирткәс Ерҙән, ти,*
*Әмер булғас Күктән, ти;*
*Кесе батыр Һаҡмарға*
*Сират килеп еткән, ти.*
*Мыҡты һынлы Һаҡмарҙың*
*Өҫтөндә яу кейеме*

---

*Риф Дауыт (1941) Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы Миртирәк ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай, ғүмере буйы уҡытыусы булып эшләй. Әле хаҡлы ялда. Медногорск ҡалаһында йәшәй.*

*Ҡәләмдәшебеҙе 70 йәше менән ихлас тәбрик итәбеҙ, ижади уңыштар теләйбеҙ.*

*Алтын-һары төҫлө, ти.*
*Уң ҡулында торҡаһы*
*Шул уҡ төҫлө миҫле, ти.*
*Ҡан йөрәген һыҙлатып,*
*Ағайҙарын оҙатып;*
*Яңғыҙ үҙе ҡалғастын,*
*Бошом ҡамап алғастын;*
*Бер мәл Һаҡмар аңынан*
*Сабырлығы ҡасҡан, ти;*
*Әсәһенең алдына*
*Һаҡмар килеп баҫҡан, ти;*
*Әсәһенең күҙенә*
*Күҙ тултырып баҡҡан, ти;*
*Бите буйлап ыҙанлап*
*Ҡайнар йәше аҡҡан, ти.*

*Улын ҡурсып, Айһылыу*
*Фатихаһын биргән, ти:*
*— Иле нимә уйлаһа,*
*Шуны уйлар аңлы ир.*
*Халҡы нимә көҫәһә,*
*Шуны көҫәр шанлы ир.*

*Атаң яуыз булһа ла,*
*Яҡшы заттан тыуғанһың.*
*Мин — Ай ҡыҙы булһам да,*
*Һин — Ер улы булғанһың.*

*Урал тартты уң яҡҡа,*
*Шүлгән тартты һул яҡҡа,*
*Һулға киткән атайың*
*Һине яҡын итмәне.*
*Яуыздан ҡур алһаң да,*
*Кеше һине типмәне.*

*Һин Уралға ҡушылып,*
*Ир-батырға ҡуш булып;*
*Атайыңдың яуына,*
*Илгә бөрккән ыуына*
*Ҡаршы барып, уҡ сойорғоп,*
*Һарысайҙа ил ҡурғып,*
*Остоң ҡыйғыр ҡош булып.*

*Ағайҙарың: «Һин — Һаҡмар,*
*Шүлгән заттан тыуҙың», — тип*

*Һине ситен итмәне.*
*«Әйҙә, һин — йәш батыр», — тип*
*Ауырлыҡҡа екмәне.*

*Улар менән яу сабып*
*Батыр булып танылдың.*
*Ил-халыҡтың күңелендә*
*Батыр тигән дан алдың.*

*Ана! Улар һыу юллап,*
*Урау-урау юл буйлап*
*Илгә сығып киттеләр;*
*Арттарынан эйәргән*
*Халҡын һыулы иттеләр.*

*Инде, улым, һиңә лә*
*Сират килеп еткәндер.*
*Яҙмыштан, ти, уҙмыш юҡ,*
*Тәңре шулай иткәндер.*

*Бына тора Шишәйҙәр,*
*Ҡураған, Бүре, Бишәйҙәр*,*
*Етәндәре** сеңләшеп,*
*Мал-тыуары сыулашып;*
*Һинән өмөт көсәйҙәр.*

*Һаҡла, балам, халҡыңды!*
*Ҡаҡма, балам, халҡыңды!*
*Илеңә түш булалһаң,*
*Ҡайтарыр ул хаҡыңды!*

*Ил теләге бул, балам!*
*Ил терәге бул, балам!*
*Ил юрғаны бул, балам!*
*Ил түшәге бул, балам!*

*Ил типкәндең әжере күп,*
*Илһеҙ ирҙең йәбере күп;*

---

* *Шишәй, Ҡураған, Бүре, Бишәй — боронғо ырыу исемдәре. Ҡураған ырыуынан башҡалары Үҫәргән ырыуы тарафынан йотола. Хәҙер Бишәйҙән бер ауыл, Бүренән дүрт ауыл тороп ҡалған.*

** *Етән — ғаилә. 1. Ике сәсән әйтешенән: «Етән төбө ете айры,*
*Ул ни булыр, Ҡобағош?*
*Етән төбө ете айры —*
*Ғаилә булыр, Һобағош!»*

*2. Мосолмандар араһында «Ете бүлемдән торған сират күперенән ғаилә башлыҡтары, изге булһалар, ете йәнлегә ирешһә генә ожмахҡа үтә алалар» тигән лаҡап та йөрөй.*

*Илһеҙ ирҙең  ҡәҙере юҡ,*
*Илһеҙ иргә әҙере юҡ.*

*Белеп торам уйыңды,*
*Бүлә алмам юлыңды;*
*Аяҡтарың биләүләп,*
*Бәйләй алмам ҡулыңды.*

*Инде нимә тиәйем,*
*Хәйерле юл теләйем.*
*Сәсем менән һеперәп,*
*Эҙеңә йәш түгәйем.*

*Һаҡмар батыр, әсәһе*
*Ризалығын биргән һуң;*
*Ҡулындағы торҡаһын*
*Суҡ башына кейгән һуң;*
*Эйәрҙәге  ҡоралын,*
*Үҙ иңенә аҫҡан һуң;*
*Һарысайын иркәләп*
*Өҙәңгегә баҫҡан һуң;*
*Тоташ аҡка төрөнгән,*
*Ҡолға таяҡ таянған*
*Бер ҡарт: «Улым, туҡтап тор!» —*
*Тиеп килеп еткән, ти.*
*Килеп еткәс, Һаҡмарға*
*Ошолай тип әйткән, ти:*
*— Улым, менгән толпарың*
*Үтә алғыр күренә,*
*Ҡанаттарын кирҙермә!*
*Йөрәкһеп үк, һыртына*
*Ҡамсың осон тейҙермә!*
*Иркенә ҡуй, Һарысай*
*Үҙе белер ыңғайын.*
*Ул туҡтаһа, ҡыуһаң да,*
*Ҡыуып арман булһаң да,*
*Бәкәленә һыу типмәй*
*Һис ҡуҙғалмаҫ малҡайың!*

*Унан тағы шуны әйтәм:*
*Оло һыуға  етмәйсә;*
*Оло сайын аралап,*
*Һарысайың сабынлап,*
*Бил-бауырҙан кисмәйсә;*

*Артыңда ни ишетмә,*
*Артҡа әйләнеп ҡарама:*
*Тиктән генә билдәһеҙ*
*Бер бәләгә тарыма!*

*Юҡһа, ана, Ҡорғаҙы,*
*Иләценең дан ҡыҙы:*
*Артында шау ишетеп,*
*Әйләнгән, ти, артына*
*Эҙенән килгән шифа һыу*
*Сумған, ти, ер аҫтына.*

*Йәнә, шуны әйтәйем,*
*Белгәнем бәйән итәйем:*
*Юлыңда бер шау булыр,*
*Шау эсендә дау булыр,*
*Ул дау ике батшаның*
*Ыҙғышыуы — яу булыр.*

*Яугирлығың ҡабынып,*
*Ҡуйма бер ук абынып.*
*Ул яуға һин ҡыҫылма,*
*Юлыңда бул, балаҡай!*
*Эт-ҡоштарға тарыма!*
*Хәйерле юл, балаҡай!*

*Һаҡмар батыр ошо саҡ,*
*Ҡыҙыҡһынып китепме;*
*Әллә инде ысынлап*
*Аң-аҡылы етепме;*

*Һораған, ти, был ҡарттан:*
*— Олатай, атың кем булыр?*
*— Үҙемдең ат,— тигән ҡарт,—*
*Иҫеңдә тот, Ҡе булыр!*

*Ҡарт яуабын ишетеп,*
*Бер ситкәрәк шылғаны —*
*Өс ҡатындың береһе —*
*Ал сарылы булғаны.*
*Ҡарт байғоштоң янына*
*Йәһәт килеп еткән, ти.*

*Күҙен ҡартҡа төбәшеп,*
*Шундай һорау биргән, ти:*

*— Тәнемә эҫе йүгерҙе*
*Ишеткәс тә атыңды.*
*Ысынлап һин Кеме ни?*
*Ҡарт шунда уҡ таныған*
*Был һомғол һын ҡатынды.*

*— Эйе, мин — Ке,— тигән ҡарт, —*
*Ғәзиз Һомай — анаҡай,*
*Иҫәр баштан, белмәйсә*
*Йәншишмәнән һыу эскән*
*Гонаһлы йән — һармаҡай.*

*Һомай тағы һораған:*
*— Һаман булһа үлалмай,*
*Ҡаңғырыпмы йөрөшөң?*
*Быға яуап итеп ҡарт:*
*— Эйе, Һомай! Донъяла*
*Шулдыр инде өлөшөм,—*
*Тигәс, үҙе һораған:*
*— Һомай апай, һине лә*
*«Ул ҡоштунын сисалмаҫ,*
*Һомай тигән ҡош икән»*
*Тигән хәбәр ишеттем, —*
*Барыһы ла буш икән.*
*Һомай бер аҙ уйланып,*
*Аҙаҡ, уйҙан уянып,*
*Бына былай тип әйткән:*
*— Эйе, туным сисә алмаҫ*
*Ҡош булғайны бер мәлем.*
*Әүлиәгә тап булып,*
*Ҡабат туным һалырға,*
*Кеше һынын алырға*
*Ул өйрәтте әмәлен.*

*Уралымдың ҡәберен*
*Ҡосоп өс төн йоҡланым,*
*Көндөҙҙәрен Тәңремә*
*Ялбарҙым да һыҡтаным.*
*Дүртенсе көн таңында*
*Кеше булып уяндым.*

*Ҡоштунымды төргәкләп,*
*Ал сарыға урандым.*
*Хәҙер бына ни һынға*
*Әйләнергә теләһәм;*
*Тәңрем биргән тылсымдың*
*Әмерҙәрен  тыңлаһәм;*
*Кәрәк икән, ҡош булам,*
*Кәрәк булһа, ҡауланмын;*
*Әйтерһең, мин әкиәти,*
*Нәҡ тә юха  йыланмын.*

*Үҙең ҡайҙан киләһең —*
*Талсыҡҡаның беленә;*
*Ҡалай табан бараһың —*
*Йән ғазабың  һиҙелә? —*
*Тигәс Һомай, был ҡарт та:*
*— Ни ҡалһа ҡалды артта.*
*Һөйләп бөтөп булмаҫтыр.*
*Һомай апай, барсаһын*
*Һупләп бөтөп булмаҫтыр.*
*Ҡыҫҡаһы шул: мин  донъя*
*Урап  ҡайтып  киләмен.*
*Ҡайтып, тыуған төйәккә*
*Ҡыу башымды эйгәнмен.*

*Аяҡтарым талдырып,*
*Йөрөнөм байтаҡ ерҙәрҙә;*
*Булдым алты улымдан*
*Бар буған һәр илдәрҙә.*

*Ҡай бер илдәрҙең халҡы*
*Үҙҙәрен «беҙ — әҙәм» ти;*
*Ҡай ил халҡы «кеше беҙ,*
*Әҙәм ашы хәрәм» ти.*

*Йөрөй торғас, һин һымаҡ,*
*Әүлиәгә тап булдым.*
*Шуға ҡайтып килешем,*
*Уңһын инде был юлым.*

*Уңһа Шемдең янында,*
*Үлемемдең  алдында,*
*Башым эйеп йән бирһәм,*
*Ҡесе улым — Бүремдең*

*Халҡы кәүҙәм ҡалдығын*
*Ер ҡуйынына бирһендәр.*

*Ярай, апай, был хаҡта,*
*Урын алып аулаҡта;*
*Йәйрәптереп ултырып,*
*Һайрашырбыҙ аҙаҡтан,—*
*Тигән дә ҡарт Һаҡмарға*
*Ҡараштарын эйгән, ти,*
*Ил батыры Һаҡмарға*
*Тағы былай тигән, ти:*
*— Шуны ла бел, балаҡай,*
*Юл аҙабын күрмәһәң,*
*Йән ғазабын белерһең;*
*Юл михнәтен үрмәһәң,*
*Зыр-зәхмәтен һүрерһең.*

*Ярай, улым, юлсының*
*Һәйбәт юлда булғаны.*
*Иле өсөн, халҡы өсөн*
*Изге юлды ҡыуғаны.*

*Ҡарт ошолай тигән һуң,*
*Һаҡмарҙа дәрт ҡуҙған, ти;*
*Һарысайы һыртына*
*Ҡоштай осоп ҡунған, ти.*

*Айһылыу ҙа күҙенә*
*Ҡайнар йәшен алған, ти.*
*Бите буйлап сөбөрләп*
*Йәше ергә тамған, ти.*

*Күҙ йәш тамған урындан*
*Һыу бөркөлөп сыҡҡан, ти.*
*Һарысай баҫҡан уйпатҡа*
*Ул сөбөрләп аҡҡан, ти.*

*Бәкәленә һыу типкәс,*
*Ҡыуыуҙы ла һорамай,*
*Уя баҫып ҡаҡ ерҙе,*
*Ҡуҙғалған, ти, Һарысай.*

*Урмандарҙы аралап,*
*Ҡыуаҡтарҙы тапалап,*
*Түмәләстәр яғалап,*
*Һарысай алға елгән, ти.*

*Арттан төшкән ағын һыу,*
*Селдер-селдер алғыр һыу;*
*Баҫа килгән алҡын һыу*
*Селдерләтеп көлгән, ти.*

*Селдер моңға ҡушылып,*
*Бер-беренә һырышып;*
*Һарыҡтарын баҡыртып,*
*Ҡәҙәләрен аҡыртып;*
*Һыйырҙарын мөңрәтеп,*
*Йылҡыларын сыңратып;*
*Сыр-сыулатып ҡош-ҡортон,*
*Алға әйҙәп үҙ йортон*
*Халыҡтарҙың ҡупҡаны,*
*Тамаҡтарын йыртҡаны*
*Арттан ҡыуа килгән, ти.*
*Шишмә менән ярышып,*
*Шыла-шыуа килгән, ти.*

*Һаҡмар батыр нисә көн,*
*Көн артынса нисә төн,*
*Аҙна буйы, әллә ай,*
*Бер нигә лә ҡарамай,*
*Эт-ҡоштарға тарымай*
*Һарысайҙа елгән, ти.*
*Ә артында ишәйеп,*
*Шау көсәйә килгән, ти.*

*Шау көсәйеү сәбәбе —*
*Ил ишәйеү сәбәбе.*
*Һаҡмар арты һыу күпсеп,*
*Даръя булып киткән, ти.*
*Яйыҡ йырған йылғаға*
*Саҡлы барып еткән, ти,*
*Уға ҡеүәт биргән, ти.*

*Һаҡмар йырған йылғала*
*Һыу күбәйгәс, далала*
*Үҫем, үрсем шытҡан, ти.*
*Ҡабырсағын даланың*
*Тиртеп-тишеп сыҡҡан, ти.*
*Саңдауланған ҡаҡ дала*
*Йәшел күлдәк кейгән, ти.*

*Аҡ ҡылғандар, ҡамғаҡтар*
*Башын күккә сөйгән, ти.*

*Ҡамғаҡ, ҡылған аралап,*
*Емшәп йәки тапалап;*
*Йом(о)рандар, һыуһарҙар*
*Һыҙғырған, ти, һыу барға.*
*Тарпан, илек, ғәзәлдәр*
*Килгәндәр, ти, һыуларға.*

*Дуғаҙаҡтар ҡыуанып*
*Йүгергән, ти, сыулашып;*
*Бытбылдығы, селдәре*
*Бер булған, ти, зыңлашып;*
*Оҙон муйын аҡҡоштар*
*Ҡойонған, ти, туңҡылдап:*
*Һирәк тояҡ торналар*
*Бейегән, ти, торҡолдап;*
*Һабантурғай күгендә*
*Һайрап, ғәмен тапҡан, ти;*
*Бал ҡорттары һәр сәскә*
*Таты-тәмен татҡан, ти...*

*Әйләнмәгәс артына,*
*Һаҡмар быны күрмәгән.*
*Арттан килгән шау-шыуҙың*
*Сәбәбен, ти, белмәгән.*

*Шулай елеп барғанда,*
*Елә китеп барғанда,*
*Һаҡмар батыр алдында*
*Ниндәйҙер бер сыйылдау,*
*Һыҙғырыу ҙа ҡый-ҡыулау*
*Ишеткән, ти. Шулай ҙа*
*Белмәгән, ти, туҡтауҙы.*
*Белгән, ти, ул тик берҙе —*
*Юл саҡрымын утауҙы.*

*Бары ниҙер һыҙғырып,*
*Күңелдә шом ҡуҙҙырып,*
*Баш осонан уҙынып*
*Үткәс, Һаҡмар ҡалҡынып*
*Ҡараған, ти, алдына.*

*Ҡараһа, ни күрһен, ти,—*
*Ике батша сиреүе*
*Кәртә булып юлына*
*Оранламай, һөрәнләп,*
*Ҡалмауырлап, телләнләп;*
*Әләкләп бер-береһен,*
*Уҡ атыша икән, ти.*
*Сүбәк урап уҡбашҡа,*
*Ут атыша икән, ти.*

*Һаҡмар, түҙмәй, шул сағын*
*Һурып алып ҡылысын,*
*Уҡ-ут атыш арҡанын,*
*Аяп тормай барсаһын,*
*Урталайға өҙгән, ти.*
*Яуҙы, шул яу һөрәнен*
*Өңдәренә һөргән, ти.*

*Яуҙы өҙгәс, һаҙағын,*
*Ян кереше аҙағын*
*Кирә тартып, зыңлатып,*
*Әпәләсте буйлатып,*
*Осорған, ти, шул уғын.*
*Түмәләстәр сәсрәтеп,*
*Уҡ белгән, ти, үҙ юлын.*

*(Уҡ юлына, аҙаҡтан,*
*Һаҡмарҙан һуң килгәндәр,*
*Лайыҡ исем биргәндәр.*
*«Уҡ саптырған» тигәндәр.)*

*Һаҡмар уғы юлынан*
*Ары табан елгән, ти.*
*Күҙ ҡырлатып ян-яҡҡа,*
*Ни барлығын белгән, ти.*

*Уң яғында һерәйеп,*
*Уҡ-ян тотоп, ирәйеп,*
*Ҡескәй осҡор ҡанатлы,*
*Нәҡ тә кеше сифатлы*
*Алпамыштар торған, ти.*
*Улар үткән замандың*
*Шайтандары булған, ти.*

*Һул тошонда кәксәйеп,*
*Ҡыуыҡ эсе көсәйеп,*
*Ярғанатлы ҡанатлы,*
*Гөбөргәйел һыпатлы,*
*Йылан башлы кәүҙәләр*
*Суҡайышып ҡунған, ти.*

*Улар Урал туҙҙырған,*
*Йәнтөйәктән ҡыуҙырған*
*Шүлгән батша сиреүе,*
*Сиреүенең остоғо*
*Ен-дейеүҙәр булған, ти.*

*Һәммәһе лә ҡурҡышып,*
*Бер-береһен уҙышып,*
*«Ҡеше килде — көн бөттө»*
*Тип иңрәшеп ҡалған, ти.*
*«Беҙҙең заман үтте» тип*
*Сеңләп һөрән һалған, ти.*

*Һаҡмар батыр артабан,*
*Шау ишетмәй арҡанан,*
*Бары йылға шаулауын,*
*Үҫемлектәр сыртлауын*
*Ишетеп, алға барған, ти.*
*Тәбиғәткә йәм өрөр,*
*Үҫемлеккә йән бирер*
*Йылғаға юл ярған, ти.*

*Әпәләсте аралап,*
*Түмәләстәр яғалап,*
*Бара торғас, бер көндө,*
*Шул көндәге бер мәлде*
*Һаҡмар бер һыу күргән, ти.*
*Һарысай ҙа шул һыуға*
*Ҡанатланып елгән, ти.*

*Шул оло һыу яр буйы*
*Ҡылғамыш та екән, ти.*
*Баҡтыниһәң, был дарья*
*Һыу күпсеткән дәү әрйә,*
*Һаҡмар үҙе тыуған ер,*
*Донъялағы берҙән-бер*
*Йәнтөйәген дүрт яҡлап,*

Сит-ят бауырҙан һаҡлап
Ятҡан диңгеҙ икән, ти.
Һаҡмар батыр шул мәлдә,
Шул мәлдәге бер хәлдә
Диңгеҙгә лә еткән, ти.
Һарысайы диңгеҙгә
Бил-бауырҙан ингән, ти.

Һарысай бил-бауырлап,
Екән, ҡамыш аралап,
Һыу күпсетеп сапсығас,
Ҡанаттарын ҡағынған;
Һаҡмар уны һул яҡҡа
Бороп, артҡа баҡҡан, ти.
Баҡһа, унда ни күрһен:
Ҡыуа килеп бер-береһен,
Дүңгәләктәй тәгәрләп,
Түмәр һымаҡ түңәрләп,
Бик киң йылға диңгеҙгә
Шаулап килеп аҡҡан, ти.

(Был йылғаны шунан һуң
«Ер ырыҫын һаҡлар» тип,
Хөрмәтенә Һаҡмарҙың
Атағандар «Һаҡмар» тип.)

Һаҡмар батыр киренән
Яр өҫтөнә сыҡҡан, ти.
Һарысайын яйына
Ебәреп Ер сайына,
Ер-әсәгә сүккән, ти.

Шул килеш ул, ҡаҡ ерҙән,
Шытыр шытымдар берҙәм
Шытып шәлкем үргәнен,
Ҡырҙы йәшел күмгәнен,
Күреп, тыңлап булғастын,
Булғанынан туйғастын,
Шунда һуҙылып ятҡан, ти.
Ҡарашын үр күтәреп,
Зәңгәр күккә баҡҡан, ти.



**Фирҙәүес**
**БӘШИРОВА**

## *Башҡорт ҡыҙы*

*Башҡорт ҡыҙы — ул халҡымдың йөҙөк ҡашы,*
*Серле, төҫөн юймаҫ гүзәл, күҙ ҡамашыр.*
*Быуындарҙы быуындарға ялғап, төйнәп*
*Рух ялҡынын дөрләтеүсе саҡматаштыр.*

*Күңелдәрҙе күмер итер утлы ҡараш:*
*Йәнгә йәмле йылы һөттәй һалмаҡ һөйләш.*
*Тирә-яҡҡа осҡон сәсер үксәләре,*
*Бейегәндә аяҡтары алмаш-тилмәш.*

*Һомғол Иҙел ағышылай ғәмле уйҙар*
*Толомдары тирбәлгәндәй аңын аулар.*
*Хыялдары, әйтерһең дә, — күккә ашҡан*
*Тылсым тулы Ирәмәлдәр, Торатауҙар.*

*Ҡолағында сыңлап торһа тәңкә сыңы,*
*Егетенең “һөйәм, йәнем” тигән һүҙе,*
*Болоттарҙы үтә тишер башҡорт ҡыҙы:*
*Нурын һипһен төйәгенә Ҡояш үҙе!*

---

*Фирҙәүес Бәширова Ишембай ҡалаһында тыуған. Силәбе дәүләт педагогия институтын тамамлай. БР Яҙыусылар союзы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*
*Татарстанда йәшәй.*

## Тормош

*Йыһанда бер нурлы туптыр — Ер шарыбыҙ,*
*Шул йыһанда әйләнәбеҙ беҙ барыбыҙ,*
*Ә Ер үҙе — ҡорамалы юрғанмы ни:*
*Ил-дәүләттәр, тауҙар, һыуҙар, аҡ ҡарыбыҙ.*

*Һәр дәүләттең үҙ солтаны.*
*Илгенәнең*
*Хаким һайлай хөкүмәтен — дилбегәһен.*
*Дилбегәле "һыбайлылар" үткән саҡта*
*Йәйәүлегә баш эйәһе, бил бөгәһе.*

*Бер "һыбайлы" ҡамсы аҫрар ҡындарында,*
*Бәғзенеке уйнап торор ҡулдарында.*
*Бер дәүләттә иркенлектән ил-гөл ҡалҡыр.*
*Ишәк итер бер "һыбайлы" илен, халҡын.*

*Һәр бер илдә гөжләй халыҡ — иләүме ни,*
*Һәр әҙәмгә тыуған иле — биләүме ни.*
*Күккә менеп, Ерҙе урап ҡайтҡандар бар,*
*Үҙ илкәйен буш бер тингә һатҡандар бар.*

*Ҡайҙа йәшәһә лә бәндә, кем булһа ла,*
*Ул асылда бары кеше булып ҡала.*
*Имен Ватан — теләгенең иң күркәме,*
*Сабыйының үҙ иләндә хөр үҫкәне!*

## Ҡала

*Аҡ юрғанға төрөнөп ҡала йоҡлай, —*
*Иңдәрендә ваҡыт ҡатламы.*
*Ҡуйынында мыжғый халыҡ ағымы.*
*Ағым, аҡҡас, кире ҡайтамы?*

*Нигеҙендә тәүге ташты һалған*
*Ваҡыт даръяһында, йыраҡта.*
*Шанлы дәүләт — яуҙар, тантаналар*
*Алмашынған бында сиратлап.*

*Ер эшкәрткән кемдер, аҡса һуҡҡан,*
*Быйма баҫҡан, ғилем эстәгән.*
*Тәбиғәттең мөғжизәһе — һөйөү*
*Бер хатаһыҙ эшен эшләгән.*

*Орошҡан да, һөйөшкән дә*
*ағым*
*Булып үткән тормош-сәхнәнән.*

*Септәләнгән ҡала йә биҙәнгән,*
*Тик төшмәгән тормош-йәтмәнән.*

*Бына бөгөн дә был ҡала иҫән:*
*Ул тын ала, төтөн тарата!*
*Ҡаҙан кеүек ҡайнай, геүләй ҡала,*
*Үҙенә тарта, үҙенә ҡарата!*

*Быуын-быуын килеп, тыуып, кеше*
*Сафландырып тора ҡәлъәне.*
*Ҡала һура, һис аямай һура*
*Тәбиғәттән, ерҙән әҙәмде.*

*Зыр әйләнеп ағып сыҡҡан саҡта*
*Шул соңғолдан әҙәм,*
*хәл башҡа:*
*Күңелкәйе уның зыңлап ҡуя,*
*Һәм үҙе лә, гүйә, һаташҡан...*

*Ни баһа был хәлгә?*
*Тик "Яманһыҙ*
*Яҡшы булмаҫ" халыҡ һүҙенсә.*
*Һәр ғүмерҙең хужаһы бит берәү,*
*Һәр кем фекер итә үҙенсә.*

***

*Тормош, донъя ҡайнай.*
*Был хәрәкәт*
*Мәңгелектер —*
*Йәшәү сығанағы.*
*Кеше килә, китә.*
*Ә тәбиғәт*
*Кешеһеҙ ҙә йәшәй.*
*Ул ғынамы!*

*Болот менән болот*
*бәрелешә,*
*Гүзәллекте ҡыйып*
*үтә ҡойон.*
*Ап-аҡ ҡарҙа ап-аҡ*
*айыу бейей,*
*Йәшел болон буйлап*
*саба ҡолон...*

*Һыу донъяһы һаман*
*серле килеш.*

Ерҙең ҡуйынына
          йылышҡан ул.
Әҙәм балаһын да
          мәрхәмәтле был Ер
Ҡосағына алып
          йылытҡан шул.

Кеше килә, китә.
           Ә тәбиғәт
Кешеһеҙ ҙә йәшәй.
Ул ғынамы!
Вулкандары урғып
          ер тетрәһә,
Ҡырып түгә беҙҙе
          бер “Цунами”...

## Ауылдаштарыма

Зәңгәр күктә ҡыйғас ҡаш һыҙымы —
Һәлмәк кенә оса торналар.
Уй-хисемде, тыуған ауылым,
Һөйләр инем,
Бер аҙ ғына туҡтап торһалар.

Күңелемдә ҡуҙҙай баҙлап янған
Һөйөүемде, тыуған ауылым.
Һөйләр инем.
Торналарҙың, беләм,
Шул хистәрҙе көйгә һалырын.

Өҫтәреңдән осоп уҙған саҡта
Моң яуҙырһын ошо торналар.
Ҡаш өҫтөнә ҡалҡан-ҡулдар ҡуйып,
Ауылдаштар ҡарап торһалар,

Улар күңелеңдә ҡалҡҡан һағыш,
Күҙҙәреңдә томан ағышын
Йыуып алһын торна моңдарында
Сағылып киткән һағыныу тауышым...

## Кеше ғүмере

Йыһан өсөн кеше ғүмере —
Ҡыҫҡа ғына бер миҙгел.
Бармы әҙәм, әллә юҡмы —
Ғаләмгә мөһим түгел.

Күстә йәшәй бал ҡорттары.
Кешелек тә күс кеүек.

*Берәү төҙөй, ижад итә,*
*Берәү ҡабарта күбек.*

*Берәү изгелек юлында*
*Аң-аҡылға юл яра.*
*Тәкәбберлек, аңды арбап,*
*Яҙмыш менән шаяра.*

*Ваҡытлыса уңыш, еңеү*
*Ал төҫөн тиҙ юғалта.*
*"Их!" тип уфтанған сағында*
*Яҡшы,*
*ейән йыуатһа.*

*Йыһан өсөн кеше ғүмере —*
*Уҡ атылған бер миҙгел.*
*Шул миҙгелде тоя белгән*
*Күңелдәр,*
*һүҙһеҙ, һиҙгер!*

## Сак тыйылып торам...

*Эштән ҡайтып киләм.*
*Күңелемдә мәхшәр.*
*Ялҡындары өтөр,*
*Ирек бирһәң әгәр.*

*Дауыл, буран унда,*
*Саҡ тыйылам.*
*Көсһөҙ ыңғырашыу...*
*Уф, һығылам...*

*Бурандан бау ишеп*
*Күккә атылаһы...*
*Ниңә түгелмен мин*
*Хистәр Аттилаһы*?!*

*Ҡараштарым шәйләй*
*Алда таныш йөҙҙәр...*
*Күңелемдә буран,*
*Саҡ тыйылып торам...*

*Ҡара һин әле...*
*Көләсләнде күҙҙәр...*

---

*Аттила — V быуатта һундар батшаһы.



## Тимерғәле БҮЛӘКОВ

*“Әҫәремдең сюжеты сиҙәм эпопеяһына бәйле башлана, үҫешә һәм сиселә. Ватан яҙмышы халыҡ-ара хәлдең үҫешенә бәйле сағыла, сөнки уны айырып сағылдырыу тарихты боҙоп күрһәтеүгә алып килә, бер яҡлы ғына булған яңылыш ҡараш тыуҙыра, – тине ҡулъяҙмаһын әҙерләгәндә Сибай ҡалаһында йәшәгән өлкән авторыбыҙ Тимерғәле ағай Бүләков. – Һөҙөмтәлә илде индустриаллаштырыу һәм һуңынан һуғышта миллионлаған ватандаштарыбыҙҙы ҡорбан итеп өлгәшелгән еңеүебеҙ ҙә көнбайыш илдәр ҡаҙанышы булып сыға. Ә был ҡараш сит илдәр матбуғаты битенән әле булһа ла төшмәй. Яҙмаларымда уйлап сығарылған ваҡиғалар юҡ дәрәжәһендә; күп геройҙарҙың прототиптары әле лә иҫән-һау, бары тик бәғзеләренең исем-шәрифтәре генә үҙгәртелде”.*

# БАҪЫМ

### Сиҙәм сәхифәләре

Күк күкрәп, ямғыр яуып үтте. Өфө урамдарына йәм керҙе. Халыҡ эштән ҡайта. Һәр кемдең үҙ йомошо: берәүҙәр автобустан төшкәс тә магазинға инеп китә, икенселәре киоск янында туҡтала, гәзит һатып ала. Әнүәр тирәяғына ҡаранды ла аҫҡы ҡаты магазин булған биш ҡатлы йорт буйлап уң яҡҡа ҡарай атланы. Мөйөшкә еткәс, һул яҡҡа боролоп, Рәйсә йәшәгән подъезд янындағы эскәмйәгә килеп ултырҙы. Гел шулай ошо эскәмйәгә ултыра ла түҙемһеҙлек менән Рәйсәнең эштән ҡайтыуын көтә ул. Ҡыҙ оҙаҡлай. Көтөп ултырған егет тағы үҙ уйҙарына сума, иҫенә бер-бер артлы үткәндәр төшә.

...Фазыл менән һыу инергә килгәйнеләр. Пляжда аяҡ баҫыр урын да ҡалмаған. Бер аҙ көтөргә тура килде. Урын бушағас, биттәрен ҡаплап, салҡан ҡыҙынырға яттылар. Төнгө сменанан ҡайтҡан Әнүәрҙе шунда уҡ йоҡо баҫты. Төш күрә: Ҡаҙағстанда, имеш. Совхоздың үҙәк ҡасабаһы. Мәҙәниәт һарайы янындағы трибунаға СССР, Ҡаҙағстан етәкселәре күтәрелгән. Динмөхәмәт Ҡунаев

---

*Тимерғәле Айса улы Бүләков 1927 йылда Йылайыр районының Юлдыбай ауылында тыуған. Темәс педучилищеһын, Орск педагогия институтын тамамлай, байтаҡ ғүмерен балалар уҡытыуға арнай, МВД, партия органдарында ла эшләй. Сибай ҡалаһында йәшәй. Әлеге көндә хаҡлы ялда. Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә «Рух ҡояшы» исемле китабы (2006) баҫылды.*

Генеральный секретарь Леонид Ильич Брежневҡа һүҙ бирә. Ҡола яланда әле генә үҫеп сыҡҡан совхоздың үҙәк ҡасабаһына исем ҡушырға кәрәк, йәнәһе. Совхозға ла шул уҡ исем бирелергә тейеш икән, баҡтиһәң.

– Мин совхозға ла, уның үҙәк ҡасабаһына ла Никита Сергеевич Хрущевтың исемен ҡушырға тәҡдим кертәм, – тине трибунаға беренсе булып күтәрелгән оратор.

– Юҡ, иптәштәр, районда ике совхоз бер үк исемдә йөрөтә алмай, – тине митингыны алып барған Ҡунаев.

– Бына кемдең исемен бирергә кәрәк, иптәштәр! – Трибунаға күтәрелгән икенсе оратор Генсекка күрһәтте.

– Юҡ! Юҡ! Мин ризалыҡ бирә алмайым. Совхозға беренсе сиҙәмсе иптәш Монасипов исемен бирергә кәрәк, иптәштәр! – Брежнев трибуна алдына баҫып торған Әнүәргә күрһәтте.

Халыҡтың Әнүәрҙе күтәреп алыуы һәм сөйә башлауы булды: «Кеше бата-а-а! Кеше бата-а-а!» – тигән тауыш яңғыраны. Әнүәр бер аҙ йоҡоло күҙен ыуалап ултырҙы ла, аңын йыйып өлгөрҙөмө-юҡмы, Ағиҙелгә ташланды. Һыуҙа кемдеңдер башы күренә бирә лә юҡ була, күренә бирә лә юҡ була. Йөҙә белмәгән кеше икәне күренеп тора. Әнүәр йөҙә башлағас, батҡан кеше ҡабат күренмәне. Егет, һыуға сумып, батыусыға яҡынлашыуға, тегеһе һыу төбөнә ауа башлағайны инде. Әнүәр уны сәс толомдарынан эләктереп алды ла пляж яғына ҡарай йөҙө. Һайға сыҡҡас, ҡоро ергә тиклем күтәреп алып сыҡты. Катер менән килеп туҡтаған ҡотҡарыусылар бисараға медицина ярҙамы күрһәтте. Ҡыҙҙың аңына килеп, нормаль хәлгә килеүе булды, уны иптәштәре һырып алды. Ниндәйҙер бер хеҙмәт коллективы ойошҡан рәүештә ял итеп, һыу инергә килгән булһа кәрәк. Бәләнән баш-аяҡ тигәндәй, шау-шыу ҡутармайса, автобус килеп туҡтау менән, ултырыша һалып, ҡайтыу яғын ҡаранылар. Үҙе ҡотҡарған ҡыҙҙың көмөш ялатылған сәс ҡыҫтырғысын ҡайтарып бирергә оноҡҡан Әнүәр автобус артынан йүгерә бирҙе лә ауыҙын асып торҙо ла ҡалды.

Рәйсәне эскәмйәлә көтөп ултырған Әнүәр бер уйының осона сығып та етмәй, уны икенсе уй солғап ала.

Мәҙәниәт һарайы. Оркестр уйнауын түҙемһеҙлек менән көткән йәштәр гөж килә. Бирһә бирә икән Хоҙай: «Краковяк» яңғыраны. Баштары түбәгә тейерҙәй булып шатланған Рәйсә менән Венера бейеүгә төшөп тә киттеләр.

Әнүәр менән Фазыл мәҙәниәт һарайына ингәндә, уйын башланғайны инде. Егеттәр стена ҡырына килеп баҫтылар ҙа тансаға төшкәндәрҙе күҙәтә башланылар. Күптәр парлашып төшкән, аҙ булһа ла ҡыҙ менән ҡыҙ ҙа бейей.

– Бына был икәү нисек, Фазыл? – Әнүәр икеһе лә бер төрлө зәңгәр күлдәк кейгән ике ҡыҙға ымланы.

– Ашыҡма, ҡарайыҡ әле. – Фазыл ҡупшы ғына ике ҡыҙҙы һайланы.

Уларының егеттәре араларына килеп баҫты, күрмәйһегеҙме, йәнәһе. Әнүәрҙең йәне көйҙө:

– Зәңгәр күлдәклеләре ни ере менән кәм? – тине.

– Мин һиңә кәм тинемме ни?

Фәрештәнең амин тигәненә тап килеп, музыка туҡтауға, зәңгәр күлдәкле ҡыҙҙар тап Әнүәр менән Фазыл янына баҫты һәм, музыка ҡабат уйнағансы, уларҙың янында торҙо. Музыка икенсе көйгә күсте.

– Рөхсәтме? – Әнүәр Рәйсәнең алдына тып итеп килеп баҫты.

Ҡыҙ, уң ҡулын егеттең яуырынына һалып, әйләнә лә башланы.

– Исемең нисек?

– Рәйсә.

– Ә мин – Әнүәр.
– Ә иптәшеңдеке?
– Фазыл. Күҙең төшһә ни, әйтәйем үҙенә, бик тә булмаһа… Әйткәндәй, әхирәтеңдең исеме нисек?
– Венера. Тик ул Фазылды һайлап өлгөрҙө, шикелле.
Әнүәр Рәйсә менән, ә Фазыл Венера менән ана шулай танышты. Музыка туҡтағас, егеттәр ҡыҙҙарын, барынса байрам тигәндәй, мүк еләгенән эшләнгән морс менән генә һыйланы, сөнки буфетта шунан башҡа эсемлек тә, ашамлыҡ та юҡ. Ваҡыты шулай ине. Ил дүртенсе бишйыллыҡты уңышлы тамамлауға ҡарамаҫтан, һуғыштан һуң халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырып, социаль проблемаларҙы хәл итергә өлгөрмәгәйне әле. Сөнки Рәсәй көнбайыш илдәре, бигерәк тә АҠШ монополистарының күҙенә төшкән сүп булды. Әйткәндәй, илебеҙ сүп булыуын СССР тарҡалғас та дауам итте. Тарих күрһәтеүенсә, илебеҙгә баҫым яһау һөҙөмтәһендә халыҡ-ара хәлдең ҡырҡыулашыуы тормошобоҙға, көнкүрешебеҙгә ҙур зыян килтерә. Тапҡан-таянғаныбыҙҙы ҡорал етештереүгә тотонорға Америка мәжбүр итә. Һөҙөмтәлә илдә аҙыҡ-түлек проблемаһы ҡырҡыулаша, көнөбөҙ кукуруз оно ҡатыштырып бешергән икмәккә ҡала.
Нисек кенә булмаһын, йәшлек йәшлеген итә. Егеттәр хәҙер тансала танышҡан ҡыҙҙары менән йыш осраша, киноға бергәләшеп йөрөйҙәр. Ғишыҡ утында янған йәштәр үҙҙәрен алда ни көтөрөн әлегә белмәй. Ә алда сиҙәм күтәреү бурысы тора. Әйткәндәй, сиҙәм күтәреүҙең ашыҡ-бошоҡ башланыуы ла – илебеҙгә Америка яһаған баҫым бәләһе.
Йәштәр нәүбәттәге шәмбе көнөн дә түҙемһеҙлек менән көтөп алды. Кисә бик күңелле үтте. Егеттәр ҡыҙҙарын тансанан һуң трамвай туҡталышына оҙатып килде.
– Киләһе аҙнаға беҙ һеҙҙе ошо туҡталышта көтөрбөҙ, ҡыҙҙар, – тине Әнүәр травмай тауышы ишетелгәс.
– Ә йәкшәмбе көндө, пляжға һыу инә барырбыҙ, – тине Фазыл.
– Шәмбе тансаға килермен, тик иртәгәһенә һыу төшә бара алмайым, – тип яуап бирҙе Рәйсә.
– Ниңә? – Әнүәр Рәйсәнең ҡулынан тотто.
– Ул һыуҙан ҡурҡа, – тип яуап бирҙе Венера Рәйсә урынына.
– Һыуҙан?!
Әнүәрҙең иҫенә һыуға батҡан ҡыҙ килеп төштө.
– Эйе, һыуҙан.
Әнүәр уйланып торманы, кеҫәһенән сәс ҡыҫтырғыс сығарҙы: йәнәһе, һыуға батҡан ҡыҙ Рәйсә булһа, үҙ әйберен танырға тейеш. Күҙ йәштәре бөркөп сыҡҡан Рәйсә егет муйынына ташланды һәм супылдатып яңаҡтарынан үбә башланы:
– Ҡотҡарыусым минең, ҡотҡарыусым!
Әнүәр ҡулъяулығын сығарып, ҡыҙҙың күҙ йәштәрен һөрттө, сәстәрен сәс ҡыҫтырғысына ҡыҫтырҙы.
Тормошта төрлө саҡтары була шул: шатлығы ла, ауыр саҡтары ла, татлы уйҙарындың өҙөлгән саҡтары ла. Рәйсәне көтөп ултырған Әнүәр менән дә шулай булды. Татлы уйҙары ҡапыл өҙөлдө. Арттан килеп баҫҡан Рәйсә башта уның күҙҙәрен, шунан һуң, баш осо аша ынтылып, ҡайнар ирендәре менән ауыҙын ҡапланы.
Донъяның бер рәхәте, бер михнәте була, тигәндәй, был юлы Әнүәрҙе Рәйсәгә донъя мәшәҡәттәре алып килде. Һүҙҙе Әнүәр уратып-уратып, бер аҙ ултырғас ҡына башланы.
– Парткомда етди һөйләшеү булды.

– Партияға алмаҡсылармы?
– Юҡ, сиҙәм күтәрергә ебәрмәкселәр.
– Нисек? Һөйлә.

* * *

Кадрҙар бүлегенә Әнүәр беренсе мәртәбә эшкә урынлашҡанда ингәйне, хәҙер икенсегә, саҡырыу буйынса, килде.
– Ни йомош? – тип ҡаршы алды уны кадрҙар бүлегенең сәркәтип-машинисткаһы.
– Баш инженер ебәрҙе.
– Ә-ә-ә, һеҙ иптәш Монасиповмы?
– Эйе.
– Ултырып тороғоҙ.
Сәркәтип-машинистка мөдир бүлмәһенә инеп, шунда уҡ кире сыҡты.
– Инегеҙ. Һеҙҙе көтәләр.
Кадрҙар бүлеге мөдире Әнүәрҙе урынынан тороп уҡ ҡаршы алды. Ҡул биреп күрешкәс, тәҙрә янында стена ҡырынынан урын күрһәтте, үҙе уға ҡушлап ултырҙы.
– Һөнәрегеҙ буйынса киң профилгә эйә механизатор, йәғни тракторсы ла, комбайнер ҙа. Шулаймы?
– Эйе. Һеҙҙең йүнәлтмә буйынса, ауыл хужалығын механизациялау мәктәбен тамамлап ҡайттым.
– Яҡшы. Ә хәҙер һеҙҙең менән цех парткомы секретары Ирек Усманович һөйләшер. – Кадрҙар бүлеге мөдире күн папкаһын ҡулына алды. – Әйҙәгеҙ, иптәш Монасипов, минең менән.
Бүлмә хужаһы урынынан тороп, Әнүәрҙең артынан атлауы булды, телефон шылтыраны.
– Тыңлайым, Ирек Усманович… Иптәш Монасиповмы?.. Килде… Керәбеҙ, Ирек Усманович, керәбеҙ, сығырға торабыҙ.
Коридорға сыҡҡас, кадрҙар бүлеге мөдире, ҙур аҙымдар менән оҙон коридорҙы үлсәй-үлсәй, уң яҡҡа ҡарай атланы. Ун биш-егерме метр ара үткәс, уң яҡтағы ишекте асып, Әнүәрҙе ҡабул итеү бүлмәһенә әйҙәне.
– Инегеҙ, инегеҙ, Һеҙҙе Ирек Усманович көтә, – тип ҡаршы алды уларҙы партком секретарының сәркәтип-машинисткаһы.
Партком секретары бүлмәһенә Әнүәр кадрҙар бүлеге мөдиренә эйәреп, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына килеп инде лә берсә партком секретарына, берсә уның баш осонда эленеп торған Ленин портретына ҡарап туҡтап ҡалды. Ирек Усманович Әнүәрҙе урынынан сығып, бүлмә уртаһында ҡаршы алды, өҫтәленә яҡын урынлашҡан ултырғыстан урын күрһәтте.
– Рәхим итә күрегеҙ, иптәш Монасипов. Хәлдәрегеҙ?
– Яҡшы.
– Ярай-й-й. Мәскәүҙә булғанығыҙ бармы?
– Юҡ, тура килмәне.
– Һис шикһеҙ, Ленин мавзолейында ла булырһығыҙ, юлбашсыбыҙҙы ла күрерһегеҙ. Радио тыңлайһығыҙмы?
– Тыңлайым.
– Ә гәзит-журнал уҡыйһығыҙмы?
– Тура килһә киоскыларҙан алып уҡыйым.
– Армияла хеҙмәт иттегеҙме?
– Эйе.
– Өйләнгәнһегеҙме?

– Юҡ.
– Ата-әсәгеҙ бармы?
– Юҡ.
– Ҡабаланаһығыҙмы әллә, иптәш Монасипов, «так точно», «никак нет» тигән кеүек кенә яуап бирәһегеҙ?
– Юҡ, ҡабаланмайым. Ваҡытығыҙҙы күп алмайым, тип кенә...
– Әңгәмәгә алып ингән кадрҙарҙы миңә «ҡыҫҡа, ләкин үҙегеҙ тураһында тулы мәғлүмәт бирегеҙ» тип аңлатҡас ҡына алып инегеҙ. Мин бер ваҡытта ла бушҡа ваҡыт уҙғармайым. Полк командиры булараҡ, мин был талапты һуғышта батальон, рота командирҙары алдында ла ҡуя торғайным, – тип иҫкәртте секретарь мөдирҙе һәм төп мәсьәләгә Әнүәрҙең үҙе тураһында тулы мәғлүмәт алғас ҡына күсте. Дөрөҫөрәге, мәғлүмәт алыу төп мәсьәлә буйынса ла дауам итте.
– Әйтегеҙсе, иптәш Монасипов, партияның февраль-март (1954) пленумы ниндәй мәсьәлә ҡараны?
– Сиҙәм үҙләштереү тураһында.
– Эйе, сиҙәм күтәреү һәм бөртөклө ашлыҡ етештереүҙе ҡырҡа арттырыу юлы менән илдә аҙыҡ-түлек проблемаһын хәл итеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Ә, пленум ҡарарына ярашлы, ниндәй күләмдә сиҙәм үҙләштерелергә тейеш?
– Ун өс миллион гектар майҙанда.
– Ә халыҡ массаларының инициативаһын иҫәпкә алғанда күпме?
– Уныһын әйтә алмайым.
– Егерме һигеҙ – утыҙ миллион гектарға барып етергә тейеш. Бына ниндәй ҙур бурыс тора беҙҙең алда, иптәш Монасипов. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: партия саҡырыуына яуап итеп, сиҙәм күтәрә китергә теләк белдерә алмаҫһығыҙмы, тип саҡырғайныҡ беҙ Һеҙҙе.
– Мин ҡаршы түгел. Шулай ҙа йөрөгән ҡыҙым һәм уның ата-әсәһе менән һөйләшмәйенсә булмай, сөнки никах һәм туй үткәреү мәшәҡәте бар.
– Һөйләшегеҙ. Тик, зинһар, һуҙмағыҙ. Әйткәндәй, ҡыҙығыҙ ниндәй эштә?
– Элемтәсе.
– Һөйләшегеҙ, ул да сиҙәмгә китергә теләк белдерһен, элемтәсе булараҡ. Икегеҙгә лә подъемный түләнәсәк. Ә туйҙы, эйе, туйҙы профсоюз үҙ өҫтөнә алыр. Ресторанда үткәрерһегеҙ, сөнки ваҡыт көтмәй...
Завод цехы парткомындағы ошо һөйләшеү алып килде лә инде Рәйсә йәшәгән йорт подъезы алдында Әнүәрҙе.
– Көтә-көтә, йоҡо килә башланы, – тине Әнүәр, иҫнәп.
– Үҙең, бөгөнгә килә алмайым, тигәс, Венераларға барғайным, оҙаҡлаңҡыраным шул, – тине Рәйсә.
– Донъя бит, килмәйем, тиһәм дә, килергә тура килде. Мине сиҙәм үҙләштерә китергә ҡоҙалайҙар.
– Ҡоҙалаһалар ни, тот та кит.
– Көлмә әле, Рәйсә. Беҙгә никахты тиҙләтергә кәрәк.
– Тимәк, мине лә үҙең менән алып китмәксеһең?
– Әлбиттә. Ата-әсәң менән уртаға һалып һөйләшәйек, – Әнүәр ҡыҙына парткомда булған һөйләшеү тураһында эҙмә-эҙ бәйән итте.
– Ә мин бармаһам, ни эшләрһең?
– Мин дә бармайым.
– Ә хужаларыңа нимә тип яуап бирерһең?
– Бара алмайым, сөнки һөйгән ҡыҙым барырға риза түгел, тип яуап бирәм.
Яуап Рәйсә күңеленә хуш килде. Әнүәр йәл булып китте. Ахырҙа ул Башҡортостан биләмәләрендә сиҙәм үҙләштереү шарты менән риза булды. Сөнки шунһыҙ әсәһе ебәрмәйәсәк.

Ҡайны һәм ҡәйнә булаһы Солтан менән Сәлимә өйҙә ине. Хужа менән Әнүәр ҡул биреп күреште. Солтан егетте арҡаһынан тапап һөйҙө. Ә Сәлимә: «Был егеттең башына сыбыҡ һындырыр кәрәк», – тип ҡаршы алды: йәнәһе, оҙаҡ килмәй торҙо. Ниҙән башлап һөйләшергә лә белмәйенсә бышылдашыуҙары һағайтһа ла, Солтан да, Сәлимә лә белмәмешкә һалышты. Хужабикә, аш-һыу әҙерләү һылтауы менән, аш бүлмәһенә йомолдо. Ә Солтан йөрөүҙән туҡтаған сәғәтте алып, соҡонорға тотондо. Йәштәр Сәлимәнең аш бүлмәһенән сығып, табын әҙерләп, өҫтәл артына саҡырыуын көтөргә мәжбүр булды.

– Хөрмәтле Солтан ағай, хөрмәтле Сәлимә апай, мин Рәйсәнең ҡулын һорарға килдем, – тип һүҙ башланы Әнүәр өҫтәл артында.

– Баш-күҙ алышҡансы ашыҡмайыҡ, тигәйнек түгелме һуң, Әнүәр? – тип ғәжәпләнде Сәлимә.

– Ашыҡмайынса булмай, сиҙәмгә китәбеҙ.

– Шулай тигә-ә-ән, – тип һуҙҙы Солтан.

– Ә һин ниңә өндәшмәйһең, телеңде йоттоңмо әллә? – тип асыуланды Сәлимә ҡыҙына.

– Фатиха бирегеҙ.

– Шулай итмәй ни, ҡалай аҡыллы! Фәлән ерҙә алтын бар, барһаң, баҡыр ҙа табылмаҫ, тигән боронғолар.

***

Сиҙәм үҙләштереүселәр наборының беренсе туры тамамланыр-тамамланмаҫтан, икенсеһе башланды. Хәл бына нисек аңлатыла. КПСС-тың февраль-март (1954) пленумы ун өс миллион гектар майҙанда сиҙәм күтәреү тураһында ҡарар ҡабул иткәйне, уның күләме кемдеңдер белдеге менән егерме һигеҙ – утыҙ миллион гектар күләменә етергә тейеш булып сыҡты. (Һуңынан мәғлүм булыуынса, 1956 йылда утыҙ алты миллион гектар майҙанда сиҙәм үҙләштерелгәйне инде. Йәнәһе, халыҡ массаларының инициативаһы. Ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарыу булды түгелме һуң? Сөнки экологияға ҙур зыян килде. Өҫтәүенә, урып-һуғыу һәм ашлыҡ таҙартыу техникаһы, шулай уҡ транспорт етешмәү һөҙөмтәһендә, уңыштың өстән, дүрттән бер өлөшө әрәмгә сыға. Аяҡты юрғаныбыҙға ҡарап һуҙырға кәрәк булған.) Сиҙәм күтәреүселәр наборының икенсе туры КПСС Үҙәк Комитеты тарафынан иғлан ителде. Ә наборҙы үткәреү урындағы партия комитеттарына йөкмәтелде.

Завод парткомы ултырышына цехтарҙың тәүойошма секретарҙары, кадрҙар бүлектәре, профсоюз ойошмалары етәкселәре, политинформаторҙар, агитаторҙар саҡырылған. Ултырышты алып барған партком секретары Сараев, сығыш яһап, һүҙен:

– Һәр цех техниканы яҡшы белгән бер-ике сиҙәм күтәреүсе табырға һәм документтарын әҙерләргә тейеш. Ике көн срок, – тип тамамланы. – Һорауҙар булырмы?

– СССР Госпланы рәйесе Байбаков: «Ил буйынса ун өс миллион гектар майҙанда сиҙәм күтәреү илдә аҙыҡ-түлек проблемаһын хәл итә ала. Был һан фән нигеҙендә иҫәпләп сығарылды», – тигәйне түгелме һуң. Яңылыштымы икән?

– Яңылышманы. Был һанға донъя баҙарына сығараһы ашлыҡ һаны инмәгән, Ирек Усманович, – тип әүмәле-түкмәле яуап бирҙе Сараев. – Ә һеҙ үҙегеҙ партия уҡыуҙарында нисек аңлаттығыҙ тыңлаусыларға?

– Партия Уставына ярашлы аңлаттыҡ.

– Һорауға аныҡ яуап бир.

– Сиҙәм күтәреүҙең өҫтәмә күләме партия Үҙәк Комитетының һуңғы аныҡланған күрһәтмәһенә һәм халыҡ массаларының инициативаһына ярашлы билдәләнде, тип аңлаттыҡ.

– Дөрөҫ аңлатҡанһығыҙ.

– Дөрөҫ түгел, – тигән тауыш яңғыраны аудитория төпкөлөнән.

– Нисек дөрөҫ түгел?

– Пленумдың ун өс миллион гектарҙа сиҙәм күтәреү тураһындағы ҡарарын тик партияның съезы йәки махсус пленум ғына көсөнән сығара ала.

– Кем унда ҡотҡо тарата? Баҫ әле.

Аяҡ өҫтө баҫыусы ла, өндәшеүсе лә булманы. Сараев та һүҙҙе артабан ҡуйыртманы, ултырышты ябыуҙан алда:

– Эшкә тотоноғоҙ! – тине.

Ултырыштан цех идаралығына ҡайтҡас, Ирек Усманович кадрҙар бүлеге етәксеһен саҡыртып алды.

– Цех штаты расписаниеһын ҡарап сыҡтығыҙмы, юҡмы?

– Сығыуын сыҡтым, уңай кеше таба алманым.

– Тимәк, беҙҙең цехта тракторсы юҡ?

– Берәү барлығын бар. Сабитов Сафуан. Киң профилгә эйә, профессиональ-техник училище тамамлаған.

– Тимәк, тракторсы ла, комбайнер ҙа?

– Эйе. Тик шикле егет, Ирек Усманович.

– Нисек шикле?

– Ул бит ауыл хужалығы өсөн әҙерләнгән кадр, ә ауылды ташлап киткән.

– Бар, алып кил әле.

Кадрҙар бүлеге етәксеһе оҙаҡ йөрөмәне, кабинеттан диспетчерға шылтыратты: Сафуанды саҡыртты ла Ирек Усмановичҡа алып килде. Үҙенең кадрҙарға ҡарата эш стиленә тоғро булған Ирек Усманович әңгәмәне сиҙәм күтәреү проблемаһынан түгел, ә Сафуандың тормош юлынан башланы.

– Үҙегеҙ тураһында ҡыҫҡа, ләкин тулы мәғлүмәт бирә алаһығыҙмы?

Был хәлде бөтөнләй көтмәгән Сафуан телһеҙ ҡалды. Егеттең хәлен партком секретары шунда уҡ аңланы. Урынынан тороп, иҙән уртаһына сыҡты ла Сафуан янына ҡушлап ултырҙы. Яуырынына ҡулын һалды.

– Күрәһең, тормош юлың еңелдән булмаған. Әгәр ҙә ауыр кисерһәң, һөйләмә. – Ирек Усманович Сафуанды яуырынынан тапап һөйҙө.

Сафуан, баш ҡалҡытып, кадрҙар бүлеге етәксеһенә ҡарап алды.

– Ирек Усманович, мин кәрәк булһам, шылтыратырһығыҙ, – тине лә, тегеһе баш һелкеп ризалыҡ белдергәс, сығып китте.

– Минең дә тормош юлым еңелдән булманы. Тиңдәштәрем араһында дуҫтарым да, мине кәмһеткәндәр ҙә булды. – Партком секретары Сафуанға үҙе тураһында һөйләп бирҙе. – Әгәр ҙә яҡшы кешеләр осрамаған булһа, мин һинең менән ошонда һөйләшеп ултырмаған булыр инем.

– Минең дә шулай уҡ хәл. Юғиһә, тыуып үҫкән ауылымды ташлап китмәгән булыр инем. Һеҙҙә бер-ике ай эшләп, юллыҡ аҡса йыйғас, әсәйем мәрхүмәнең ауылына барып төпләнмәксемен, – тип асылды Сафуан да.

Сафуандың әсәһе Алмабикәнең тыуып-үҫкән ауылын белгәс, Ирек Усманович төрлө инстанцияларға шылтыратып, сиҙәм үҙләштереү проблемаһы буйынса белешмәләр алғанда:

– Әгәр ҙә бөгөн үк мөмкинселек тыуһа, әсәйең ауылына китер инеңме? – тип һораны Сафуандан, «риза булыр» тигән уй менән.

– Һис шикһеҙ китер инем.

– Бөгөн үк үҙеңә подъемный түләрҙәр. Өс көн үтеүгә ауылға сиҙәм күтәреүсе булып барып төшәһең. Ризамы?

– Ҡуш ҡуллап риза, – тине лә Сафуан Ирек Усмановичты ҡосаҡлап уҡ алды.

***

Март урталары. Аҡман-тоҡман көйһөҙләнгән мәл. Көндөҙ иретә, ә төнөн туңдыра. Ат, юлдан ситкә сыҡһа ла, батмай, еңел тарта. Күптәр борон-борондан юлға таң алдынан сыға һәм барыр еренә барып етә. Һуңланыңмы–вәссәләм. Ҡояш ҡалҡһа, ҡар ирей, юл уйылта. Атың бата башлай. Партактивҡа саҡырылған колхоз рәйесе Ҡотлогилде шуға күрә иртә ҡуҙғалды. Ул толопҡа төрөнөп көймә санаға ултырған да уйға сумған. Ун өс йәше тулыр-тулмаҫтан атанан ҡалған үҫмерҙе тормош иркәләмәй. Ғаиләлә берҙән-бер ир заты булған Ҡотлогилдегә ике бәләкәй һеңлеләре Фәйрүзә менән Йәүһәрҙе үҫтереп аяҡҡа баҫтырыуы еңел булмай. Ир ҡорона еткән егет, донъяһын рәткә килтереп, өйләнәм тигәндә, армияға алына. Урта Азияла баҫмасыларға һәм тар-мар ителгән аҡгвардеецтар ҡалдыҡтарынан ойошҡан бандаларға ҡаршы көрәшә, монархия полковнигы Скуратовтың Иран, Афғанстан сиктәренә сигенгән бандаһын ҡыйратыуҙа ла ҡатнаша. Төп геройы Аманбәк, ә прообразы Ҡотлогилде булған «Ун өс» нәфис фильмы нигеҙендә ана шул полковник Скуратов бандаһын ҡыйратҡан ваҡиға ята ла инде.

Тарихи ваҡиға булараҡ, фильм сюжетының үҫеше Смирновтың ун өс кенә кешенән торған отрядының Скуратов бандаһы юлын киҫеүгә бәйле башлана, сиселеше банданы эскадрондың төп көстәре тарафынан ҡыйратылыуына бәйле тамамлана. Ғәмәлдә ваҡиға былай була.

...Ун ике ҡыҙылармеец менән үҙе разведкаға сыҡҡан эскадрон командиры Смирновты йомошсо һыбайлы ярты юлда ҡыуып етә, кавалерия полкы командирының «Скуратов бандаһының юлын киҫергә һәм ҡыҙылдарҙың төп көсө килеп еткәнсе, Иран Һәм Афғанстан сиктәренә ебәрмәҫкә» тигән бойороғон ҡулына тоттора.

Юлын киҫергә... Әйтеүе генә анһат. Яртыһы баҫмасыларҙан торған банданы сүллектә нисек эҙләп тапмаҡ кәрәк? Смирновҡа разведчиктары менән кәңәшләшеүҙән башҡа сара ҡалмай. Һәр кем үҙ фекере менән уртаҡлаша. Бремжан ғына өндәшмәй.

– Ә ниңә Урта Азияны биш бармағы кеүек белгән Брагембетов өндәшмәй? – тине Смирнов, Бремжанға күҙҙәрен төбәп.

– Билдәле, Урта Азияла һыу проблемаһы ҡырҡыу. Скуратовты, күрәһең, тап бына ошо проблема борсой. Әйткәндәй, эсер һыу миңә лә, һеҙгә лә кәрәк.

– Бремжан хаҡлы, – тип ҡабат һүҙгә ҡушылды Ҡотлогилде. – Кеше ныҡ һыуһап сарсаһа, бөтөнләй ишетмәй башлай. Дошманыңды ҡоро ҡул менән ҡоралһыҙ көйө тот та быу. Шәхсән тәжрибәмдән сығып әйтәм. Разведкаға барғанда булды был хәл. Иптәштәрем бөтөнләй ишетмәй, хатта ҡысҡырып приказ биреүемде лә ишетмәй. Баҡтиһәң, үҙем дә ишетмәйем икән. Тик дошмандың танау аҫтынан, тигәндәй һыу табып эскәс кенә ишетә башланыҡ.

– Аңлашыла. – Смирнов, планшетынан карта сығарып, эйәр ҡашағаһына йәйҙе лә картаға төртөп күрһәтте. – Бына ҡоҙоҡ!

– Тимәк, Скуратов ана шул ҡоҙоҡҡа ынтыла, – тине Бремжан, дөрөҫ һығымта яһап.

– По коня-я-ям! – тип команда бирҙе һыбай килгәнен оноҡкан Смирнов шатлығынан.

Смирновтың ҡоҙоҡ тигәне каруан юлында махсус рәүештә ҡаҙылған һәм кәрәк-яраҡ менән йыһазландырылған тәрән ҡоҙоҡло баҙ булып сыҡты. Һуңынан билдәле булыуынса, был баҙ Скуратов планшетында табылған картала ла күрһәтелгән икән. Төптәрәк ҡапҡаслы япма ҡоҙоҡҡа таштан бура эшләнгән. Ҡоҙоҡ ҡапҡасы өҫтөндә – оҙон сынйыр тағылған ағас күнәк. Һул яҡта – брезент менән ябылған станковый пулемет, патрон кейҙерелгән ленталар. Уң яҡтағы йәшниктә – патрондар, гранаталар. Баҙҙың ауыҙы ситән кеүек үрелгән япма менән ябылған һәм дөйә тиреһе менән ҡапланған. Баҙҙы япмалары менән бергә бөтөнләй ҡом ҡаплаған. Был урында, ер аҫтында, ниндәйҙер ҡоролма булыуын тик баҙҙың дүрт мөйөшөнә дүрт ҡаҙаҡ ҡағылыуынан ғына төҫмөрләп була. Күрәһең, был каруан юлында төҙөлгән баҙ һуңғы осорҙа баҫмасыларҙың базаһына әйләнгән. Ошо баҙ ҡоҙоғонан һыу эсеп һәм ат һуғарып, хәл йыйғас, олаҡмаҡсы, күрәһең, Скуратов сит илгә.

Смирнов пулеметты, гранаталар һаҡланған йәшникте сығарырға бойороҡ биреп тә өлгөрмәне, офоҡ һыҙығында биш һыбайлы күренде лә шунда уҡ юҡ булды. Дозор. Смирновтың ҡыҙылармеецтары оборонаға әҙерләнеп тә бөтмәне, скуратовсыларҙың төп көстәре күренде.

Күрәһең, команда бирелеүен ишетмәйҙәр, туҡтауһыҙ ҡысҡырған тауыш ишетелә. Офицерҙар һалдаттарын ҡамсылап атакаға күтәрә. Ҡайһы берәүҙәр бархандан шыуып, икенселәре тәгәрәп төшә. Тигеҙгә төшкәндәре йүгерә башлай һәм шунда уҡ, пулемет утына эләгеп, ҡырыла. Күрәһең, һыуһап үлгәнгә ҡарағанда пулянан үлеү еңелерәк. Сөнки кеше юҡҡа ғына өҫтө-өҫтөнә пулемет утына ташланмаҫ, ә ятып ут асыр ине. Ун – ун биш минут эсендә бархан итәге мәйет менән тулды. Фронталь һөжүм барып сыҡмағас, Скуратов бер үк ваҡытта тылдан да, флангыларҙан да һөжүм башланы. Оборона түңәрәге бәләкәйләнгәндән-бәләкәйә бара. Бәләкәй генә ҡыҙыл отряд сафы ла кәмегәндән-кәмей. Һуңғы гранатаһын ташларға күтәрелгән эскадрон командиры Смирновтың да ғүмере өҙөлә. Патрондары бөткән пулемет атыуҙан туҡтай. Һыу сығанағын ҡаплаған дүрт ҡыҙылармеец ҡына тере ҡала. Ҡотлогилде Буканов, Сәғитулла Дәүләтҡолов, Низам Бохарбаев, Бремжан Брагембетов штык менән ҡул һуғышына күтәрелә. Шул саҡ «Ура!» яңғырай, һәм скуратовсылар кемуҙарҙан ҡаса башлай. Ләкин бер кем дә ҡасып ҡотола алмай.

«Ун өс» фильмы сюжеты нигеҙендә бына ошо ваҡиға ята ла инде. Был кинофильмдың сценарийын яҙған автор тере булһа, фильмдың дауамы булараҡ бер бөтөн сериал да экранға сыҡҡан булыр ине. Үкенескә ҡаршы, кеше ғүмере ҡыҫҡа. Ә бит ваҡиғаның артабан үҫешенә күҙ һалһаң, сериал яҙырлыҡ. Ваҡиғаның үҫеше түбәндәгесә дауам итә.

Урта Азия интервенттарҙан, аҡгвардеецтарҙан азат ителгәс, Төркөстан фронты таратыла. Унда-бында ҡалған бандаларҙы юҡ итәһе генә кәрәк. Оҙаҡламай ҡыҙылдарҙың махсус ойошторолған хәрби формированиелары тарафынан улар ҙа юҡ ителә. Башҡортостан егеттәре Ҡотлогилде Буканов, Низам Бохарбаев, Сәғитулла Дәүләтҡоловтарҙың ҡайтыр ваҡыты етә. Алыҫ юл. Хуш ауағы бирелеп, аттарына атланғас та, Низам ҡуҙғалманы. Атын артҡа табан борған да ҡарап тик тора. Ҡулъяулығы менән күҙ йәштәрен һөртә. Баҡтиһәң, яуҙа башын һалған командиры Дмитрий Смирновтың йөклө ҡалған ҡатыны Вера бирегә йүгерә икән. Күрәһең, хушлашырға ашыға.

– Бәй, ниңә туҡтап ҡалдың, Низам? – тип һорай Сәғитулла.

Был хәлгә эскадрондың яңы командиры Шарыгин да иғтибар итте.

– Ни булды, Бохарбаев?

– Мин яуҙа башын һалған командирҙың йөклө ҡалған ҡатынын сүлгә ташлап ҡалдырмайым, – тине лә Низам атынан төштө.

Ҡотлогилде менән Сәғитулла ла аттарынан төштөләр. Вера Башҡортостан егеттәре менән берәм-берәм хушлаша башлағайны, үҙенең йөклө ҡалған Алмабикәһен иҫкә төшөргән Бремжан да, эйәрле атын алып килеп, Вераға тотторҙо һәм юлға алған ҡоро паегын һалған тоҡсайын эйәр ҡанъяғаһына бәйләне. «Беҙ, үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылған Башҡортостан егеттәре, һине ҡалдырып китмәбеҙ, Вера», – тип уйланы егеттәрҙең һәр береһе.

Сүллеккә юл тотҡан дүрт һыбайлыны бөтә эскадрон оҙатып ҡалды. Ә Бремжан уларҙы тимер юл станцияһына уҡ оҙатып ҡуйҙы, дүрт атты кире алып ҡайтты.

Ултырған поездарынан юлсылар Ырымбур ҡалаһында төштө. Хәрби гарнизондан ҡоро паек алғас, Ырымбур – Екатеринбург поезында барып, Сара станцияһында төшөп ҡалдылар ҙа йәйәү төньяҡҡа ҡарай юл тоттолар. Ауылдан-ауылға килә торғас, Хәйбулла районының Турат ауылына етеп, сәй эсергә ултырғас, ҡалған бер һынығ икмәкте Ҡотлогилде Вераға тотторҙо.

– Ә үҙегеҙгә?

– Командирыбыҙ өлөшө, аша, Вера, аша, – тине Низам.

Аҡъярҙа юлсыларҙы, ат егеп, Низамдың яҡын туғаны Зиннур оҙатып ҡуйҙы. Ҡотлогилде менән Сәғитулла, Низамдың атаһында мунса төшкәндән һуң, ял итеп, юлға сыҡтылар. Айыулы ауылында туҡтап йоҡлағас, һәр кем тыуып-үҫкән ауылына таралды.

Хеҙмәттәштәр көҙ көнө комсомолдың район конференцияһында делегат булараҡ осраштылар. Конференциянан һуң Низам дуҫтарын ҡунаҡҡа алып ҡайтты. Вераға өйләнгән икән, теге ул тапҡан, Роберт тип исем ҡушҡандар.

– Йә, минең менән кемегеҙ ҡоҙа булыша? – тип шаяртты Низам, сәңгелдәк пәрҙәһен асып, командирҙарының нәҫеленә күрһәтеп.

– Кемдең ҡатыны алда ҡыҙ таба – шул! – Өйләнмәгән Сәғитулла шулай шаяртты.

– Әллә һин, кәкүк кеүек, минең ояға йомортҡа һалмаҡсыһың инде? – тип төрттөрҙө Ҡотлогилде. – Ҡоҙа булырға теләһәң, башта өйлән, тигән юҫыҡта әйтәм.

***

Ошо уйынлы-ысынлы һөйләшеүҙән һуң сирек быуатҡа яҡын ваҡыт үтер. Һөйләшеү фәрештәнең амин тигән сағына тура килер: Роберт ир ҡорона тулыр, үҙ ҡатыны ҡыҙ түгел, ә ул тапҡан Ҡотлогилденең кесе һеңлеһе Йәүһәрҙең ҡыҙы Ғәлиәгә өйләнер. Бала-сағаһы булып, хәләл ефете менән татыу йәшәр. Ғүмерен ауыл хужалығы тармағын үҫтереүгә бағышлар, сиҙәм үҙләштереүҙә әүҙем ҡатнашыр, Ленин орденына, «Районның почетлы гражданины» исеменә лайыҡ булыр. Үкенескә ҡаршы, Ғәлиә унең был шатлығын күрә алмай донъя ҡуйҙы. Пенсияға сыҡҡас, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Роберт Смирнов Ғәлиәһе тыныс йоҡлаған зыяратҡа эшкә урынлашыр. Таныштары зыяратҡа килһә: « Ғәлиә бына ошонда ята», – тип бойоғоп әйтә торған булыр. Туған-тыумасалары менән татыу йәшәр.

***

Бына шулай, үткәндәрен иҫкә алып партактивҡа китеп барған колхоз рәйесе Ҡотлогилденең уйҙарын ҡапыл сығынлап туҡтаған аты бүлде. Дилбегә ҡағып, сыбыртҡылаған һайын сигенә малҡай. Ҡотлогилде, сананан төшөп, толобон сискәнсә, аты арт яҡҡа боролғайны, дилбегәне тотоп өлгөрмәһә, япа-яңғыҙ һәм мылтыҡһыҙ тороп ҡала ине. Ҡотлогилде атын ҡамтарҙы ла (дилбегәне тоҡанлап тәртә башына эләктереү) мылтығына тотондо. Алға ҡараһа, ниндәйҙер бер ҡарасҡы ығы-зығы килә. Ырылдашҡан тауыш ишетелә. Мылтыҡтан атҡан тауыш яңғырағас, ҡарасҡы таралған һымаҡ күренә бирҙе лә ҡабат ойошто. Икенсе атыуҙа ҡарасҡы уң яҡҡа ҡарай оҙоная башланы. Бүре өйөрө ҙур булмаған уба артына китеп юҡ булды. Ә юлда бәләкәй ҡарасҡы ятып ҡалды. Баҡтиһәң, бүреләр заготзернонан орлоҡ ташыған Сәйфулланың еккән колхоз үгеҙен йығып «ҡунаҡ» булғандар икән. Сәйфулла үҙе юҡ. Өҫтөнә кейгән туны санаһынан ун-ун биш метр алыҫлыҡта ятып ҡалған. Күрәһең, Сәйфулланы үҙен эҙәрләгән бүренән үгеҙ ҡанының еҫе ҡотҡарған. Бүре ана шул ҡан еҫенә кире боролған. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, Сәйфулла, юл уйылтыу арҡаһында ҡайтып етә алмаған. Түш ауылында йоҡлап, таң алдынан ҡайтырға сыҡҡан. Сыбыртҡының сана артында ятып ҡалыуына ҡарағанда, Сәйфулла, бүреләрҙе ҡурҡытмаҡ булып, сыбыртҡы шартлатҡан булһа кәрәк. Ҡотлогилде Сәйфулланы ярты юлда ҡыуып етеп, тунын кейҙереп, йәнәш ултыртып алды. «Елбаш» колхозы рәйесе лә партактивҡа йыйына икән. Ҡотлогилде Сәйфуллаға ылау һорап алып бирҙе лә юлында булды.

***

Район пленумы йәки партактив йыйылһынмы, партконференция йәки халыҡ депутаттарының район Советы сессияһы булһынмы – былдай ҙур йыйындар совет власы тарафынан конфискацияланған үә парткабинет һәм ултырыштар залы итеп ҡулайлаштырылған мәсет бинаһында үткәрелә. Был шөҡәтһеҙ бинаға Ҡотлогилде ун-ун биш минуттан партактив башлана тигәндә килеп инде лә алғы рәткә барып ултырҙы. Буйынан-буйына сәхнә өҫтөнә саҡырыу эленгән: «Ленин, Сталин байрағы аҫтында, Коммунистар партияһы етәкселегендә алға – коммунизмдың еңеүенә!» Сталин тере саҡта был урынға «Ленин байрағы аҫтында, Сталин етәкселегендә алға – коммунизмдың еңеүенә!» тигәне эленә торғайны. Былдай лозунгының мәсет бинаһында сирек быуаттан ашыу ваҡыт тороуы нисектер сәйер һәм ышанысты кәметә һымаҡ.

Партактив президиум һайлау, көн тәртибен раҫлау, регламент ҡабул итеү менән башланды. КПСС-тың февраль-март (1954) пленумы ҡарарҙарын тикшереп, район комитетының IV пленумы ҡарарҙарының үтәлешен тормошҡа ашырылыуы анализланды һәм тейешле ҡарар ҡабул ителде. Пленумда доклад менән партия район комитетының беренсе секретары Кәлимуллин сығыш яһаны һәм һүҙен:

– Советтар Союзы Коммунистар партияһының беренсе секретары, халыҡ-ара коммунистик хәрәкәттең күренекле эшмәкәре, тоғро ленинсы Никита Сергеевич Хрущев етәкселегендә совет халҡы, коммунистик йәмғиәт төҙөү бурысын үтәй барып, яңынан-яңы уңыштарға өлгәшә. КПСС-тың февраль-март пленумы ил буйынса ун өс миллион гектар майҙанда сиҙәм күтәреүҙе бурыс итеп ҡуйһа, халыҡ массаларының инициативаһы буйынса уның күләме егерме һигеҙ-утыҙ миллион гектарға етәсәк. Халыҡ массаларының был инициативаһын район хеҙмәтсәндәре лә хуплап ҡаршы алды, – тип тамамланы.

Фекер алышыуҙа трибунаға оратор артынан оратор күтәрелде. Алдан уҡ билдәләнгән күләмдә сиҙәм күтәрергә йөкләмә алдылар. Хужалыҡ территорияһында сиҙәм күтәрерлек майҙан бармы-юҡмы, экологияға зыян киләме-юҡмы – уныһын бер кем дә уйлап торманы. Сөнки район күпме сиҙәм күтәрә, шул хәтле күберәк гидросистемалы яңы ДТ-54 маркалы трактор ала. Ҡыҫҡаһы, һәр кем майлы ҡалъя эләктермәксе. Ә аҙағын уйлап та бирмәй: минән һуң донъя түңкәрелһә лә ярай.

Бөтә хужалыҡ етәкселәренең сығыш яһап, йөкләмә алыуы мөмкин түгел. Шуға күрә Кәлимуллин башҡа хужалыҡ етәкселәрен баҫтырып, йөкләмә алдырҙы. Ҡотлогилдегә лә сират етте.

– Ниңә сиҙәм майҙандары күп булған Хоҙайбирҙин исемендәге колхоз рәйесе өндәшмәйенсә боҫоп ултыра?

Ҡотлогилде урынында йөкләмә алып торманы, сәхнәгә күтәрелде:

– Иптәштәр, мин райондың IV пленумында ла сығыш яһағайным, ошо партактивта ла шул һүҙҙәрҙе ҡабатлайым. Был мәсьәләне беҙ колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында ла тикшерҙек һәм, Пленум ҡарарына ярашлы, партия саҡырыуына яуап итеп, ике йөҙ гектар майҙанда сиҙәм күтәрергә йөкләмә алдыҡ.

– Ә ниңә ЦК-ның һуңғы күрһәтмәһенә ярашлы түгел? – Кәлимуллин Ҡотлогилдегә асыулы ҡараш ташланы.

– Һуңғы күрһәтмәһе буйынса сиҙәм күтәреү егерме һигеҙ – утыҙ миллион гектарға етергә тейеш, – тип реплика ташланы Президиумда ултырған ВЛКСМ район комитетының беренсе секретары Яруллин.

– Комсомолия дөрөҫ аңлай, иптәш Буканов. Һеҙҙең йөкләмә алты-һигеҙ йөҙ гектар тәшкил итергә тейеш. Так и запишем. – Руссаға күскән Кәлимуллин был һанды яҙып ҡуйҙы.

– Ә ниңә экология (экология төшөнсәһен ул саҡта күптәр аңламай ине – **авт.**) хәүефһеҙлеге иҫәпкә алынмай? Йәш быуынға, – Ҡотлогилде юрый Яруллинға күрһәтте, – нимә ҡалдырабыҙ?

– Ниндәй экология, ниндәй? – тип екеренде Кәлимуллин.

– Һыныҡҡа – һылтау, Кәрим Кәлимуллович, – тип ялағайланды Яруллин.

– Мине лә дөрөҫ аңлағыҙ. Беренсенән, был нимә? Пленум ҡарарына ревизиямы? Икенсенән, тәбиғәт менән бәхәскә килеү хәүефле. Сама белмәһәң, тәбиғәт үс ала башлай. Өсөнсөнән, урман зонаһында тереклекте урман һаҡлаған кеүек, дала зонаһында ла тереклекте һаҡлаған фактор бар – ҡылған үләне массалары. Дүртенсенән, утыҙ миллион гектар майҙанды һөрөп сәсеү бер ни ҙә тормай. Уңышты юғалтмайынса теүәл йыйып алыу – проблема. Ә ашлыҡты урып-һуғыу техникаһы, транспорт етәме-юҡмы, – быны бер кем дә иҫәпләмәгән. Ҡабатлап әйтәм: мин сиҙәм күтәреүгә ҡаршы түгел. Тик, агроном булараҡ, көнбайыш илдәрендәге кеүек, бөртөклө ашлыҡ етештереү проблемаһын гектар ҡеүәтен күтәреү юлы менән хәл итеү яҡлымын. Аграр секторы алға киткән көнбайыш илдәр ана шул гектар ҡеүәтен күтәреү юлы менән бөртөклө ашлыҡты мул етештерә. Хатта донъя баҙарына ашлыҡ сығара, – тине лә Ҡотлогилде трибунанан төшөп китте.

Өс көндән Ҡотлогилдене райком бюроһына саҡырттылар һәм, шелтә биреп, колхоз рәйесе вазифаһынан бушаттылар ҙа «Урал» колхозына агроном итеп ебәрҙеләр.

– Һеҙ, Ҡотлогилде Шахмөхәмәт улы, партактивта тәбиғәт менән бәхәскә килеү хәүефле тигәйнегеҙ, әйтеп бөтөрмәнегеҙ, – тине «Урал» колхозының рәйесе Трофим Поваляев, тегеһе агроном булып эш башлағас.

– Образлы итеп әйткәндә – шулай. Кеше ҡулы килтергән зыянды тәбиғәт кисерә алмайынса, үс ала башлай.

– Тәбиғәттә кире күренештәр барлыҡҡа килә башлай, тип әйтмәксеһегеҙме?
– Әлбиттә. Беҙҙең ауыл халҡының йәйләүе бәләкәй генә Быҙаулыҡ йылғаһының ике яғында була торғайны. Был йәйләү урынлашҡан майҙан утыҙынсы йылдар башында ер инвентаризацияһы үткәреүселәр…
– Землемерҙар.
– Эйе, землемерҙар тарафынан күрше Воскресенск ауылында ойошторолған «Обтруд» (Объединенный труд) колхозы биләмәләренә ҡушыла, шул йылдан уҡ йылғаның ике яғы ла һөрөлә. Ҡылған үләне массаһы юҡҡа сыға. Һөҙөмтәлә бер ваҡытта ла, 1921 йылда ла, ҡоромаған был йылға тәү башлап 1933 селләһендә ҡорой.
– Дала зонаһында тереклек гарантияһы булған ҡылған үләне массивтарын «Ҡыҙыл китап»ҡа индерергә кәрәк, тип әйтмәксеһегеҙме?
– Эйе. Тик махсус зоналарҙа йәки заповедниктарҙа ғына. Тәбиғәттә тереклекте һаҡлай торған факторҙар булыуын оноторға ярамай. Әйтәйек, урман зонаһында тереклекте – урман, дала зонаһында ҡылған үләне массивтары һаҡлай. Һыуҙы иһә һыу һаҡлай.
– Тәбиғәт шарттары менән иҫәпләшмәйенсә булмай, тимәк.
– Әлбиттә. Быҙаулыҡ үҙенән-үҙе ҡороған, тип беләһегеҙме?
– Күрәһең, февраль-март пленумы тәбиғәт шарттарын иҫәпкә алмаған.
– Киреһенсә, пленум иҫәпкә алды. Климат шартын, сиҙәм үҙләштереү күләмен ун өс миллион гектарҙан, халыҡ массаларының инициативаһына һылтанып, егерме һигеҙ – утыҙ миллион гектарға еткереү ҡарары иҫәпкә алынманы.

***

Урман ҡатыш дала зонаһы артта ҡалды. Поезд дала зонаһына сығып, көнбайышҡа йүнәлеш алды. Суйын тәгәрмәстәре билдәле бер ритмда туҡылдаған пассажирҙар вагоны беленер-беленмәҫ һелкенә, йоҡоно килтерә. Рәйсә йыш иҫнәй, кәүҙәһен һелкетеп, Әнүәр көлә:
– Йотаһың да мине.
– Мин сусҡа ашамайым.
Вагонды күтәрерҙәй булып шарҡылдап көлгән тауыш яңғырай. Әнүәр ҡыҙарынды-бүртенде. Өндәшмәне. Ни эшләмәк кәрәк, үҙе ғәйепле.
– Сараға ҡасан етәбеҙ?
– Хәҙер етәбеҙ. Әҙерләнегеҙ. Унда поезд тик биш минутҡа туҡтай, – тип проводница ишек асырға ашыҡты.
Әнүәр сумаҙанын сығарып иҙәнгә ҡуйҙы ла плащына үрелде. Рәйсә кейендә лә, урынына ултырып, тәҙрә аша тирә-яҡты күҙәтә башланы. Ҡаршы килгән телефон, телеграф бағаналары бер-бер артлы үтеп китә, күҙ ҙә эйәрмәй. Көҙҙән үк һөрөп ҡалдырылған дала киңлегендә ҡар иреп бөткән, тик һаламы алынған эҫкерт төптәрендә генә ҡалған. Бер аҙҙан саман, ағас йорттар күренә башланы. Бейек, ләкин артыҡ ҙур булмаған элеватор тирәһенә еткәс, стенаһына «Сара» тип яҙылған вокзал күренде. «Сиҙәм батырҙарына ялҡынлы сәләм!» тигән лозунг та эленгән. Свердловск – Чкалов поезы менән килгән сиҙәм күтәреүселәрҙе Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш районларынан килгән вәкилдәр ҡаршы алды. Поездан төшөп ҡалған пассажирҙар араһында ыҫпай кейенгән һәм галстук таҡҡан урта йәштәрҙәге бер мыҡты әҙәм дә бар. Ул Өфөнән Хәйбулла һәм Матрай райондарына килгән вәкил булһа кәрәк, урыҫ телендә:
– Бог создал рай, черт создал Матрай, – тине, күптән үк афоризмға әйләнгән әйтемде ҡулланып, һәм алдан планлаштырылған митинг үҙағышына һалынды. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, был әҙәм сиҙәм проблемаһына бөтөнләй ҡыҫылышы булмаған Башҡортостан вәкиле булып сыҡты.

Ойошҡанлыҡ менән митинг асырға тейеш булған Чкалов (хәҙерге Ырымбур) өлкәһе вәкиле афоризмды иғтибарһыҙ ҡалдыра алманы, сөнки ул сиҙәм күтәрергә теләк белдереп килгәндәрҙең күңеленә шом һалып өлгөрҙө һәм оптимистик телмәрен: «Так что, не так страшен черт, как его малюют», – тип тамамланы. Артабан Матрай вәкиле ҡунаҡтарҙы төшөнкөлөккә бирелмәҫкә саҡырҙы ла урынһыҙ һәм нигеҙһеҙ әйтелгән һүҙҙәрҙең нисек афоризмға әләгеүе тарихына туҡталды:

– Матрай менән Сара араһындағы юлды тапауым бер бөгөн түгел. Өфө ҡунаҡтарын ҡаршы алған, оҙатып ҡуйған саҡтарым да булды. Уларҙың береһен дә шайтан ҡаршы алып, шайтан оҙатҡаны булманы. Ә бына шайтанды үҙе эҙләп тапҡан бер Өфө ҡунағы булды.

– Күрәһең, дәрәжәле кеше, – тине ҡунаҡтарҙың береһе.

– Эйе. Ҡыш көнө ине, – тип дауам итте Матрай вәкиле. – Икебеҙҙә лә толоп. Мин быйма кейҙем. Быйманан Өфө ҡунағы баш тартты, аяғында хром итек. Минең менән ҡушлап ултырған. Күсер менән өсәү юлға сыҡтыҡ. Ике сәғәт үтеүгә, тымыҡ аяҙ көн ҡапыл боҙолдо. Ябалаҡлап ҡар яуа, буран сыҡты. Тәрән үҙәкте бата-сума сыҡтыҡ та, юлдан яҙғас, тамам аҙаштыҡ. Юлбарыҫ ауылына тап булмаһаҡ, туңып үлә инек. Өфө ҡунағы аяҡ бармаҡтарын туңдырып, аҙаҡтан ҡырҡтырырға мәжбүр булды. Шунан һуң Матрай районына юлланған Өфө вәкилдәрен: «Бог создал рай, черт создал Матрай», – тип оҙатып ҡала торған булған.

Чкалов өлкәһе райондарынан килгән вәкил дә сығыш яһаны. Беҙ ҙә ситтә тороп ҡалмайыҡ, ҡотлауҙарға яуап итеп, рәхмәт белдерәйек, тигәндер – ҡунаҡтар исеменән ике сиҙәмсе сығыш яһаны һәм ышаныс белдерҙе. Тиҙҙән сиҙәмселәрҙе ҡаршы ала торған ЗИС-5 машиналары төрлөһө төрлө яҡҡа юлланды. Хәйбуллалар, матрайҙар төньяҡҡа ҡарай ҡуҙғалды.

Турат ауылына тиклем ҡылған ҡаплаған тип-тигеҙ ҡола ялан, һөр ҙә һөр ҡолас йәйеп. Тик уң яҡтағы Турат тауы ғына, горизонт һыҙығын ҡаплап, боҙа был күренеште. Рельеф тик Аҡъяр ҡасабаһына еткәс кенә үҙгәрә башлай. Хәйбуллалар Аҡъярҙа ҡалды, ә матрайҙар, ашханала тамаҡ туйҙырғас, юл ыңғайында бер бабай менән әбейҙе ултыртып, юлдарын дауам итте. Аҡъярҙан сыҡҡас, ЗИС-5 шул уҡ йүнәлештә Таналыҡ буйлап алға ынтылды. Осо-ҡырыйы күренмәгән дала киңлектәре, ҙур баҫыу майҙандары күптән үк артта ҡалды. Тик уба һәм ташлы ҡалҡыулыҡтар бүлгеләгән ваҡ баҫыу майҙандары ғына осрай.

– Таптың ҡолас йәйеп сиҙәм күтәрер майҙан. – Рәйсә Әнүәргә төрттөрҙө.

– Өфө урамы түгел бында, һеңлем, – тип Рәйсәнең үҙенә төрттөрҙө юл ыңғайында машинаға ултырған бабай. Уға, таҡмаҡ әйтеп, әбейе лә ҡушылды:

*Өфө урамы быяла,*
*Таш булһа, таймаҫ ине.*
*Уф, йөрәккәйҙәрем яна,*
*Һин булһаң, янмаҫ ине.*

Күрәһең, бабай менән әбей Әнүәр менән Рәйсәнең сиҙәм күтәреүселәр булыуы тураһында белмәй, тик ҡала кешеләре тип кенә уйлай. Сөнки икеһе лә һүҙҙең айышына төшөнмәгән. Ә Әнүәр эштең ниҙә икәнен, тик урман ҡатыш дала зонаһына етеп, шофер Хәмитйән: «Бына ошо инде беҙҙең колхоз биләмәләре», – тигәс кенә аңланы.

Әнүәрҙең ҡолас йәйеп сиҙәм күтәреү хыялы селпәрәмә килде. Ҡаҙағстан киңлектәренә китер йәки кире ҡайтыр ине, терһәкте тешләп булмай.

– Ә колхоздың сиҙәм күтәрәһе майҙандары икенсе урындамы ни? – тип һораны Әнүәр бабайҙан.

– Унаһын эт белһен, – тип ғүмер-ғүмергә сәйнәлеп тапалған әйтем менән яуап бирҙе тегенеһе.

– Унаһын эт белһен, тип ни, ошо Ҡәнифә юлы буйы инде сиҙәм, – тип йөпләне әбейе.

– Селинщик тигәндәре һинме әллә, улым?

– Эйе, мин. Ҡатыным да.

– Ғәфү итә күр, улым, әбейем менән мин аңраны. Селинщик икәнегеҙҙе белмәй ысҡындырҙыҡ Өфө урамы тураһында.

– Асыҡ ауыҙ! – тип төрттө әбей бабайының ҡабырғаһына. – Абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән.

Ҡәнифә юлын арҡыры киҫкән ЗИС-5 бәләкәй генә йылға буйлап түбән төшә башланы. Йылғаның уң яғы – ташлы тау теҙмәләре. Һул яғында – урман ҡатыш ваҡ-ваҡ болондар. Ете-һигеҙ саҡрым самаһы юл үткәс, түбәндә түбәләре таҡта менән ябылған йорттар күренде. Ауыл Һаҡмар буйында, матур тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан, тик толҡаһыҙ күренә, сөнки уны ҡояштан йылғаның уң яғындағы тау ҡаплаған. Ауылға текә юл алып төшә.

Машина бәләкәй генә ҡарағайҙан буралған йорт янына килеп туҡтаны. «Калхузға целинщиктәр килгән!» тигән хәбәр йәшен тиҙлегендә таралып, халыҡ йыйылды. Ҡунаҡтарҙың йөктәрен ташырға ярҙам иттеләр. Тыштан шөкәтһеҙ күренгән йорт эстән ялт итеп тора. Буялмаһа ла, ҡарағай таҡтанан һалынған иҙән ҡырып йыуылған, тәҙрәләр ҙә таҙартылған, мейес усағы ла ағартылған. Стеналар аҡланмаған, боронғоса буйҙан-буй урындыҡ һалынған. Күрәһең, торлаҡты алдан уҡ әҙерләгәндәр. Йорттоң ҡарағай еҫе сығып торған һауаһы Рәйсәгә оҡшаны.

– Хәҙергә ошо йортта йәшәп торорға булыр. – Колхоз рәйесе Поваляев торлаҡ мәсьәләһен хәл итеүҙең ике шарты булыуы тураһында аңлатты. – Теләйһегеҙ икән, иптәш Монасипов, үҙегеҙ йорт һалып керәһегеҙ. Беренсенән, һеҙгә колхоз түләүһеҙ транспорт менән ярҙам итә. Икенсенән, делянка алып, үҙ көсөң менән ағас ҡырҡып, төҙөлөш материалдарын әҙерләү арзанға төшә. Өсөнсөнән, был йорт үҙеңдең шәхси мөлкәтең булып ҡала. Теләйһегеҙ икән, колхоз үҙе төҙөгән өсәр бүлмәле ике фатирҙан торған коммуналь йорттоң бер фатирын һайлайһығыҙ. Тик оҙағыраҡ көтөргә тура килә. Был колхоз балансында торған йорт фатирҙары шәхси мөлкәт була алмай.

– Бына был йорттарҙы, – Әнүәрҙәр менән бергә ҡайтҡан бабай өр-яңы ағас йорттарға күрһәтте, – колхоз ярҙамында һәр кем үҙ көсө менән төҙөнө. Ана шул йорттарҙың береһе минеке. Арзанға төштө.

– Бабай дөрөҫ әйтә. Ҡайһы шарт оҡшай, үҙегеҙ һайлағыҙ, иптәш Монасипов, – тине Поваляев, бабайҙың һүҙен ҡеүәтләп.

– Энергияны Магнитогорскиҙан алаһығыҙмы? – тип һораны Әнүәр, колхоз рәйесе электр лампаһын ҡабыҙғас.

– Юҡ, токты дизель двигателе бирә. Ә электр селтәре беҙҙең яҡтарға әлегә килеп етмәгән.

– Ауылға килеп төпләнгәс, мал-тыуары ла кәрәк була бит инде, – тине Рәйсә, «бөгөндән үк һыйыр кәрәк» тигәнгә ишаралап.

– Әлбиттә. Халыҡта мал күп, аҡсаң ғына булһын, – тине рәйес, ҡаршы ала килгән халыҡҡа ҡарап.

– Ғәйетйән быҙауы менән тана һыйыр һата, – тине «кемдер баҙарға барыуҙың кәрәге юҡ» тигән мәғәнәлә. Уға икенсе берәү ҡушылды:

– Һыйырын Бүребай баҙарына апарып һатмаҡсы.

– Баҙарға йөрөгәнсе, шул һыйырҙы алайыҡ та ҡуяйыҡ, Әнүәр, – тип сат йәбеште Рәйсә һәм һыйырлы булмайынса Әнүәргә тын алырға ла ирек бирмәне.

Ун көн үтеүгә йәш ғаилә мал-тыуарлы булды. Йорт-ҡура тирәһен Әнүәр яҙғы баҫыу эштәре башланғансы рәткә килтереп өлгөрҙө. Сиҙәм күтәреүсе булараҡ, үҙенә тейешле ДТ-54 маркалы тракторҙы һабаны менән МТС-тан алып ҡайтты. Ләкин баҫыу эштәрен башларға әлегә иртәрәк. Ваҡыттың иркен булыуы балыҡ тоторға яратҡан Әнүәрҙе Һаҡмарға әйҙәне. Ул кәртә артынан картуфлыҡ аша берләм юл буйлап килеп, яр башына баҫты. Ағиҙелгә ҡарағанда Һаҡмар – диңгеҙҙәге тамсы. Бындай йылғала балыҡ булыуы шикле тойола. Алда – йылға ағыҙып килтергән ағастарҙы тотор өсөн эре бүрәнәләрҙән төҙөлгән ҡоролма. Йылғаның һул яғында – шул ҡоролманан ҡороға сығарылған утын һәм бүрәнә штабелдәре. Бүрәнәләрҙе прицеплы, ә утындарҙы прицепһыҙ йөк машиналарына тейәп, Бүребай руднигына оҙаталар.

Һыу ағышынан түбәндә ун өс-ун дүрт йәштәрҙәге үҫмер балыҡ ҡармаҡлай. Уға, ниңәлер, балыҡ эләкмәй. Ә йылға аръяғындағы ҡая таш аҫтында ултырған икенсе балыҡсы ҡалҡыуысына төбәлгән дә күҙен дә алмай. Күрәһең, ул Һаҡмар аръяғына ҡоролма аша сыҡҡан. Эре генә оптоларҙы тал шешкә теҙеп, йыуан ерек ботағына элеп ҡуйған. Тотҡан балығы биш-алты килограмдан кәм түгел. Әнүәр уға ҡыҙығып ҡарап торҙо. Шуныһы мәрәкә: балыҡ, ҡапҡас та, ҡармаҡ бауын уйната. Бау улай ҙа күсә, былай ҙа күсә, тартылмай. Балыҡсы табышты тик бау һелкетә тартылғас ҡына һөйрәп сығара. Теге балыҡсы оҙаҡ ултырманы. Һуңғы балығын да шешкә теҙеп, уның ике осон бергә бәйләгәс, ҡоролма яғына атланы.

– Ә-ә-ә, ҡунаҡ! – тип ике ҡуллап күреште. – Һаумы, ҡустым, һаумы.

– Һаумы, ағай, һаумы. Уңышлы балыҡ тотоуың менән!

– Рәхмәт. Атын юғалтып, ҡабат килеп сыҡҡан кеше икән тип торам.

– Кем һуң ул ат юғалтып йөрөгән кеше?

– Үткенсе. «Ерән ҡашҡа ат килеп сыҡманымы һеҙҙең яҡтарға?» – тип килеп сыҡҡайны. Кисә, ҡараңғы төшкәс, йоҡлатып сығарғайным меҫкенде, Сара станцияһына ашлыҡ ташыған ваҡытта Хәкимйән менән аттарыбыҙҙан ҡолаҡ ҡаҡҡан көн иҫкә төшөп.

– Аттарығыҙ табылдымы һуң?

– Юҡ. Табырһың тапмай ҙа ни ат ҡарағы ҡулына эләккән аттарҙы. Вәссәләм. Хәкимйән дә, мин дә һыйырҙарыбыҙҙан яҙҙыҡ. Шуныһы йәл: коллективлаштырыу осоронда үҙем колхозға биргән малҡай ине – мисәүҙәге ҡолоно менән. Ана шул үҙем колхозға биргән ике атым юғалған өсөн колхоз һыйырымды тартып алды. Йәнәһе, бер түгел, ике колхоз атын юғалтҡанмын.

– Хәҙер ат ҡарағы юҡ. Үткенсенең аты табылыр, моғайын.

– Әлбиттә, табылыр. Тик ана шул ат юғалтыу төшкә керһә, ҡара тиргә төшөп уянып китәм, ҡәһәрең. Хәҙер ҙә Аҡъяр яғына юл тотһам, урап үтәм шул аттарҙы юғалтҡан урындарҙы.

– Ул аттарығыҙҙы төндә юғалтҡайнығыҙмы?

– Төндә юғалтһаҡ, үкенесле булмаҫ ине. Көпә-көндөҙ, күҙ алдында тип әйтерлек алып киттеләр, суҡынғандар, – тип һөйләй башланы Айса бабай.

Коллективлашыу тамамланған. Утыҙ дүртенсе йыл. Ашлыҡ уңған. Ауылдашы Хәкимйән менән Айса ауылдан Сара тимер юл станцияһына ашлыҡ ташый. Китешләй ҙә, ҡайтышлай ҙа Таналыҡ йылғаһы буйында туҡтайҙар. Аттарын тышап

ашарға ҡуялар ҙа ҡайнатып сәй эсәләр. Сәйҙән һуң аттарына һыу эсерәләр. Был юлы ла ауылдаштар шул урында туҡтап, сәй эсергә ултырғандар.

– Ҡара әле, Айса. – Хәкимйән илле-алтмыш метр алыҫлыҡта балыҡ ҡармаҡлаған кешегә күрһәтте. – Күрәһеңме, бер-бер артлы ҡаба балыҡ.

– Ә үҙең, Таналыҡта балыҡ юҡ, тиһең. Әйҙә, аттар ашап туйғансы балыҡ ҡармаҡлайыҡ, тиһәм, ҡул һелтәйһең, етмәһә, Таналыҡ Һаҡмар түгел, йәнәһе, балыҡ тоторға.

– Әйҙә, бик тә булмаһа, беҙ ҙә ҡармаҡлайыҡ.

– Ҡармағың бармы һуң?

– Эй, әттәгенәһе, онотҡанмын.

– Кәрәкмәгәндә алаһың, кәрәгендә юҡ. Әйҙә, барып ҡарайыҡ. Икенсе килгәндә ҡармаҡларбыҙ.

– Әйҙә.

Ауылдаштарҙың табын янынан ҡуҙғалыуы булды, балыҡсы тағы ике-өс йөҙ метр юғары күсеп ултырҙы. Юлсыларҙың яҡынлашыуы булды, тегеһе тал араһына инеп юғалды. Арт яҡта ат тояғы тауышы ишетелде. Хәйләне һуң ғына аңлаған юлсылар ат ҡараҡтары артынан йүгерә бирҙеләр ҙә атһыҙ торҙо ла ҡалдылар. Ярай әле, ат ҡараҡтары Хәкимйәндең төпкә еккән аҫҡаҡ тура атын ташлап ҡасҡандар. Ылаусылар шул аҫҡаҡ ат менән тик өсөнсө көндө генә асығып, арып ҡайтып төштөләр.

– Бына шулай һемәйтәләр, ҡустым, асыҡ ауыҙҙарҙы, – тип тамамланы һүҙен Айса бабай. – Әйткәндәй, исемең нисек һинең?

– Әнүәр. Ә һинең?

– Күҙ алдымда «Айса ағай», «Айса олатай» тиҙәр, ә артымда оҙаҡ йылдар буйы «Щукарь» тип йөрөткәйнеләр. Ә хәҙер «Айсаҡойроҡ» тип кенә йөрөтәләр. Йәнәһе, мин был донъяла бер ҡараһаң – бер төрлө, ә икенсе ҡараһаң – икенсе хәбәр һөйләп йөрөгән ҡойроҡ болғаусы.

– Уйлап табалар ҙа инде.

– Уйлап табыу ғынамы ни, теле сығып етмәгән ейәнемдән көләләр зәһәр телләр. «Айсаҡойроҡ», – тип яуап бирә ул-былды аңламаған бала, әгәр ҙә: «Картатайыңдың исеме нисек?» – тип һорайһалар. Ә «Айсаҡойроҡ» тигән лаҡап түбәндәгесә барлыҡҡа килә. Ейәнем айсаҡойроҡ тип бер ҡара төҫтәге асаҡойроҡ тип аталған бөжәккә күрһәткән, – тип аңлатты ла Айса бабай, шешенән ысҡындырып, Әнүәргә ике опто тотторҙо.

Һөйләп һүҙе бөтмәгән ҡарт – Һаҡмар йылғаһына төшкән тыҡырыҡтан, ә Әнүәр картуфлыҡ аша берләм юлдан ҡайтып китте.

***

Салт аяҙ. Бөгөн ҡояш тәүгә генә ҡыҙҙыра. Баш осонда, һауала, һабантурғайы һайрай. Ер эшкәртеү һәм сәсеү агрегаттары баҫыу станы янындағы әҙерлек һыҙығына теҙелгән. Дым ҡаплаусы механизаторҙар төшкө ашҡа туҡтаған. Ҡотлогилде Әнүәрҙе эйәртеп баҫыу станына килгәндә, шулар гөж килә ине.

– Кисә генә колхоз һыйыр һуйҙы түгелме? Ә ите ҡайҙа?

– Хисапсы Алапас (Аллабирҙенең ҡушаматы) кисә, баҫыу станына тип, күҙ алдында ярты һыйыр бото алып китте. Ә кәшәүәр Ғәбиҙә бөгөн беҙгә ҡыһыр туҡмас тарата, – тине тракторсы Һибәтулла.

Ашнаҡсының түҙемлеге бөттө булһа кәрәк:

– Ҡыһыр бисәнән (тол ҡатын мәғәнәһендә) ҡыһыр туҡмас эләккәненә шөкөр ит, Һибәтулла. Бик тә ҡыһыр туҡмасты оҡшатмайһың икән, ҡыһыр ҡалмай йөклө булған бисәңде алып килеп, баҫыу станына кәшәүәр итеп ҡуй, – тине.

Һаҙ буйында күмәк көлкө яңғыраны. Һынытҡа һылтау тигәндәй, хисапсы Аллабирҙе яуабын тапты:

– Көлмәгеҙ. Яҡшы булды әле, ит ашағығыҙ килһә, баҫыу станына ҡабат эт эйәртеп килмәҫһегеҙ.

– Кисә кис кенә ике эт баҫыу станы тирәһендә уралана ине шул. «Шул ике эт ашаған» тип акт төҙөргә лә иҫәптән сығарырға кәрәк, – тине хисапсыға Тәлғәт Мәжитов.

Аллабирҙе кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән ҡағыҙ сығарҙы ла уҡый башланы:

– «Акт. Беҙ, түбәндә ҡул ҡуйыусылар: хисапсы Аллабирҙе Сафин, агроном Буканов, ашнаҡсы Ҡунаҡова, механизаторҙар Тәлғәт Мәжитов, Камил Торошов, Хисмәт Солтанов, Юныс Басиров, Барый Байғолов, ярты һыйыр ботон Шарик менән Һарыбай ашаған, тип дөрөҫләп, был итте иҫәптән сығарыр өсөн ҡулдарыбыҙҙы ҡуябыҙ». Башлап һеҙ ҡул ҡуйығыҙ, Ҡотлогилде ағай.

– Ярай. Тик бына акттың ошо урынына, – Ҡотлогилде төртөп күрһәтте, – «Алты ике аяҡлы эт ашнаҡсы ҡаҙанында бешереп ашаған» тип өҫтәп яҙ, шунан һуң ғына ҡул ҡуйырмын.

Шарҡылдап көлгән тауыш һаҙ буйлап икенсегә яңғыраны. Ғәҙәттә, бындай акттар колхоздың ревизия комиссияһы тарафынан тикшерелә. Ә хужалыҡҡа килгән зыянды, уның ҡарарына ярашлы, колхозсыларҙың киләһе йылда үтәсәк отчет-һайлау йыйылышы йәки шул көйө иҫкергән, туҙған әйбер булараҡ иҫәптән сығара йәки зыян килтергән кешеләрҙең эш хаҡынан тотоп ҡала. Һуңынан билдәле булыуынса, әткә һылтанып ярты һыйыр ботон бешереп ашаған Аллабирҙе Сафин һәм биш механизаторға ҡарата ла шундай ҡарар сығарыла.

Баҫыу эшсәндәре төшкө ашҡа туҡтаған һәм стена гәзите эленгән стенд янында йыйналған. Ә стена гәзитендәге карикатурала ике эт һөйләшә:

– Ана, күрәһеңме, Шарик, – Һарыбай ит ашап, һөйәген уның үҙенә ырғытып көлөшкән алты кешегә күрһәтә. – Иманым камил, һинең менән миңә һылтаясаҡтар...

Ә бөгөн намыҫһыҙ кешеләрҙән әсе көлгән карикатура күңелдәрен асҡан һәм тәмле итле аш менән ҡәнәғәт баҫыу эшсәндәренең кәйефе күтәренке. Аштан һуң улар, көлөшә-көлөшә, эшкә таралышты.

***

Эште Әнүәр сиҙәм күтәреүсе булараҡ башлай. ВЛКСМ район комитетының беренсе секретары Фуат Яруллин «Урал» колхозының баҫыу майҙанына партияның район комитеты вәкиле булараҡ килеп төшкән, күрәһең, сиҙәм күтәреүҙә беренсе бураҙна һалыуҙа ҡатнашмаҡсы. Колхоз агрономы Ҡотлогилде ул килгәндә, Әнүәргә колхоз картаһына күрһәтеп, Ҡәнифә юлы буйында урынлашҡан ике йөҙ илле гектар сиҙәм күтәрәһе майҙандың тик ташһыҙ урындарын һайлап, дүрт өлөшкә бүлеп һөрөргә өйрәтә ине. Вәкил ҡәтғи ҡаршы төштө, Әнүәргә майҙанды Ҡәнифә юлы буйлап тотошлай һөрөргә бойорҙо. Йәнәһе, майҙан конфигурацияһын боҙорға ярамай. Әнүәр Ҡотлогилдене тыңламаны, вәкил нисек өйрәтһә, шулай бураҙна һала башланы. Шул арала килеп туҡтаған колхоз рәйесенең һөйләшергә ваҡыты ла булманы: райкомға, бюроға, саҡыртҡандар, ашыға икән. Вәкил дә әҙер транспорттан ҡалғыһы килмәнеме, Поваляев менән бергә район үҙәгенә ҡайтыу яғын ҡараны.

Агрономдың тарантасҡа ултыра һалып Әнүәрҙе ҡыуып етеп, трактор алдына сығып юлын киҫеүе булды, трактор ҡапыл ныҡ һелкенде лә, туҡтап, һүнде. Әнүәр тракторынан төштө лә пускачҡа тотондо.

– Оло әйткәнен тыңламаған – оролған да бәрелгән! – Ҡотлогилде пускач ҡайышын Әнүәрҙең ҡулынан тартып алды. – Күрмәйһеңме ни, һабаның ташҡа эләккән.

– Ни булды?

– «Ни булды, ни булды», – тип үсекләп асыуланды мотоциклда килеп туҡтаған механик Мифтах. – Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыу булды был һеҙҙең эшегеҙ. Ә һин нимә ҡарап торҙоң, Ҡотлогилде ағай?

– Инде һин генә ҡалмағайның, Мифтах, минең яғанан алырға, – тине лә, механик алдында аҡланып тормайынса, тракторҙы МТС-ҡа ремонтҡа оҙатырға бойорҙо.

Бына шулай райком вәкиле эште боҙоп ҡайтты ла китте. Агроном, механик, сиҙәм күтәреүсе, тракторға трост тағып, һабанды артҡа тартып сығарҙылар. Таш ҡатламына эләккән һабандың алғы кәҫ таҡтаһы ҡайырылған, рамы ҡыйшайған, төрәне һынған. Механик Мифтах менән механизатор Әнүәр һабанын тағып тракторҙа МТС мастерскойына ремонтҡа киткәйнеләр, иртәгәһенә төштән һуң ғына әйләнеп ҡайттылар. Хәҙер ике йөҙ илле гектар майҙанды агроном Ҡотлогилде әйткәнсә дүрт өлөшкә бүлеп, тик ташһыҙ урындарын һайлап ҡына һөрөүҙән башҡа сара ҡалманы.

Ә райком вәкиле Яруллин бер-ике көн күренмәй торҙо. Икенсегә бураҙна һалыу райкомдың беренсе секретары Кәлимуллин был яҡта йөрөп ятҡан ваҡытҡа тура килде. Ошаҡ йөрөтөүҙе яратмаған колхоз агрономы Ҡотлогилде, райком вәкиленә һылтанмайынса, хәлде һөйләп бирҙе.

– Был сиҙәм күтәрәһе майҙанды тотошлай һөрөргә тип, бураҙна һалырға төшкәйнек, яңы һабан таш ҡатламына эләгеп боҙолғас, майҙандың ташһыҙ урындарын һайлап, айырым-айырым һөрөргә булдыҡ.

– Баштан уҡ шулай айырым һөрөргә кәрәк булған. Һеҙ бит агроном, иптәш Буканов. Ә ябай ғына әйберҙе лә белмәйһегеҙ, – тип иҫкәрмә яһаны ла, Кәлимуллин район үҙәгенә ҡайтып китте һәм эштең үтәлешен контролдә тотоуҙы көсәйтеү девизы аҫтында бөтә партия активын аяҡҡа баҫтырҙы. Йәнәһе, «Урал» колхозында булған ғәҙәттән тыш хәл ҡабатланмаһын, баҫыу эштәре, бигерәк тә сиҙәм күтәреү, күҙ алдында булһын. Бынан алда ла туҡтауҙы белмәгән «опека каруселе» тағы ла тиҙерәк әйләнә башлай. Сиҙәм күтәреүсе Әнүәрҙе башта райкомдың беренсе секретары Кәлимуллин үҙе туҡтатып биш минут һөйләште. Бер сәғәт ваҡыт үттеме-юҡмы, район Советы башҡарма комитеты рәйесе килеп етте. Райкомдың ауыл хужалығы буйынса секретары ла, МТС директоры ла, башҡалары ла килеп, туҡтатып һөйләшә. Сәйнәлеп тапалған бер үк һорауҙар: ваҡытында яғыулыҡ алып киләләрме, эш туҡталмаймы, дөйөм туҡланыу яҡшы ойошторолғанмы, агитатор киләме-юҡмы? Һорауҙарҙан һуң өгөт-нәсихәт башлана. Йәнәһе, социалистик йөкләмәңде арттырып үтәргә тырыш. «Коммунизм» район гәзите редакторы ла ситтә тороп ҡалмай: Әнүәрҙән интервью ала, ә иртәгәһенә «Йылды көн аҫрай» тигән мәҡәлә баҫтырып сығара. В. И. Лениндың «үтәлеште контролдә тотоу» тигән күрһәтмәһен урындағы партия ойошмалары ана шулай «тормошҡа ашыра», йәнәһе.

Әнүәр хәҙер кем генә килһә лә, колхоз рәйесе Трофим Поваляев бойороғона ярашлы, туҡтамай. Район вәкиле Яруллин килгәйне, үтте лә китте. Шуғалырмы, Әнүәрҙең эше ырамлы була башланы, сөнки бер кем дә уның эшен тоҡҡарламай. Яруллин баҫыу станында туҡлана, ә төнөн колхоз рәйесе Поваялев йортонда йоҡлай. Йоҡо аралаш урамда:

*Донъя болара, тиҙәр,*
*Колхоз тарала микән?*
*Урам тулы уполномочий,*
*Тиреҫтә ярала микән? –*

тип йырлаған тауыш ишетһә, яҫтыҡ менән башын ҡаплай.

***

Ата хәстәрлеге күрмәй үҫкән бала хәлен әсәнән дә яҡшы белгән кеше юҡтыр, моғайын. Берҙән-бер балаһы Сафуанды Алмабикә бер үҙе тәрбиәләп үҫтерҙе. Бала интекмәйенсә үҫте. Урта белем алыуға өлгәште. Үлерҙән алда әсәһе уға үҙенең был ауылға ҡайҙан һәм нисек килеп төпләнеүе тураһында һөйләп бирҙе. Үҙе тыуып-үҫкән ауылға, туған-тыумасалары янына барып төпләнергә кәңәш итте. «Кәмһетелеп йәшәмә, балаҡайым», – тине. «Алмабикә атаһыҙ, уйнаштан бала тапты», тигән хәбәр ауылда күптән үк таралып өлгөргәйне инде. Уны әсәһе лә, Сафуан да ауыр кисерә. Сафуандың дуҫтары күп, таянысы ла бар. Ләкин, әсәнән алаһы ла, ҡолаһы ла тыуа, тигәндәй, донъяның кемеһе юҡ. Унан көнләшәләр. Ни тиһәң дә, тәртипле, һылыу егет. Ҡыҙҙарын ҡыҙғанған егеттәр ҙә бар. Атаһыҙ донъяға килеүенә төрттөрәләр. Әсәһе Алмабикәне рәнйетеүселәр ҙә бар. Әсәһенең дә, Сафуандың да донъянан туйған саҡтары булды. Ауыл һөнәрселек-техник училищеһын тамамлаған егет киң профилле тракторсы һәм комбайнер һөнәрен үҙләштерә. Әсәһе донъя ҡуйғас, тыуып-үҫкән ауылын, дуҫтарын ҡалдырып, ҡалаға китергә мәжбүр булды. Заводҡа эшкә урынлашты. Бында уны бер кем дә белмәй, кәмһеткән кеше юҡ – ул бөтәһе менән дә тиң хәҙер. Оҙаҡламай әсәһе мәрхүмә Алмабикәнең теләге лә ҡабул була: Сафуан уның тыуып-үҫкән ауылына сиҙәм күтәреүсе булараҡ килеп төпләнә һәм Әнүәр менән бер тракторҙа сиҙәм күтәрә башлай.

Яҙмыш... Ауыл тормошон да, ҡала тормошон да Сафуан ана шулай татый.

Хужалыҡтың аграр секторында эш сезонлы. Бесәнгә төштөңмө, ял итәм тип уйлама. Мал аҙығы әҙерләү тамамланып та өлгөрмәй, ураҡ башлана. Ураҡ менән бер рәттән крәҫтиән туңға һөрөү, ужым культуралары сәсеү эштәрен башҡара. Уңыш йыйып өлгөрөр-өлгөрмәҫтән, мал кәртәгә инә. Мал ҡышлатыу яҙғы сәсеү эштәре башланғансы һуҙыла. Крәҫтиән тик яҙғы баҫыу эштәре тамамланғас ҡына тын алып ҡала, шәхси хужалығына форсат бүлә. Һабантуйҙа ҡатнашып күңел аса. Йәштәр ҙә уйын-көлкө менән ваҡыт уҙғара, киноға, тансаға йөрөй.

Ауыл клубы йәштәр менән тулған. Клуб мөдире Сания төрлө уйындар ойоштора. Егеттәр менән ҡыҙҙарҙы парлап, түңәрәк буйынса теҙгән. «Өсөнсө артыҡ» уйынының шарттарын өйрәтә үҙе. Уртала бер пар: ҡыҙ менән егет. Егет түңәрәк буйлап ҡаса, ә ҡыҙ уны ҡыуа. Егет йә тотола, йә бер парҙың артына килеп баҫып ҡотола. Парҙың алда торғаны артыҡ булып сыға һәм ул ҡаса башларға тейеш. Юғиһә тотола ла баҫтырыусы булып уртала ҡала. Уны тотҡан кеше үҙе ҡаса башлай. Уртаға сығыу Сафуанды ла ситләп үтмәне. Өлгөр егет түңәрәк буйлап ике-өс мәртәбә ураны, тик барыбер ҙә үҙен тотторманы. Уңай килгән бер пар артына килеп баҫып өлгөрҙө. Сафуан тыны бөтөп нәҙек билле, һары сәсле ҡыҙ артында оҙаҡ баҫып торҙо. Ҡыҙҙы ул тик йөҙөн күргәс кенә таныны. Уны егет урамдан үтеп барышлай ике көн алда осратҡайны. Ҡараштар осрашты. Уңайһыҙланыуҙан ҡыҙҙың йөҙөндә лә, егет йөҙөндә лә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Йәштәр тиҙерәк икеһе ике яҡҡа китеү яйын ҡараны. Күрәһең, ғашиҡ уты шулай тоҡаналыр. Хәҙер егет ана шул алдында баҫып торған ҡыҙҙың дерелдәүен тойҙо. Уртала ҡасып йөрөгән кеше тап бына ошо мәлдә килеп баҫты Сафуандың артына. Хәҙер уның алдында торған ҡыҙ артыҡ булып ҡалды. Ҡасырға тейеш. Ләкин, тойғоға бирелеп, ҡуҙғалмай. Ул үҙен тик кемдеңдер: «Аңра!» – тигәнен ишетеп кенә ҡулға алды һәм үҙен баҫтырып тотҡан кешене баҫтыра башланы. Шул саҡ уйындың тамамланыуы тураһында иғлан ителде. Танса башланды. Егеттәр, ҡыҙҙар парланышып бейергә төшөп бөттө, тик Сафуан менән уға урамда осраған Фәниә исемле ҡыҙ ғына бер-беренә текләп ҡарағандар ҙа баҫып тик торалар. Уларҙың

хәлен клуб мөдире Сания аңланы булһа кәрәк: Фәниәне етәкләп алып килеп, Сафуандың ҡулына тотторҙо ла:

– Әллә сәйнәп ҡаптырғанды көтәһеңме? – тип көлдө.

Хәҙер ҡыҙ менән егет тәнәфес ваҡыттарында ла, бер-берен ташлап китмәйенсә нәүбәттәге бейеү башланыуын көтә. Кисә тамамланғас, Сафуан Фәниәне оҙатып ҡуйҙы. Шулай башланған танышыу Октябрь байрамында туй менән тамамланды.

Ҡыш үтеп, йәй булды. Бесән етте. Бер йыллыҡ үлән сәселгән майҙандар бушағас, Әнүәр менән Сафуан туңға һөрөүҙе башлап ебәргәйнеләр – ул ер туңғансы дауам итте. Ҡабул иткән йөкләмәләрен арттырып үтәйҙәр. Ике ғаилә ҡатнашып йәшәй.

Бер көндө Сафуан тракторын төнгө сменаға килгән Әнүәргә тапшырғас, ҡайтып киткәйне, көндөҙгө сменаға сыҡманы. Әнүәр көттө-көттө лә, Сафуанды эҙләп барһа, тегеһе өйҙә юҡ. Йәш ҡатын илап ултыра.

– Сафуан ҡайҙа?

– Кейем-һалымын тултырып, сумаҙанын ишек төбөнә алып барып ҡуйҙы ла сығып китте, күрәһең, китергә берәй транспорт эҙләй, – тип Фәниә күҙ йәштәрен һөртә-һөртә яуап бирҙе.

– Мине эҙләргә сығып киткәндер. Мотоциклың менән МТС-ҡа алып бар, тип әйтмәкселер. «Ҡайҙа йыйынаһың?» – тип һораманыңмы?

– Нимәгәлер асыуланған, өндәшмәй. Күрәһеләрем бар икән... – Күҙҙәре сейләнеп, күҙ-башы шешенгән Фәниә йәнә үкһеп илай башланы.

– Тынысла, Фәниә. Сығып китә күрмә. Ҡотлогилде ағайҙы көт, – тине лә Әнүәр сығып китте.

Әнүәр килгәндә, агроном атын еккән, баҫыуға йыйына ине.

– Ни булды?

– Сафуан сменаға сыҡманы. Эҙләп барһам, өйөндә юҡ. Кейем-һалымын сумаҙанына тултырған да сығып киткән. Күрәһең, беҙҙә мине көтә. Мотоциклың менән МТС-ҡа алып бар, тип әйтмәкселер.

«Сафуан тураһындағы ғәйбәт бында ла килеп етте микән?» – тигән уй башына килеп төшкәс, Ҡотлогилде Сафуандарға ашыҡты. Сөнки Сафуан менән серләшкәне иҫенә килеп төштө. Ә был хәл үткән йыл булғайны. Сиҙәм күтәреүсе баҫыуға агроном менән бергә сыҡҡайны. Тегеһеһе:

– Ҡайһы яҡтарҙан килдең сиҙәм күтәрергә? – тип һораны.

– Алыҫтан.

Бойоғоуы Сафуандың йөҙөнә сыҡты. Уның үҙе тураһында һөйләгеһе килмәүен шәйләгәс, Ҡотлогилде төпсөнмәне. Сөнки егеттең тормош юлының үҙе кеүек еңел булмауын шунда уҡ аңлап алды.

– Мин, Сафуан ҡустым, етем үҫтем. Йоҡларға ятһам да, йоҡонан уянһам да, етемлекте бала-сағаға күрһәтә күрмә, тип һорайым Хоҙайҙан, – тип башланы Ҡотлогилде, ауыр көрһөнөп, һәм үҙе тураһында Сафуанға бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе.

Уртаҡ яҙмыш Сафуандың да телен асты булһа кәрәк:

– Яҙмыш минең дә баштан һыйпаманы, Ҡотлогилде ағай. Мин атайымдың кем икәнен дә, хатта исемен дә белмәйем.

– Ә әсәйең бармы һуң?

– Бар ине, үлде. Әсәйем тәрбиәләп үҫтерҙе мине. Нужа күрһәтмәне. Иманын юлдаш итһен.

– Атайың тураһында һорашманыңмы ни?

– Һораштым, һорашмаған ҡайҙа ул, ағай. Атайың яҡшы кеше булды, тип кенә

яуап бирер, артыҡ асылып бармаҫ ине. Васыят итеп әйтәм: минең тыуып-үҫкән ауылыма барып төплән, бындағы кеүек кәмһетелмәҫһең, тиер ине әсәм.

– Ә ауылда кәмһетәләр инеме ни?

– Үҙемде, уйнаштан тыуған тип, әсәйемде ирһеҙ бала тапҡан тип кәмһетәләр ине. Тик, бөтә ауылдаштарын да яманлай был, тип уйлай күрмә, ағай.

– Киреһенсә, ҡыҙғаныу хистәрем менән уртаҡлашам ғына. Был донъяның кеме юҡ: сволочы ла, ҡәһәр һуҡҡаны ла бар.

– Бына шулай, Ҡотлогилде ағай, юҡ-юҡ тигәндә лә ғәйбәт ҡабатлана торҙо. Бөтәһенән дә кәм күренәһең. Ахырҙа тыуып-үҫкән ауылымды ташлап, ҡалаға китергә мәжбүр булдым. Был хәл характерымдың йомшаҡ яғы була торғандыр, бәлки. Ҡалаға килеп, заводҡа эшкә урынлаштым. Сиҙәм күтәреү башланғас, әсәйем тыуып-үҫкән ауылға ҡайтырға мөмкинселек тыуҙы. Фәрештәнең амин тигән сағына тура килгән булһа кәрәк – әсәйем мәрхүмәнең теләге ҡабул булды.

Сафуанды эҙләп унның йәшәгән өйөнә килеп ингән Ҡотлогилденең башына: «Шул ғәйбәт бында ла килеп етмәне микән?» – тигән уй килеп төштө. Илауҙан Фәниәнең күҙҙәре шәмәреп бөткән. Агроном ишек төбөндәге сумаҙанды күрһә лә, иғтибар итмәгән кеше булды. Көлдөксәлә ҡайнап торған самауырға ҡарап тора бирҙе лә:

– Йә, һылыу, табын йәйеп, самауырыңды ултырта һал да сәй әҙерлә, Сафуан менән беҙгә баҫыуға китергә ваҡыт, – тине, йылмайып.

Күңеленә хуш килгән йылы һүҙ кемгә килешмәй: Фәниә йүгереп йөрөп урындыҡҡа табын әҙерләп тә өлгөрҙө. Сафуан тәҙрә аша күренеп ҡалғас, Ҡотлогилде түргә сығып ултырҙы. Ул килеп ингәндә, Ҡотлогилде бисмилла итеп икмәккә тотона ине. Йылмайып Сафуанға ҡараны ла урындыҡ ситенән урын күрһәтте:

– Әйҙә, сәй эсә һалайыҡ та ҡуҙғалайыҡ.

Агрономдың ихлас йылмайып ҡарауы Сафуанды таң ҡалдырҙы, тегеһе үҙен шунда уҡ ҡулға алды һәм табын артына килеп ултырҙы.

– Рәхим итегеҙ! – Фәниә батмус уртаһындағы һауытты ҡунаҡ яғынараҡ шылдырҙы. – Былтырғы сейәле май.

– Әйҙә, сәй эсәйек тә ҡуҙғалайыҡ. – Ҡотлогилде сейәле майҙы Сафуан яғынараҡ шылдырып ҡуйҙы. – Тартынма, эшләгән кеүек аша.

Ашап-эсеп туйғас, Ҡотлогилденең хуш итеп, хужаларға рәхмәт әйтеүе булды, соланда биҙрәләр шалтырауы, эт саңҡылдаған тауыш, Сафуандың ҡәйнәһенең: «Бына һиңә, уйнаштан тыуған, тауыҡ ите, бына!» – тип сәүек этте тиргәгәне ишетелде. Сафуан үҙенең хатаһын шунда уҡ аңланы: йүгереп сығып, солан ишеген бикләй һалды ла Шәрифулла бабайҙың сәүеге Тузикты баҫтыра башланы. Тегеһе асыҡ ҡалған ишектән өйгә инде лә урындыҡ аҫтына ҡасты. Сафуан Тузикты ҡороҡ һалып тотто. Тоҡҡа һалып, ауыҙын йүкә менән бәйләне.

– Әллә ҡайҙан килеп эйәләште, уй... әй-й-й, ҡәһәр һуҡҡан, кетәккә инеп тауыҡ йомортҡаһын да ҡуймай. Аҫырға кәрәк уны, кейәү, аҫырға. Йә баҫыуға алып китеп аҙаштыр.

– Юҡ, ҡәйнәм, Әнүәр хәҙер мотоциклы менән МТС-ка китә. Мин был тоҡто уға тотторопебәрәм.

– Шулай ит, кейәү. Һиңә эшкә алып китергә тауыҡ бешергәйнем, ашаған да ҡуйған.

Агроном менән Сафуан баҫыу майҙанына ҡуҙғалғанда, сәғәт ун бер тирәһе ине. Юлға сыҡҡас, һүҙҙе Сафуан башланы.

– Ғәфү итә күр, Ҡотлогилде ағай, мин алйотто. Ҡәйнәмдең бөгөн иртәнсәк: «Ҡайҙан килеп эйәләште был уйнаштан тыуған беҙгә», – тип Тузикты әрләгән һүҙҙәрен үҙемә ҡабул иткәнмен. – Агроном менән баҫыуға китеп барған Сафуан

үҙенән-үҙе шарҡылдап көлдө лә: – Ярай әле, Ҡотлогилде ағай, һин бар донъяла. Һин булмаһаң, ни эшләр инем мин, – тине.

– Һәр кем донъяға тик ата-әсәнән яралып ҡына килә. Әгәр ҙә әсәйең баланы һинең атайыңдан түгел, икенсе берәүҙән тапҡан булһа, һин донъяға килә алыр инеңме?

– Килә алмаҫ инем. Балаға Сафуан тип исем ҡушһалар ҙа, ул бөтөнләй икенсе кеше булыр ине.

– Ниңә һин түгел, икенсе кеше?..

– Сөнки атанан килгән гендар бөтөнләй икенсе.

– Ә хәҙер бына ниндәй һорауға яуап бир, тә-әк... Ошо яҡты донъяны күргәненә үкенәһеңме, юҡмы?

– Бәй, яҡты донъя күргәнгә үкенәләр тиме ни?

– Тимәк, донъяға килгәнең өсөн әсәйең алдында ғына түгел, үҙеңә йән өргән атайың алдында ла бурыслыһың.

– Һеҙ әүлиә, Ҡотлогилде ағай. Үкенмәйем. Тик мине борсоған нәмә бар. Ниңә әсәйем миңә атайымдың кем булыуын, уның исемен әйтеүҙән дә баш тартҡан? Бәлки, мин әсәйемдең ниндәйҙер бер бөтөнләй таныш булмаған һәм исемен дә белмәгән кеше менән осраҡлы осрашыуы һөҙөмтәһендә донъяға килгәнмендер...

– Ирһеҙ бала тапҡан әсәләрҙе «яңғыҙ әсә», урыҫса «одинокая мать» тип йөрөтәләр хәҙер. Хатта дәүләт уларға пособие лә бирә. Минең аңлауымса, әсәйең бындай категорияға инмәй. Дәүер, осор тигән төшөнсәләр ҙә бар бит әле. Күрәһең, ваҡыты шулай булған. Атайың зымзыя юҡ булған. Ә әсәйең һинең киләсәгең тураһында уйлаған, шуға күрә атайыңдың кем булыуы тураһында әйтмәгән.

– Шуға күрә күптәр үҙҙәренең сығышын йәшерер өсөн ситкә олаға, Себергә, Урта Азияға сығып китә, тип әйтмәксеһеңме?

– Аңлай белә башланың булһа кәрәк. Тик бына бөгөнгө көүек төшөнкөлөккә бирелеп йөрөмә. Һинең кеүектәрҙән күренекле кешеләр сыға. Ике мәртәбә Советтар Союзы Геройы Алексей Федорович Федоров, мәҫәлән.

– Кем ул Федоров?

– Чернигов партизандар отрядтары берләшмәһе командиры, «Подпольный обком действует» тигән хәрби мемуарҙың авторы. Уның был китабын табып уҡы. Әйткәндәй, Федоров үҙенең ата-әсәһе тураһында ла, сығышы тураһында ла белмәй. Уны, яңы ғына тыуған баланы, приют тупһаһында ҡалдырып китәләр. Хәҙер һин, Сафуан, үҙеңде бер генә минутҡа булһа ла үҙ балаһын приют тупһаһына ҡалдырып киткән әсә һәм үҙеңдең әсәйең урынына ҡуйып ҡара. Ниндәй хистәр кисергән икән улар? Бала табып, уны юҡ иткән әсәләр ҙә бар бит. Нисек кенә булмаһын, Федоров та, һин дә яҡты донъя күргәнегеҙ һәм Ватанға, халыҡҡа тоғро булып ҡалғанығыҙ өсөн ата-әсәгеҙ алдында бурыслы. Федоров шуны онотмаған, һин дә онотма.

***

Көнбайыштан көнсығышҡа ҡарай ағылған аҡ болоттар араһынан ҡояш күренә бирә лә юғала, күренә бирә лә юғала. Ташҡоҙоҡҡа һыуға барған Фәниә агроном ҡатыны Фатиманы осратты.

– Әйҙә, апай, еләккә барайыҡ. Атайым кисә еләкле ергә тап булған, – тине Фәниә, биҙрәләренә һыу тултыра-тултыра.

– Йыраҡмы?

– Ҡайраҡлы ауылынан алыҫ түгел.

– Күрше ауыл аша барырғамы ни?

– Эйе. Алыҫ түгел, Фатима апай. Ҡурҡма, Рәйсә апайҙы ла алайыҡ. Бына ошо, – Фәниә Һаҡмар арьяғындағы тауға күрһәтте, – Ҡайраҡлы тауы итәгендә урынлашҡан ауылды урындағы  халыҡ Ҡайраҡлы тип йөрөтә, ә Башҡортостан картаһына  Түбәнге Ғәле тип яҙылған. Ә бына хәҙер беҙ йәшәгән Үрге Ғәле ауылын Аҡсура  тип тә атайҙар.

Ярты сәғәт үтеүгә өс ҡатын, биҙрәләр тотоп, ауылдың түбәнге осона ҡарай юл тотто. Борамташ ҡаяһы аҫтындағы кисеүҙе сыҡас, юл уңға борола һәм Ҡайраҡлы тауы итәгенән Һаҡмар буйлап Түбәнге Ғәле ауылына алып килә. Ауылды икегә бүлеп аҡҡан һәм Һаҡмарға ҡойған Ҡайраҡлы йылғаһы аша, аяҡтарын сылатмаҫ өсөн, еләкселәр таштан ташҡа баҫып сыҡтылар ҙа, тыҡрыҡтан уң яҡҡа боролоп, үргә артылдылар. Һул яҡтағы Сейәлетау итәгенән һалынған һәм заманса ремонт үткәрелеп, киңәйтелгән ауыл юлы баҫыуға алып бара. Сейәлетау менән Ҡайраҡлы тауын икегә бүлеп аҡҡан Ҡайраҡлы йылғаһы эре-эре ерек, муйыл ағастары менән ҡапланған. Һауаһы һалҡынса. Эсһәң, һыуы тешкә тейә. Уң яҡтағы Ҡайраҡлы тауында ҡайраҡ ташы сыға. Был таштан сар, ҡайраҡ эшләп, ауыл халҡы һатыу итә. Ҡайраҡ ташынан эшләнгән сарҙың даны күрше районДарға ғына түгел, күрше Силәбе, Ырымбур өлкәләренә лә таралған. Урындағы халыҡ мейесте лә ана шул ҡайраҡ ташынан һала. Тик был ҡиммәтле ташты һаҡлау һәм рациональ файҙаланыу ойошторолмаған. Ғөмүмән, хужалыҡта экологияға иғтибар юҡ. Йылдан-йыл дәүләткә тапшырыу планының артыуы, һарыҡ малының күбәйеүе экологияға ҙур зыян килтерә. Сөнки мал, бигерәк тә быҙау һәм бәрәстәр, организмға кәрәкле каротин матдәһенә бай булған ҡайһы бер ҡылған үләне төрҙәрен юҡҡа сығара. Хатта сейә ағасын, селектәрҙе бөтөрә.

– Әсәйем: «Элек йәйләүҙә ҡылған үләне араһында ялан сейәһе күп була торғайны,  тик, һабағы бәләкәй булғанға, ҡылған араһындағы сейә, эргәһенә еткәнсә, күренмәй торғайны», – тип һөйләр ине, – тип һүҙ башланы Фатима. – Ялан сейәһе тигеҙ урында үҫә. Ә тигеҙ урындар һөрөлөп бөттө, яландың сит-башында ҡалған сейәне һарыҡ ашап бөтөрҙө.

– Тимәк, һарыҡ малын бөтөрөргә кәрәк, – тине Рәйсә.

– Юҡ, ҡыҙҙар. Һүҙ һарыҡ малын бөтөрөү тураһында бармай. Хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһын тәбиғәт үҙе көйләй. Ә кеше уға тик булышлыҡ итергә тейеш, ти Ҡотлогилде ағайыгыҙ.

– Тимәк, тәбиғәткә тәрбиә кәрәк, тип әйтмәксе.

– Әлбиттә. Тик ул ғына етмәй, Фәниә. Юғалыу сигенә еткән хайуандарҙы, үҫемлектәрҙе «Ҡыҙыл китап»ҡа яҙып, һаҡларға кәрәк. Ә быны өсөн заповедниктар ойошторорға кәрәк.

–  Ялан сейәһе бөтә. Ә ниңәлер ер еләге бирешмәй, – тип тағы һүҙгә ҡушылды Рәйсә.

– Сәбәбе  ябай уның. Ер еләге – үлән үҫемлек, ә сейә – ағас үҫемлеге. Ә һарыҡ сейә тамырының өҫкө өлөшөнә тиклем ашай.

Юл башлап килгән Фәниә һулға бороЛдо ла урман эсенә ингән ҙур төпкөлгә күрһәтте.

– Күрәһегеҙме?

– Күрәбеҙ.

– Атайым осраған еләклек ана шунда. Ҡайраҡлылар уны Ҡара Сәпет төпкөлө тиҙәр.

Еләк осраштыра. Рәйсә, туҡтап, еләк тирә башланы. Фәниәнең: «Бушҡа ваҡыт уҙғарма», – тип Рәйсәне етәкләп алыуы булды, аяҡ аҫтынан тип әйтерлек сел көтөүе ҡалҡып осто. Ҡапыл ҡысҡырыуын Рәйсә үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Ә Фәниә,

Рәйсәнең ҡулын ысҡындыра һалып, фырлап осҡан селдәр артынан йүгерҙе. Ул барып еткәндә, селдәр тырам-тырағай килеп, төрләһө төрлө яҡҡа таралышҡайны инде. Фәниә бында туҡтап торманы, төпкөлдәге аҡланға ҡарай йүгерҙе. Ә барып еткәс, ҡул болғаны: йәнәһе, тиҙ булығыҙ. Түшәлеп ятҡан еләкте еләкселәр кемуҙарҙан йыя башланы.

– Еҫе аңҡый! – тип һоҡланды Рәйсә.

– Туп-тура алып килдең, – тип ҡыуанды Фатима.

– Мин бит үҙем Ҡайраҡлы ҡыҙы. Бөтә нәҫелебеҙ Ҡайраҡлынан. Шәжәрәбеҙ ҙә бар. Ырыуыбыҙ – Түңгәүер.

– Аҡсура ауылында йәшәйһең. Ә үҙең – Ҡайраҡлы ҡыҙы, – тине Рәйсә, аптырап.

– Һауын һыйырҙарҙы Ҡайраҡлынан Аҡсураға күсерҙеләр. Мал ҡараусы булған атайым да, һауынсы булған мин дә эшһеҙ тороп ҡалдыҡ. Аҡсураға күсергә мәжбүр булдыҡ, йәнәһе, агрогородокта йәшәйәсәкбеҙ. Ана шул эш булмағанға тарҡала Ҡайраҡлы. Биш-алты пенсионер ғына тороп ҡалды.

– Тимәк, перспективаһыҙ ауылдар исемлегенә индерелгән, – тине Фатима, еләк йыя-йыя.

Бына шулай һөйләшә-һөйләшә тирә торғас, еләкселәрҙең биҙрәләре лә тулды. Ахырҙа Фатима яулығына тирә башланы.

– Ә мин нимәгә тирәм инде? – Рәйсә аптыраште ҡалды.

– Булғанса булыр, – тип Фатима ла тиреүҙән туҡтаны.

Тулы биҙрәләрен яурындарына ултыртып, Фатима менән Рәйсә үҙҙәре килгән урман ҡырыйынан ҡайтырға ынтылды.

– Туҡтағыҙ әле, апаҡайҙарым, оло юлға туранан сығайыҡ.

– Туранан?

– Ана, күрәһегеҙме? – Фәниә үткән йылдан ҡалған һалам эҫкертенә күрһәтте. – Оло юлға бороу юлдан сыҡҡансы, үҙәк буйлап, ана шул эҫкерткә ҡарай сығабыҙ.

Еләкселәр үҙәккә килеп еткәс, эйәртенешеп, бөйҙәй сәскән баҫыу ҡырынан оло юлға атланы. Яҡынлаша башлағас, оло юлда һыйыр көтөүе күренде. Ҡысҡырышҡан тауыш ишетелә. Оло юлға сыҡһалар, үтерлек түгел. Баҡтиһәң, заготскот Орск комбинатына мал ҡыуа икән, мал ҡыуыусылар гөж килә. Унлаған һыбай мал ҡыуыусы дау ҡуптара.

– Заготскот малы – дәүләт малы.

– Ә ит комбинатына ҡыуылған дәүләт малын кире борорға хаҡығыҙ юҡ.

– Беләһең килһә, был – Орск комбинатына мал ҡыуа торған махсус юл.

– Мал игенгә төшмәгән. Яҡшылыҡ менән юлдан китегеҙ.

– Юғиһә, ЦК-ға яҙабыҙ.

– Һеҙҙең башбаштаҡлыҡ арҡаһында привесҡа килгән зыянды заготсбыт суд аша юллап аласаҡ!

Ахырҙа түҙемлеге бөткәндер:

– Ә түләмә эпидемияһы һөҙөмтәһендә килгән зыян һәм кешеләр ғүмере өҙөлгән өсөн кем яуап бирергә тейеш? – тип ҡыҙып китте Үрге Ғәле ауыл Советы рәйесе Әҙелмырҙа Ғәниев.

– Ә һин кем булаһың әле? Аллаһы Тәғәләнең ҡашҡа тәкәһе түгелһеңдер бит?

– Үрге һәм Түбәнге ауылдарҙа карантин. Был ауылдар аша үтеү ҡәтғи рәүештә тыйыла. Мин Үрге Ғәле персиҙәтеле Ғәниев булам. Кем һеҙҙә гуртоправ?

– Мин, – тигәс, командировка танытмаһы менән таныштырҙы тегенеһе.

– Ярҙам итеү урынына, ярҙан этәләр! – тип сыбыртҡыһы менән һелтәләнде мал ҡыуыусыларҙың береһе.

– Атайыңдың улы аҡылдан шашып бара түгелме, егет? – тип төрттөрҙө рәйес үҙенә. – Түләмә эпидемияһы ҡупты, түләмә! Мал түгел, кешеләр ҡырыласаҡ, алдан сара күрелмәһә.

– Бирермен мин һиңә ришәүәтте, – икенсегә һелтәнде малсы сыбыртҡыһы менән, «түләмә» төшөнсәһен яңылыш аңлап.

– Аңламаһаң, урыҫса аңлатам, ахмаҡ: сибирская язва, сибирская язва!

– 1922 йылда мал түгел, ярты ауыл ҡырылды, – тип һүҙгә ҡушылды ауыл Советы рәйесе менән бергә килгән ветеринария табибы.

– Үҙең теләһә ни эшлә, ә мин хәҙер үк кире ҡайтып китәм, – тине дау ҡуптарған мал ҡыуыусы хужаларына, йәнәһе, уның ыңғайына булып, үләһе килмәй.

– Ашыҡма, – тип туҡтатты уны гуртоправ тигәндәре һәм, – урау юлдан китеп булмаймы? – тип һаман ныҡышты.

– Китә бир, әйҙә, ана шул урау юлдан түләмәне бөтә Ырымбур өлкәһенә таратып, төрмәгә ултырам тиһәң.

– Улайһа, әйтегеҙ: мин ни эшләргә тейеш хәҙер?

– Малды заготскоттың Бараҡал бүлексәһенә ҡыуығыҙ, ҡалғанын начальство үҙе хәл итер.

– Әллә беҙҙе, еләкселәрҙе лә, заготскотҡа ҡыуаһығыҙ инде, Әҙелмырҙа ағай? Ни ары, ни бире түгел, – тине Фатима ауыл Советы рәйесенә, малсылар малдарын кире ҡыуа башлағас.

– Ә-ә-ә, – тип һуҙҙы рәйес «һеҙҙең турала онотоп торам» тигән мәғәнәлә. – Ҡайраҡлыға инеп тормайһығыҙ, Аралбай яғынан ҡайтығыҙ.

– Аҡыл етмәй, Әҙелмырҙа Ҡотлəхмәтович, – тине ветврач, карантин командаһы эшен бөтөрөп, ҡайтырға сыҡҡас.

– Нимәгә аҡыл етмәй?

– Орск комбинатына мал ҡыуыу юлы тап бына ошо түләмә эпидемияһы ҡубыу усағы аша үтә. Был трасса проектын төҙөгән белгес ниңә эпидемия проблемаһын иҫәпкә алмаған, ә сәйәси репрессия йылдарында имен ҡалған.

– Мин үҙем дә шуға аптырайым. Ә эпидемия ҡурҡынысынан ҡотолоу юлы бар. Үҙәк уға иғтибар итмәй, ә республика яғынан ныҡышмалы талап юҡ.

– Проблеманы хәл итеп буламы һуң?

– Тимер юллы берәй районда, әйтәйек, Сибай ҡалаһында, ит комбинаты төҙөү ҙә етә. Орск комбинатына сеймал етештереүсе булараҡ, республика күп аҡса юғалта.

Түләмә эпидемияһы ҡурҡынысына бәйле проблеманы ауыл Советы рәйесе Ғәниев, колхоз рәйесе Поваляев КПСС-тың район партконференцияһында, халыҡ депутаттарының район Советы сессияһында, ә һайлаусылар СССР, РСФСР, БАССР Юғары Советтарына депутатлыҡҡа кандидаттар алдында күтәреп сыҡты. Ләкин һайлаусыларҙың эпидемия ҡурҡынысынан Сибай ҡалаһында ит комбинаты төҙөү юлы менән ҡотолоу тураһындағы наказдары үтәлмәне. Эпидемия ҡурҡынысы ҡалды. Уның көтмәгәндә егерме икенсе йылдағы кеүек тоҡаныуы һәм күптәрҙең ғүмерен ҡыйыуы мөмкин, сөнки шул түләмә хәүефе янаған зона аша Орск комбинатына үткән трассанан әле булһа ла мал ҡыуалар. Ахырҙа, колхоз рәйесе Поваляев мәсьәләне, делегат булараҡ, партияның Башҡортостан өлкә комитеты конференцияһында күтәреп сыҡты һәм сығышын: «Был мәсьәләне Үҙәк алдында күпме күтәрергә мөмкин! Уның ыңғай хәл ителмәүе тик кемдеңдер ҡороҡҡослоҡ эше алып барыуы менән генә аңлатыла”, – тип тамамланы. Поваляев, әлбиттә, Сибай ҡалаһында ит комбинаты төҙөү проблемаһын күтәреп, ил, бигерәк тә Башҡортостан өсөн ике мәртәбә отошло проблеманы күтәрҙе. Беренсенән, түләмә эпидемияһы ҡурҡынысы тоҡаныу

сығанағы аша үткән мал ҡыуыу трассаһы юҡҡа сыға. Егерме икенсе йылда алтмыш-етмеш процент ауыл халҡының ғүмерен киҫкән эпидемия ҡабатланмаясаҡ. Икенсенән, Башҡортостан Ырымбур өлкәһенә сеймал сығарыусы регион булыуҙан туҡтай. Үҙ байлығы үҙендә ҡала. Дәүләт ҡаҙнаһына ла тос өлөш инә. Шулай ҙа делегат Поваляевтың сығышы бәхәс тыуҙырмайса ҡалманы. Ҡайһы бер делегаттар уны тәнҡитләп сығыш яһаны, йәнәһе, «короткослоҡ» төшөнсәһе «халыҡ дошманы» тигәнде аңлата. Икенселәре уны яҡлап сыҡты, тәнҡитте ҡыҫыу партия төҙөлөшөнөң демократик централизм принциптарын тупаҫ рәүештә боҙа, тип билдәләне. Ләкин, нисек кенә булмаһын, был принципты эҙмә-эҙ тормошҡа ашырыу мөмкин булманы, сөнки кемдең генә сығышына иғтибар итмә, ул, бер ҡалыпҡа һалынып, партия Үҙәк Комитетының Генераль секретарын маҡтауға ҡоролдо. Был яҙылмаған традициянан бер кем дә, хатта партконференцияға вәкил итеп ебәрелгән кеше лә, азат түгел.

Шулай ҙа партия Үҙәк Комитеты вәкиленең эшлекле сығышы партконференция делегаттарын ҡәнәғәтләндермәйенсә ҡала алманы:

– Үкенескә ҡаршы, биш йыллыҡ планға алынған ҡайһы бер төҙөлөштәр йә башланмайынса, йә, башланып та, тормошҡа ашмайынса ҡала. Теге йәки был төҙөлөшкә бүленгән аҡса Үҙәк тарафынан халыҡ-ара хәлдең ҡырҡыулашыуы һөҙөмтәһендә илдең оборона һәләтен көйләүгә бәйле кире ҡайтарылып алына. Бына республика тормошонан бер миҫал. Сибай – Юбилейная тимер юлын төҙөүгә бирелгән аҡса Башҡорт баҡыр-көкөрт комбинаты иҫәбенә күсерелә. Тимер юлы полотноһын төҙөү эштәре ҡыҙа. Көтөлмәгәндә был аҡсаны хөкүмәт комбинат иҫәбенән кире ҡайтарып алырға мәжбүр була. Ҙур күләмдә аҡса түгеп башланған был төҙөлөштө бөтөнләй ташларға ниндәй фактор мәжбүр итте беҙҙе? Яуап бар: көнбайыш илдәрҙең, беренсе сиратта – үҙ биләмәләрендә бер генә снаряд та, бер генә бомба ла төшөп ярылмаған Америка Ҡушма Штаттары. Сибай ит комбинаты төҙөү тураһындағы һайлаусылар наказы менән дә шулай булыуы мөмкин. Был актуаль проблема тураһында партияның Үҙәк Комитетына мин, һис шикһеҙ, еткерермен. Был мәсьәлә ыңғай хәл ителә алыр, тип ышандыра алам.

***

Быйыл ҡыш, көйһөҙләнеп, ҡаты килә. Күҙ аҫҡыһыҙ бурандар сығып, вағыраҡ йылғалар төбөнә тиклем туңып, шәре сығып, тирә-яҡҡа таралды. Кислород етешмәүе һөҙөмтәһендә балыҡтар тонсоға, мәкегә эркелә. Ау ҙа, ҡармаҡ та кәрәкмәй – сүмес менән һоҫ та ал. Был хәлдәргә экология хеҙмәте лә, урындағы власть органдары ла иғтибар итмәй, бер кем дә оран һалмай.

Сафуан менән Әнүәрҙең сиҙәмгә килеүҙәренә лә яҙ өс йыл тула. Әлегә ҡыш көйһөҙләнеүен дауам итә. Саҫҡау һыуыҡтар төшә, боҙҙар шартлап ярыла. Әйтерһең дә, төн урталарында туптан аталар. Сафуандың да, Әнүәрҙең дә бындай һалҡындарҙы күргәне юҡ. Ҡырҡ градус һыуыҡтарҙа тракторҙы тоҡандырыр өсөн ярты эш көнөң үтә лә китә. Етмәһә, ремонт ваҡыты етеп килә. Ҡырҙан мал аҙығы ташып өлгөрә алмайынса, көнөнөкөн көнөнә ташыған Сафуан менән Әнүәр, ахырҙа, тракторҙы бөтөнләй һүндермәйенсә, көндөҙ ҙә, төндә лә туҡтамай, ике смена эшләүгә күстеләр. Мал аҙығы ташыу февраль урталарына тамамланды. Тракторҙы график буйынса ремонтларға мөмкинлек тыуҙы. Егеттәр бер генә көн ял иттеләр ҙә тракторҙарын МТС-ка ҡыуҙылар.

– Ваҡытында килдегеҙ, молодцы, – ти ҡаршы алды уларҙы МТС-тың баш инженеры Михаил Фокюч һәм МТМ мөдиренә ремонт урыны күрһәтергә ҡушты.

Өс сезон ғына эшләгән яңы тракторҙы ремонттан үткәреүгә артыҡ күп ваҡыт талап ителмәне. Ремонт графикта күрһәтелгән срокка тамамланды, февраль аҙаҡтарына тракторсылар ҡайтып та төштөләр.

– Ана, күрәһеңме, Әнүәр, – Сафуан ҡапҡа төбөндә баҫып торған Рәйсәгә күрһәтте һәм тракторҙы уның алдына уҡ алып килеп туҡтатты. Йәнәһе, иптәшенең хәләл ефетенә ҡыҙыҡ яһай. Ләкин өшөп ҡалтыранған Рәйсәлә уның ҡайғыһы юҡ ине.

– Ниңә ҡаттың да ҡалдың, Рәйсә, әллә икенсене таптыңмы? – тип шаяртҡан булды Сафуан.

– Ни булды, Рәйсә? – Әнүәр, ҡатынын етәкләп бәләкәй ҡапҡаға ҡарай атлатмаҡсы булғайны, Рәйсәһе, уның алдына сығып, юлын бүлде һәм Әнүәрен ҡосаҡлап, күҙенә йәш алды.

– Ярамай, ҡосаҡлама.

– Ниңә?

– Быҙау менән бер һарыҡ бәрәсе түләмәнән үлде.

– Түләмәнән? – Ҡото осҡан Әнүәр артҡа сигенде.

– Ә беҙҙекеләр? – Сафуандың да ҡобараһы осто.

– Имен һеҙҙекеләр, Сафуан, имен, – тип яуап бирҙе өшөүҙән теше-тешкә теймәй ҡалтыранған Рәйсә.

– Әллә тағы ла карантин иғлан иттеләрме? – тип һорай һалды Әнүәр, Рәйсәнең өшөгән ҡулдарына өрә-өрә.

– Ителеүен ителмәне, Ҡотлогилде ағай менән бергә әле генә райондан комиссия килеп төштө. Әйҙә, киттек шунда.

– Ҡайҙа?

– Ҡотлогилде ағайҙарға.

Әнүәр менән Рәйсә килгәндә, йорт хужалары ашарға йыйына ине. Ҡунаҡтарҙы, түрҙә ултырған еренән төшөп, Ҡотлогилде ҡаршы алды.

– Әйҙүк! Һөйләмәй генә килгәнһегеҙ икән, – тине лә Ҡотлогилде Әнүәрҙе сисендерә башланы.

– Китсе, Рәйсәкәйем, дер ҡалтырайһың. Ни булды? – Фатима Рәйсәне сисендерҙе лә, уның быймаһына йәбешкән ҡарҙы ҡырып, ҡулдарын ыуырға тотондо.

– Үлгән быҙау менән бәрәстән түләмә эләктереп ҡуйыр, тип ҡурҡып, иртәнсәктән бире ҡапҡа төбөндә Әнүәрҙе көтөп торҙом.

– Ҡурмағыҙ. Ҡурҡырлыҡ бер ни ҙә юҡ. Ваҡ мал диспепсиянан үлә...

– Ә ниңә һеҙҙең быҙауҙар ҙа, бәрәстәр ҙә тере һуң? – тип төпсөндө Рәйсә, эҫе сәй эсә-эсә.

Ләкин уның был һорауына иғтибар итеүсе булманы.

– МТС-та уҡ ишеткәйнем инде мин колхозда ваҡ мал үләте тураһында, – тине Әнүәр. – Ә диспепсия тигәндәре нимәне аңлата һуң, Ҡотлогилде ағай?

– Сабыр ит, Әнүәр ҡусты. Ә һин, Рәйсә һеңлем, ҡурҡма. Түләмә эпидемияһы, карантин икән, тигән хәбәргә ышанма. Был беҙҙең колхоз территорияһында, – тип дауам итте Ҡотлогилде, – түләмә тоҡаныу ҡурҡынысы бар, әлбиттә. Тик йәй көндәрендә генә. Ә быҙауығыҙ менән бәрәсегеҙ бер йыллыҡ бойҙай менән борсаҡ ҡатыштырып сәселгән үләндән әҙерләнгән бесәндә мал организмы өсөн бик кәрәкле каротин матдәһе етешмәү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән диспепсия сиренән үлгән.

– Ә ниңә һеҙҙең бәрәстәрегеҙ ҙә, быуҙауҙарығыҙ ҙа үлмәй? – тип һорай һалды Рәйсә икенсегә.

– Хәтерендәме, Әнүәр ҡусты, ҡышҡылыҡҡа кесерткән, ағас япрағы әҙерләргә тура килә һинең менән миңә, мал организмы өсөн кәрәк каротин матдәһе бит, тигәйнем.

– Бер аҙ әҙерләгәйнем.
– Ашаттыңмы һуң малыңа?
– Ашатманым.
– Бәй, ниңә?
– Башҡалар ҙа ашатманы бит.
– Улар бесәнде үҙҙәренең күптән үк үҙләштерелгән һөрөүгә яраҡһыҙ булған сабынлыҡтарында әҙерләне. Һинең дә, минең дә тәбиғи сабынлыҡ юҡ.
– Ваҡ мал колхозда ла үләме? – Әнүәр төпсөнөүен дауам итте.
– Ни эшләп үлмәһен, сиҙәм үҙләштереү осоронда сабынлыҡтарҙы һөрөп бөтөргәс. Тәбиғи сабынлыҡтар колхоздарҙа ла аҙ ҡалды.
– Һинең менән мине һөрөргә мәжбүр иттеләр түгелме һуң? Үҙҙәре яуап бирһендәр.

Яуап бирер өсөн факттар етерлек, әлбиттә. Ләкин етәкселәр киләләр ҙә китәләр. Яруллин кеүектәре, хатта, үрләйҙәр. Ә етәксе ебәргән һәр бер хата проблемаларҙы бер-бар артлы тыуҙырып ҡына тора. Сиҙәм үҙләштереү һылтауы менән сабынлыҡтарҙы һәм көтөүлектәрҙе һөрөү малдың ҡырылыуына, сәсеү майҙандарының ҡыҫҡарыуына алып килде, сөнки ер әйләнешендә бер йыллыҡ үлән сәселгән майҙандар күбәйҙе. Ә бер йыллыҡ үләндәр сәсеү диспепсия сире таралыуға килтерҙе. Сөнки ҡылған үләне күпләп юҡҡа сыҡты. Экологияға ҙур зыян килде, 1974, 1975 йылдарҙа ике йыл рәттән ҡоролоҡ булды. Хужалыҡтар мал аҙығы итеп көнбайыштан һалам ташығанда, колорадо ҡуңыҙын алып ҡайтып таратты. Совет власы осоронда ебәрелгән хаталарҙы төҙәтеү эшен Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов: «Тәбиғәткә беҙ унан уйламайса тартып алғандарҙың барыһын да: йылғаларҙың, һауаның таҙалығын, болондарҙы, көтөүлектәрҙе кире ҡайтарырға кәрәк», – тигән девиз менән башланы һәм ярайһы уңышлы тормошҡа ашырҙы.

***

Осо-ҡырыйы күренмәгән дала. Пассажирҙар йөрөтөргә ҡулайлаштырылған ЗИС-5 маркалы автомобиль кеше аяғы баҫмаған ҡола яландан көньяҡҡа ҡарай юл тота. Ҡылғаны тапала башлаған был юл яңы һалынған, тигеҙләнеп тә өлгөрмәгән. Пассажирҙар араһынан берәү: «Широка страна моя родная», – тип йыр башлағайны, уға башҡалар ҡушылды. Бына шулай «Катюша», тағы бер нисә йыр башҡарылды. Шунан һуң тормош-көнкүреш тураһында һүҙ китте. Алдағыһын кем нисек күҙ алдына килтерә, шулай һөйләй.

– Күрәһегеҙме, ниндәй киңлек! Тракторыңа ултыр ҙа, ҡолас йәйеп, сиҙәм күтәр.
– Бураҙна һалмайынсамы?
– Башта барып урынлашайыҡ әле.
– Эйе, күҙ-баш алайыҡ, ә унан һуң күҙ күрер.
– Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, – мыйыҡ һәм бакенбарда ебәргән ирекәй горизонт һыҙығына күрһәтте. – Әллә инде һыбай кеше...
– Ҡамғаҡ, – тип төҙәтте уның менән ҡушлап ултырған сиҙәм күтәреүсе.
– Эйе, ҡамғаҡ, – уны тағы бер нисә кеше йөпләне.

Ҡамғаҡ, ел ыңғайына тәгәрәгән һымаҡ, яҡынлашҡандан-яҡынлаша барҙы һәм, һикерә-һикерә, машинаға бөтөнләй яҡынлашҡас, машина капоты аша һикереп, көнбайышҡа ҡарай китеп күҙҙән юғалды. Дала зонаһының үҙ тереклеге бар. Машина тәгәрмәсе аҫтынан тип әйтерлек сел өйөрө күтәрелеп оса ла сорлай-сорлай ҡылған араһына төшөп юғала. Мотор тауышын ишеткән байбаҡ йәки йомран артҡы аяҡтарына баҫа, әйтерһең дә, сиҙәм күтәреүселәрҙе ҡаршы

ала. Бына шулай баҫып ҡарап тора-тора ла өңөнә инеп юғала. Бер урында сайғаҡты сүл бүреләре ҡамаған. Ләкин һөжүм итергә ашыҡмайҙар. Ә тегенеһе, ҡайҙа китергә лә белмәй, бер урында тапана. Сүл бүреһе ынтылһа, сайғаҡ та уға ҡаршы ынтыла, төкөп йыҡмаҡсы итә. Бер сүл бүреһе сигенеүгә икенсеһе ынтыла. Сайғаҡ уның һөжүмен дә кире ҡаға. Уйын-көрәш шулай дауам итә, ләкин оҙаҡҡа бармай. Ҡамау түңәрәге бәләкәйләнгәндән-бәләкәйләнә. Ахырҙа сайғаҡҡа өйөр башлығы ташлана ла төкөмәксе булған сайғаҡты морононан эләктереп тә ала. Бөтә өйөр сайғаҡҡа бер юлы ябырыла. Һыйланыу башлана. Сайғаҡтың баш-тояғы ғына ятып ҡалған ергә бөркөттәр йыйыла. Был – дала тәбиғәтендә ғәҙәти күренеш.

– Ана, күрәһегеҙме? – Ут кеүек ерән сәсле сиҙәмсе ал яҡтан горизонт һыҙығына күрһәтте. – Ҡамғаҡ.

– Ҡамғаҡ түгел был, егеттәр, – тине Фазыл. – Ниндәйҙер ҡараҫҡы.

Ҡараҫҡы тигәндәре яҡынлашҡан һайын ҙурая барҙы һәм асыҡ күренә башланы: саман йорт булһа кәрәк. Бөтөнләй яҡынлашҡас, уның баҫыу станында ваҡытлыса йәшәү өсөн килтерелгән вагон булыуы асыҡланды. Сиҙәм күтәреүселәрҙе был оҙон вагондың арғы башындағы ишегенән килеп сыҡҡан урта йәштәрҙәге ир кеше ҡаршы алды һәм: «Сиҙәм» совхозы директоры Кукушкин булам», – тип ун биш сиҙәм күтәреүсенең бөтәһе менән күрешеп сыҡты. Кемдер түҙмәне:

– Совхоз йыраҡмы? – тигән һорауға Кукушкин:

– Магнитогорск комбинатын һәм ҡалаһын төҙөргә поездан төрлө профессия кешеләре килеп төшә. Уларҙы комбинат директоры ҡаршы ала. Пассажирҙар араһынан тормош тәжрибәһе аҙ булған бер йәш кеше: «Ҡала бынан алыҫмы?» – тип һорай. «Ике йыл», – тип яуап бирә директор. Ә һеҙҙең менән беҙгә ошо урында совхоздың үҙәк ҡасабаһын төҙөр өсөн өс-дүрт ай ваҡыт та етә, – тип яуап бирҙе. – Әйткәндәй, арағыҙҙа төҙөүселәр бармы?

– Бар.

– Ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ.

Бөгөнгө партиянан өс сиҙәмсе ҡул күтәрҙе.

– Яҡшы. Төҙөлөш эштәрен механизацияланған «Сиҙәм» тресы алып барасаҡ. Өсөгөҙ ҙә шул трест ҡарамағына күсерһегеҙ. Ә хәҙергә башҡалар менән бергә хужалыҡ эшенә тотонноғоҙ. Һорауҙар бармы?

– «Сиҙәм» тресы ҡайҙа урынлашҡан? – тип һораны төҙөүселәрҙең береһе.

– Ҡала тибындағы эшселәр ҡасабаһы буласаҡ, «Сиҙәм» тресы ла, район үҙәге лә ошо ҡасабала урынлашасаҡ.

– Хәҙер ошо вагонда йәшәрбеҙме? – тип һораны сиҙәмселәрҙең береһе.

– Юҡ, башта палаткаларҙа йәшәрбеҙ. Ашағандан һуң һеҙҙе эшкә минең хужалыҡ буйынса урынбаҫарым Солтанбаев ҡушыр. Матвеев!

– Ни бар, Федор Алексеевич? – Вагондың ишегенән ашнаҡсының башы күренде.

– Әҙерме?

– Әҙер.

– Халыҡты ашатығыҙ ҙа, эшкә тотонорҙар, – совхоз директоры Кукушкин Солтанбаевҡа бойорҙо ла, «Победа» машинаһына ултырып, тимер юлы станцияһына сиҙәм күтәреүселәрҙең икенсе партияһын ҡаршы алырға китте.

Тәүге партия менән килгән ике сиҙәмсенең тәүге ике көнө яңы ғына бысып алып килтерелгән таҡта, трансаларҙан ҙур ашнаҡ, ашау, йыуыныу урындары һәм бәҙрәф кеүек ваҡытлы көнкүреш объекттары төҙөү, йәшәү өсөн палаткалар ҡороу менән үтте. Оҙон урам формаһында һуҙылып ҡоролған палаткалар

һанына ҡарағанда, унар партия сиҙәмселәр килеүе көтөлә. Цистерна менән килтерелгән һыуҙы директор урынбаҫары һаҡлыҡ менән тотонорға ҡушты. Икенсе көндө тағы өс партия сиҙәм күтәреүсе килде, күбеһе – Калинин өлкәһенән.

Өсөнсө көндө механизаторҙар, төҙөүселәр совхоздың ауыл хужалығы машиналары буйынса инженеры Фазыл менән прораб Сидоров етәкселегендә Ҡорокүл станцияһынан тракторҙар, автомобилдәр, ауыл хужалығы машиналары һәм төҙөлөш, яғыулыҡ материалдары алырға киттеләр. Эш вагондарҙы бушатып, шул уҡ эшелон менән килгән машиналарға йөк тейәүҙән башланды. Техниканың һәм төҙөлөш материалдарының бер өлөшө, вагондарҙан бушатылып, платформаларға урынлаштырылды. Йөк тейәлгән автоколонна менән Фазыл етәкселек итә. Уларға «Сиҙәм» тресының беренсе күсмә колоннаһы ла ҡушылды. Тракторҙар, экскаваторҙар, бульдозерҙар үҙ йөрөшө менән барһа, кран һәм тағылма техника кеүек машиналар йөк машиналарына тейәлгән. Шул уҡ көндө совхоздың ауыл хужалығы машиналары паркы (МТМ) һәм автомобилдәр паркы (гараж) барлыҡҡа килде. Ә төҙөлөш тресы һәм уның беренсе механизацияланған күсмә колоннаһы совхоздың үҙәк усадьбаһынан айырым ергә урынлашты. Сиҙәм күтәреү ҙә, совхоздың үҙәк усадьбаһын төҙөү ҙә бер үк ваҡытта башланды.

...Тәүге бураҙна ярыу тантанаһында Ҡаҙағстан Коммунистар партияһының икенсе секретары Леонид Ильич Брежнев ҡатнашты һәм, беренсе булып Ҡаҙағстан ерендә сиҙәм күтәреү айҡанлы, «Сиҙәм» совхозы коллективын ҡотланы. Бөртөклө ашлыҡ етештереүҙе ҡырҡа арттырыу юлы менән аҙыҡ-түлек проблемаһын хәл иткән һәм илдең бойондороҡһоҙлоғон тәьмин иткән тарихи сиҙәм эпопеяһы ана шулай башланды. Был өлкәлә ситтән баҫым яһауға сик ҡуйылды.

Бөртөклө ашлыҡ етештереү проблемаһына килгәндә иһә, совхозда ер әйләнешенә ярашлы тейешле күләмдә ер һөрөлдө. Тәүге йылда был майҙандарҙа тик бойҙай ғына сәселде. Ә ер әйләнеше дүрт-биш йыл эсендә камиллаштырға тейеш. Төҙөлөш тресының 1-се күсмә колоннаһы оло эштәр йәйелдерҙе. Ураҡ башланыуға «Сиҙәм»дең үҙәк усадьбаһында төп урам үҫеп сыҡты. Машиналар ремонтлау мастерскойы, гараж, медпункт, ашхана, мәҙәниәт һарайы һ.б. объекттар һалыу башланды. Балалар йорто, мәктәп төҙөү планлаштырыла. Ә һыу башняһы совхоздың үҙәк усадьбаһын ер аҫты һыуы менән тәьмин итә башланы ла инде. Апрель айында ғына осо-ҡырыйы күренмәй ятҡан ҡырағай дала киңлегендә хәҙер бойҙай сәскән майҙан диңгеҙҙәй тулҡынлана. Был майҙандарҙың мул уңыш биреренә бер кем шикләнмәй. Юл төҙөүселәр ҙә ҡыҙыу эш башланы. Өс ай эсендә Ҡорокүл станцияһынан совхозға асфальт йәйелгән юл һалынды. Станцияға килгән һәм эшелондан крандар ярҙамында бушатылған СК-4 комбайндарын совхозға үҙ йөрөшө менән алып килеп тултырҙылар.

***

Сиҙәм эпопеяһы башланыуҙан алда илдә сағыштырмаса хеҙмәт етештереүсәнлеген ныҡ күтәргән үҙ йөрөшлө СК-3, СК-4 комбайндары сығарыла башланы. Был, әлбиттә, ваҡытына күрә ҙур һынылыш булды. Себеште көҙ һанайҙар, тигәндәй, сиҙәм үҙләштереү ата-бабаларҙан ҡалған айырым рәүештә урып-һуғыу технологияһын аяҡҡа баҫтырмайынса башланды. Сөнки бер юлы урып-һуғыу технологияһына өҫтөнлөк бирелә, һөҙөмтәлә бөртөклө ашлыҡ етештергән ауыл хужалығы предприятиелары булған колхоз һәм совхоздар түгел, дәүләт үҙе лә ҙур юғалтыуҙар кисерә ине: бер юлы урып-һуғыу ысулы менән йыйып алынған ашлыҡ тигеҙ өлгөрмәү сәбәпле, ырҙын табаҡтарына килгәс, ҡыҙа ла

яныып юҡҡа сыға башлай. Айырым рәүештә урып-һуғыу технологияһынан өҫтөн ҡуйылған бер юлы урып-һуғыу технологияһы берҙән-бер прогрессив алым тип танылa һәм киң ҡулланыла. Хатта был алымды маҡтап таҡмаҡ сығарылған:

*Һәр комбайн ике эште*
*Тик бер юлы башҡара:*
*Урып-һуҡҡанъа бер юлы,*
*Артыҡ эштән ҡотҡара.*

Ата-бабаларыбыҙға килгәндә иһә, башта улар ашлыҡты ҡул урағы менән урғандар ҙа көлтә бәйләгәндәр. Ямғырлы көндәрҙә зыян килмәһен өсөн өс-дүрт көлтәне баҫтырып ҡуялар ҙа, уларҙы, тағы бер көлтә алып, өҫтөн ҡаплап ҡуялар. Көлтәләр күп булһа (ә улар бигерәк тә ялсы тотҡан байҙарҙа күп булған), уларҙы эҫкерткә һалғандар. Ә инде аҙ булһа, әүенгә тултырғандар. Ашлыҡ юғалыуға юл ҡуйылмаған. Һуғаһы ғына ҡалған. Ә көҙгө ямғырҙар ваҡытында һуғып өлгөрмәһәң, ҡыш булғас та һуға алаһың. Комбайндар ярҙамында ашлыҡ йыйыу башланғансы ла, коллектив хужалыҡтар булған колхоз һәм совхоздарҙа көлтәләр бәйләү, уларҙы эҫкертләү ысулы, дөрөҫөрәге, ашлыҡты айырым рәүештә урып-һуғыу технологияһы ҡулланылды. Эҫкертләнгән көлтәләрҙе молотилка (ашлыҡ һуға торған машина) ярҙамында һуҡҡандар. Веялка һәм треер кеүек ҡул көсө ярҙамында эшләгән машиналар менән таҙартып, ашлыҡ һаҡлай торған бураларға тултырғандар. Ә комбайндар ярҙамында айырым рәүештә урып-һуғыу технологияһы бөтөнләй икенсе төрлө. Ә көлтәләр бәйләү һәм эҫкертләүҙең бөтөнләй кәрәге юҡ. Махсус урғыстар (жаткалар) ярҙамында ашлыҡты комбайндар урып, яҫмаларға һала. Ә яҫмаларҙы ҡамылда ятып кипкәс кенә йыйып һуға. Ата-бабаларҙан ҡалған ашлыҡты айырым рәүештә урып-һуғыу технологияһы техника йәғни комбайндар ярҙамында ана шулай аяҡҡа баҫа. Ашлыҡтың юғалыуына сик ҡуйылмай. Климат шарттарына ярашлы, бер юлы урып һуғыу технологияһы ла киң ҡулланыла.

Күренеүенсә, сиҙәм проблемаһын күтәреп сыҡҡан ил ағалары (беренсе сиратта – Н.С. Хрущев) ата-бабаларҙан ҡалған ашлыҡты айырым рәүештә, икегә бүлеп урып һуғыу ысулын аяҡҡа баҫтырыу тураһында башта уйламаған. Һөҙөмтәлә уңыштың дүрттән бер өлөшө юҡҡа сыҡҡан тәүге йылда. Былдай юғалтыуҙарға сик ҡуйырға кәрәк. Хрущев элеваторҙарға тар тимер юлы һуҙыу идеяһын бирә. Юғалтыуҙарға кәртә ҡуйыу инициативаһын урындағылар башлай. Сөнки сиҙәм үҙләштергән дала киңлектәрендә элеваторҙар юҡ. Булһа ла, бик аҙ һәм үтә алыҫ. Һөнәре буйынса ауыл хужалығы институтын тамамлаған инженер, ә вазифаһы буйынса Ҡаҙағстан далаларында төҙөлгән «Сиҙәм» совхозының ауыл хужалығы машиналары инженеры булып эшләгән башҡорт Фазыл иһә Хрущевтың был төҙөлмәгән элеваторҙарға тар тимер юлы үткәреү идеяһын нәүбәттәге авантюра тип иҫәпләй. Ул башта практик эш башҡара. Һуңынан Ҡаҙағстандан Башҡортостанға ҡайтып, үҙе тамамлаған Башҡортостан ауыл хужалығы институтында диссертация яҡлай. Ә уның был практикумы түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала. Башта ул кустарь ысул менән лафетҡа беркетелгән урғыс конструкциялай. Тәү осорҙа ашлыҡты, ошо конструкцияны тағып, «Беларусь» тракторы урып, яҫмаларға һала. Кипкән яҫмаларҙы комбайндар йыйып һуға. Һуңынан Фазыл комбайндар өсөн урғыс (жатка) һәм йыйғыс (подборщик) конструкциялай. Башта комбайн, урғыс тағып, ашлыҡты урып, яҫмаларға һалып сыға. Һуңынан кипкән яҫмаларҙы йыйғыс ярҙамында йыйып һуға. Шулай итеп, Хрущевтың ҡиммәткә төшәсәк элеваторҙарға тар колеялы тимер юлы

һуҙыу идеяһы юҡҡа сыға. Фазыл менән совхоз директоры Кукушкин araһындағы конфликт та тәүгеһе файҙаһына хәл ителә.

Фазылдың рационализаторлыҡ эшмәкәрлеге киң ҡолас йәйә. Комбайн заводтарының конструкторҙар бюролары ла ситтә ҡалмай. Был заводтар комбайндар өсөн айырым урғыстар, йыйғыстар сығарыуҙы конвейер буйынса башҡара башланы. Яңылыҡ булған рационализаторлыҡҡа һынау үткәрмәйенсә лә булмай. Һынауҙы совхоз комбайнерҙары ҡатнашлығында алдынғы механизатор Воробьев рационализатор Фазыл файҙаһына уңышлы үткәрҙе. Башта Хрущевтың элеваторҙарға тар тимер юлы үткәреү идеяһы яҡлы совхоз директоры Кукушкин отолдо. Үткер һүҙле, ерән сәсле Ермаков кемгәлер төрттөргә әҙер тора. Хәҙер ҙә шулай булды. Кукушкин менән һынау үткәргән Воробьевҡа:

– Кәкүк турғай ояһына йомортҡа һалып өлгөрмәне, – тип әйтеүе булды, шарҡылдап көлгән тауыш бөтә даланы яңғыратты. Кукушкин – кәкүк, ә Воробьев – турғай, йәнәһе. Ә Ермаковтың көлөүҙән хатта күҙ йәштәре атылып сыҡты. Башҡалар Ермаковтың үҙенән көлә. Сөнки ул артында баҫып торған совхоз директоры Кукушкинды күрмәй. Кемеһелер Ермаковтың ҡабырғаһына төрттө, тегеһе артына боролоп ҡараны ла көлөүҙән туҡтаны. Директор алдында уңайһыҙланып китте. Үҙ хатаһын асыҡтан-асыҡ таныуға күнеккән һәм кенә ҡыумаған совхоз директоры уңайһыҙ хәленән Ермаковты үҙе ҡотҡарҙы.

– Был арыҫландар барҙа турғай ояһына йомортҡа һалып була тиме ни, – тип Ермаковтың арҡаһынан тапап һөйҙө.

Шул саҡ самолет тауышы ишетелде. Самолет бер мәртәбә әйләнде лә һаламы йыйылып, эҫкерткә һалынған майҙанға кәйелеп төштө.

– Брежневтың кукурузнигы, – тип йәнләнеп китте телһеҙ ҡалған Ермаков.

Был юлы Леонид Ильич «Сиҙәм» совхозы эшсәндәре менән Ҡаҙағстан Коммунистар партияһының беренсе секретары вазифаһын башҡарыусы булараҡ осрашты. Осрашыу төшкө аш ваҡытына тура килде. Беренсе секретарь һаулыҡ һорашып сыҡҡас, совхоз директоры Кукушкин уға совхоз эшсәндәре ашынан ауыҙ итергә тәҡдим яһаны. Тегеһе баш тартманы:

– Эйе, тамаҡ ялғамай булмаҫ.

– Бына ошонан ултырығыҙ, – Кукушкин ергә түшәлгән брезенттан урын күрһәтте.

– Мин совхоз үҙәген күрҙем. Мәҙәниәт һарайы ла, китапхана ла, мунса ла, медпункт та – бөтәһе лә бар, иптәштәр. Тағы ла нимә етмәй? – тип һораны Леонид Ильич ашағандан һуң әңгәмә үткәргәндә.

– Медпункт бар, тик медик юҡ, – тине арттан берәү.

Уға башҡалар ҡушылды.

– Дөрөҫөрәге, бар ине.

– Нисек... бар ине? – Леонид Ильич аңлап етмәне...

– Китте лә юҡ булды...

– Бик яҡшы ғына эшләй башлағайны. Минсылыу Манаджанова тигән ҡыҙыҡай.

Брежнев башын совхоз директоры яғына борҙо.

– Фатир бирмәнегеҙме ни?

– Фатиры бар. Өсәр бүлмәнән торған ике фатирлы йортто бөтөнләй бирҙек. Бер яғы медпункт, икенсе яғында үҙе йәшәй. Ҡышлаҡтан ата-әсәһен дә күсереп алмаҡсы ине.

– Манаджанова – урындағы ышаныслы кадр, тигәйнегеҙ, Динмөхәмәд Әхмәтович, үткән килгәндә, – тип һораны Брежнев үҙе менән бергә килгән Ҡаҙағстан ССР-ы Министрҙар Советы Рәйесе Ҡунаевтан.

– Бынан туҡһан километр алыҫлыҡтағы ҡышлаҡтан атаһы килеп, алып ҡайтып китте, – тип яуап бирҙе Ҡунаев урынына совхоз директоры Кукушкин.
– Бына бит нисек, Динмөхәмәд Әхмәтович, ышаныслы тигән кадрығыҙ...
– Ниңә? – тип екеренде Ҡунаев совхоз директорына.
– Кем бела?
– Ана, Данилов белә, – тип Викторға күрһәтте Ермаков.
– Иптәш Кукушкиндан һорайым мин, һеҙҙән түгел. – Ҡунаев Ермаковҡа асыуланды.
– Витя, дөрөҫөн генә әйт тә ҡуй инде, – тип тағы бер комбайнер һүҙгә ҡушылды.
– Эйе, дөрөҫөн генә әйт тә ҡуй. Ниңә ҡурҡып тораһың? – Ермаков төрткөләп Викторҙы уртаға сығарҙы.
– Эш ниҙә, иптәш Данилов? – Тегеһе оялыуынан башын эйеп, өндәшмәгәс, Леонид Ильич уны ҡултыҡлап ситкә алып китте. – Минсылыуҙы атаһы ниңә алып китте? – тип һораны эштең ниҙә икәнен аңлаған Брежнев.
– Минсылыу менән өйләнешергә булғайныҡ, атаһы фатиха бирмәне, ҡыҙын алып ҡайтты ла китте. – Данилов Леонид Ильичҡа дөрөҫөн һөйләп бирергә мәжбүр булды.
– Ярай, Витя, Минсылыуыңды көт, – тине лә Брежнев, Ҡунаевты эйәртеп, самолетына ҡарай атланы.
Иртәгәһенә Минсылыуҙы атаһы «Сиҙәм» ҡасабаһына алып килде. Ә Виктор Данилов район үҙәк дауаханаһынан сығыу менән Минсылыуға өйләнде.

***

Бесән әҙерләү ҡыҙған. Арыш өлгөрә, ярауайҙар баш ҡоса. Колхоз яҡшы уңыш көтә. Аҙна – ун көндән ураҡҡа төшөргә мөмкин. Яңы ғына КПСС район комитетының беренсе секретары итеп һайланған Яруллин ыҫпай ғына кейенеп, хатта атлауын да үҙгәртеп, галстугын төҙәтә-төҙәтә колхоз идараһына килеп инде. Һаулыҡ һорашты. Һәр береһенә ҡул биреп күрешеп сыҡты. «Т» формаһында төкәштереп ултыртылған өҫтәл янындағы төпкө ултырғысты шылдыра биреп ултырҙы. Өҫтәлгә папкаһын, ике ҡулын һалғас, башын колхоз рәйесе Трофим Поваляев яғына борҙо.
– Эштәр нисек?
– Бесән әҙерләйбеҙ, силос һалабыҙ, мал торлаҡтарын ҡышҡылыҡҡа әҙерләйбеҙ, – тип теҙҙе колхоз рәйесе.
– Яҡшы. Ярауайҙарҙы яҫмаларға һала башларға ваҡыт.
– Көтөргә кәрәк, Фуат Усманович.
– Көтөргә-ә-ә!? – тип екерҙе беренсе секретарь, етди төҫ алып. – Күпме көтөргә?
– Ун – ун биш көн.
– Ниңә, ниңә? – Кәүҙәһен Яруллин колхоздың партия ойошмаһы секретары Баянов яғына борҙо.
– Шулай кәрәк. – Баянов та колхоз рәйесенең фекерен ҡабатланы.
– Әллә һүҙ ҡуйыштығыҙмы һеҙ? – «Беренсе» берсә колхоз рәйесенә, берсә партойошма секретарына асыулы ҡараш ташланы.
– Юҡ, һүҙ ҡуйышманыҡ, – тип ҡыҙарып-бүртенеп яуап бирҙе был юлы колхоз рәйесе.
– Урырға ашлыҡ өлгөрмәгән әле, Фуат Усманович. Көлкөгә ҡалмайыҡ, көтәйек, – тине Баянов, Яруллин фекерен үҙгәртер, тигән уй менән.
– Бына нисек-к! – Яруллин һикереп торҙо ла, ишекте шап ябып, сығып китте.
Рәйес менән секретарь уны оҙатырға сыҡҡайны, «Беренсе» уларға әйләнеп тә

ҡараманы, машинаһына ултыра һалып, колхоздың икенсе бригадаһына ҡарай юл тотто. Күрәһең, хужалыҡ етәкселәре менән иҫәпләшмәйенсә, бригадир Усачевты, баҫым яһап, ураҡҡа төшөрмәксе. Әйткәндәй, Усачев уның Ленинград фронтында бергә һуғышта ҡатнашҡан полкташы бит.

– Үҙ һүҙле, тыңларға ла теләмәй, – тип баш сайҡап  ҡалды колхоз рәйесе Поваляев саң борҡотоп ҡуҙғалып киткән машина артынан.

– Аҡылынан шашып бара. Ҡарап тор, һейҙегеңде һарғайта ул, Трофим, һинең, – тине ахырҙа аптыраған Баянов.

Бер-ике сәғәт үттеме-юҡмы, Усачев шылтыратты:

– Килеп ет, Баянов.

– Пожар сыҡмағандыр бит, ни булды, Александр Иосипович?

– Ураҡҡа төштөк. Бойҙай сәселгән майҙанды яҫмаларға һала башланыҡ.

– Ул ниндәй ураҡҡа төшөү, ти.

– Телефондан һөйләшә торған һүҙ түгел, – бригадир телефон трубкаһын һалып та ҡуйҙы.

Эштең ниҙә икәнен Баянов шунда уҡ аңланы һәм бригадаға үҙе шылтыратты. Ә унан:

– Усачев баҫыуға китте, – тип яуап бирҙеләр.

– Ҡара һин уны, тәки һүҙен һүҙ иткән, ахмаҡ, – Яруллинды тиргәй-тиргәй Баянов өсөнсө бригадаға китте.

Усачевты машинаһына ултыртып алғас,  Олоһаҙ яғындағы комбайндар урған ике йөҙ илле гектар бойҙай сәскән майҙанға елдерҙе. Улар килгәндә, ете метр киңлегендәге урғыс таҡҡан ике комбайн был майҙанды ике мәртәбә  урап, унун ике тонна самаһы ашлыҡты юҡҡа сығарғайны инде. Сөнки майҙанды уратып дүрт яҫма һалынып та өлгөргән.

– Кем ҡушты һиңә был майҙанды урырға? – тип асыуланды колхоздың партойошма секретары.

– Райком... Яруллин иптәш үҙе, – тип тотлоға-тотлоға яуап бирҙе бригадир.

Комбайнер Хажғәлиев, партойошма секретары машинаһы торған тәңгәлгә еткәс, комбайнын туҡтата һалып, һикереп төштө лә яҫманан бер шәлкем йәшел массаны услап алып, Баяновтың танау аҫтына уҡ килтереп һелтәй башланы.

– Аҡылдан шаштығыҙмы әллә, өлгөрмәгән ашлыҡ урҙыраһығыҙ...

– Беҙ түгел, Усачев менән һеҙ аҡылдан шашҡанһығыҙ. Һеҙ бит районның беренсе секретары кеүек урман ҡырҡыусы балаһы түгел, крәҫтиән балаһы. Ураҡ башларға иртә, тип аңлаттың да, – вәссәләм.

– Аңлатырһың аңлатмай ҙа. Йә ураһың, йә партбилетыңды сығарып һалаһың, тиһә.

– Һин, аҫылынып үл, тиһә лә, риза булырһыңмы?

– Ә хәҙер беҙ ни эшләргә тейеш? – тип ыуаланды икенсе агрегат комбайнеры Харламов.

– Ни эшләргә, ни эшләргә? – тип ирештерҙе асыҡ ауыҙҙарҙы партойошма секретары. – Комбайндарҙы ауылға ҡыуырға ла кире әҙерлек һыҙығына ҡуйырға! Ҡасан ураҡҡа төшөргә колхоз етәкселәре хәл итә. Бында эҙегеҙ булмаһын.

Әйтһәң, әҙәм ышанмаҫ: беренсе секретарь ниңә, етәксе ҡулы аҫтында эшләгән кешеләрҙән тыш, өйрәтергә тейеш? Белмәгәнен һораһа ла ғәйеп түгел. Сөнки бөтәһен дә бер генә етәксе лә белеп бөтә алмай. Эш ниҙә һуң?  Урмансы ғаиләһендә тәрбиәләнгән Яруллиндың тормош юлы урман хужалығына бәйле. Леспромхозда партком секретары булып эшләй. ВЛКСМ-дың райком секретары була, партия мәктәбен тамамлағас, райкомдың беренсе секретары итеп аграр секторға ебәрелә. Хәҙер үҙенә артыҡ ныҡ ышанған, үҙ һүҙле был чиновниктың

ауыл хужалығы эшсәндәре алдында гел: «Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә мул уңыш үҫтереп, дәүләт наградаларына лайыҡ булайыҡ. Хәйбулла районы игенселәренән беҙ кәмме ни?» – тип йыш сығыш яһауына ҡарағанда, тәү сиратта үҙен күҙ уңында тота торғандыр беренсе секретарь. Аграр сектор проблемаларына бағышланған китаптар, брошюралар унын өҫтәл китабына әйләнде, йәнәһе, белемен үҙаллы камиллаштыра. Өҫтәлендә ятҡан «Ашлыҡты айырым рәүештә урып-һуғыу технологияһы» тигән брошюра ята. Ә был брошюрала былай тип әйтелә: «Бөртөклө ашлыҡ унын емгә тулыу (молочно-восковая спелость) стадияһында урылып, яҫмаларға һалына. Ә яҫмалар ятып, бөртөклө ашлығы бөтөнләй өлгөргәс һәм кипкәс кенә йыйып һуғыла». Әйткәндәй, был юлдарҙың аҫтына беренсе секретарь ҡыҙыл  ҡәләм менән һыҙып ҡуйған. Мәғәнәһен бөтөнләй аңламаған, сөнки емгә тулыу төшөнсәһен ем ала башлау (һөт кеүек шыйыҡ аҡ матдә) менән бутаған. Йәнәһе, ашлыҡты урып яҫмаларға һалыр өсөн йәшел башаҡты семетеп ҡарау ҙа етә. Башаҡтан аҡ шыйыҡса сәселдеме, тот та ур һәм яҫмаларға һала башла. Күрәһең, урман ҡырҡыусы ғаиләһендә тыуып-үҫкән беренсе секретарь ашлыҡты йыйып, дәүләт бураларына һалыуҙы ағас ҡырҡып, шпателдәргә һалыу менән бер күргән. Башҡаса аңлатыу мөмкин түгел.

Был хәлдән һуң ике аҙна уҙа. Ураҡ етә. Беренсе секретарь килеп төшә. Үҙе урырға ҡушҡан майҙандағы яҫмаларҙы йыйып сенажға оҙатҡандарын күргәндер. Тик был хатаһы уға һабаҡ булмаған: «Урырға, урырға!» тип команда биреүҙән башҡаны белмәй. Колхоз буйынса сәсеү майҙандарының утыҙ проценты урылып, яҫмаларға һалына. Урыу менән яҫмаларҙы йыйып һуғыу араһында ҙур өҙөклөк барлыҡҡа килә. Өҫтәүенә, климат тотороҡһоҙлана. Бер-ике көн аяҙ торһа, иртәгәһенә ямғыр яуа. Яҫмаларҙа ашлыҡ аҫтан шыта. Ә комбайндарҙан ырҙын табағына килгәс, ҡыҙа һәм яна башлай, шытып тамыр йәйгән тупраҡлы ашлыҡ, бер мискә балды бер ҡалаҡ дегет бысратҡан кеүек, ҡоро ашлыҡты боҙа. Енәйәтсел хатаһын беренсе секретарь тик колхоздың ике ырҙын табағында ашлыҡ бөтөнләй яна башлағанын күргәс кенә аңлай. Сөнки биш йөҙ тонна ашлыҡ янып, юҡҡа сыҡты. Терһәкте тешләп булмай. Яуап биреүҙән ҡурҡҡан беренсе секретарь, күшеккән тауыҡ кеүек, колхозға ҡабат тик бер аҙна үткәс кенә килеп төштө. Күҙ-башы шешенгән, күрәһең, йоҡлай алмаған.

– Ырҙын табаҡтарындағы ҡыҙа башлаған ашлыҡты әйтәм дә, – тип башланы ул һүҙен, сөнки, «янып юҡҡа сыҡҡан ашлыҡты» тип дөрөҫөн әйтергә теле бармай, – ни эшләтәбеҙ, егеттәр?

– Белмәйем, – тине ахырҙа оҙаҡ өндәшмәй ултырған колхоз рәйесе Трофим Поваляев.

– Шул ҡыҙған бойҙайҙы силос соҡорона һалып, мал аҙығы итеп иҫәпкә алһаҡ... ә?

– Шунан башҡа сара юҡ, – тип ризалашты яуаплылыҡты уртаҡлашыуҙан ҡурҡҡан колхоз рәйесе.

– Ә һин ниңә өндәшмәйһең? – Яруллин башын Баянов яғына борҙо.

– Мал ашамаһа, нисек иҫәптән сығарырбыҙ?

– Тимәк, һин ҡаршы?

– Улайһа, кукуруз ҡатыштырып һалайыҡ, – тине ул, мәсьәләне аңлы рәүештә провокацион характерға ҡуйып. Йәнәһе, һөнәре буйынса уҡытыусы булған Баянов бер ни ҙә аңламай.

– Ярамай! – Яруллин да, Поваляев та бер тауыштан ҡаршы сыҡты, сөнки янған бойҙай менән бергә кукуруздың да юҡҡа сығырын икеһе лә аңлай ине.

Биш йөҙ тонна ашлыҡ – биш йөҙ центнер түгел, ҡурҡыу түгел ҡурҡырһың, башыңдан һыйпамаҫтар. Шул уҡ Баянов та башыңды ашар. Бурҙың бүрке яна,

тигәндәй, быны Яруллин да, Поваляев та һиҙенә: яуаплылыҡтан ҡотолам тиһәң, йә Баяновты үҙ яғыңа ауҙараһың, йә... «Шулай ҙа ете мәртәбә үлсә, бер ҡат киҫ, тигәндәй, уйлап эш итергә кәрәк», – тип уйлай Яруллин. Бер яҡтан ҡараһаң, Баяновтан һаҡ булыу фарыз. Икенсе яҡтан ҡараһаң, Баянов, бәлки, колхоздың партия ойошмаһы секретары булараҡ, яуап биреүҙән ситтә тороп ҡала алмауын аңлар. Ни тиһәң дә, таяҡтың йыуан осо колхоз етәкселәренә эләгә. Шуға күрә Яруллин Баянов менән уртаҡ тел табыуҙы ла күҙ уңында тота. Нисек кенә булмаһын, ул Баяновты күҙ уңынан ысҡындырманы. Һәр аҙымын күҙәтеү аҫтына алды. Хатта Мәскәүгә барыр өсөн, туристик бюроға барып, путевка юллап йөрөүе тураһында ла белде.

Баянов иһә, намыҫына тоғро ҡалды, яуап биреүҙән ҡурҡманы. Райкомдың беренсе секретары Яруллиндың башбаштаҡлығы һөҙөмтәһендә янып юҡҡа сыҡҡан биш йөҙ тонна бойҙай тураһында партияның Башҡортостан өлкә комитеты беренсе секретары М.З. Шакировҡа хәбәр итте. Ә колхоз рәйесе Поваляев хатҡа ҡул ҡуйыуҙан баш тартты. Ләкин енәйәт эше тикшереүһеҙ ҡалды. Хатҡа яуап та килмәне. Күп тә үтмәй, колхоздың идара бинаһы янып көлгә әйләнде, хужалыҡтың килеме һәм сығымдары тураһындағы документацияһы юҡ ителде. Тик енәйәт эҙен бөтөнләй юҡҡа сығарыу һис тә мөмкин түгел. Силос траншеяһына һалынған һәм силос тип иҫәпкә алынған, ә ҡыш сыҡҡас, «малға ашатылды» тип иҫәптән сығарылған биш йөҙ тонна серемтәгә әйләнгән бойҙай әле булһа ла ер аҫтында ята.

Яруллиндың енәйәтсел башбаштаҡлығының осона сығыуҙы маҡсат иткән Баянов үҙенең отпуск ваҡытын партияның Үҙәк Комитетына барыр өсөн файҙаланмаҡсы. Уға баш ҡалаға барғас йәшәр урын хәстәрлеген дә күрергә кәрәк була. Ә йәшәр урын алыр өсөн баш ҡалаға туристик путевка менән барыу уңайлы. Сибай ҡалаһының туристик бюроһында Баяновҡа:

– Коломна ҡалаһындағы базаға илле туристик путевка бар, тик айырым путевкалар һатылмай. Берәй хеҙмәт коллективына тулайым ғына һата алабыҙ, – тип яуап бирәләр.

Баяновҡа баш ҡалаға туристик путевкаһыҙ барыуҙан башҡа сара ҡалмай. Яруллинға отпускыға сығарыуын һорап ғариза яҙа. Тегеһе һорауын бер һүҙһеҙ ҡәнәғәтләндерә. Тиҙҙән «бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйған юлына» тигәндәй, быға партия район комитетының дөйөм бүлеге мөдире шылтырата:

– Леспромхоз беҙгә, райкомдың профсоюз ойошмаһына, Коломна ҡалаһы туристик базаһына бер путевка бүлде, алаһығыҙмы? Алмаһағыҙ, иптәш Баянов, икенсе кешегә бирәбеҙ.

– Алам. Ҡасан килергә?

– Бөгөн үк килеп етегеҙ. Иртәгә иртәнге еттелә леспромхоз автобусы китә. Путевка оҙатып барыусы ҡулында.

***

Леспромхоздан килгән туристар автобустан төшөп, перронға сыҡҡанда, пассажирҙар вагондар янында йыйыла башлағайны инде. Леспромхоз туристары ла үҙҙәре өсөн махсус рәүештә алдан уҡ бронь  һалынған илле урын плацкартлы вагон янына килеп теҙелде. Магнитогорск – Мәскәү поезына ултырыу иғлан ителә. Туристарҙы проводница уларҙың башлыҡтары менән берлектә, паспорттарын тикшереп, вагонға индерә. Ун биш – егерме минут үтеүгә, поезд ҡуҙғала. Санитар зонаһын үтә. Ашау ваҡыты етә. Ҡул йыуырға китешләй Баянов вагондың һуңғы секцияһына күҙ һалды. Өс урын буш. Автобуста Баянов менән йәнәш ултырып килгән күҙлекле турист үҙен урман белгесе тип

таныштырғайны, япа-яңғыҙы ултыра. Тәҙрә аша тәбиғәткә күҙ һалған да уйға батҡан, янынан үткән Баяновҡа иғтибар ҙа итмәне. Был ни ғәләмәт: илле турист урынына илле бер турист булып киткән! Сибай ҡалаһы туристик бюроһында Баяновҡа бөтөнләй икенсе төрлө аңлатып биргәйнеләр түгелме һуң? Был һорау Баяновҡа тынғы бирмәне. Сөнки был хәл уның обкомдың беренсе секретары М.З. Шакировҡа яҙған хатына бәйле булыуы бик ихтимал кеүек. Ни тиһәң дә, хатта күрһәтелгән хайран ҡалырлыҡ факттың тикшерелмәүе, хатта яуап та булмауы сәйер. Уйланды-уйланды ла Баянов, илле туристик путевкаға тағы бер путевка өҫтәлеүен белмәмешкә һалышты. Сөнки был турала төпсөнөү ҡулындағы уйын кәрттәрен асып күрһәтеү менән бер. Әйткәндәй, ул үҙенә-үҙе ышанмай, туристар һанын ашау урындарында ла иҫәпләй. Шул уҡ һан. Илле бер турист. Тик һирәк-һаяҡ ике кеше кәм сыға. Шуға күрә Баянов ҡайтҡанса һаҡ булырға тырышты һәм яңылышманы.

Магнитогорск – Мәскәү пассажирҙар поезы Ҡазан вокзалына инеп туҡтаны. Туристарҙы махсус автобус көтә. Махсус ашханала ашатҡас, уларҙы баш ҡаланан йөҙ километр алыҫлыҡта урынлашҡан Коломналағы туристик базаға алып килеп, ун дүрт ҡатлы туристар ҡунаҡханаһына урынлаштырҙылар. Туристар башлыса экскурсияға баш ҡалаға йөрөнө. Нәүбәттәге экскурсиянан ҡайтып киләләр. Юлда шоферҙың иғтибарын бүлергә ярамай. Шулай ҙа, был тәртипте боҙоп, Баянов шофер янына килде:

– Миңә Загорск ҡалаһына барған көндө Мәскәүҙә төшөп ҡалырға ине.

– Ҡайһы туҡталышта ҡалдырырға һуң?

– Ҡайҙа ҡалдырырға үҙегеҙ ҡарағыҙ инде. Мин бит Мәскәүҙе йүнләп белмәйем.

– Ярай, улайһа. Тимәк, һеҙ Мәскәүҙә тәүге тапҡыр...

– Юҡ, икенсегә. Тәү килгәндә баш ҡаланың «Турист» ҡунаҡханаһына урынлаштырғайнылар.

– Шулай икән дә, – тине лә автобус шоферы, Баяновҡа КПСС Үҙәк Комитетына нисек барырға өйрәтте.

Иртәгәһенә – тағы ла баш ҡалаға экускурсия. Программа буйынса туристар автобус янына йыйылған. Кисә өйрәткән маршрутын шофер хәҙер Баяновҡа пассажирҙар алдында юлға сығырҙан алда һәм Коломна ҡалаһына әйләнеп ҡайтҡас та аңлата. Ә Загорск ҡалаһына юлға сығырҙан алда дүртенсе мәртәбә иҫкәртә. Бер үк нәмәне пассажирҙар алдында бер түгел, дүрт мәртәбә сәйнәп ҡаптырыу Баяновҡа йәшерен код һымаҡ күренде: һаҡ бул!..

Бына шулай Загорскиға экскурсия көнө лә килеп етте. Мәскәүгә килеп ингәс, Баянов трассала автотранспорт хәрәкәтен күҙәтер өсөн алға, шофер янына уҡ килеп баҫты, сөнки арттан күренмәй. Машиналар туҡтауһыҙ йөрөп тора. Араһынан бесәй үтерлек тә түгел. Шулай ҙа светофор көйләүе арҡаһында автотранспорт хәрәкәте араһында билдәле бер ваҡытта өҙөк барлыҡҡа килә, тимәк, ер аҫтынан сығыу урыны аша бармайынса ла трасса аша өҫтән үтеп була.

Баяновтың автобус туҡталышында төшөп ҡалыуы булды, уны ер аҫтына төшөү урынында күҙәтеп торған кеше йәшен тиҙлегендә туп-туп итеп аҫҡа төшөп тә китте. Йәнәһе, ҡайҙан төшөргә лә белмәй аптыраған кешегә юл күрһәтә. Шул арала, хәрәкәттә барлыҡҡа килгән интервалдан файҙаланып, Баянов трассаның икенсе яғына йүгереп сыҡты ла артына боролоп ҡараны. Ер аҫтынан килеп сыҡҡан күҙәтеүселәрҙең юлын автотранспорт хәрәкәте өҙҙө. Юл яңылыштырыр өсөн, Баянов ташландыҡ майҙан аша үткән берҙәм юлдан китмәне. Һул яҡта төҙөлөш менән булған төҙөүселәр араһына инеп юғалды. Эҙәрләүселәр өс кеше булған икән – берҙәм юлдан автобус туҡталышына ҡарай йүгерҙеләр. Төҙөүселәрҙең береһе,

прораб булһа кәрәк, хәлен һөйләп биргән Баяновты метроның «Ждановская» станцияһына үҙ машинаһы менән илтеп ҡуйҙы.

Артабан Баянов, автобус шоферы өйрәтеүенсә, метро поезына ултырҙы ла «Ногинская» станцияһында төшөп ҡалды һәм партияның Үҙәк Комитеты бинаһына ҡарай юл тотто. Фасад яғынан Үҙәк Комитет бинаһына инеү урыны күренмәй. Баянов бинаның икенсе яғына сыҡты. Милиция подполковнигынан башҡа бер кем дә күренмәй. Бинаға инер өсөн күрһәткес юҡ. Баянов улай ҙа, былай ҙа ҡаранды. Ахырҙа милиция подполковнигына мөрәжәғәт итте.

– Әйтегеҙ әле, зинһар, ҡайҙан инергә?

– Ана ишек. – Подполковник ҡабул итеү бүлмәһе ишегенә күрһәтте.

– Рәхмәт, – тип Баянов ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына ҡабул итеү бүлмәһенә инде. Бүлмә яртылаш ҡараңғы. Бер аҙ аптырап ҡарап торған ҡунаҡ бәләкәй тәҙрәнең ҡапҡасы асылыуын күреп ҡалды.

– Миңә Үҙәк Комитеттың ойоштороу бүлеге мөдиренә инәһе ине, – тине Баянов һәм партбилетын сығарып күрһәтте.

– Ана, күрәһегеҙме? – Ҡабул итеү бүлмәһендә ултырған ҡатын стенаға эленгән ҡағыҙға күрһәтте.

– Күрәм, күрәм.

– Шунда күрһәтелгән телефон номерына шылтыратығыҙ.

– Телефон ҡайҙа?

– Телефон юҡ.

– Ә ҡайҙан шылтыратып булыр икән?

– Ҡайҙан теләйһегеҙ, шунан шылтырата алаһығыҙ.

Ҡабат төпсөнөүҙән файҙа булмағас, Үҙәк Комитеттың (!) ҡабул итеү бүлмәһендә телефон булмауына аптыраған Баянов сығып китте. Ул тағы ла теге милиция подполковнигына тап булды.

– Зинһар, әйтегеҙ, Үҙәк Комитетҡа ҡайҙан шылтыратып була?

– Метроның «Ногинская» станцияһына төшөп, шылтырата алаһығыҙ.

Телефондар станцияла күп, әлбиттә. Шуныһы ғәжәп: уларҙы ҡулланған бер генә кеше лә күренмәй. Баянов үҙенә кәрәкле номерҙы йыйҙы. Ләкин бик насар ишетелә. Башта ул партия Үҙәк Комитетының ойоштороу эштәре һәм кадрҙар сәйәсәте бүлеге мөдирен үҙе менән таныштырҙы һәм һуңынан партияның Үҙәк Комитетына килеү маҡсатын аңлатыуға күсте.

– «Үҙгәртеп ҡороуҙарҙы тәүге партия ойошмаларынан башларға һәм партия комитеттарының эшен түбәндән юғарыға тиклем үҙгәртеп ҡороу менән тамамларға», тигән тәҡдим менән килгәйнем, мине ҡабул итә алһағыҙ...

– Һеҙ был мәсьәлә буйынса Башҡортостан өлкә комитетына мөрәжәғәт итегеҙ, – тип партия төҙөлөшө мәсьәләһенә күсеп китмәҫме теге. – Обкомдың беренсе секретары, эй-йе, Хәбибуллин һеҙҙә.

– КПСС ағзаһы партияның Үҙәк Комитетына тиклем мөрәжәғәт итергә хоҡуҡлы, тип әйтелә түгелме һуң Уставта?!

Үҙәк Комитет чиновнигы (фамилияһы Трифоновмы, Трифиловмы – мосафир асыҡ ишетмәне) субординацияға һылтанды.

Баянов, бүлек мөдире ҡабул итмәгәс, алдан уҡ яҙып әҙерләгән тәҡдимен ҡабул итеү бүлмәһендә ҡалдырҙы. Баянов фекеренсә, үҙгәртеп ҡороуҙарҙы партияның үҙенән башларға кәрәк. Сөнки партия мәктәбен тамамлаған Яруллин кеүек кадрҙар партия төҙөлөшөн генә яҡшы белә, иҡтисадта насар йөҙәләр. Үтәлеште контролдә тотоу артыҡ власть ҡулланыуға алып килеп, зыян ғына килтерә. Партия номенклатураһы хужалыҡ тармаҡтары менән етәкселек иткән

белгестәр менән иҫәпләшмәй, баҫым яһай, үҙ ихтыярын көсләп таға. СССР Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары З.Н. Нуриев КПСС-тың Генеральный секретары Л.И. Брежневҡа: «Ит, һөт кеүек башҡа ауыл хужалығы продукттарына бер аҙ бүлеп һатыу хаҡын арттырайыҡ, Леонид Ильич», – ти һәм быныӊ дәүләт өсөн дә, һатып алыусыныӊ үҙе өсөн дә отошло булыуын иҫбат итә. Хужалыҡтыӊ аграр секторын йомшаҡ белгән Генеральный секретарь күнмәй. Ниӊә, йәнәһе, яһалма рәүештә халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙырырға? Етештереү процесы түбән төшә һәм үҙен аҡламай башлай түгелме һуӊ?

Партия комитеттарында Баянов кеүектәр бар, әлбиттә, тик улар бик һирәк. Етмәһә, етәкселек итергә, эште ойошторорға уларға Яруллин кеүектәр ирек бирмәй. Үҙ ҡарашын көсләп таға һәм зыян ғына килтерә ундайҙар. Ялағайлыҡ сәскә ата. Бына хатында Баянов килтергән бер нисә миҫал. Райкомдыӊ беренсе секретары Яруллиндыӊ ғүмере партия номенклатураһында үтә. Карьераһы комсомол райкомыныӊ беренсе секретары булып леспромхозда башлана. Белемен камиллаштырыу партия мәктәбендә белем алыу менән бәйле. Партияныӊ райком комитеттарында бүлек мөдире, рудник парткомы секретары, райкомдыӊ өсөнсө, икенсе, һуӊынан беренсе секретары. Рудник коммунистарыныӊ отчет-һайлау йыйылышында отчет доклады менән сығыш яһай. Алтын табыу планыныӊ үтәлешенә лә туҡтала. План, йәнәһе, тулайым үтәлә, тик алтындыӊ үҙҡимммәте буйынса үтәлмәй. Продукцияныӊ үҙ ҡиммәте түбән булыу уныӊ арзанға төшөүен аӊлата түгелме һуӊ? Көлкөгә ҡалған һәм абруйын бөтөнләй юғалтҡан Яруллин райкомға барып: «Мин бит хужалыҡтыӊ сәнәғәт тармағын белмәйем, үҙем яҡшы белгән аграр секторға партком секретары итеп ебәрегеҙ», – тип талап ҡуя, гүйә, ашлыҡтыӊ, иттеӊ, һөттөӊ үҙҡиммәте булмай. Күрәһеӊ, райкомда ла Яруллиндыӊ үҙе кеүек тупаҫ кешеләр йыйылған, продукцияныӊ үҙҡиммәте нимә икәнен дә белмәгән кешене совхоз директоры итеп ебәрәләр. Аграр секторҙы «яҡшы белгән» совхоз директоры бында ла көлкөгә ҡала. Һарыҡ фермаһына килгән дә совхоздыӊ баш зоотехнигынан:

– Был ниндәй группа? – тип һорай.

– Маткалар (*инә һарыҡ – **авт.***), – тип яуап бирә тегеһе.

– Маткалар яһалма рәүештә тороҡторолғандармы?

– Әлбиттә.

– Ә был ниндәй группа? – тип һорай әлеге директор, күберәк йөн етештереү өсөн махсус рәүештә бестерелгән тәкәләр төркөмөнә күрһәтеп.

– Валухтар (*бестерелгән тәкә – **авт.***)

– Яһалма рәүештә тороҡторолғандармы? Ниӊә көләһегеҙ?

– Тәртипһеҙ, һөрт маӊҡаӊды, – тине баш зоотехник яуап биреү урынына, һарыҡ көтөүсеһе Вәхиттеӊ көлөүҙән танауынан сосолоп сыҡҡан маӊҡаһына күрһәтеп. Совхоз директоры Вәхиткә ҡарап үҙе лә көлдө, – йәнәһе, бындай хәл кем менән булмай.

Баянов фекеренсә, Яруллин кеүектәрҙеӊ тормош юлы шуны күрһәтә. Тик ҡағыҙҙа ғына демократик централизм принциптарына ҡоролған КПСС ана шулай эстән серей башлаған, ахырҙа юҡҡа сыҡҡан. Был юлы Рәсәйҙә революция ла, Граждандар һуғышы ла булманы. Ижтимағи-иҡтисади формацияларҙыӊ, дөрөҫөрәге социализмдыӊ капитализм менән алышыныуы сағыштырмаса тыныс юл менән тормошҡа ашты. Советтар Союзы эстән тарҡалды. Етмеш йылдан һуӊ социаль проблемаларҙы хәл итергә һәләтле капиталистик үҫеш юлына баҫҡан Рәсәй Советтар Союзы Париждағы халыҡ-ара валюта фондынан алған бурыс менән бер үҙе иҫәпләште. Башҡа БДС илдәре ҡатнашманы. Башта,

әлбиттә, Баянов үткәндәргә кире ҡайтыу яҡлы була. КПРФ-ҡа ағза булып инә. Башҡортостан Коммунистар партияһының беренсе съезында делегат булараҡ ҡатнаша. Ошо уҡ съезда КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетының элекке беренсе секретары М. З. Шакиров менән осраша һәм:

– Миҙхәт Закирович, бынан егерме йыл самаһы элек район комитетының беренсе секретары Яруллиндың башбаштаҡлығы һөҙөмтәһендә биш йөҙ мең тонна бойҙайҙың янып юҡҡа сығыуы тураһында һеҙҙең исемгә хат яҙғайным. Шул хат һеҙгә ээләктеме? – тип таныштыра Баянов үҙе менән.

– Юҡ, иптәш Баянов. Үкенескә ҡаршы, минең ҡулға ла, Семен Михайлович (*обкомдың икенсе секретары Веселов –* ***авт.***) ҡулына ла эләкмәне. Тимәк, һеҙҙең хат Яруллин ҡулына эләккән йәки обкомдың ойоштороу бүлегенән үтмәгән. Башҡаса аңлатыу һис тә мөмкин түгел.

– Мин дә шундай һығымтаға килдем, Миҙхәт Закирович.

– Тимәк, мин Яруллин кандидатураһын райкомдың беренсе секретары итеп тәҡдим иткән ойоштороу бүлегенә артыҡ ышанғанмын, – тип Миҙхәт Закирович үҙ алдына һөйләнде.

– Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да билдәле була, тип бушҡа ғына әйтмәй торғандарҙыр.

– Шулай булып сыға. Эх, ваҡытында белгән булһам-м-м! Беләһегеҙме, һеҙ Магнитогорск – Мәскәү поезы вагонында илле кеше урынына илле бер кеше китеп барғанһығыҙ түгелме?

– Эйе. Мин үҙемдең леспромхоз профсоюз ойошмаһы иҫәбенә илле беренсе турист булып туристик путевкаһыҙ китеп барыуымды тик Магнитогорск – Мәскәү поезына ултырғас, китеп барышлай ғына аңланым. Беләһегеҙме, Яруллин бер нәмәне иҫәпкә алмаған.

– Конкретно нимәне?

– Хатаһын тик туристик путевкалар бүленеп бөткәндән һуң ғына аңлаған. Ә кемделер ҡалдырып, уның урынына мине оҙатыу – үҙенде үҙең фаш итеү менән бер. Шау-шыу ҡуптармаҫ өсөн, икенсе төрлө юл табырға кәрәк була, һәм ул таба ла. Поезға билет һатып алырға ла мине илле турист менән бергә баш ҡаланың Коломна ҡалаһында урынлашҡан турбазаһына оҙатаһы, ә барып еткәс, өҫтәмә туристик путевка һатып алаһы ғына ҡала. Сөнки мин партияның Үҙәк Комитетына барып етергә тейеш түгел. – Баянов Яруллиндың афераһы нисек тормошҡа ашмай ҡалыуы тураһында баштан-аяҡ һөйләп биргәс, М.З. Шакиров:

– Хәҙер миңә, иптәш Баянов, бөтәһе лә аңлашыла, – тине һәм пленумда Яруллиндың һөйләгән телмәрен иҫләне.

Ошоғаса М.З. Шакировты гел маҡтап сығыш яһаған Яруллин был пленумда, йөҙ ҙә һикһән градусҡа боролоп, бына нимә ти:

– Мине Миҙхәт Закирович күңеленә ятмаған райком секретарҙары категорияһына индереп ҡарай торғайны...

Яруллиндың матбуғатта донъя күргән был сығышын Баянов яҡшы хәтерләй. Был сығыш та, М.З. Шакировты яманлаған башҡа сығыштар ҙа, шулай уҡ дөйөм алғанда пленум да партия төҙөлөшөнөң төп демократик централизм принцибына тап килмәй. Күрәһең, тап килеүе мөмкин дә түгелдер. Ғәмәлдә тормошҡа ашманы ла, ашмаҫ та. Сөнки централизм ғына бар. Ә демократияның эҙе лә юҡ. Батып барған кешене батырыу демократияһы ғына бар. Сөнки элек М.З. Шакировты аяҡ өҫтө баҫып алҡышлаған ялағайҙар хәҙер уны тик яманлап сығыш яһаны. Әйтерһең дә, уның ыңғай яҡтары бөтөнләй булмаған. Ялағайлыҡ ана шулай сәскә ата... Уны бөгөнгө пленум асыҡ күрһәтте. Был ил, партия тормошонда

булған күренеште уҡытыусы булараҡ уҡыусыларына хәҡиҡәткә, намыҫына тоғро булырға өйрәткән Баяновҡа, әлбиттә, еңел түгел, сөнки үҙенә ышанған кеүек ышанып кергән партияһы эстән серей. Етмәһә, протекционизм көслө. Ҡулды ҡул йыуа. Биш йөҙ мең тонна ашлыҡты юҡҡа сығарған, ахырҙа обком аппаратына үрләгән Яруллинды хоҡуҡ һаҡлау органдары булған прокуратура, милиция, халыҡ суды, белә тороп, яуапҡа тарттыра алманы. Сөнки совет суды органдарының партия комитеттары ҡарарҙарын аппеляцияларға бөтөнләй хоҡуғы булманы. Партия ағзаһын тик партия комитеттары партиянан сығарған хәлдә генә яуапҡа тарттыра ала ине судтар. Булмаһа – юҡ.

– Һеҙ, партноменклатура, догмаға нигеҙләнгән ҡоролош системаһы, тип әйтмәксеһегеҙме, иптәш Баянов? – тип һораны М.З. Шакиров, уның фекерен тыңлап бөткәс.

– Эйе. Һыу тирмәне ташы кеүек әйләнде лә әйләнде. Ахырҙа партия эстән сереп юҡҡа сыҡты. СССР тарҡалды. Аңлауымса, беҙ Чеховтың Белаковы кеүек, берәй хәүефле хәл тыумаһа ярар ине, тип ҡурҡып йәшәнек. Сөнки халыҡ-ара хәлдең торошо тормошобоҙға, йәшәйешебеҙгә кире йоғонто яһауын күрмәнек. Уның ҡайһы йүнәлештә үҫешен күҙәтмәнек. Көнкүрешебеҙ насарая башлаһа, ғәйепте тик ил етәкселәренә ауҙарҙыҡ. Ә Америка кеүек ҡайһы бер көнбайыш илдәренең баҫымы аҫтында тыуған ауырлыҡтарға баһа бирә белмәнек һәм шул баһанан сығып һығымта яһай алманыҡ.

***

Горбачевтың «тиҙләтеү» (ускорение), «үҙгәртеп ҡороу» (перестройка) тип аталған буталсыҡ идеяһы менән янған Баяновтың Мәскәүҙә юлы уңманы. Үҙәк Комитет бинаһынан сыҡҡас, ул Ҡыҙыл майҙанға килде. Үҙәк универмагҡа инеп, ғаиләһенә бүләктәр һатып алды. Яҙыу-һыҙыу, биҙәү кәрәк-яраҡтарын Пушкин урамындағы махсус магазиндан барып алды ла, Ҡазан вокзалына килеп, Мәскәү – Коломна поезына ултырҙы. Ул туристик базаға килгәндә леспромхоз туристары Загорск ҡалаһынан ҡайтҡандар, ял итеп, ашханаға төшкәйнеләр. Пакетында биш-алты комплект һүрәт трафареты күргәс, Баяновты уратып алдылар. Талаш китте:

– Ни хаҡ? Береһен миңә һат.

– Миңә лә...

Бына шулай трафареттарын алды ла бөттөләр. Ярай әле, һуңғыһын үҙе тотоп өлгөрҙө. Дефицит – Совет власы осорондағы типик күренеш. Космос караптары төҙөп, йыһанға осабыҙ. Көнкүреш кәрәк-яраҡтары етештереү өсөн тотолаһы аҡса ҡорал етештереүгә сарыфлана. Сөнки көнбайыш илдәр, беренсе сиратта Америка баҫымы һөҙөмтәһендә, ауыҙыбыҙҙан өҙөп ҡоралланырға мәжбүр булабыҙ. Күр, туристарҙың береһе киоскыларҙа һатылған теш пасталары тултырылған тюбиктарға, икенселәре таҫтамалға ташлана. Баянов та унлап таҫтамал һәм тюбик һатып алды.

Загорск ҡалаһына экскурсиянан һуң Баянов һаҡлыҡ сараһы күрергә булды һәм коллективтан айырылманы. Ҡайтыр ваҡыт та етте. Леспромхоз туристарын автобус шул уҡ Ҡазан вокзалына алып килде. Уларҙы шул уҡ Мәскәү – Магнитогорск поезы көтә. Шул уҡ илле бер туристы теүәлләп, вагонға ултырталар. Илле дүрт урынлы вагонда өс плацкарт буш. Баянов шул уҡ илле урынлы вагондың уңдағы шул һуңғы секцияһына эләкте. Баяновтың поезға ултырырҙан алда киосктан һатып алған «Огонек» журналының тәүге битен асыуы булды, тирләп-бешеп ир менән ҡатын килеп инде. Ирҙең ике ҡулында ике ҙур сумаҙан,

яурынына тулы туристик рюкзак аҫҡан. Ҡатындың ҡулында ла ике ҙур төргәк.

– Все это харчи, – тине ир, ҡулъяулығы менән маңлай тирен һөртә-һөртә, сумаҙанын иҙәнгә ҡуйып, рюкзагын өҫкө полкаға урынлаштырғас.

«Харчи» һүҙен ишеткән Баянов эштең ниҙә икәнен шунда уҡ аңланы: илдә ниндәй муллыҡ! Мәскәүгә килгән сит ил ҡунаҡтары күрһендәр, йәнәһе. Аҙыҡ-түлек проблемаһы хәл ителгән, имеш. Ғәмәлдә Мәскәүгә аҙыҡ-түлек периферияңан ағыла. Әйтәйек, колбасаның ниндәй генә төрө юҡ! Ә был аҙыҡ-түлектән, Мәскәү халҡына ҡарағанда, башлыса илдең көнбайыш өлкәләрендәге халыҡ күберәк файҙалана. Ә перифериала, бигерәк тә Волганың һул яғында, көнсығышта, ит етештергән Сибай ҡалаһы магазиндарында – ҡалдыҡ-боҫтоҡтан етештерелгән колбаса, уныһы ла әллә ниҙә бер пәйҙә була. Ә май йән башына өс йөҙ грамдан тик исемлек буйынса ғына бирелә, айына бер генә тапҡыр уныһы ла.

Иртәгә ҡайтаһы көндө Баянов, бер-ике килограмм һыйыр ите һатып алмаҡсы булып, Коломна ҡала сауҙа комплексына инде.

– Һыйыр ите төштән алда ғына була. Теләйһегеҙ икән, сусҡа йәки өйрәк ите алығыҙ, – тип яуап бирҙеләр.

– Улайһа, бер өйрәк үлсәгеҙ.

Һатыусының ит һаҡлаған витрина ҡапҡасын асыуы булды – һаҫыҡ еҫ танауына килеп тә бәрелде. Баянов та, һатыусы үҙе лә витринанан ситкә тайпылды.

– Фу-у-у! Был боҙолған итте ҡайҙа итәһегеҙ инде? – тип һорарға ла өлгөрмәне, эш халаты кейгән ике ир килеп тә етте.

– Зверинецҡа ебәрәһе өйрәк ите ошомо?

– Ошо. Алып китегеҙ. Ә һеҙ, – һатыусы Баянов яғына бороддо, – иртәгә төштән алда килегеҙ.

Бына шулай, Баянов уйланып ултырған арала (ә поезд санитар зонанан үткәйне инде) ир менән ҡатын туалетҡа инеп, йыуынып сыҡтылар ҙа табын әҙерләргә тотондолар. Өҫтәлгә бер ярты ла килеп ҡунды. Юғары сортлы колбаса еҫе танау тишектәрен ҡытыҡлай. Яртыға тотонған ир Баяновҡа өҫтәл янына шылып ултырырға урын күрһәтте.

– Рәхим итегеҙ.

– Юҡ-юҡ, рәхмәт. Поезға ашатып алып килделәр, беҙ бит – туристар.

– Бәй, Федя, ниңә ҡунаҡты өҫтәл янына саҡырмайһың? – тип шелтәләне ирен проводницаны эйәртеп ингән ҡатын. Үҙе өс буш стакан тотҡан. Ә проводница өс стакан сәй алып килгән.

Ир Баяновҡа ҡарап ҡулдарын йәйҙе лә баш ҡаҡты, ултырмай ҡара, йәнәһе. Нишләһен, Баянов ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына шылып ултырҙы инде.

– Тотоғоҙ. – Ир араҡы ҡойолған стакандарҙы таратып сыҡты ла, сәкәштереп, бер йотоуҙа һауытты бушатып та ҡуйҙы.

– Ашағыҙ, ашағыҙ, – ҡатын колбасаға, ҡыҙыл ыуылдырыҡ яғылған икмәк телемдәренә күрһәтте. – Сибай колбасаһы. Ашағанығыҙ бармы?

– Еҫкәгәнем бар, – тип яуап бирҙе Баянов, көлөмһөрәп.

– Ишетеү түгел, киноһын да күргәнебеҙ бар, – тип һүҙгә ҡушылды ир.

– Ашхана янынан үтеп барған Хужа Насретдинға: «Ана, еҫен еҫкәп үткәнегеҙ өсөн түлә», – ти икән ашнаҡсы. Тегеһе янсығын сығарып, ашнаҡсының ҡолаҡ төбөнә килтереп аҡсаһын сылтырата ла: «Хаҡы шул була инде», – ти ҙә юлында була. – Был тапҡыр әйтелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен ире лә, ҡатыны ла аңланы булһа кәрәк, шарҡылдап көлдөләр. – Миңә, – тип дауам итте Баянов һүҙен, – Башҡортостандың Сибай ҡалаһындағы ит комбинатында һирәк-һаяҡ булһа ла

булырға, бына ошо ашап ултырған колбасаны еҫкәргә тура килә. Ә был комбинаттың сеймалы булған итте республиканан, Урал аръяғы хужалыҡтары, шул иҫәптән үҙем партия ойошмаһын етәкләгән Урал аръяғы хужалыҡтары ла етештерә. Кемгә – ҡуш, кемгә – буш, тигәндәй, һеҙ ашайһығыҙ, ә беҙ еҫкәйбеҙ генә.

– Үҙегеҙ колбаса етештерәһегеҙ, үҙегеҙ колбасаға мохтаж икән дә...

– Шулай шул. Беҙ етештергән ит менән колбаса Мәскәү менән Владивостокка оҙатыла. Үҙебеҙгә ливерный эләкһә эләгә, эләкмәһә – юҡ. Һеҙ үҙегеҙ ҡайһы өлкәнән?

– Пенза өлкәһенән.

– Итте баш ҡаланан ташып ашағас, һеҙ, күрәһең, ауыл кешеһе түгелдер...

– Яңылышаһығыҙ, – тип яуап бирҙе ҡатын.

– Эйе, – тип һүҙгә ҡушылды ир, – беҙ – ауыл кешеләре.

– Бәй, ауыл кешеһе ҡаланан ит ташып ашай тиме ни?

– Ә, беләһегеҙме, Брежнев, экономика должна быть экономной, ти.

– То-то. Һаҫыған ҡош йәки сусҡа итен Мәскәү магазиндарында, акт төҙөп, һандан сығаралар ҙа звееринецҡа оҙаталар. Ҡабул итмәһәләр, ҡырға сығаралар ҙа күмәләр. Ниңә әрәм-шәрәм итергә? Сусҡа итен дә, ҡош итен дә алып ҡайтып ашайбыҙ.

– Бына, – Баянов юғары полкала ятҡан рюкзакка күрһәтте, – күпме ит, колбаса алып ҡайтып бараһығыҙ. Нисек һаҡлайһығыҙ?

– Беҙ алты ғаилә бергәләп эш итәбеҙ. Ҡулланыусылар кооперативы, йәнәһе. Башҡалар ҙа бергәләп эш итәләр. Ә Мәскәүгә аҙыҡ-түлек һатып алырға сиратлап барабыҙ. Бөгөн – мин, иртәгә – һин... Аҙнаға бер мәртәбә барабыҙ. Алып ҡайтҡан ит, колбасаны бүлешәбеҙ.

– Аңһат икән. Шәхси хужалыҡта мал үрсетеүҙең кәрәге лә юҡ.

– Мал үрсетмәйсә булмай шул. Шунһыҙ кем һинең ҡулыңа колбаса тотороп ебәрһен. Колбаса бит иттән эшләнә.

– Малығыҙҙың итен баҙарға сығарып һатаһығыҙмы?

– Мәскәүҙән ит, колбаса ташып ашаған кеше баҙарҙан ит һатып аламы ни?

– Малығыҙҙы ҡайҙа итәһегеҙ һуң?

– Колхозға һатабыҙ.

Был механизмдың нисек эш итеүенә Баянов әле генә төшөндө. Сөнки үҙе эшләп киткән колхоз да шәхси хужалыҡтарҙан һыйыр малы һатып ала ла, һимертеп, дәүләткә һата торғайны. Тик бөтә һыйыр малын да бында колхозға һатыу мөмкин түгел. Үҙенә лә бер баш һыйыр малын һуғымға ҡалдыра. Сөнки Мәскәү алыҫ, унан ит, колбаса ташып ашай алмай. Мәскәүгә яҡын йәшәгәндәр генә бөтә һыйыр малын да колхозға йәки совхозға һата ала. Өҫтәүенә, колхоз, совхоз дәүләткә ит һатыу планын арттырып үтәгән өсөн премия ала. Әйткәндәй, бөтә был буштан килгән килем колхозсыларға, совхоз эшселәренә, колхоз һәм совхоз етәкселәренә дәүләт бүлгән дотация иҫәбенә түләнә...

Мәскәү – Магнитогорск поезында Баяновты һыйлап ултырған Пенза крәҫтиәненең икенсе яртыны сығарып, бер стакан араҡыны төп күтәргәс, теле бөтөнләй асылды:

– Йәшәр өсөн әмәлен таба белергә кәрәк, брат.

– Дөрөҫ. Илдә ит, колбаса кеүек ит продукттары етештереү өсөн бүленгән дәүләт дотацияһы бына һеҙҙең кеүектәр кеҫәһенә ана шулай барып керә лә инде, сөнки Мәскәүгә яҡын йәшәйһегеҙ. Ә миңә...

– Тимәк, беҙ – әрәмтамаҡтар. Ит изгелек – көт яуызлыҡ, – тип бытылданы ҡатын.

– Һыйығыҙ өсөн рәхмәт. Һеҙ мине дөрөҫ аңламанығыҙ. Һеҙҙең урында булһам, һеҙ минең урында булһағыҙ, һеҙҙе мин һыйлап ултырған булыр инем. Ә эш һеҙҙә лә, миндә лә түгел, – тип тынысландырмаҡ булғайны, Баяновты тағы ла ҡатын бүлдерҙе, күрәһең, яуап менән ҡәнәғәт булманы:

– Кемдә һуң? – тип нығышты.

– Эш дәүләт ебәргән ҙур хатала. Ниңә бөтә тапҡан-таянғанды тик Мәскәүгә һәм ҡайһы бер Ленинград, Владивосток кеүек эре ҡалаларға алып барып тултырырға? Ниңә илдең йөҙөн күрһәтергә, капитализмдан социализм өҫтөн, йәнәһе. Күрһендәр, имеш, муллыҡты сит ил ҡунаҡтары.

– Бының менән һеҙ нимә әйтмәксеһегеҙ? – Ир ҙә һүҙгә ҡушылды, өндәшмәйенсә генә ярты стакан араҡыны елгәргәс.

– Бына һеҙҙең кеүек Мәскәүгә яҡын йәшәгәндәр кеҫәһенә килеп керә ауыл хужалығына ит һәм ит продукттары етештереүҙе арттырыу маҡсатында бүленгән дәүләт дотацияһы. Ғәҙел булмаған юл менән, тип әйтмәксемен. Ә беҙгә, провинцияла йәшәгәндәргә, нимә әләгә? Бер нәмә лә эләкмәй.

Баянов хаҡлы, әлбиттә. Һоро ҡорттар, әрәмтамаҡтар, паразиттар хәҙер бар икән, күренеүенсә, улар Совет власы осоронда барлыҡҡа килә башлаған. Ауыҙым ҡыйыш икән, тип көҙгөгә үпкәләп булмай. Ни сәсһәк, хәҙер шуны урабыҙ. Бынығы, әлбиттә, – субъектив фактор. Объектив факторҙар ҙа бар. Климат. Рәсәй шарттарында аграр сектор илдең дотацион тармағы иҫәпләнә. Рәсәй – йылына ике уңыш алған Ҡытай түгел. Рәсәйҙә аграр секторҙың дотацион сектор булыуын Баянов Пенза өлкәһе крәҫтиәндәренә түбәндәгесә аңлатып бирҙе.

– Йылына финанс капиталы өс, сәнәғәт капиталы ике әйләнеш яһай. Ә аграр сектор тик бер генә әйләнеш яһай. Ә капитал нисә әйләнеш яһай, шул хәтле килем килтерә. Бына ни өсөн Рәсәйҙең аграр секторы дотацион хужалыҡ тармағы булып иҫәпләнә. Тимәк, хужалыҡ тармағының дотацион булыу-булмауы капитал әйләнешенә бәйле.

Әйткәндәй, Пенза өлкәһе крәҫтиәндәренең Баяновҡа үпкәләр урыны ла юҡ, сөнки итте, колбасаны арзан хаҡҡа Мәскәүҙән ташып ашай. Үрсеткән һыйыр малын һуйып, баҙарға сығарып та тормай. Тереләй колхозға һата. Аҡса кеҫәгә тамып түгел, ағып керә. Ғәмәлдә, ҡасандыр кулакты иҙеүсе синыф булараҡ юҡҡа сығарған Совет власы хәҙер әлеге «дошманын» ҡайтанан аяҡҡа баҫтыра. Тимәк, илдә аграр секторҙың яңы иҡтисади сәйәсәт (НЭП) юлы менән үҫештән тайпылыу һәм капиталистик үҫеш юлынан баш тартыуы – элекке ил етәкселегенең ҙур хатаһы.

Ауыл хужалығы эштәре сезонлы башҡарыла. Йылды көн аҫырай, тигәндәй, крәҫтиәндең таңдан алып ҡараңғы төшкәнгә тиклем эшләгән ваҡыттары йәй буйы дауам итә. Ул тик яҙғы сәсеү менән бесән ваҡыты араһында ғына бер аҙ тын алып ҡала. Үҙ хужалығында эш менән мәшғүл була, һабантуйында бер аҙ күңел аса ала. Бер юлы туңға һөрөү, киләһе йыл уңышына нигеҙ һалыу эштәре лә башҡарыла. Уға ужым сәсеү эштәре ҡушыла. Ашлығы урып һуғылған майҙандарҙа һалам эҫкертләнә. Силос һалына. Дәүләт бураларына иген оҙатыла, орлоҡ һалына. Баҫыу эштәре тамамланып та өлгөрмәй, баҫыуға органик ашлама сығарыла. Мал аҙығын ташыу, ауыл хужалығы машиналарын ремонтлау һ.б.

*(Аҙағы киләһе һанда.)*



Гөлсирә
ҒАЙСАРОВА-ҒИЗЗӘТУЛЛИНА

# БЫЙЫЛҒЫ ЯҘ ЙОҠОЛАРҘАН ЯҘҘЫМ

## ХИКӘЙӘ

Ул суҡышын юғарыға һонған, ә тамаҡ асты нәфис кенә һерелдәй. Сабый йоҙроғондай ғына кәүҙәһенән ағылған моң яҙға кинәнгән донъяны тылсымға сорнай. Үҙ йырына үҙе лә әсир, ахыры, илаһи йән. Хатта минең ҡул һуҙымы ергә килеп баҫҡанымды ла тойманы. Бәлки, күрәлер ҙә минең өсөн генә йырлай торғандыр? Үҙемдең уға ят түгеллегемде күңелем һиҙә. Ә шулай ҙа беҙ өсәүбеҙ бында. Ана, һары талдың йәшкелт-көмөш япрағына сумып был тарафҡа төбәлгән ике күҙ. Уларҙың эйәһе, хас минең кеүек, үҙенә иҫәп бирмәҫтән илаһи моңға арбалып, шау-сәскә алмағас ботағына ҡунған тылсымлы ауаздар инешенә яҡыная. Бына хәҙер инде уны айырым-асыҡ күрәм. Йомро тубырсыҡтай ғына ҡошсоҡ – инә һандуғас. Бына ул тәүәккәлләне, талпынды ла осто. Тертләнек: мин дә, һайраған һандуғас та... Сөнки башланырға торған мөғжизәлә уның ҡатнашыуы мотлаҡ. Инә ҡош та һауаға томоролған килеш керпек ҡағыр мәлгә хәрәкәтһеҙ ҡалды: үҙе атлыҡҡан мондоң өҙәлөүенә шаңҡыны... Моң өҙөлдө... Инә һандуғастың ошо юғалтыуҙан йөрәге шартлап ташҡа әйләнер кеүек тойолдо миңә. Ни ҡылырға?

Аяуһыҙ яҙмыш, исмаһам, хәҙер яһиллашмаһын өсөн ни эшләргә тейешмен? Шул уйымдан һандуғастың мине юҡҡа тышҡа әйҙәмәгәнен, был яҙ, был йыр, был таң һәм ошо ике йән – ошоларға минең шаһитлығым бөйөк бер әһәмиәткә эйәлеген ап-асыҡ аңлайым.

***

Мин тағы мәктәптән турһайып ҡайттым.

– Әллә ниндәй исем ҡушҡанһығыҙ ҙа... Малайҙар мине үсекләй..

Ирен киткән бәлшәйеп, ә тоғро ҡоралым – күҙ йәше – кәрәк булһа – быны-

---

*Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллина (1957) Үзбәкстандың Бохара өлкәһе Ҡаған ҡалаһында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлап, "Башҡортостан" гәзитендә, Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә, "Башҡортостан ҡыҙы", "Ватандаш" журналдары редакцияларында эшләй. Бер нисә проза китабы авторы. Мәхмүт Ҡашғари исемендәге хикәйәләр бәйгеһе лауреаты.*

бына тубырлап ҡойолорға әҙер. Тик мин кинйәбикәһе алдында ҡояш аҫтында май кеүек ирергә торған атай бөгөн ни ғиллә менәндер бирешмәне, кеше араһындағы “Ҡырыҫ Сәлимйән” ҡушаматын аҡлап, ҡырт киҫте:

– Ярар, ҡуштыр ана Наташа тип. Силсәүиткә бар ҙа.

Шунан, алдындағы сәйен дә эсеп бөтөрмәйенсә, сынаяғын ситкә этте лә тышҡа уҡ сығып китте. Ә сабыр әсәйем ләм-мим өндәшмәй, йәһәтләп ҡашығаяҡ йыуырға кереште. Мин иһә көтмәгәндә алған рөхсәтте нимә эшләтергә белмәй шымғанмын. Дөрөҫөн әйткәндә, был ғауғам тәүгә түгел. Шаян малайҙар әләкләй, мин яр һалам. Атам өгөтләй: иң яратҡан ҡыҙыма һайлап ҡына ҡушҡан изге исем... Ә мин уның һайын мыжыйым. Ә бөгөн ана ҡайһылай булып китте.

Ни арала әсәйем түръяҡтан өҫ-башын алмаштырып та сыҡҡан.

– Әйҙә, – ти ул. – Матур итеп кейен.

Аптырап ҡалам. Шулай уҡ тиҙ?! Әсәй башымдағы таҫманы яңынан ҡупшылап бәйләй. Ҡиәфәтендәге тантананы күреп, шигем ҡалмай: силсәүиткә йыйынабыҙ, шунда.

Әммә етәкләп ҡапҡанан алып сыға ла бөтөнләй ҡаршы яҡҡа борола. Һораулы күтәрелеп ҡарайым.

– Ҡәрсәңә барайыҡ башта, – ти әсәй. Ғәжәп, ул мине гел бер һүҙ әйтмәһәм дә аңлай. Туҡтап ҡалдым, сөнки ҡәрсәмдән – атайҙың әсәһен беҙ шулай тибеҙ – буйтым шыртлайым. Сәбәбе: ул мине күргән һайын:

– Уй ошо баланы иркәләтеп боҙоп бөттөгөҙ бит, – тип һамаҡлай. – Үтә иркә иҫәр кеүек булып китә бит ул.

Шуның өсөн әле, өйгә эш күп тигән һылтау менән ҡарышырға мәллә, тип тә уйлаштырам. Тик ҡәрсәм өйөндә бер арбағыс – Сабира еңгәм бар. Мине күргән һайын ул, йылға өҫтөндә ҡанат киреп кинәнгән ҡаҙ ише, ҡолас йәйә. Шул тиклем шатлана. Шундай саҡта уның һөйөнөсөн Мәндүҙә әхирәтемдең ике йәшлек мырҙаһының ҡыуана белеүенә оҡшатам. Ә ҙур ғаиләнең оя төбө булараҡ наҙға сорналып үҫһәм дә – яҡшынан кем туйған – еңгәмдең яратыуы шундай рәхәт.

– Бикәс, – тип ҡулдарын һоноу менән, ҡосағына тотош һеңеп китәм.

Әсәм оҙаҡлап икеләнергә ирек бирмәй, үҙ артынан әйҙәй. Уның серле ҡымтылған иреренән ниндәйҙер етди ҡарарға килгәненә төшөнәм. Тик әле төпсөнөүҙән фәтүә сыҡмаҫын да самалайым. Белеп бөткәнмен: ҡоростай атайҙы ҡамыр иткән минең мамыҡтай йомшаҡ әсәмде бөгөргә ҡулымдан килгәне юҡ.

Ҡәрсәмдәргә кәртә аҫтынан барһаң, күпкә яҡын, әммә әсәм оло урамды һайлай. Быныһы ла мине хәүефкә һала: ҙур йомошоң булмаһа, көпә-көндөҙ урам буйлап һәлмәк баҫып йөрөү көҙгө эш мәлендә, ай-һай...

Ҡәрсәм өйҙә яңғыҙ ғына.

– Беҙҙең килен ферма быҙауҙары тип өҙөлгән саҡлы ҡайһы бисә балаларын ҡәҙерләмәй, – тип хуплау ҡатыш бурылдап алды ул, башҡалар хаҡында һорашҡас. – Ә Сәлимәкәй быйыл ятаҡта ятып уҡый. Нишләп һаман астырмайҙар үҙебеҙҙең ауылда ҙур мәктәп, бала-саға ыҙалатып...

Әсәйем уға ҡушыла:

– Беҙҙең Мөслим һаман көн һайын ҡайта ла килә, шул да булдымы инде уҡыу.

Ауылыбыҙҙа ишектән инеү менән йомошоң хаҡында ҡысҡырыуҙы килештермәйҙәр. Әсәм ҡәрсәмә төйнәгән йыуаса-фәләнен тотороп, уныһы оҙаҡлап доға ҡылды. Шунан ғына сират етте килеүебеҙҙең төп маҡсатына.

– Бейем, – тип һүҙ башланы әсәйем тантаналы тауыш менән. – Ҡыҙыбыҙ ҙурайҙы инде. Уны аҙаш абзыһы менән таныштырырға мөҙҙәт еткәндер, тип килеүебеҙ. Уҡыуы ла яҡшы, тәртибенә лә зарланыусы юҡ, – тип өҫтәне, ҡәрсәм риза булмай ҡуймаһын, тигәндәй. Тиҫбе тартып ултырған ҡәрсәмдең ҡулы һерелдәп

китте әллә ҡалай. Шул саҡ ҡапыл уның инде бик ҡарт, һауһыҙ икәнен тәү тапҡыр абайланым.

Ул боронғоса бөрмәсләп тегелгән күлдәгенең иҙеүен ысҡындырып, атлас таҫма баҫылған күкрәксәһенең кескәй кеҫәһенән йәтеш кенә асҡыс килтереп сығарҙы. Был асҡыстың мөйөштә ултырған зәңгәрле-аҡлы сатрашлап биҙәлгән ҙур һандыҡтан икәнен беләм. Ғәжәбемдең һуңғы сигенә етеп ҡәрсәмде күҙәтәм. Абзыйы, тине ләһә әсәм. Һандыҡта абзый була тиме ни?

Ҡәрсәм иһә, һандыҡ өҫтөндәге мамыҡ мендәрҙәрен урындыҡ өҫтөнә күсерә-күсерә, ниндәйҙер бер үткенсе фото төшөрөүсене әрләй.

– Ҙурайта алам, тигән булып таҫма телләнеп алып китте лә юғалтты иң матур, йылмайып төшкәнен. Сабира килен күпме йөрөнө йыландай телен сығарып: тапманым, тине лә ҡуйҙы, битһеҙ. Ултырыпта иланым бәбкәмде йәлләп.

Бына һандыҡтың ҡапҡасы ла асылды. Ҡыҙыҡһынып ынтылмаҡсы инем – эсендә нимә бар икән – әсәм иплəп кенә тыйҙы: “Һинең кеүек аҡыллы ҡыҙҙарға килешкән эш түгел”.

Иң элек унан боронғо ҡалын китап сыҡты. Уның Ҡөрьән тип аталғанын да беләм. Унан – аҡ төйөнсәк. Төйөнсөктән – бик күп өскөл ҡағыҙҙар. Уларҙың һуғыштан һалдаттар ебәргән хат икәне лә мәғлүм миңә. Әсәмдең һандығында ла һаҡлана ундай өсмөйөштәр. Атайым яуҙа йөрөгән саҡта яҙған. Берәүһен уҡып та ҡарағаным бар. “Ҡәҙерле балаларым, улдарым Хисмәтулла менән Нурислам, ҡыҙҙарым Гөлниса менән Гөлйөҙөм”, – тип һанап кителгән. Мөслим ағайым менән миңә генә юҡ сәләм, сөнки беҙ – һуғыштан һуң тыуған балалар.

Бында ла түгел икән ҡәрсәйем эҙләгән хазина. Ул хаттарҙы бармаҡтары менән аралап иркәләне лә кире һалды. Шунан бер тимер ҡумта сығарҙы, унан ситтәре оҫталап ҡайылған батист ҡулъяулыҡты яҙҙы һәм, бармаҡтарын ҡалтырата-ҡалтырата, һарғайып барған бер фоторәсем алды.

– Бынауғынаһы ҡалды ҡолонсағымдың, – ти ҡәрсәм. Күҙ төбөнән бөртөк кенә күҙ йәше битен өтөп төшә.

Ҡәрсәм йотлоғоп һүрәткә текләй, унан миңә бер һирпелеп ала – аңлап торам башындағы уйҙы: лайыҡмы был бала ошондай ҡомартҡыға ҡағылырға? Тотош ғаиләбеҙҙең һағыныуы, һағышы тупланған ошо кескәй һүрәткә – ҡапыл ғына шуны тоям. Ике усым үҙенән-үҙе асыла, өлкәндәр әппәр итергә өйрәткәндәгесә.

Текәлгәнмен дә киткәнмен: рәсемдәге күркәм йөҙҙән күҙҙе айырып алмалы түгел. Шулай ҙа арбағыс булыр икән кеше йөҙө. Ә күҙҙәре.

– Күҙҙәренә ҡара әле, – ти әсәй шым ғына. – Кемдекен хәтерләтә ағайыңдың күҙҙәре?

– Сабира еңгәмдекен, – тип яуап ҡайтарам. – Мин уларҙы күргәс тә оҡшаттым. Уныҡы ла шулай мөлдөр.

– Эһ... – Һулышы һағылғанға ҡайырылып ҡараһам, әллә ҡайһы арала еңгәм инеп эргәмә теҙләнгән. Ә күҙҙәре ысынлап та мөлдөр, тойғолары артап, түгелеп бара.

– Үҙеңдең күҙҙәрең тас ағайыңдыҡы, бикәс, – тип шыбырлай еңгәм.

– Әллә йырлаймы был бала? – тип һорай ҡәрсәйем.

– Юҡ, бейем, – ти әсәм, уның күңелен ҡырғанына үкенгәндәй. Унан ҡыуаныслы өҫтәй: – Ә шиғыр сығара!

– Собханалла, собханала, – ти ҡәрсәм, йөҙө яҡтырып. – Аллаһы Тәғәлә тел асҡысы, зиһен үткерлеге бирһен. – Шунан мине аптыратып. – Уй, баланы боҙоп ҡына бөтәһегеҙ инде, тип туҡтауһыҙ сурыҡкан ҡәрсәй бит – тарамыш бармаҡлы көрәктәй ҡулы менән арҡамдан һыйпай. Әллә танһыҡҡа булғанға талапсан ҡәрсәйҙең иркәләүе, күҙемә йәшем килеп төйөлә.

Шулай итеп, һигеҙенсе йәшемә киткәндә исемемдең серен ныҡлап аңланым.

Быға тиклем бер тапҡыр ҙа күрмәгән ағайым йөрәгемдә ғүмерлеккә урын алды. Ә исемгә, гүйә, ағайымдың күркәме йоҡто, ул миңә донъяла иң матур булып яңғырай хәҙер: Йомабикә. Йомабай ағайымдың аҙашы.

– Көллөбөҙҙөң бәхете өсөн үҙенең ғүмерен ҡорбан иткән Йомабай ағайың. Атайыңдың иң яратҡан, иң аяулы мырҙаһы, – ти әсәй ике серҙәш кеүек сөкөрҙәшеп өйөбөҙгә кире ҡайтып барған саҡта.

– Егерме бише лә тулмағанда һәләк булды. Кисерәһе булып та кисереп өлгөрмәгән бәхете, инселәнеп тә үҙенә яҙмаған барса яҡшылыҡ ошо исем аша һиңә ағыла хәҙер, – тине атам, ағайым хаҡында тәфсилләп һорашҡас. – Кеше бәхетен ҡурсалап изге яуҙа булған батырҙарҙың исеме ырыҫлы була.

Бына ниңә наҙға төрөнөп йәшәп ятам икән был донъяла. Аҙаш абзыйым үҙенең мул өлөшөн минең өлөшөмә ҡуш иткән дә, шуға бәхетем артап ташып тора икән, баҡһаң.

* * *

Ун һигеҙемә яңы сыҡҡан сағым. Сабира еңгәм бер көн һорай ҡуйҙы:

– Нишләп һаман кейәүгә сыҡмайһың, бикәс?

– Уҡыйым әле, еңгә, – тимен. – Ниңә?

– Рәхәт бит йәнең яратҡан менән. –Еңгәм мөлдөр күҙҙәрен көлдөрөп яуап бирә. – Көслө беләгенә башыңды һалаһың да тын алышын, йөрәге тибешен тыңлап йоҡоға талаһың. Һулҡылдап типкән йөрәге, әйтерһең, йоҡоңдо ҡарауыллай. Таң һыҙылғас, үпкәненә көлөп уянаһың, ҡыҫҡа төн үткәнсе ул һине, һин уны һағынып өлгөргәнһең.

Үбешеп тә танһығы ҡанмай тол ҡалған еңгәмдең саф, керһеҙ һағышынан бәғерем һыҙлай. Ҡыҫҡа төн үткәнсе, тигәне күңелдә сыйып үтә.

...Әл дә ул йәй сәсеү иртә бөткән. Һабан эше теүәлләнгәс, туйлап киләһе муллыҡҡа нигеҙ һалған уңғандарҙың күңелен уйлау фарыз. Балан сәскәгә күмелһә лә, гөлйемеш һандуғасты телдән ҡалдырып өлгөрмәгән саҡта йәшеҡарты район һабантуйына йыйына.

Фин һуғышының осмотона эләгеп, яраланып, байтаҡ ваҡыт госпиталдә дауаланып, шул көндәрҙә генә йәнтөйәккә ҡайтып төшә Йомабай – егерме бер йәшлек һалдат. Яңы ун алтыһын тултырған Сабира һылыу ҙа, бейеүселәр бәйгеһендә көс һынашып, ауылына дан юлламаҡ булып килә һабантуйға.

Ат сабыштырып, көрәшселәр өсөн һай-һаулап арыған халыҡ йыр-бейеү майҙанына йыйыла.

– Һаҡмар һандуғасы үҙе йырламаҡсы икән, – тигән хәбәр китә тамаша көткән кешеләр араһында.

Бәйге лә бәйге, тип дәртләнешкән йыраусыларҙың кикереге буйтым шиңгәнгә ғәжәпләнә Сабира. Маҡтауға һаран, төртмәсел халыҡтың, үтә ныҡ шаштырып, кемделер һандуғас, етмәһә, Һаҡмарҙыҡы, тип үк ебәреүенә йәнә аптырай.

Татлы менән затлыны иң аҙаҡҡа ҡалдырырға тырышалар, ғәҙәттә, тамаша ваҡытында. Әммә был юлы сәхнәгә иң тәүҙә Һаҡмар һандуғасы сыға. Һалдат кейемендә, яурынына йәтеш кенә итеп йәшел елән һалған. Һомғол, буйсан. Булмышы, йөҙө менән көлөп, балҡып тора.

– Һағындырған. – Ҡарашы менән киң майҙандағы ғәм халыҡты берҙәй һөйөп сыға Йомабай. – Иҫән-аман илемә ҡайтырға насибы тейһә, күкрәк киреп, ялан яңғыратып „Урал"ды йырлармын, тигән әйтеүем бар ине. – Тауышы бәрхәттәй йомшаҡ, бешкән балдан ҡуйы, сәскә майы кеүек ағылып тора. – Рөхсәтме, туғандар?

Риза булмаған ҡайҙа?! Афарин!

Майҙан бер тынаға геүләшеп баҫыла. Көнө бер аҙ елле ине, әммә хатта болондо ураткан ағастарҙың япраҡ шыбырҙатыуы ла тына. Ихтирам һәм зауыҡланырға ниәттән башҡа, хәүеф тә туҡылғайны был тынлыҡта. Һуғыш һүҙе әйтелмәне яу ялҡынында өтөлөп ҡайтҡан һалдат тарафынан, шулай ҙа дәһшәтле күңелдәргә шом һалып үтте. Егет ҡурай тотоп эргәһенә сығып баҫкан ағалары Сәлимйән менән Ғәлимйәнгә ҡарап ала ла йыр башлай.

Һай, донъяның хайран мөғжизәһе! Булыр ҙа булыр икән шундай моң! Нисек һыйҙыра уны был артыҡ ҡеүәт тә ҡунып өлгөрмәгән күкрәк? Нисек ярылмай йөрәккенәһе? Йырлай Йомабай. Әҙәм балаһын упҡынға бырғап, асманға сойорғотҡан хистәр өйөрмәһен тотош йырға һала.

Талир тәңкәләрен сылтыратып бына-бына „Еҙ үксәне“ бейергә йыйынған Сабира ла сәхнә эргәһенә сығып баҫкан була. Барса халыҡ менән ул да моң аһәңенә йотола. Егеттең тыны оҙон. Ул көйҙөң һәр бөгөлөн бормаланып, туғарланып аҡкан йылға кеүек буйлай, тауышы иркен, әллә ҡайҙа юғарыға күтәрелеп сыңғырҙап тора ла аҫҡа томорола, инде юғала, өҙөлә тип һиҫкәнәһең, ә ул элеккенән дә көслөрәк булып ҡабат урғыла. Арбалған Сабираның һулышы моңға эйәрә лә, һауа етмәй. Ә ҡыҙ үҙе быны абайламай ҙа. Ваҡытынан алда тын алып ҡуйһа, моң өҙөлөр кеүек, сөнки... Ул был мәлдә йырсы менән бер йән.

Бер йән, ә тәндең дә ҡануны бар икән – тын етмәүҙән күҙ алдары ҡараңғыланып, иҫе юйыла... Тәңкәләре иһә сылтыр-сылтыр.

Күҙен асһа, хыял түгел, ғәмәл икәненә ышанып әмәл юҡ – әле генә моң ағылған мөлдөр күҙҙәр уға төбәлгән дә, йырсы алдында теҙләнеп тора...

Эй уңайһыҙ булды, ни рәүешле һикереп торғанын да, халыҡ араһына инеп сумғанын да һиҙмәне Сабира. Ҡайҙа инде бынан һуң сәхнәгә менеп баҫыу!

Әммә был һабантуйҙа иң ҙур бүләк йырсылар бәйгеһенән баш тартҡан йырсы егет менән бейергә ҡыймаған һылыуға эләгә – улар береһен береһе тап итте, осратты.

***

Мәсекәй төшлө ҡәрсәм туйҙы йәһәтләткән. Улының моңға хайран булып һуштан яҙған хисле ҡыҙға күҙе генә түгел, күңеле төшкәнен төшөнөү менән:

– Бәхетте киләсәккә кисектерер мәл түгел, никахлашҡас ғишыҡланырһығыҙ , – тип ҡыҙға яусы юллаған.

Былдай туйҙы күргән юҡ ине элек тә, күргән булманы аҙаҡ, тип оҙаҡ иҫләй халыҡ. Унда саҡырылғаны ла, саҡырылмағаны ла эркелеп килгән. Беҙҙең яҡтар ашамһаҡ та, әрһеҙ ҙә түгел, әммә йыр менән бейеүгә тиһәң – үлә лә китә торған холоҡтары бар. Шуға байрам киң ихатаға һыймай урамға сыға. Ә ҡәрсәмдәрҙән йыраҡ булмаған Һаҡмарҙың күпере күркәм сәхнәгә әйләнә. Халыҡ байрамға хозурланып та туймай: көнбайышҡа яңы сумған ҡояш, көнсығыштан былҡ итеп ҡалҡып та сыға – егерме икенсе июндә бит иң ҡыҫҡа төн.

Һабантуйҙа бейергә яҙмағанды, үҙ туйында бейеп кинәндерә халыҡты Сабира.

Кейәүе Йомабай халыҡ „Еҙ үксә“ тип тә йөрөткән „Сабира“ йырын йырлап ебәрһә:

*Мин урамдан үткән саҡта,*
*Ҡар йомарлап ник аттың?*
*Бер атманың, ике аттың –*
*Йәш йөрәккә ут яҡтың.*

Кәләш талир тәңкәләрен сылтырлатып бейеп тә китә.

*– Ат уйнатып үткәнеңдә,*
*Теҙгенеңде ник тарттың?*
*Атҡайыңды туҡтатып,*
*Минең яҡҡа ник баҡтың?*
*Бер баҡманың, ике баҡтың –*
*Йөрәгемә ут яҡтың, –*

– тип йыр һүҙҙәре менән яуаплай үҙе осло күтәрмәләре менән яҙғы ташҡын алып киткәндән һуң, яңы төҙөлгән күперҙең таҡталарына туҡылдата баҫып. Таң алланған саҡ була был, тап шул мәлдә ил сигендә ергә инде тәүге бомбалар ҡойола.

Ҡырҡ икенсе йылдың май башында көнө буйы эштә йөрөп арманһыҙ йығылған Сабира еңгәмде таңда һандуғас моңо уята. Үҙәк өҙгөс һағыш та бар, наҙ ҙа... Һандуғас моңон тәүгә ишетеүе түгел ҡолағы зирәк еңгәмдең. Тик был ҡошсоҡтоң йыры әллә ҡайһылай, бүтән. Бөгөлдәре оҙон, тыны иркен. Ошо бәләкәс кенә күкрәккә ни әмәлдәр менән һыйған шул хәтлем моң? Күңелендәге ҡайтауазға буйһоноп, урынан ҡуба, баҡсаға атлыға ун етеһен саҡ тултырған ҡатын.

Ә башындағы уй үҙенеке түгел, хәләленең күңеленән сыҡҡан шиғри юлдар:

*Һары талъа түгел, алмаъасҡа*
*Ҡунырмын да, шунан танырһың...*

Хафанан йөрәге ҡалтырап моң сығанағын эҙләй: ана бүтән ҡоштар яратып ҡуна торған һары тал, ә бына Йомабай ҡасандыр ун һигеҙ йәшенең иҫтәлеге итеп үҙ ҡулдары менән ултыртҡан алмағас.

Ҡартлыҡтың йоҡоһо сос. Мөҙҙәте бына-бына етергә торған ауыр аяҡлы килененән күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа тырышҡан ҡәрсәм, уның оҙаҡлауына борсолоп сыҡһа, күрә: сәскәгә тумалған алмағастың ботағында ҡанаты ялҡынға көйрәгән һандуғас һайрай. Йотлоғоп-йотлоғоп китә, ниҙер еткерергә, нәмәлер аңлатырға тырыша бисара. Ә Сабира шуға текләгән дә һынһыҙ. Өн сығарырға ла ҡыймай, берҙән, һандуғас моңон өҙөүҙән ҡурҡа, икенсенән, бейеменең өмөтөн ҡурсалай. Тик бер бөтөн булыр өсөн яратылған йәне танымаймы һуң үҙенең ҡап яртыһын?!

“Һуғыш быға тиклем бер ҡасан да булмағанса ҡаты һәм аяуһыҙ, йәнем. Берберхәл булып янына ҡайта алмаһам, рәнйей күрмә инде, кисерергә тырыш. Төҫөм итеп балабыҙҙы үҫтер, уға минең йырҙарымды, үҙеңдең бейеүҙәреңде өйрәт. Уны үҙең өсөн бер ратһаң, икенсеһендә минең өсөн һөй, наҙла. Малай тыуһа – Урал, ә ҡыҙ булһа Сәлимә тип ҡуш.

Был хатымды бәхилләшеү тиеп аңлап, көн элгәре ҡайғыларға батма. Тик тейешен әйтеп ҡуйһам, һуғышырға йәтешерәк булыр кеүек. Мин һинең ҡаһарман ихтыярыңа ышанам, шуға тураһын яҙам. Беҙҙең урамдарға байрам алып килер Еңеүҙе яҡынайтырға самаһыҙ күп ҡорбан талап ителәсәк”. Был хатын ул Мәскәү эргәһендәге ҡан ҡойошло һуғыш эсенән, “үҙең генә уҡы, әсәйем күҙенән һаҡла” тип Сабираһына ғына төбәгән. Иң аҙаҡтан үҙәк өҙгөс шиғыр:

*Яҙ һаъышлы йәрһеҙ ҡалъандаръа –*
*Һөйөү уттарында янырһың.*
*Мин һандуъас булып яндарыңа ҡайтһам,*
*Һары талъа түгел, алмаъасҡа*
*Ҡунырмын да, шунан танырһың.*

Сабираны тынысландырырға теләгәндәй, хаттар бынан һуң тағы ла йышыраҡ килә. Ҡоралға күнеккән, һыуыҡтан ҡатҡан бармаҡтары менән бер ауыҙ һүҙ генә булһа ла сыймаҡлап һалырға ашыға Йомабай. Бер мәл килеп хаттар туҡтап ҡала. Ғинуар, февраль мең төрлө уй, хафа менән үтә, ә марттың буранлы бер көнендә хат ташыусы “хәбәрһеҙ юғалды” тигән ҡағыҙ ҡалдырып китә.

“Кеше энә түгел эҙһеҙ юғалырға ,– ти әсә, киленен йыуатып. – Ҡайтыр яҙған булһа. – Әйләнә лә шулай ҡабатлай: – Ҡайтыр”.

– Кисер инде, бейем, – тине килен, аҡ йүргәккә төрөлгән сабыйын тәүге тапҡыр түшенә терәгәс.

– Аста, нишләп? – тип ҡапыл шомлана әле генә ейәнсәре кескәй Сәлимәкәйгә кендек әбейе булған бейем.

– Малай түгел, – ти Сабира,  үкенеп.

– Баш балаға барыбер күсмәй моң-мираҫ, – ти ҡәрсәм. – Малайҙарҙың төпсөгөнә ҡала.

Икеһе лә был нәҫелдә инде нисәмә быуындан-быуынға күсә килгән мөғжизәнең – һандуғасты көнләштерер йыраусы һәләтенең Йомабайҙа өҙөлөп ҡалырына хафалана. Әммә ҡәрсәм хәүефен күрһәтмәй.

– Булыр, Алла насип итһә, малайҙарыбыҙ ҙа тыуыр. – Ышаныслы итеп әйтә лә һуң. Раҫҡа сығыуы күпме һыналған мәсекәй төштәре тынғы бирмәй үҙенә. “Йомабайым әрме хеҙмәтенә яңы ғына киткәйне. Ябырылып килгән ҡара ташҡын күрҙем. Балам шунан ҡурҡмай, сисенә һалып, сумырға уҡтала. Осмото ғына ҡағылып үтте, тулҡын сигенде. “Сирҡаныс ҡына алып өлгөрҙөм, әсәй”,– тине балам. Төшөмдөң үҙендә үк „Ҡолонсағым ҡотолдо“ тип ҡыуанып ятам. Икенсе ҡабырғама боролоп ятҡайным, күрәм: ташҡындың икенсеһе, ҡот осмалыһы килә. Сәлимйәнем, Ғәлимйәнем, Йомабайым – уландарым барыһы бергә тулҡындар менән айҡаша. Йәнемде услағанмын да яр буйынан йүгерекләйем. Ярҙам итер әмәлем юҡ. Өй дәүмәле тулҡын ажғырып килде лә өсөһөн дә ялмап алды. Өлкәне менән уртансым ҡалҡып килеп сыҡты шулай ҙа, ә Йомабай башҡаса күренмәне.

Төштөң үңәсе нәҙек кенә була ла ҡайһы яҡҡа юраһаң, шул яҡҡа  бәлк итеп бөгөлә, шуға гел яҡшыға юрарға кәрәк,  торғайны борон  ағинәйҙәр. Шуға изгеләргә юрап хәйерҙәр өләштем, ҡорбан салдым, ағын һыуға әллә нисә ҡат һөйләп ағыҙҙым. Ысынлап та, ҡолонсағым хеҙмәтен тултырып, Фин һуғышында ҡатнашып ҡайтты. “Сирҡаныс ҡына алып өлгөрҙөм, әсәй, артыҡ зыян юҡ, тыныслан”, –  тине һуғыш йәрәхәттәре хаҡында һорашҡанымда. Төшөмдәгеләрҙе һүҙмә-һүҙ ҡабатлағанына йөрәгем өҙөлөп төшөп киткән кеүек булды, һиҙҙермәнем генә. Шуға өйләндерергә ашыҡтым. Сәстәре яҙғанына бәйләнгәс, яҙмышы башҡа юҫыҡҡа үҙгәреп китмәҫме, тигән өмөт тоттом. Ишараларҙы үҙгәртергә мөмкин булмаҒас, ни фәтеүә ул әүлиә төштәрҙән. Алдан уҡ йөрәк һыҙлатып торор өсөн генәме икән ни?” Быны ҡәрсәм байтаҡ йылдар үткәс, инде нуры бөткән күҙҙәрен алысҡа төбәп, тисҭәләрсә йылдар баҫа алмаған ҡайғы-хәсрәт менән һөйләгәйне миңә.

Ә ул мәлдә, бер-береһен аяп, килен алдай, бейем алдана. Килене хәсрәт упҡынына ҡолай башлағанда бейем алдай, килен был изге ялғанға ышана. Шулай бер-береһен алдай-алдай, „үлгән“ тигән ҡара ҡағыҙы килгәс теп-тере ҡайтып төшкәндәр тураһында мөғжизәләр уртаҡлашып көн артынан көн үткәрәләр. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү, өмөттө өҙөү – үлемесле гонаһ, был хаҡта уларҙың икеһе лә белә.

* * *

– Бейем бер көн килеп өмөткә хыянат итте. – Сабыр еңгәм түшәккә йығылып, мине күрәм тигәс, бар эшемде ташлап ҡайтып төштөм. Янында ултырам. Ә ул һөйләй. – Сәлимәкәйҙе ун туғыҙы тулғас башлы-күҙле иттек. Аша ауылға, яҡшы урынға килен булып төштө. Оҙатып ҡайтҡанбыҙ, йәнә бушап ҡалған өйҙә, икәү ҡара-ҡаршы ултырғанбыҙ. Шунда ҡәрсәң әйтте:

– Килен, әле һин үтә йәш. Мин утыҙ һигеҙҙә биш бала менән тол ҡалып, ирһеҙлектең әрем әсеһен мул эстем. Ә һинең ишле ғүмерең күпме? Һуғыш сыҡҡан таңда ҡушылдығыҙ, августың егерме һигеҙендә Йомабайыбыҙ утҡа инеп китте. Тулыр-тулмаҫ ике ай булды бәхетегеҙ унын һы ла дәһшәт менән тулы.

Бығаса бер маҡсат менән ғүмер иттек. Инде Йомабайҙың йән киҫәге Сәлимәкәйҙең артабан үҙ тормошо. Бүтән мине һаҡлап ултырмаҫһың Имаметдин яҡшы кеше булғанға димләйем. Бар шуға икенсе ҡатынлыҡҡа.

„Ҡаршы әйтәм“ тип ауыҙымды ғына астым, ә ул форсат ҡалдырманы – ҡамсы менән һыҙырҙымы ни, һаман бәғерем һыҙлай.

Күңдәм еңгәмдең нисәмә йылдар үткәндән һуң да рәнйеүе баҫылмағанына аптыраным: тимәк, сәбәп етди.

– Нимә тине ҡәрсәм? – тип һорайым.

– Яҙ еттениһә, төн йоҡоларыңдан яҙып ут күҙ бесәйҙәрҙән һандуғас ояларын ҡурсалауыңды күрһәм, йәнем әсей, – тине. – Аңла, килен, һандуғас – ул бары ҡошсоҡ ҡына. Йомабайҙай изге яуҙа шәһит киткәндәрҙең йәне шунда уҡ йәннәткә эләгә, шәт. Изге китап үҙе шулай тигән.

– Бикәс, – еңгәм үрелеп туп-тура күҙемә ҡарай: – Һин бит ҙур ғилем эйәһе, илдәр ҙә гиҙәһең. Тағәйен генә әйт әле. Йәннәт тиҙәр ҙә һуштары китә. Миңә ҡалһа, ул тас беҙҙең Һаҡмар буйы.

– Хаҡһың, еңгә. – Муйыл сәскә атҡан, гөлйемеш хуш еҫ тараҡкан болон мең төрлө гөлгә күмелгән, еләге тумарлап бешкән мәлдәрҙе берәме-берәм күҙ алдынан үткәреп ихлас ризалашам. Уны мин алдай алмайым, сөнки еңгәмә ниңәлер ялған йоҡмай. Бала зирәклегем менән ҡасандыр сабыйлыҡ тип иҫәпләгәндәрем, был донъяла үтә һирәк осрай торған салт сафлыҡ икәнен йәшәй торғас бик асыҡ аңланым. Инде бына сәсе ап-аҡ ҡылған, ә күҙ – күңелдең көҙгөһө – һаман элеккесә: уңмаған, төҫһөҙләнмәгән, керләнмәгән.

– Ожмаҡ күктә лә, ер аҫтында ла түгел, ерҙә булған, ерҙә килеш ҡалған. Әҙәм балаһы сабый сағында үҙенең ожмахта икәнен тойоп йәшәй, нәфсе, ялған, хәйлә ауына һөҙөлөп, күңеле боҙолғас ҡына онота,– тигән бер фәйләсуф.

– Һин шағир шул, – ти еңгәм. – Күңелең асман аҡылына тоташҡан. Абзыйың да шулай ине. Ҡайҙан беләһең һин барыһын да, тиһәң, шиғыр үҙе әйтте, тиер ине.

Еңгәм уйға бата, күрәһең, үткәндәренә ҡайта. Беләм, абзыйыма ирекһеҙҙән ҡылған “хыянаты” уға ғүмер буйы тынғы бирмәй. Ул саҡта шаҡтай ҙур инем, шуға яҡшы хәбәрҙармын еңгәмде хафаға һалған ул хәлдәргә.

Утарҙа йәшәгән Имаметдин ағай баҫалҡы, эшсән, әҙәм йәнле тип ихтирам ҡаҙанған кеше ине. Ҡатыны аяҡтан яҙып, оҙаҡ йылдар буйы түшәктә ятты. Шул саҡыра ла инәлә Сабира еңгәмә:

– Көндәш түгел, әхирәт булырбыҙ. Беҙҙең халыҡта борон-борондан ике бисә алыу яҙыҡ һаналмаған. Тормошобоҙҙо йәмләй күр.

Килененең зая ғүмеренә һуғыштан башҡа үҙен дә ғәйепле һанағандыр, бәлки, ҡәрсәм дә икенсе яҡтан ҡыҫтай.

Ҡыҫымға бирешеп ризалашҡан еңгәм иһә йылға яҡын ике арала йөрөп, ике донъяны бергә көтә лә ҡабат бейеменә ҡайта:

– Улар бер-береһе өсөн генә яратылған. Эргәләрендә үҙемдең етемлегемде бер ҡасан да булмағанса тойҙом. Мин дә үҙ хәләлемде тапҡанмын. Яҙмышымды үҙгәртергә теләмәйем бүтән.

Әммә әжәлдәренә тиклем уларҙы ташламаны, ғүмер баҡый ҡараны, керҙәрен йыуҙы, ауырыуҙы тәрбиәләне.

Әле килеп шуларҙы гонаһҡа һанай.

– Фанилыҡта оҙаҡ торлауымдың сәбәбе ошолор, бикәс. Йомабай абзыйың менән ҡауышыуыбыҙ шуға һуҙыла, ахыры. Юҡһа, инде уның йәшен дүрт тапҡыр йәшәнем.

– Еңгәм, был һүҙҙәреңдең төптө яңылыш икәнен үҙең дә беләһең, – тип ҡырҡа ҡаршы төшәм. Сөнки был ғәҙеллекте хатта еңгәмдең үҙ ауыҙынан да ишеткем килмәй. – Донъяла ҡылған яҡшылыҡтарың тотҡарлай һине. Бик күп кешеләргә изгелек ҡылғанһың. Хәҙер улар шуның, исмаһам, бер аҙын үҙеңә кире ҡайтарырға тейеш. Уларға бит миһырбан кәрәк, тотош бурыс эсендә торғоҙоп ҡалдырмай бит инде уларҙы ла Хоҙай.

Унан беләм, һине йәнә бер өмөтөң тота.

Еңгәм керпек ҡағышы менән генә ризалығын белдерә. Икебеҙ ҙә мөғжизәләрҙең ғәҙәттән тыш нескә нәмә икәнен аңлайбыҙ, уны һүҙ итеп әүәләү ҡайҙа.

Шунан һаман мөлдөр килеш ҡалған күҙҙәрен көлдөрөп икебеҙ генә аңларлыҡ өҫтәй:

– Сабыр иткәс итәм әле, бикәс.

...Бер ниндәй өмөткә урын булмаһа ла, шиккә бирешмәй һаман көткән өсөн һуңғы мөғжизәһе лә Сабира еңгәмде алдаманы. Алдай алманы, сөнки еңгәм алдында ялған көсһөҙ ине – Йомабай менән Сабираның төпсөк бүләсәре нәҫелдән киткән моң-мираҫ менән тыуҙы.

* * *

Еңгәм беҙҙән мәңгелеккә киткән яҙҙа ниндәйҙер ғәм йоҡомдан яҙҙырҙы. Ҡар аҫтында үлән шытыуын ишеттем. Умырзаяның күк тажын, биләүҙәге баланың йүргәген аҫҡан кеүек, көрттән үҙем әрсәләп сығарҙым. Йәнем һаман тынғылыҡ тапманы. Ләйсән үтте, ыуыҙ ғына булып донъя йәшелләнде. Һағышым баҫылманы.

Бына моң ишеттем. Һандуғастың сут-сут һайрауында уй бар, нур бар, ә әрнеү юҡ ине. Саҡырыу бар ине тантаналы ауаздарҙа. Атылып тышҡа сыҡтым...

Әле бына ҡатҡан да ҡалғанмын: һандуғас алмағасында, инә ҡош таңғы һауала... – бөтөнөбөҙ бергә бәйләнгәнбеҙ.

Һайра!

Минме, таңмы, әллә Зөһрә йондоҙ – бышылданы иң кәрәкле һүҙҙе. Әллә йылғамы, сәскә, һанһыҙ япраҡмы шыбырлап ҡысҡырҙы:

– Данла мөхәббәтте!

Моң ялғанды.

– Бары шул саҡ ҡына абайланым: бөтөн ғәләм бер һөйөүҙең мөғжизәһе – һандуғас туйына йыйылғанбыҙ.

# *Күмертау яҙыусылар ойошмаһына – 15 йыл*

*Быйыл Күмертау яҙыусылар ойошмаһы төҙөлөүгә 15 йыл тула. Был осорҙа Күмертау авторҙары 58 китап баҫтырып сығарған, шул иҫәптән, 15-е – «Китап» нәшриәтендә.*

*Ойошма ағзаларына ижади эштәрендә уңыштар теләп, уларҙың бер нисә әҫәрен уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итәбеҙ.*

**Кинйәғәли АБДУЛЛИН**

## *Башҡортостан*

*Ғүмер биреп миңә атай-әсәй,*
*Тоҡандырған бәхет усағын.*
*Бәхетлемен һиндә тыуыуыма,*
*Гүзәл илем – Башҡортостаным!*

*Һокланамын күреп ыласындың*
*Сикһеҙ күкте ҡосоп осҡанын.*
*Мин йәшәйем ҡанатланып һиндә,*
*Йәнтөйәгем – Башҡортостаным!*

*Ер шарының йәшел бер балаҫы,*
*Донъя киМәлендә тос даның.*
*Һиндәй йәшәү күркәм, ышанысլы,*
*Һокландырғыс Башҡортостаным!*

*Онотмамын ғәзиз әсәйемдең*
*Наҙлы ҡулдарының ҡосҡанын.*
*Әсәй ҙә һин миңә, атайһың да, –*
*Мәрхәмәтле Башҡортостаным!*

---

*Кинйәғәли Абдуллин (1941) Көйөргәҙе районы Яҡуп ауылынан. Оҙаҡ йылдар агроном булып эшләй. 1988 йылдан журналистикаға күсә. 2001 йылдан Күмертау яҙыусылар ойошмаһын етәкләй. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы, Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

## Һөйөү яҙы

*Яҙҙар килде, ерҙе биҙәп*
*Хәтфәләй үләндәргә.*
*Мөхәббәттә ҡауышыр мәл –*
*Аңлаша белгәндәргә.*

*Тулҡын-тулҡын һыуҙар аға*
*Һыялмай үҙәндәргә.*
*Һөйөү хистәре ташыр мәл –*
*Тулҡына белгәндәргә.*

*Яҙҙар – ҡауышыу миҙгеле*
*Өҙөлөп һөйгәндәргә.*
*Яҙҙар матур – саф һөйөүҙе*
*Баһалай белгәндәргә.*

*Бәхет килә сабыр итеп*
*Көткән һәм түҙгәндәргә.*
*Ҡауышыуҙар насип була*
*Тик һөйә белгәндәргә,*
*Һөйөлә белгәндәргә.*

## Заман еле

*Ҙур кинәнес табып үҙ эшенән,*
*Берәү елдә ашлыҡ елгәрә.*
*Тос орлоҡтар тура ғына төшә,*
*Буштарын ел ары ебәрә.*

*Хистәр тулы күңелемде мин дә*
*Елләтәмен заман еленә.*
*Еңел-елпе, ҡыҫыр хыялдарҙы*
*Осорамын бушлыҡ иленә.*

*Саф өмөттәр менән тулҡынланһын*
*Күңелемдең хыял диңгеҙе.*
*Тос хыялдар гөрләп шытым бирһен,*
*Көслө шытым – уңыш нигеҙе.*

## Килһәңсе

*Күңел күгем һине көтә,*
*Ҡанат ҡаҡсы ҡош булып.*
*Мин дә осормон яныңдан*
*Ҡанатыңа ҡуш булып,*
*Хыялыңа ҡушылып.*

*Мөхәббәтем диңгеҙендә*
*Аҡҡош булып йөҙһәңсе.*
*Һиңә табан тулҡын ярам,*
*Һөйөүемде һиҙһәңсе,*
*Хәлдәремде белһәңсе,*
*Ҡаршы йөҙөп килһәңсе...*

## *Шаяртма*

*Мең-мең йондоҙ миңә күҙен ҡыҫа,*
*Зәңгәр күк ҡапҡаһын шар асып.*
*Ер йондоҙо – гүзәл бер йәш һылыу*
*«Яратам» ти миңә, шаяртып.*

*Юҡ, шаяртма, мине үртәп, һылыу,*
*Шаяртыуҙан инде үткәнмен.*
*Һылыуҙарҙы тик алыҫтан ғына*
*Күҙ ҡыҫыусы йондоҙ иткәнмен.*

**Руша СОЛТАНҒОЛОВА**

## *Көйөргәҙе ере*

*Көйөргәҙе ере ҡайҙа?*
*Ул бит Көньяҡ Уралда.*
*Дошман килһә, башҡорттарым*
*Тотонғандар ҡоралға.*

*Көйөргәҙе ере ҡайҙа?*
*Иген үҫкән ҡырҙарҙа.*
*Ҡурай һулышын иркәләп,*
*Сыңрап сыҡҡан йырҙарҙа.*

*Көйөргәҙе ере ҡайҙа?*
*Күмер сыҡҡан ерҙәрҙә.*
*Өмөт менән киләсәккә*
*Үткер баҡҡан күҙҙәрҙә.*

*Көйөргәҙе ере ҡайҙа?*
*Моңло башҡорт ерендә.*
*Аҡ мамыҡтай аҡ болоттар*
*Йөҙә зәңгәр күгендә.*

---

*Руша Солтанғолова (1965) Ейәнсура районы Яңыбай ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Күмертау ҡалаһының 3-сө республика гимназияһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡыта. «Аҡ шоңҡарым» исемле шиғри йыйынтыҡ авторы.*

## Килен

*Килен – килмешәк ул, тиҙәр,*
*Килен килмешәк түгел.*
*Бер ҙә юкка ҡайһы сакта*
*Бошоноп ҡуя күңел.*

*Ситен итеп һанамағыҙ,*
*Яҙмыш шулай ҡушҡандыр.*
*Ҡыҙ балаҡай йәнтөйәктән*
*Осар ҡоштай осҡандыр.*

*Көйөргәҙем, яҡын күрсе,*
*Мин килен һиндә, килен.*
*Гүзәллегең арттырырлыҡ*
*Изге нур булып килдем!*

**Нәсимә ЙОСОПОВА**

## Мин тормошто яратам

*Хыялдарым – буш башаҡта,*
*Күңелкәйем тулышҡан.*
*Ҡулдарымда – көрәк, кәләм,*
*Мин – эшһөйәр тыумыштан.*

*Сафъян итек мин кеймәнем,*
*Аҡ мәрйендәр төҫ түгел.*
*Юҡ хөрмәтле ял йорттары,*
*Күпте теләй ҙә күңел.*

*Ник кешесә йәшәй белмәй,*
*Тыҡылдатып баҫмайым?*
*Бил бөгөү түгел нәҫелдәш,*
*Үҙемсә мин атлайым.*

*Ғәйептәрем, ах, ҙур икән...*
*Елдәр, һеҙгә таратам!..*
*Яҙҙа ләйсән күңел йыуһын,*
*Ҡабаттан сәскә атам,*
*Мин тормошто яратам!*

---

*Нәсимә Йосопова Көйөргәҙе районы Зәк-Ишмәт ауылынан. Балалар өсөн яҙған бер нисә китабы донъя күрҙе. Биш бала әсәһе.*

## Һөйөнөслө көн

*Һөйөнөслө көн бит бөгөн,*
*Һөйөнөскә тулған көн.*
*Ҡунаҡҡа килде дуҫтарым,*
*Бөгөн – минең тыуған көн.*

*Күмәкләшеп ҡотланылар,*
*Бүләк алыу күңелле.*
*Ҡосаҡҡа һыймай сәскәләр,*
*Бүлмәм нурға күмелде.*

*Һөйөнөслө көн бит бөгөн,*
*Һөйөнөскә тулған көн.*
*Әйҙәгеҙ байрам итәйек,*
*Бөгөн – минең тыуған көн.*

*Ҡояштай балҡый әсәйем,*
*Татлы ризыҡ өҫтәлдә.*
*Атайым да эштән ҡайтты*
*Изге теләк өҫтәргә.*

*Һөйөнөслө көн бит бөгөн,*
*Һөйөнөскә тулған көн.*
*Йыр ташҡыны күңелемдә,*
*Бөгөн – минең тыуған көн.*

## Серле гөлөм эсендә

*Күҙҙәрем гел күҙҙәреңдә,*
*Күҙҙәрең ҡараһында.*
*Бәхет асҡыстары барҙыр*
*Шул серле ҡарашыңда.*

*Күҙҙәрем гел күҙҙәреңдә,*
*Серле ғаләм эсендә.*
*Бер күреүҙә ялҡын ҡабыу –*
*Мөхәббәттең көсө лә.*

*Йәшермә ҡараштарыңды,*
*Мөхәббәтһеҙ һулырмын.*

*Күҙҙәр күҙҙәрҙә булғанда,*
*Мин сәскәләй булырмын.*

## Моңдар иле

*Селтер-селтер шишмә йырлай,*
*Шишмә теле – моң ғына.*
*Ҡоштар һайрай, сут-сут килә,*
*Ҡоштар теле – моң ғына.*

*Бишек көйө көйләй әсә,*
*Бишек көйө – моң ғына.*
*Көйләп-көйләп ямғыр яуа,*
*Тамсы сыңы – моң ғына.*

*Һәр кемдең бит үҙ теле бар,*
*Бар телдәр ҙә моң ғына.*
*Моң илендә йәшәйбеҙ, тип*
*Тыңлап торҙом тын ғына.*

## Рәхмәт һүҙе

*Танһыҡлатҡан болот килде,*
*Күстәнәсе бик мулдан.*
*Эй, кинәнде тәбиғәтем,*
*Һыйланып йомарт ҡулдан.*

*Төрлө төҫтән балҡый гөлдәр,*
*Күҙҙәрҙең яуын алып.*
*Бал ҡорттары сихәт ташый,*
*Йөктәрен иңгә һалып.*

*Бил яҙҙылар ағастар ҙа,*
*Йәшел шәлдәрен ҡағып.*
*Алма-сейә маҡтаныша,*
*Сағыу алҡалар тағып.*

*Сут-сут килә һайрар ҡоштар,*
*Өр-яңынан йырҙары.*
*Ер-Әсәгә, ғаләмдәргә*
*Рәхмәт һүҙе-моңдары.*

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА**

## *Һәйкәл*

Я памятник себе воздвиг нерукотворный...
А. С. Пушкин.

*Шиғыр һығып сығарыр*
*Йөрәгемдең хәле юҡ.*
*Фекер сыймаҡлап ҡуйырға*
*Форсаты юҡ, мәле юҡ.*

*Ниндәй тормош һуң әле был:*
*Этеш, төртөш, йүгереш;*
*Кемуҙарҙан аҡса эшләү,*
*Тәгәрәш йә өлгөрөш.*

*Бер минутҡа туҡтап тороп,*
*Уйланып алайыҡсы.*
*Донъя артынан ҡыуам тип,*
*Отолоп ҡалмайыҡсы.*

*Үҙең менән алалмайһың –*
*Барыһы тороп ҡала.*
*Донъя малы – байлыҡ түгел,*
*Күңел паклыгын уйла.*

*Ике сажин ер етәлер*
*Гүр ҡуйынына ятырға.*
*Ниңә ҡыҫҡа гүмереңдә*
*Иблискә йән һатырға?*

*Ниндәй һәйкәл ҡуйҙың икән,*
*Ҡалһын, тип, үҙеңдән һуң:*
*Өйөң бармы, балаң бармы,*
*Агас үҫтерҙеңме һуң?*

*Миңә һәйкәл – шиғырҙарым,*
*Итәгәтле өс ҡыҙым.*
*...Камиллыҡҡа ынтылам тип,*
*Йөрәк майымды һыҙҙым...*

---

*Хәлиҙә Алтынбаева (1957) — Көйөргәҙе районының Бәләкәй Муса ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән укыта, район гәзитендә хәбәрсе, «Китап» нәшриәтендә мөхәррир була. Өс ҡыҙ үҫтерә. Күмертауҙа йәшәй.*

## Сәңгелдәк

*Эйәм дә һуң сәңгелдәк, эй, эйәм!*
*Эйә-эйә, түбәм күккә тейә.*
*Үҙ-үҙемде юғарыға сөйәм –*
*Гүйә, күңел сихри көскә эйә.*

*Осоп китке килә шул саҡтарҙа*
*Ожмахтай ҙа гонаһһыҙ яҡтарға.*
*Күктә лә тороп ҡалып булмай шул,*
*Ергә лә кире ҡайтмай булмай шул...*

*Сәңгелдәгем ҡапыл аҫҡа төшә,*
*Йөрәккенәм туҡтап, аһ, бөрөшә.*
*Кемуҙарҙан елдәр, эй, төртөшә –*
*Ә мин йәшәү өсөн гел көрәшәм.*

*Аҫҡа осһам да мин, түгел күпкә,*
*Күтәреләм тағы зәңгәр күккә.*
*Беләм, бер саҡ туҡтар ул сәңгелдәк –*
*Фани донъя түгел бит мәңгелек.*

*Эйәм дә һуң, эйәм, эй, сәңгелдәк,*
*Елбер-елбер килә ап-аҡ күлдәк...*

## Күгәрсен күҙҙәре

*Күк йөҙөндәй зәңгәр балаҫ*
*Түшәлгәйне тауымда.*
*Аунап үҫтем шул балаҫта*
*Ялан тәпәй сағымда.*
*Күгәрсен күҙҙәре,*
*Күгәрсен күҙҙәре!*
*Ҡайҙа икән һеҙҙә ҡалған*
*Кескәй ҡыҙҙың әҙҙәре?*

*Зәңгәр сәскәләр юҡ хәҙер,*
*Йыуалар ҙа юғалған.*
*Тәүге мөхәббәт һуғарған*
*Йәшлек юлы юйылған.*
*Күгәрсен күҙҙәре,*
*Күгәрсен күҙҙәре!*
*Ҡайҙа икән һеҙҙә ҡалған*
*Үҫмер ҡыҙҙың әҙҙәре?*

*Аҡморонға ла мендем,*
*Текә тауҙы тапаным.*
*Бала саҡтың, йәшлегемдең*
*Һуҡмаҡтарын тапманым.*
*Күгәрсен күҙҙәре,*
*Күгәрсен күҙҙәре!*
*Онотолмай күҙ алдымда*
*Йәшлегем сәскәләре...*

**Хәмзә ИШДӘҮЛӘТОВ**

## *Урап үттең*

*Айҙар үтә, йөрәк көтә*
*Ҡауышыу минуттарын.*
*Йылдар үтә, ғүмер үтә,*
*Тараламай һағыштарым.*

*Төштәремә инәһең һин,*
*Болондағы сәскәләй.*
*Алһыу биттәреңдән үбәм –*
*Ҡулың мине иркәләй.*

*Күпме көттөм, сабыр иттем,*
*Һүрелтмәй һөйөү утын.*
*Башҡаларға күңел һалдың,*
*Һин мине урап үттең.*
*Һағышлы, моңло иттең...*

## *Себер юлындағы уйланыуҙар*

*Себер һүҙе халыҡ күңелендә*
*Ҡайғы булып ҡалған уйылып.*
*Ошо юлдан эшкә китеп барам,*
*Уйҙар килә юлдай һуҙылып.*

*Батша заманында ошо юлдан*
*Күпме кеше киткән һөргөнгә.*
*Тыуған ергә бик әҙҙәре ҡайтҡан,*
*Бик күптәре ҡалған мәңгегә.*

---

*Хәмзә Ишдәүләтов (1954) Ейәнсура районы Абзан ауылынан. Күмертауҙа йәшәй.*

Тимер тәгәрмәстәр сыңлауында
Быгау тауыштарын ишетәм.
Ниндәй яҙмыш тартты һине, халкым, –
Акыл етмәй кайсак, иҫ китә.

Азат Совет иле бар сагында,
Тимер юл төҙөүгә кыуҙылар.
Юл төҙөгән сакта меңәрләгән
Эҙһеҙ кәберлектәр калдылар.

Тук-тук иткән тимер тәгәрмәстәр
Хәтерләтә быгау сыңдарын.
Кеше каргыштары кәһәрләйҙер
Мәңгелеккә Себер юлдарын.

Яңы быуат башы. Кеше хәҙер
Үҙе теләп китә Себергә,
Оҙон акса түгел, яҙмыш еле
Донъя буйлап шулай йөрөтә.

Эшһеҙлектән интегәләр күптәр,
Эше булһа, юктыр аксаһы.
Кайҙа барһын инде ябай халык –
Эҙләп китә бәхет баксаһын.

Себер ере нефткә, газга бай.
Тик кем күрә файҙа байлыктан?
Ябай халык бушка эшләп кайта,
Өшөп-калтыранып һыуыктан.

Хоҙай биргән байлык таләфләнә
Комһоҙлоктан, нәфсе талашып.
Килер быуындарга ни калыр һуң?
Хафалы уй йөрөй аҙашып.

# АҪЫЛ ИКӘН ЗАТЫҢ – ҺҮҘЕҢ БУЛҺЫН АЛТЫН

*(Шағирәләребеҙҙең быуат башында “Ағиҙел“ биттәрендәге ижадына бер ҡараш)*

1

Ҡайһы бер «аҡыл эйәләре» илебеҙҙең совет осорон нисек кенә хурламаһын һәм уны тарих битенән йолҡоп ташлап, тиҙерәк онотторорға тырышмаһын, шул дәүерҙә төрлө өлкәлә яуланған ҡаҙаныштарға күҙ йомоп ҡараһаҡ, дөрөҫлөккә хилафлыҡ булыр ине. Бындай ҡараштың ысынлап та хилафлыҡ икәнлегенә башҡорт әҙәбиәте, айырыуса уның ХХ быуат дауамында сәскә атҡан шиғриәте миҫалында төшөнөргә мөмкин.

Күп кенә халыҡтарҙыҡынан айырмалы булараҡ, башҡорт поэзияһы үҙенең гүзәл шағирәләре менән дан тота һәм улар менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. Был да – совет системаһының бөтөнләй үк яраҡһыҙ булмағанлығын, гел генә ҡара буяуҙарҙан тормағанлығын раҫлаусы факттарҙың береһе. Ун етенсе йылға тиклем түр яҡҡа шаршау артынан ҡасып-боҫоп ҡына күҙ һирпеп йәшәргә дусар ителгән мосолман ҡатынының (бында башҡорт һәм татар ҡатын-ҡыҙҙары ғына түгел, Кавказ, Урта Азия һәм башҡа шундай төбәктәрҙә көн күргән мосолман ҡатын-ҡыҙҙары ла күҙ уңында тотола) егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа, уҡырға-яҙырға өйрәнеп кенә ҡалмайынса, әкренләп әҙәбиәт донъяһына тартылыуы һәм ижад серҙәренә төшөнә башлауы был фактты уғата ла көсәйтә һәм артабан бәхәсләшергә урын ҡалдырмай.

Башҡорт ерлегендә пәйҙә булған ошондай аҫыл заттарҙың иң тәүгеһе – Һәҙиә Дәүләтшина икәнлеге һәр кемгә билдәле. Дөрөҫ, беҙҙең аңға ул башлыса сәсмә әҫәрҙәр («Һылыуҡай-пионерка», «Һырға һабағы» тигән хикәйәләр, «Айбикә», «Башаҡтар тулҡыны» исемле повестар, ниһайәт, атаҡлы «Ырғыҙ» романы) авторы булараҡ һеңеп ҡалған. Ләкин, төрлө сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Һ. Дәүләтшина байтаҡ ҡына шиғырҙар ҙа яҙып ҡалдырған. Ҡайһы бер ғалимдарҙың фараз итеүенсә, уларҙың әлегә табылмағандары ла булырға тейеш. Тимәк, Һәҙиә Дәүләтшинаны башҡорт әҙәбиәтендәге ҡатын-ҡыҙҙар поэзияһының (был төшөнсә һирәк-мирәк кенә төрлө осорҙа һәм төрлө телдә ҡолаҡҡа салынып киткеләһә лә, ул шартлы рәүештә генә ҡулланылалыр, тип уйлайым) юл ярыусыһы тип атарға тулы нигеҙ бар.

Юл ярыусының эҙенә оҙаҡламай Зәйнәб Биишева, Кәтибә Кинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова аяҡ баҫа. Улар һуғышҡа тиклем үк әле, төрлө уҡыу йорттарында белем алып йөрөгән саҡта, ҡәләм тирбәтә башлай. Һуғыштан һуңғы 1947 йылда был өсәүҙең

---

*Әнғәм Хәйбрахман улы Хәбиров 1936 йылдың 6 сентябрендә Саҡмағош районының Тайнаш ауылында тыуған. Бөрө педагогия институтын тамамлай. Филология фәндәре кандидаты, профессор, Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*75 йәшлек оло юбилейы менән ҡотлап, ижади уңыштар, бәхет, һаулыҡ теләйбеҙ.*

береһе – егерме алты йәшлек **Фәүзиә Рәхимғолова** – «Яҡын дуҫ» исемле тәүге поэтик йыйынтығын баҫтырып сығара. Тышлығында ҡатын-ҡыҙ фамилияһы балҡып торған был китап автор биографияһында ғына түгел, бөтә башҡорт поэзияһы тарихында ла (Һәҙиә Дәүләтшинаның Өфөлә 1935 йылда башҡорт телендә донъя күргән «Хикәйәләр шәлкеме» һәм 1936 йылда рус телендә баҫылып сыҡҡан «Айбика» тигән китаптарын иҫәпкә алмағанда, әлбиттә) тәүгеләрҙән ине.

Артабан йәш шағирәнең «Гел алға» (1954), «Март ҡояшы» (1959), «Зәйнәптең йыры» (1960), «Хуш киләһең» (1962) тигән йыйынтыҡтары бер-бер артлы донъя күрҙе. Шул йылдарҙа, Фәүзиә Рәхимғоловаға эйәреп тигәндәй, **Кәтибә Кинйәбулатова** әүҙемләшеп китә. Уның «Тәүге сәскәләр» (1954), «Йәшел япраҡтар» (1958), «Әнисә» (1960), «Һүнмәҫ мөхәббәт» (1962) исемле шиғри йыйынтыҡтары, тамаҡ хаҡына йылдарҙа төрлө ерҙә эшләп йөрөргә мәжбүр булған авторҙың, тамам әҙәби ижад юлын һайлағанлығын раҫланы.

Фәүзиә Рәхимғолова менән Кәтибә Кинйәбулатованан бер ни тиклем айырмалы булараҡ, ижадтың ике төрөнә – театр сәнғәтенә һәм әҙәбиәткә көсөнән килгәнсә тоғро хеҙмәт иткән **Рәғиҙә Янбулатова** ла үҙенең «Елбәҙәк ҡарҙар» (1959) һәм «Таныш көйҙәр» (1962) тигән тәүге китаптарын уҡыусыға тап ошо осорҙа бүләк итте. Ниһайәт, **Зәйнәб Биишеваның** поэма һәм шиғырҙарын туплаған (быға тиклем ул күберәк сәсмә әҫәрҙәрен нәшер итеү менән мәшғүл булды) «Гөлбәҙәр» (1961) тигән китабы. Бына шулай һалынды совет осорондағы башҡорт әҙәбиәтендә «ҡатын-ҡыҙҙар поэзияһы»ның нигеҙ таштары.

Һәр ҡайһыһы үҙ юлы, үҙ иманы менән әҙәбиәткә килгән Әлфинур Вахитова, Гөлфиә Юнысова, Әнисә Таһирова, Айһылыу Йәғәфәрова, Фәниә Чанышева, Рәмзилә Хисаметдинова, Миңлегөл Хисмәтуллина, Зөбәржәт Йәнбирҙина, Зарема Әхмәтйәнова, Факиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниева кеүек яңы көстәр ҡатнашлығында был шиғриәт уҙған быуаттың һикһәненсе йылдар башына көслө бер ағымға әүерелде, тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ. Тәбиғи, яңы көстәр (бында авторҙарҙың исем-шәрифтәре уларҙың йәш айырмалыҡтарына ҡарап түгел, ә тәүге китаптарының баҫылып сығыу тәртибе буйынса һаналды) әҙәбиәткә ниндәйҙер яңылыҡтар алып килһә лә, ижади яҙмыштары һәм поэзиябыҙға индергән өлөштәре төрлөсә булды.

Ҡайһы берҙәре йәшерәк саҡта дәррәү генә эшләп алды ла һүңыраҡ нишләптер һүрелеп ҡуйҙы. Бәғзеләр иһә үҙ һәләттәрен шиғриәткә генә түгел, ижадтың башҡа төрҙәренә лә берҙәй әүҙем сарыфланы. Ҡыҙғанысҡа күрә, яҡты донъянан иртәрәк китеп, талантлары бөтә күркәмлегендә һәм бөтә тәрәнлегендә асылып бөтмәйсә, ижадтары ярты юлда өҙөлөп ҡалғандар ҙа юҡ түгел был исемлектә. Әммә, нисек кенә булмаһын, улар, бөтәһе лә бергәләп, өлкән ҡәләмдәштәре һалған һуҡмаҡты һыуытманылар, ҡулдарынан һәм көстәренән килгәнсә уны артабан киңәйтеү – үҫтереү хәстәрен күрҙеләр, иҫәндәре иһә был изге эште әле лә дауам итә.

Һикһәненсе йылдарҙа «ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәте»нә (был юлы ла аҫыл заттарҙың исемдәре уларҙың йәштәренә ҡарап түгел, ә тәүге йыйынтыҡтарының донъя күреү тәртибендә килтерелде) Таңһылыу Ҡарамышева, Нәжибә Әминева, Гөлшат Әхмәтҡужина (Гөлгизәр Фәйзи), Гүзәл Ғәлиева, Эльмира Сәсәнбаева (Сәсәния), Зөһрә Ҡотлогилдина, Гүзәл Ситдиҡова, Кәүсәриә Шафиҡова, Дилә Булгакова, Тамара Искәндәриә, Миңлегөл Хисамова, Гөлнур Яҡупова, Динә Талхина, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Йомабикә Ильясовалар тауышы ла өҫтәлгәс, ул инде ҡеүәтле ташҡынды хәтерләтә башланы.

Шуныһы ҡыуаныслы: ташҡынға оҡшаған был ағымға әленән-әле, урғылып сыҡҡан яңы шишмәләр ҡушылып тора, һәм ваҡыт үткән һайын ташҡын-ағым

шул шишмәләр иҫәбенә уғата ла киңәйә, тәрәнәйә һәм ҡеүәтләнә бара. Тукһанынсы йылдарҙа, мәҫәлән, шиғриәт күгендә Гөлсирә Шафиҡова, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Римма Ғәлимова, Лилиә Ҡәйепова (Һаҡмар), Гөлназ Ҡотоева, Фәндидә Харрасова, Айһылыу Ғарифуллина, Нәфисә Хәбибдиярова кеүек яңы исемдәр ҡалҡты. Ижад юлдарының тәүге ун йылында уҡ улар икешәр, ҡайһы берҙәре хатта дүртәр-бишәр китап сығарып өлгөрҙө.

Ошо факттарға таянып, әҙәбиәтебеҙҙә утыҙынсы йылдарҙа тамырлана башлаған «ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәте», етмеш йыл дауамында ил алдында, туған халҡы алдында торған дөйөм бурыстарҙы художество саралары менән хәл итешеүҙә әүҙем ҡатнашып, быуатты ослағанда үҙ аллы һәм ғәжәп ҡыҙыҡлы бер күренешкә әүерелде, тиергә була. Тик бында үҙаллылыҡты һис кенә лә айырымланғанлыҡ тип аңларға ярамай. Киреһенсә, «ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәте» – ир-егеттәр ижад иткән поэзия менән һыйышып йәшәүсе, уның менән бергә атлаусы, уға көсҡеүәт өҫтәүсе күренеш.

Әммә был күренештең үҙенә генә хас айырым сифаттары ла юҡ түгелдер, моғайын. Әйтәйек, ижтимаҒи-сәйәси мәсьәләләргә шағирәләр ниндәйерәк күҙлектән ҡараусан? Ғөмүмән, уларҙы сәйәсәт ҡыҙыҡһындырамы? Әллә көндәлек тормош мәшәҡәттәре ысҡындырмаймы үҙ ҡыҫаһынан? Әгәр сәйәсәткә лә урын ҡалһа, уға ҡарата үҙ фекерҙәрен туранан-тура ярып һалалармы, әллә уратыбыраҡ белдерәләрме? Был һорауҙарға гражданлыҡ позицияһы тигән төшөнсә килеп ялғана. Ул – шағирҙар өсөн дә, шағирәләр өсөн дә бик мөһим күрһәткес. Унан иһә тормоштоң, ерҙә йәшәүҙең фәлсәфәүи аҫылын аңлау ҡеүәһе үҫеп сыға. Беҙҙең бөтә булмышыбыҙҙа ҙур урын алып торған тағы ла бер тема – мөхәббәт темаһы нисегерәк сағыла икән шартлы рәүештә генә булһа ла ике төркөмгә бүлеп ҡаралған шиғриәттә? Уларҙың ҡайһыһында ихласлыҡ, тойғолар сафлығы, хистәр нескәлеге көслөрәк яңғырай һәм ҡайһыһында психологик тәрәнлек өҫтөнлөк итә? Әллә икеһендә лә бер самамы? Кем кемде күберәк һәм йышыраҡ ғәйепләй, йә иһә ҡурсалай? Әхлаҡ, рухиәт проблемалары ҡайһылайыраҡ яҡтыртыла, һәм улар ғәҙәттә ҡайһы яҡ файҙаһына хәл ителеүсән?

Уйлай китһәң, ошондай һәм ошоға тартым һорауҙар атлаған һайын тиерлек тыуып ҡына тора. Һәм ул бик тәбиғи. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әлегә беҙ уларға иғтибар итеп еткермәйбеҙ, дөрөҫөрәге – бөтөнләй иғтибар итмәйбеҙ, шикелле. Тәү ҡарамаҡҡа был һорауҙар әллә ни ҡатмарлы ла, һуштан яҙып йығылып китерлек тә түгел һымаҡ. Ләкин уларға мөмкин тиклем тулы, мөмкин тиклем төплө яуапты, минең ҡарашымса, әҙәбиәт ғилеме киңлектәрендә генә түгел, бәлки, философия, логика, социология, психология, физиология, педагогика кеүек йәнәш фәндәр сиктәрендә лә эҙләргә кәрәктер. Был мәҡәләлә иһә ундай ҙур маҡсат ҡуйылмай, сөнки ул бер ултырыуҙа ғына хәл ителә торған мәсьәлә түгел. Иҫ киткес ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс был проблема үҫеп килеүсе йәш ғалимдар ҡарамағына ҡалып торһон. Бөгөн иһә аҫыл заттарҙың яңы быуат башында «Ағиҙел» биттәрендә баҫылып сыҡҡан ҡайһы бер шиғри шәлкемдәренә еңелсә ҡараш ташлап алыу менән генә сикләнергә иҫәп.

2

Һүҙҙе Егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫҡанда үҙҙәренең күркәм юбилейҙарын билдәләгән өлкәнерәк быуын өс шағирәнән – Кәтибә Кинйәбулатова, Фәниә Чанышева һәм Әлфинур Вахитованан башлаһаҡ, дөрөҫөрәк булыр.

Төрлө йылдарҙа, Өфөлә һәм Мәскәүҙә, башҡорт һәм рус телдәрендә утыҙлап китап баҫтырып сығарған **Кәтибә Кинйәбулатова** ижадындағы иң емешле осор XX быуаттың икенсе яртыһына ҡарай. Ләкин ул XXI быуат башында ла ҡул ҡаушырып ятмай. Был турала

шағирәнең ижадташы, ҡәләмдәш һеңлеһе Әнисә Таһирова үҙенең «Шиғыр көҙө булмай...» тигән мәҡәләһендә («Ағиҙел», 2005, 9-сы һан) бик асыҡ һәм аңлайышлы итеп яҙҙы: «Ғәжәп, инде 85 йәшен туйлаған шағирәнең ижад ҡомары һис тә кәмемәй, сағыу хистәре һүрелмәй, фекерләүе, шиғри биҙәктәре элеккесә баҙыҡ, һоҡландырғыс».

Әйткәндәй, Кәтибә Кинйәбулатованың шәхесе теге быуатта ла иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Уның бер-бер артлы сығып торған китаптарына, Лев Толстойҙыҡына шикелле саманан тыш күп булмаһа ла, тейешле баһа бирелә барҙы. Юбилейҙары ла онотолманы. Шағирәнең ижады Муса Ғәли, Ҡадир Даян, Назар Нәжми, Ғәйнан Әмири кеүек танылған ҡәләмдәштәрен генә түгел, Салауат Галин, Александр Макаров, Әхиәр Хәкимов, Ғайса Хөсәйенов кеүек билдәле ғалимдарҙы ла ҡыҙыҡһындырҙы һәм уның исемен Өфөнән Мәскәү юғарылығына алып сыҡты. «Башҡорт әҙәбиәте тарихы»ның алтынсы томындағы (1996) монографик очерк иһә (уның авторы академик Ғайса Хөсәйенов) әҙибәнең тормош һәм ижад юлын мәңгеләштереп ҡуйҙы.

**Әнисә Таһированың** өҫтә телгә алынған мәҡәләһендә Кәтибә Кинйәбулатова ижадына яңысараҡ ҡараш ташланған, тиер инем. Анна Ахматова ижадына мөкиббән киткән Ә. Таһирова рус шағирәһе менән башҡорт шағирәһенең биографияларында ғына түгел, бәлки, уларҙың ижадтарында ла ҡайһы бер оҡшашлыҡтар һәм уртаҡлыҡтар таба. Ләкин «Шиғыр көҙө булмай...» тигән мәҡәләнең әһәмиәте һәм күҙгә бәрелеп торған өҫтөнлөгө, минеңсә, К. Кинйәбулатова шиғриәтендәге быға тиклем иҫкә алынмаған сифаттарға иғтибар йүнәлтелеүҙәләр. Өлкән ҡәләмдәшенең егәрлегенә, шиғриәтенең эстетик кимәленә һоҡланып, мәҡәләнең авторы ошондай һөҙөмтәгә килә: «... башҡорт әҙәбиәтенә ярты быуат хеҙмәт иткән Кәтибә Кинйәбулатова, шағирәләрҙән иң беренсе булып, башҡорт поэзияһын үҙенең саф, самими, шул уҡ ваҡытта ярһыу тойғоло лирикаһы менән <u>классик юғарылыҡҡа күтәрҙе»</u> (Һыҙыҡ өҫтөнә мин алдым. – **Ә.Х.**).

Бирелгән баһаның хаҡлығы һәм ғәҙеллеге шик тыуҙырмай. Быға ышаныу өсөн К.Кинйәбулатованың бөтә китаптарын аҡтарып ултыраһы юҡ – юбилей айҡанлы «Ағиҙел»дең шул уҡ һанында баҫтырылған ун өс шиғыр, әйтерһең дә, Ә. Таһированың фекерен раҫлау өсөн һайлап алынған. Бында шуларҙың бер нисәһенә («Һағыш, һағыш», «Тағы төшкә индең», «Минән бәхетле юҡ», «Ҡайҙан белһен», «Көнбағыштар») күҙ һалайыҡ.

«Ҡайҙан белһен» тигән шиғыр тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойола. Хатта исеме лә бигүк шиғриәтсә яңғырамаған төҫлө. Шуғалыр, бәлки, тиҙ генә хәтергә лә һеңмәй. Әммә, елегенә төшөргә ниәтләп, уны ҡат-ҡат уҡыһаң, баштағы тәьҫорат әкренләп юҡҡа сыға. Шиғырҙың атамаһы йәнле кеше шәйенә индереп һүрәтләнгән сәскә миҫалында асыҡлана: яңы ғына ҡарҙан арынған уйым ерҙә башын ҡалҡытҡан сәскә көтөп алынған яҙғы көндөң иртәнсәк йылы булыуын, ә төнгә ауышҡас һалҡынайтырын һәм шуның һөҙөмтәһендә таң атыуға үҙенең шиңеп ҡалырын ҡайҙан белһен инде?! Шиғыр К. Кинйәбулатова стиленә хас йомшаҡ, күңелдә иреткес тел менән яҙылған. Ошо бәләкәй генә әҫәргә ниндәй тәрән мәғәнә һалынғанлығы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ:

*Ҡайҙан белһен сабый –*
*бер ҡатлылыҡ –*
*Яҙҙарҙың да уҫал көлөүен,*
*Нур балҡыған, һикергән дә баҫҡан,*
*Ихластыр, тип уның һөйөүе...*
*Ҡайсаҡ*
*Шулай итә яҙмыш кешене,*
*Асыҕауыҙ минең ишене...*

Килтерелгән юлдарҙан күренеүенсә,

сабыйға тиңләнгән сәскәнең аяныслы яҙмышы уның бер ҡатлылығы менән аңлатыла. Ә был сифат башлыса ихлас күңелле, яҡты уйлы, эскерһеҙ кешеләргә хас булыусан. Автор үҙе лә шундайҙар иҫәбендәлер, моғайын. Ләкин әҫәрҙең мәғәнәһе быны менән генә сикләнмәй. Көләп, йылмайып, көн дә таң һарыһынан ҡалҡҡан яҙғы ҡояштың алдатҡыс икәнлеге халыҡ телендәге «Ялтыраған бөтә нәмә лә алтын булмай» тигән әйтемгә тап килә һымаҡ та баһа. Иртән нур балҡыу менән тиҙерәк көнгә баҡҡан сәскәнең ҡылығы иһә (шиғырҙа һүҙ бешеү тураһында түгел, һыуыҡ тейеп быжыу хаҡында барһа ла) халыҡ телендәге икенсе әйтемде – «Ашыҡҡандың ауҙы бешкән» тигәнде хәтерләтә түгелме ни?

«Минән бәхетле юҡ» исемле шиғырҙың да халыҡ ижады традицияларынан үҫеп сыҡҡанлығы бәхәс уятмаҫ. Ҡыҫҡа ғына ошо шиғырҙың лирик геройняһы үтелгән тормош юлына еңелсә күҙ һирпеп алған һәм шул уҡ ваҡытта үҙенең ҡайһы бер характер үҙенсәлектәре менән дә уртаҡлашҡан. Һуңғы строфала иһә ул, артыҡ күп нәмәгә өмөт итмәйенсә, берҙән-бер теләген белдергән:

*Бер бүреккә ике баш һыймай, тип*
*Әйтә ине бик йыш атайым.*
*Шуға, тим, мин теге донъяға ла*
*Йыр-моң менән генә ҡайтайым.*

«Бер бүреккә ике баш һыймай» тигән һөйләм уҡыусының иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмаҫ. Ләкин бында уға иркенләп туҡтап тороуҙың әллә ни хәжәтен күрмәйем. Сөнки йөкмәткеһе менән ошоға тартым әйтемдең төрлө варианттарын халыҡ ауыҙ-тел ижадында йыш ҡына осратырға мөмкин. Ә бына «теге донъяға... ҡайтайым» һүҙбәйләнешенә ҡолаҡ һалһаҡ, яҙыҡ булмаҫ. Сөнки унда шағирәнең һүҙгә, һүҙҙең яңғырашына һәм мәғәнәһенә ҡайһылай һаҡсыл һәм иғтибарлы икәнлеге күҙгә бәрелеп тора.

Ғәҙәттә, фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күсеү тураһында һүҙ сыҡҡанда, "теге донъяға китте" тиеүсәндәр. Кәтибә Кинйәбулатова иһә «... теге донъяға ла йыр-моң менән генә китәйем» тимәй, ә «ҡайтайым» ти. «Йыр-моң менән генә ҡайтайым» тигән юл «Әйтә ине бик йыш атайым» тигән юл менән аралаш рифмалашҡан, дөрөҫөрәге – «ҡайтайым» һүҙе «атайым» менән ауаздаш. Әгәр автор «ҡайтайым» урынына «китәйем» тиһә лә, әллә ни диссонанс булмаҫ ине: «атайым»дағы бер аҙ ҡалынраҡ яңғыраған ялғау һәм «китәйем»дәге нескәрәк ялғау барыбер рифмалашалар бит. Ләкин ул ваҡытта һүҙбәйләнештең мәғәнәһе бер ни тиклем үҙгәрәсәк. Дин әһелдәре юҡҡа ғына «был донъяла беҙ ҡунаҡ ҡына» тимәйҙәрҙер. Ҡунаҡтан иһә, билдәле булыуынса, китмәйҙәр, ә ҡайталар.

К. Кинйәбулатованың халыҡ ижады традицияларынан оҫта файҙаланыуы уның башҡа шиғырҙарында ла һиҙелә. «Тағы төшкә индең»дә, мәҫәлән, халыҡ телендә киң билдәле «Әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала» тигән мәҡәл яңы боролош алып, һис көтмәгән яҡтан асылып киткән: «Бала ҡайғыларын еңеләйтер әмәл юҡ шул» тип борсола баҡыйлыҡҡа күскән әсә, фанилыҡта ауырлыҡтар кисереп йәшәүсе ҡыҙын йәлләп.

Тәүге юлдары пейзаж лирикаһына оҡшап торған «Көнбағыштар» исемле шиғыр иһә халыҡ педагогикаһында быуаттар буйына тупланған хазинаны хәтерләтә. Таңды көн һайын аяғөҫтө ҡаршылаусы көнбағыштарҙы әхлаҡ ҡағиҙәләрен яҡшы үҙләштергән һәм уларҙы теүәл үтәгән инсафлы балаларға тиңләп, шағирә былай ти:

*Уйлайым да һоҡланам мин*
*Бындай матур йолаларға,*
*Ата-әсәһен хөрмәт иткән*
*Аяғөҫтө балаларға.*

Поэтик һүҙҙең алтын бәрәбәренә торорға тейешлеге хаҡында уйланғанда,

К. Кинйәбулатованың «Һағыш, һағыш» исемле шиғырына ла туҡталмай мөмкин түгел. Ни бары ун һигеҙ юлдан торған был шиғыр – ысын мәғәнәһендә классик әҫәр юғарылығында. Тәүге строфаһы һәр ҡайһыһы үҙ аллы фекер белдергән дүрт һөйләмдән тора. Беренсеһендә лирик героиня торна тауышына һиҫкәнеп китә; икенсеһендә был тауыштың моңһоу ғына атҡан таң мәлендә ишетелеүенә ишара яһала; өсөнсөһөндә торна тауышы лирик героиняны тағы бер йәйҙең үтеп киткәнлеге тураһында иҫкәрткәндәй; дүртенсеһендә йыл да ҡабатлана торған ошо тауышты лирик героиняның йөрәге аша тыныс ҡына үткәреп ебәрә алмауы белдерелә. Строфа үҙ аллы мәғәнә белдергән һөйләмдәрҙән торһа ла, шағирә уларҙы (икенсеһе менән дүртенсеһен) рифмалаштырыу сараһын да күргән. Торна тауышына һиҫкәнеп киткән лирик героиня шиғырҙың икенсе строфаһында үҙенең шул мәлдәге эске кисерештәре менән бүлешә. Артабан иһә ул, алап һалып ат өркөтмәйсә генә, илдә барған хәлваҡиғаларға ҡарашын белдереп ала.

Әлбиттә, күпме генә тырышһаң да, теләһә ниндәй шиғырҙы ла аҙағына тиклем бөтә нескәлегендә асып һалыу еңелдән түгел. Бәлки, мөмкин дә түгелдер. Өҫтәүенә, поэтик әҫәрҙе аңызиһене менән ҡабул иткәндә, һәр уҡыусының үҙ үлсәме лә була бит әле. Уны ла онотorға ярамайҙыр. Шуға күрә «Һағыш, һағыш»ты талапсан, юғары зауыҡлы һәм зирәк аҡыллы уҡыусы үҙ күҙҙәре менән күрһә, хәйерлерәк булыр тинем уны бында тулы килеш күсерергә ниәтләнем:

*Һиҫкәндем мин торна тауышына.*
*Тонйорап ҡына атҡан таң мәле.*
*Үттеләрме икән был йәйҙәр ҙә. . .*
*Йөрәгемде ялҡын ялманы.*

*Әй, һин, торна, торна,*
*торнаҡайым,*
*Шып-шым ғына осһаң ни була,*
*Тағы ҡалдым яңғыҙ. . . япа-яңғыҙ,*
*Күҙҙәремә ҡайнар йәш тула.*

*Таң да атты,*
*Һеҙ киттегеҙ алыҫ.*
*Һауаларҙа ҡалды*
*тауыш, тауыш...*
*Тауыш ҡына булһа бер хәл ине,*
*Ерем үкһей...*
*Һуғыш, ҡарғыш...*
*Йәндәремде өттө бөтәһе лә:*
*Һағыш, һағыш...*
*Йөрәгемдә мәңге дауыл-алыш.*

Туҡһан йәше тулаһы йылға аяҡ баҫҡанда К. Кинйәбулатова «Ғүмер түгел, бер көн үткәндәй...», «Мин мин түгел...», «Кил һин миңә!», «Уҙған ғүмер», «Мөхәббәт», «Тормошта мин ябай кеше» тигән шиғырҙарын («Ағиҙел», 2010, 1-се һан) бүләк итте ҡәҙерле уҡыусыһына. Улар ҡәҙимгесә йыйнаҡтар, йөкмәткелеләр, фәһемлеләр. «Тормошта мин ябай кеше» тигән шиғырҙағы бынауы юлдарҙа шағирәнең бар булмышы сағылғандай:

*Нисә тапҡыр, нисә ҡабат инде*
*Әсәй, өләсәй мин – һөйөнөс!*
*Тик ғүмерҙәр һыуҙай аҡты китте,*
*Ғүмер үтеүҙәре – көйөнөс.*

Юбилейҙың көнө-сәғәте еткәндә (2010, сентябрь), «Ағиҙел» журналы үҙенең илленсе йылдар башындағы хеҙмәткәренә, әлбиттә, иғтибарһыҙ ҡалманы: «Зая түгел ғүмер...» тигән баш аҫтында К. Кинйәбулатованың ун алты шиғырын берләштергән шәлкем баҫтырып сығарҙы. Арала, артыҡ күп булмаһа ла, Яңы быуат башына ҡарағандары ла бар («Китә инде кеше», «Яҡын дуҫым», «Әй, ғүмеркәйҙәрҙең үтеүҙәре»). Бында уларҙы тәфсирләп тикшереп тормайынса, шуны әйтеү менән генә сикләнмәксемен: шиғырҙар әүәлгесә ыҡсымдар (шәп шиғыр бик оҙон булмай ул!), әҙ генә һүҙ менән тос фекер, тәрән мәғәнә белдереүгә ҡоролғандар.

Белмәйем, йәш аралары яҡын булғанға күрәме, әллә бер заманда, бер

мөхиттә тыуып-үҫеп, бер төрләрәк ғаилә тәрбиәһе алдылар микән, Кәтибә Кинйәбулатованың тормош һәм ижад дәүерендәге ҡайһы бер хәл-ваҡиғалар һәм күренештәр **Фәниә Чанышеваныҡына** ла хас кеүек. Икеһенең дә хеҙмәт юлдары мәктәптә балалар уҡытыуҙан башланған һәм был хеҙмәттең ҡайһылай ҙа ауыр, яуаплы икәнлеген улар кеше ауыҙынан ишетеп түгел, ә үҙ елкәләрендә татып белгәндәр, йөрәктәре аша үткәргәндәр. Икеһе лә әҙәби ижадҡа ныҡлап тотонорҙан алда журналистика ҡаҙанында ҡайнап алғандар, һәм был ике йөктө уларға байтаҡ ҡына бер юлы тартырға тура килгән. Икеһе лә – шиғриәтте лә, прозаны ла берҙәй үҙ иткән әҙибәләр, шуға күрә уларҙың ижад багажында ошо ике төрҙөң һыйышып йәшәүе һис тә ғәжәп түгел.

Биобиблиографик белешмәләрҙә бирелгән баһаламаларҙан күренеүенсә, был ике әҙибәнең поэтик алымдарында ла ҡайһы бер яҡынлыҡ һиҙелә. М.Ғәйнуллин менән Ғ.Хөсәйенов төҙөгән «Совет Башҡортостаны яҙыусылары» тигән белешмәлә (Өфө, 1988), мәҫәлән, «Бала нур» поэмаһында Кәтибә Кинйәбулатова төп героиняның «өмөт ҡатыш ғазаплы кисерештәрен әсәләргә хас нескәлек һәм сабырлыҡ менән тасуир итте» (192-се бит) тиелһә, шул уҡ белешмәлә Фәниә Чанышеваның «шиғырҙары әсәлек һөйөүе, тәрән лиризм тойғолары менән һуғарылған. Ул бөтә донъяға, халҡының үткәненә һәм киләсәгенә, донъялар именлегенә әсә күҙе менән баға, барыһын әсә күңеле һиҙгерлеге менән тоя» (362-се бит) тиелә.

Өҫтәп тағы шуны әйтергә мөмкин: Кәтибә Кинйәбулатованыҡы шикелле, Фәниә Чанышеваның да шиғриәте тышҡы ябайлығы, халыҡсанлығы, йөкмәткелелеге менән айырылып тора. Был шиғриәткә ауыҙ-тел ижады яһаған йоғонтоно ла шәйләмәй мөмкин түгел. Етмеш биш йәшлек юбилейын билдәләгәндә (2001, сентябрь), «Ағиҙел» журналы уҡыусыға әҙибәнең ун шиғырын тәҡдим итте. Шулар араһында «Ниҙәр күреп, ниҙәр кисерелде...» тигәне лә бар. Әҫәрҙең исемендә үк авторҙың ҙур юл үтеп, оло тормош тәжрибәһе туплағанлығы ярылып ята. Шиғыр лирик героиняның уҙған ғүмер тураһында уйланыуҙарына ҡоролған. Унық ифрат тыйнаҡ, баҫалҡы, намыҫлы кеше икәнлеге әллә ҡайҙан күренеп тора. Һүҙҙәрендә тамсы ла һауалылыҡ, ялған тәкәбберлек, минминлек һиҙмәҫһең. Киреһенсә, ул халҡы алдында, ата-әсәһенең яҡты иҫтәлеге, ейән-ейәнсәрҙәре, дуҫтары алдында ҙур яуаплылыҡ тойғоһо кисереп йәшәй. Ете строфанан торған был шиғыр түбәндәге юлдар менән тамамлана:

*Ниҙәр күреп, ниҙәр кисерелде,*
*Ниндәй юлдар менән йөрөлдө?*
*Һорау арты һорау йәнде игәй,*
*Борсолоуҙар биләй күңелде.*

*Аҡ, ҡараға дөрөҫ урын биреп,*
*Айырҙыммы хаҡты ялғандан?*
*... Шик-шөбһәләр үҙем менән китер,*
*Баһа бирер ерҙә ҡалғандар.*

Фәниә Чанышеваның «Беҙҙән уҙҙы, һеҙгә етәсәк», «Әсә хаты» тигән шиғырҙары ғәжәп халыҡсан яңғырай. Улар формалары менән үҙенсәлекле. Тәүгеһе – лирик героиня менән уның гүр эйәһенә әйләнгән ата-әсәһе араһындағы диалог. Шиғыр ифрат матур тел менән ижад ителгән. Ҡарап тороуға ябай ғына күренһә лә, әҫәрҙең төбөндә шаҡтай тәрән тормош фәлсәфәһе ята. Ул лирик героиняның һорауына ата-әсәһе ҡайтарған яуап рәүешендә асып һалынған. Яуаптың нигеҙендә иһә халыҡ аңы, халыҡ аҡылы ятҡанлығы күренеп тора:

*– Тирә-йүнгә ҡарап фекер йөрөт,*
*Өлөшөңә, балам, шөкөр ит.*
*Йәшәйешең булһын мөбәрәк –*
*Донъя ҡасан булған түңәрәк?*

*Йәшәү – ләззәт, хайран ҡалырлыҡ,*
*Йәшәү – ғазап, ғибрәт алырлыҡ,*

*Беҙҙән уҙъан – һеҙгә етәсәк,*
*Юлдаш булһын күркәм сабырлыҡ!*

Был һүҙҙәргә ни тиклем тәрән фекер төрөлгәнлеге хаҡында һүҙ ҡуйыртып тороуҙың кәрәге юҡтыр. Әйткәндәй, «Әсә хаты» тигән шиғыр ҙа ошоға тартым. Һигеҙ строфаның ҡайһыһын ғына алып ҡараһаң да, уны тыныс ҡына, күңел ҡылдарыңа ҡағылмай ғына уҡып үтерлек түгел. Шуларҙың береһен генә килтерәм:

*Ҡош телендәй генә хәбәр көтәм,*
*Мохтажлыъым – бары хаттарҙа.*
*Көнөм түгел, төндәрем дә нурлы*
*Һеҙҙән хәбәр килгән саҡтарҙа.*

Ишетеп тә, уҡып та белеүемсә, һуңғы осорҙа Ф. Чанышева күберәк хәтирәләр, әҙәби портреттар яҙыу менән мәшғүл. Бәлки, шуғалыр ҙа, Яңы быуатҡа күскәс, уның ижад баҡсаһында шиғриәткә урын ҡыҫыла төштө һымаҡ. Был хәл шағирәнең сираттағы юбилейын (2006, сентябрь) билдәләгәндә лә, үҙен һиҙҙермәй ҡалманы: «Ағиҙел» журналы уның бер нисә яңы һәм бер нисә элегерәк ижад ителгән әҫәрҙәрен биреү менән сикләнергә мәжбүр булды. Ләкин бының менән мин шағирәне нимәләлер ғәйепләргә, уның абруйын төшөрөргә йыйынмайым. Хәтирәләр, ижади портреттар беҙгә, һай, нисек кәрәк! Уларҙы Фәниә Чанышева кеүек әҙибәләр яҙмай кем яҙһын! Яҙмыш уға һирәктәргә тейә торған (рус әҙәбиәтендәге Дмитрий Мережковский менән Зинаида Гиппиус, Анна Ахматова менән Николай Гумилевтарҙыҡына оҡшаш) ижади ғаилә ҡорорға насип иткән бит: тормош юлдашы, шағир һәм ғалим, Ғилемдар Рамазанов менән бергәләп улар бөтә ғүмерҙәрен башҡорт әҙәбиәтенә тоғро хеҙмәт итеүгә бағышланылар. Ф. Чанышеваның «Педагогик уйланыуҙар», «Арҙаҡлы замандаштар», «Онотолмаҫ осрашыуҙар», «Иҫтәлектәр» тигән бүлектәрҙе эсенә алған «Замандаштар» (Өфө, 2009) исемле китабы – минең фекеремде раҫларҙай факт. Был китап Сәйфи Ҡудаш менән Сәләх Кулибай яҙып ҡалдырған һәм уҙған быуаттың егерменсе – ҡырҡынсы йылдарында башҡорт әҙәбиәте майҙанындағы йәнле лә, һағышлы ла күренештәрҙе сағылдырған иҫтәлектәренә, әҙәби портреттарына үҙенсә бер йәм өҫтәне, тиергә мөмкин.

Теге быуатта нисегерәк булғандыр, быныһында Ф. Чанышева үҙенең ташҡа баҫылған һәм уҡыусы хазинаһына әйләнгән ҡайһы бер әҫәренә «ҡәләм төртөп» тә алғылай (был ғәҙәттең, ҡыҙғаныска ҡаршы, бүтән шағирәләребеҙгә һәм шағирҙарыбыҙға ла хас икәнлеге хаҡында элегерәк тә һүҙ сыҡҡылап ҡуйғайны инде): йә шиғырҙың исеме үҙгәрә; йә уның берәй юлы икенсе төрлөрәк яңғырай; ҡайһы берҙә шиғырҙың исеме, хатта тотош строфаһы ла төшөп ҡалғылай, ҡайһы бер строфаны башкөлләй яңы строфа алмаштыра. Бында ошондай үҙгәртеүҙәргә дусар ителгән шиғырҙарҙың исемдәрен атап тормайым, сөнки уларҙы автор үҙе яҡшы белә. Ә бына «Шиғриәт – ул намыҫ, выждан иле» тигәненә (исеме лә, юлдар ҙа бер аҙ үҙгәртелеп, бер строфа бөтөнләй төшөрөп ҡалдырылһа ла) туҡтап китһәк, насар булмаҫ.

Иң тәүҙә «Шиғриәт – ул намыҫ, выждан иле»н шағирәнең яҙмышнамәһе тип һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтер инем. Сөнки унда авторҙың бөтә булмышы күҙ алдына баҫтырылған:

*Әсә һөтө, бишек йыры менән*
*Йырҙар һеңгән минең күңелгә.*
*Йылдар үткәс кенә, ҡыйыр-ҡыймаҫ*
*Атлап индем шиъыр иленә.*

*Артыҡ саъыу булмаһа ла, күптәр*
*Ихласлыъын тойҙо йырымдың.*
*Ләкин байрамдарҙа, майҙандарҙа*
*Күләгәлә минең урыным.*

Өҫтә телгә алынғанса, Фәниә Чанышева был әҫәрендә лә шағирә генә түгел, бәлки, ерҙә йәшәүҙең әхлаҡи-

этик нигеҙҙәрен яҡшы үҙләштергән, шуларға инанған оло йәнле аҡыллы педагог та булып сығыш яһай. Шиғриәт уның өсөн – «намыҫ, выждан, иман иле». Бер баҫылып сыҡҡан әҫәренә яңынан әйләнеп ҡайтып, уға аратирә «ҡәләм төртөүе» лә шунан килмәй микән? Ижад өлкәһендә һирәкмирәк булһа ла күренгеләп-һиҙелгеләп ҡалыусан тыйнаҡһыҙлыҡҡа, илтифатһыҙлыҡҡа, инабатһыҙлыҡҡа тыныс ҡала алмауы ла, бәлки, шуның менән аңлатылалыр?

*Үҙ-үҙеңде нисек күрһәтергә*
*Өйрәнергә мөмкин йәштәрҙән.*
*Шиғриәттең бөйөклөгөн аңлап,*
*Алыҫ торам ундай хәстәрҙән.*

*Кәрәк микән, шөһрәт ҡаҙанам тип,*
*Терһәк менән ярып йөрөүҙәр?*
*Ғәҙелһеҙлек менән дан көсәүҙәр,*
*Бөйөк булып йәшәй белеүҙәр?*

Шағирәнең әхлаҡ ҡағиҙәләре, кешелеклек сифаттары хаҡындағы уйланыуҙары уның өс кенә строфанан торған «Ғүмер юлы гел һынауҙар икән. . .» тигән шиғырына ла күскән:

*Сабырлыҡҡа, сыҙамлыҡҡа һынау,*
*Дуҫлыҡ, тоғролоҡҡа тиһеңме. . .*
*Ауырыу, ғәйбәт, хыянаттары ла*
*Гелән һынап тора кешене.*
*Мин дә үттем тормош һабаҡтарын,*
*Булыр әле улар тағы ла.*
*Һынауҙарҙың иң ауыры икән*
*Баш эйеүҙәр түбән йәнлегә.*

Әле һүҙ барған шиғырҙарға ҡарап, Ф.Чанышева гел үҙенең күңел донъяһында ҡаҙына икән, тип уйларға ярамай, әлбиттә. Автор илдә барған хәлваҡиғаларға ла битараф түгел. Шуныһы ҡыҙыҡлы: көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларға битарафһыҙлығын белдергәндә лә ул барыбер ҙә ҡатын-ҡыҙ булып ҡала. «...Кемдер күккә аша» тигән шиғыр был йәһәттән айырыуса үҙенсәлекле. Унда бындай юлдар бар:

*Күрер күҙгә байлыҡ,*
*муллыҡ та бит...*
*Ялтыр биҙәктәрҙән күҙ ҡамаша.*
*... Кемдер түбән текләп ҡулын һуҙа,*
*Кемдер байып шаша, күккә аша.*

*Әй болғана донъя; әй тулғана,*
*Тормошобоҙ, гүйә, бер тамаша.*
*Һиллек, именлектәр көтә-көтә,*
*Ғүмерҙәрҙең һуңы яҡынлаша.*

Бөтә ғүмерен тиерлек журналистикаға арнаған шағирә **Әлфинур Вахитова** яңы быуатта «Ағиҙел» биттәрендә бер генә тапҡыр (2001, 11-се һан) күренеп ҡалды ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Уны сираттағы юбилейы менән ихлас ҡотлап һәм ижади уңыштар теләп, журнал редакцияһы үҙ уҡыусыларына шағирәнең «Ирекле ҡош мин үҙ илемдә...» тигән шәлкемен тәҡдим итте. Шәлкемдә шиғырҙар һаны әллә ни күп түгел – алтау ғына, ләкин, шуға ҡарамаҫтан, улар авторҙың ҡайһы бер стиль үҙенсәлектәрен аҙмы-күпме самаларға мөмкинлек бирә. Әгәр «Күк ҡабағы асылдымы шулай...» образлы фекерләү ҡеүәһенең ярайһы уҡ көслө булыуын күрһәтеп торһа, «Кәрешкәм һин минең, кәрешкәм...» иһә фекер тәрәнлеге, рифмалар теүәллеге менән айырыла. «Йырға күсһә...» менән «Ярһымасы, йөрәк!»тәге лирик героиняның уйланыуҙарында шағирәнең үҙ донъяһы, үҙ халәте сағылғанға оҡшай. Әйтәйек, «Йырға күсһә...»ләге бына был юлдарҙа:

*Барыр юлым яҡты, маҡсат асыҡ,*
*Ирекле ҡош – мин үҙ илемдә.*
*Ә ниңә һуң баш эйелгән түбән,*
*Болот китмәй һаман күңелдән?*

*Ҡайғым да юҡ кеүек, ғәйебем дә,*
*Ә ниңә һуң юлда кәртәләр?*
*Яулаясаҡ үрҙәр һәм табыштар*
*Башҡаларҙы, ахыры, көтәләр...*

*Күккә ҡарап йөрөмәгән өсөн,*
*Меҫкен, тиә күрмә, әй, кешем.*
*Ҡыҫыр башаҡ ҡына ғорур була,*
*Минең эшләйәсәк күп эшем.*

«Ярһымасы, йөрәк!»тә лирик героиняның (шул иҫәптән авторҙыңдалыр, бәлки) характер үҙенсәлеге, холоҡ-фиғеле уғата ла сағыу асып һалынған. Тынғыһыҙ йөрәгенә ризаһыҙлығын белдереп, ул бына нимә ти:

*Минең ҡайғыларым һис иш түгел,*
*Кем өсөн ул йәшәй донъяла?*
*Кеше ҡайғыһына көйәләнә,*
*Кеше яраһына һыҙлана.*

*Төндө генә түгел, бер файҙаһыҙ*
*Үткәрәмен күпме көндәрҙе.*
*Уйым менән бар ғаләмде байҡап,*
*Эҙләп китәм әллә кемдәрҙе.*

*Аҡылымды эшкә бәйләйемсе,*
*Ярһымасы шулай, йөрәгем.*
*Һин түгел дә күктән төшкән ҡояш,*
*Мин түгел дә донъя терәге.*

Әлфинур Вахитова – ете китап авторы. Улар башлыса балалар өсөн яҙылған шиғырҙарҙан ғибәрәт. Шуғалыр ҙа, бәлки, күләмдәре йәһәтенән бик ҙур түгелдәр. Әле бына «Йырға күсһә...» менән «Ярһымасы, йөрәк!»те бирелеп уҡып ултырам да үҙемсә уйлап ҡуям: йөрәк майыңды һурып, бауыр итеңде кимерә торған журналистлыҡ хеҙмәте Әлфинур Вахитованың тәбиғәттән килгән талантын бөтә тулылығында асылып китергә ҡомасаулаған сәбәптәрҙең береһе булманымы икән? Хәйер, барлай башлаһаң, ундайҙар беҙҙең шиғриәттә лә, башҡа халыҡтарҙыҡында ла бер ул ғына түгел: ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәтендә лә, ир-аттарҙыҡында ла.

3

Өҫтә, Кәтибә Кинйәбулатова хаҡында һүҙ барғанда, Әнисә Таһированың да исеме телгә алынғайны. Үҙенән өлкәндәргә ул ысынлап та шулай иғтибарлы булды. Уның Рәғиҙә Янбулатова тере сағында магнит таҫмаһына яҙҙырып, зәңгәр экран аша күрһәткән телевизион очеркы әле лә күҙ алдында. «Ағиҙел» биттәрендә Фәниә Чанышеваға арнап әйтелгән йылы һүҙҙәре лә хәтерҙә. Мин ишетмәй-күрмәй ҡалғандары ла булыуы бик ихтимал. Ләкин был бүлектә мәҡәләләр, ижади портреттар авторы Таһирова түгел, ә шағирә Таһирова күҙ уңында тотола.

Әнисә Таһированың ижади биографияһы уҙған быуаттың етмешенсе йылдарынан башлана. Бөгөн ул – егермеләп китап авторы.

Яңы быуатты Әнисә Таһирова сонеттар шәлкеме менән асып ебәрҙе. («Ағиҙел», 2001, 1-се һан). Шәлкемгә ун биш сонет тупланған. Ләкин уларҙың бөтәһе лә теге быуатҡа ҡарай. Шағирәнең яңы быуатта яһалған яңы аҙымдары иһә уның түңәрәк юбилейы айҡанлы донъя күргән «Баш эйәм тик шиғыр ҡаршында» («Ағиҙел», 2001, 12-се һан) тигән шәлкемдән башлана. Тәбиғи, юбилей булғас, унда элегерәк ижад ителгән әҫәрҙәр ҙә осрай. Яңыларҙан иһә «Ғүмер йомғағымды һүтеп бөткәс...», «Йәшлек баҡсаһы», «Йыһан гөлө», «Дан», «Аҫылташтар тулы аҡ карабым...», «Яҙғы күкрәү булып күкрәмәнең...»де күрһәтергә мөмкин. Ә бына «Хәтер йәшәй миндә...» («Ағиҙел», 2002, 11-се һан) тигән шәлкем бөтөп яңы әҫәрҙәрҙән генә тора. Артабан шағирә «Тәңре нуры», «Һүҙ», «Сихриәтле, яңы йыр сорнаны...», «Яңы йыл шиғыры», «Аҡ гөрләүек», «Селтәр ситле япрағына ятып...», «Төн уртаһында тыуған шиғыр» тигән әҫәрҙәре («Ағиҙел», 2003, 3-се һан), «Шағир булмышында – илаһилыҡ...» («Ағиҙел», 2006, 12-се һан), «Моң өҫтәлә сазым ҡылында...» («Ағиҙел», 2007, 9-сы һан) тигән шәлкемдәре менән сығыш яһаны журнал биттәрендә. Әйтергә кәрәк, ул әүәлгесә сонетҡа ла хыянат итмәй – һирәк-мирәк булһа ла улары ла күренгеләп тора. Аллитерация һымағыраҡ яңғыраған «Әнисә сонеттары» тигән баш аҫтында киң күләмле һәм тәрән йөкмәткеле үҙ аллы мәҡәлә яҙырға ла ваҡыттыр инде хәҙер.

Ә. Таһированың быуат башындағы шиғриәтенә күҙ ташларҙан алда, уның

теге быуат аҙағындағыһын бер аҙ ғына булһа ла хәтергә төшөрөп китке килә. «Йөрәк йәдкәре» (1996) исемле китабына ингән байтаҡ ҡына шиғырҙарында ул тормошта, шул иҫәптән ижад өлкәһендә лә осраштырып торған һәр төрлө ғәҙелһеҙлектәрҙе, намыҫһыҙлыҡтарҙы, ялағайланыуҙарҙы фашлай, бындай кире күренештәрҙе һис кенә лә үҙ итмәй. «Бермуд өсмөйөшө»ндә ҡалыусы ҡәләмдәштәремә асыҡ хат» тигәне теленең үткерлеге һәм зәһәрлеге менән әле булһа үҙенең бәҫен юғалтмай, сөнки «йылтыр күҙле йылтыр әпкәләйҙәр», «төрлө төлкөбайҙар, әфәнделәр» һаман да беҙҙең арала йәшәп яталар һәм йылы урындарын тиҙ генә ташлап китергә йыйынмайҙар.

Шағирәнең ошоға тартым халәте уның өҫтә телгә алынған сонеттар шәлкеме айҡанлы әйтелгән инеш һүҙендә лә сағылып киткән. «Донъяны, – тиелә унда, – кәсепселәр баҫып алды. Әҙәбиәт, сәнғәт донъяһында ла ялған матурлыҡ күҙҙе сағылдыра, китап кәштәләрендә ялтыр тышлы, йөкмәткеһеҙ яҙмалар тупланған китап ишараттары тулып ята. Ләкин, минең уйымса, былар үтер, ысын сәнғәт, юғары зауыҡ менән яҙылған әҫәрҙәр үҙ урынын алыр» («Ағиҙел», 2001, 1-се һан).

Бик уҫал яңғыраған был һүҙҙәр миндә Ә.Таһированың элегерәк яҙылған «Зәйнәб Биишева апайҙың әйткәне» тигән сонетын яңыртып ҡуйҙы. Сонеттың тәүге строфаһы бына былай:

*Мин фәрештә түгел, кеше инем,*
*Ерҙә кеше булып йәшәнем.*
*Хаҡһыҙлыҡты күрһәм, ярып әйттем,*
*Йәшен булып ярһып йәшнәнем.*

Күреүебеҙсә, сонеттың авторы, З. Биишева шәйенә инеп, уның характерына, йәшәү принцибына хас ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе оҫта һәм ышандырырлыҡ итеп асып һалған. Әгәр «поэтик әҫәрҙәрҙең лирик геройҙары менән уларҙың авторҙары араһында күпмелер оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡ йәшәүсән» тигән фекерҙән сығып уй йөрөтһәк, З.Биишева менән Ә.Таһированың да тормошҡа, әҙәбиәткә ҡараштарында ниндәйҙер яҡынлыҡ барҙыр.

Әнисә Таһированың теге быуат ахырындағы ижадында һиҙелерлек урын биләп торған саялыҡ һәм ҡыйыулыҡ кеүек сифаттар, яңы быуатҡа күскәс, бер аҙ кәмей төштө кеүек. Бының сәбәбен бер һүҙ менән генә аңлатып биреүе ҡыйын, әлбиттә. Бәлки, бер балыҡ башын күпме сәйнәһәң дә, фәтүә сыҡмаҫ, тип бер аҙ төшөнкөлөккә лә бирелеп ҡуйыуҙандыр. Бәлки, яңы быуатҡа сыҡҡас, ҡояш уға икенсе төрлөрәк ҡарай башлағандыр. Бүтән сәбәптәр ҙә булыуы ихтимал. Әлегә иһә шуны әйтергә була: һуңғы йылдарҙа шағирә күберәк үткән һәм ҡалған ғүмер тураһында уйлана һымаҡ. Яңы быуаттың тәүге йылында, хатта тәүге айҙарында уҡ ижад ителгән «Дан», «Йәшлек баҡсаһы», «Аҫылташтар тулы аҡ карабым...», «Яҙғы күкрәү булып күкрәмәнең...» тигән шиғырҙар һәм «Йыһан гөлө», «Ғүмер йомғағымды һүтеп бөткәс...» тигән сонеттар шундай фекер тыуҙыра.

Әгәр «Дан» тигән бәләкәй генә әҫәрендә шағирә, ерҙә йәшәгәндә дандарҙың ниндәй төрҙәре булыуын һәм уларға нисек ирешергә мөмкинлеген иҫбатлап, «Тик уйлаһа дан килергә, йондоҙ булып килһен миңә! Мин китермен мәңгелеккә. Ә ул балҡып ҡалыр күктә» тигән теләген белдерһә, «Яҙғы күкрәү булып күкрәмәнең...»дә иһә лирик героиня «ғүмер буйы йондоҙ ямғырҙарын» күңелендә һаҡлап йөрөтһә лә, ахыр сиктә уның тик «ымһындырғыс яңғыраҡ» ҡына булыуына үкенес белдерә. «Йыһан гөлө» менән «Ғүмер йомғағымды һүтеп бөткәс...»тә лирик героиняның хәле башҡасараҡ: ул, сонет жанры талаптарына ярашлы, Ерҙәге дан-шөһрәттәргә артыҡ иҫе китмәйенсә, ғаләмдәргә ашып, сикһеҙ ғәрештәрҙә осоп йөрөгән изге һәм саф йәндәр араһында үҙен иркенерәк тә, бәхетлерәк тә тоя.

Алты строфанан торған «Йәшлек баҡсаһы» тигән шиғыр ҙа яҙылышы менән бик матур. Ул халыҡ шағиры М.Ғафуриҙың яҡты иҫтәлегенә бағышланған. Минең аңлауымса, шиғырҙың исеменә ике төрлө ( тура һәм күсмә) мәғәнә һалынған. Һәм ошо ике төрлө мәғәнәне аралаш файҙаланып, автор, яйлап ҡына, быуындар күсәгилешлеген һүрәтләүгә ирешкән:

*... Килер яңы быуын.*
*Тынмай сыңлар*
*Ғафуриҙың хисле, аҡ сазы.*
*Һәр саҡ йәшлек гөлбаҡсаһы булыр*
*Ғафуриҙың йәшел баҡсаһы!*

Лирик героиня, баҡсалағы ул яратҡан һуҡмаҡтарҙан ҡасандыр Ғафури менән Туҡайҙың бергә атлауын күҙ алдына килтереп, ике халыҡтың тоғро ике улына бындай баһаһын бирә:

*Шиғриәттең ике саф йондоҙо,*
*Ғорурлығы ике милләттең!*

Әйткәндәй, Әнисә Таһированың күңел түрендә бөгөн бер Ғафури ғына түгел. «Яҡты күңелеңдә һинең булған...», «Аҡ гөрләүек», «Шиғырҙарың төҫлө затлы инең», «Ҡаплай алмаҫ», «Миәссәр Басировтың ҡәбере янында», «Ҡайтмаҫһың шул...» тигән әҫәрҙәрендә, мәҫәлән, ул Хәй Мөхәмәтйәров, Рафаэль Сафин, Муса Ғәли, Зөлфәр Хисмәтуллин, Миәссәр Басиров, Рәшит Назаров кеүек ҡәләмдәштеренең һәм замандаштарының яҡты образын һынландырған, уларҙың һәр ҡайһыһына хас кешелек сифаттарын һәм ижад үҙенсәлектәрен асып һалырҙай тәғәйен һүҙ тапҡан.

Һүҙ тигәндән, Ә.Таһированың ошондай исемле бер шиғыры ла бар. Уны энәһенән ебенә хәтлем тикшереп, бәҫен ебәрмәҫ өсөн, күңелгә нығыраҡ ятҡан бер нисә строфаны бында күсереү менән генә сикләнһәк, хәйерлерәк булыр:

*Иң тәүҙә һүҙ булған.*
*Һәр бер һүҙҙең*
*Бар үҙ мәғәнәһе, үҙ сере.*
*Һүҙ баһаһын белгән тел маһиры*
*Тоямы һуң бөгөн ҡәҙерҙе?*
*Һүҙе аҫылдарҙың – халҡы аҫыл,*
*Буш һүҙ осһоҙлата халыҡты.*
*Бәҫле һүҙҙәр менән һаҡлап була,*
*Яҡлап була ирек, хаҡлыҡты.*
. . . . . . . . . . . .
*Иң тәүҙә һүҙ булған.*
*Һүҙ ҡөҙрәтен*
*Быуа алмай ерҙә бер көс тә,*
*Һүҙ, тел йәшәгәндә, халыҡ йәшәр,*
*Һүҙ ул – йәшәү бирер Йәншишмә!*

Шуныһы мөһим: Ә.Таһирова һүҙҙең бәҫен һаҡларға өндәп кенә ҡалмай – һүҙгә ҡарата белдергән ҡараштарын һәм юғары талаптарын үҙенең ижад практикаһында ла мотлаҡ тормошҡа ашырырға тырыша. Яңыларҙан иҫәпләнгән «Үткән йылдар – көмөш ҡыңғырауҙар...», «Был һарайҙа күпме матурлыҡ бар...», «Йылдар үткәс...», «Петрарканы күрҙем төшөмдә...», «Ғаләмдәрҙән ҡайтмай тауышың», «Яңы йыл шиғыры», «Селтәр ситле япрағына ятып...», «Ер алиһәләре», «Яралы ай», «Һинең күҙҙәрең», «Аҡҡош ҡайтты», «Мин йәшәйем әле!», «Яҙҙым исемеңде...», «Төштәрем дә үкенесле хәҙер...» тигән шиғырҙар, минең ҡарашымса, быға асыҡ дәлил булып торорлоҡ. Маҡсат итеп ҡуйһаң, уларҙың һәр ҡайһыһында ынйы бөртөктәре кеүек йымылдаған һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе күпләп табырға була. Бында шуларҙың бер нисәһен күрһәтеп китәйек: «Елберләшеп оса алһыу таждар, болоҡһотоп нескә күңелде»; «Сағыу шатлыҡ ҡунһын түрҙәреңә, сағыу шатлыҡтарҙың туты юҡ»; «Утта өшөп, һыуҙа янырһың, һағышлы уй тулыр башыңа...»; «Ергә, күккә, болоттарға бағам, баҫыр өсөн йөрәк һағышын»; «...Иҫке йылдың һуңғы аҡ ҡарҙары күңелемде ҡабат көйрәтте»; «Булмышыңдан һелкеп ташлап булмай йылдарыңдың һалған эҙҙәрен»; «Аҡҡош аҡлыҡтары йыуһын юшҡындарҙы күңелдән»; «Сыңрау торна булып йырым

осто, ҡаурыйҙарын түгеп эҙемә»; «Исемеңде йөрәгемә яҙҙым йәшлек гөлөм сәскә атҡанда», һ.б.

Өҫтәрәк, Ә.Таһирова шиғриәтенә хас саялыҡ һәм ҡыйыулыҡ, яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас, бер аҙ кәмей төштө, тигәйнем. Кәмей төшһә, бәлки, төшкәндер, әммә бөтөнләйе менән юҡ булманы. «Шағир һүҙе кәрәк Рәсәйгә», «Дауаханала тыуған уйҙар», «Бөйөк Рәсәй – Тәңре биләмәһе...»,«Йөк», «Таң алдынан күргән төш» кеүек шиғырҙарҙан, мәҫәлән, шул уҡ саялыҡ бөркөлөп тора. Дүрт строфанан торған «Шағир һүҙе кәрәк Рәсәйгә»нең тәүге строфаһында, әйтәйек, автор, уҡыусы менән кәңәш тотҡандай итеп, уның алдына шундай һорау ҡуя:

*Шағир һүҙе, шағир күҙе бөгөн*
*Кәрәк микән бөйөк Рәсәйгә?*
*Күгенән ваз кискән күңелдәр бар,*
*Оҡшаш улар тоҡсай-кәсәгә.*

Ә һуңғы строфала уға үҙе үк яуап ҡайтара:

*Шағир һүҙе, шағир күҙе бөгөн*
*Бик тә кәрәк бөйөк Рәсәйгә!*
*Уяу рухлы халыҡ ҡына бары*
*Кәртә булыр тоҡсай-кәсәгә.*

«Йөк» тигән шиғырҙа һүрәтләү объекты бик уңышлы табылған, минеңсә. Баҡһаң, тәбиғәт һиңә күҙәтеүсәнлек һәләтен күпләп биреп, шул һәләтеңә образлы фекерләү һәм йәнле һүрәтләү ҡеүәһе лә килеп өҫтәлһә, вокзалда сират көтөп ултырған юлсыларҙың йөктәренә ҡарап та ғәләмәт ҡыҙыҡлы һәм шул уҡ ваҡытта ифрат тормошсан һығымта яһап ҡуйырға мөмкин икән:

*Күп микән һуң*
*Йөктәр араһында*
*Хәҙер рухи байлыҡ һаҡлана?*
*Юҡ шул. Әҙәм күңелдәре хәҙер*
*Баҡыр аҡса кеүек ваҡлана.*

*Кемдәр затлы мәрйен итеп йыя*
*Аҫыл китаптарҙың аҡылын?*
*Күптәр хәҙер башҡа байлыҡтарға*
*Йүнәлтә шул барлыҡ таһылын.*

*Шуғалыр ҙа – күҙ маңлайға менгән,*
*Тәндәр ҡалтыр иблис һыуынан.*
*Ҡай берәүҙәр иблис булып бара*
*Үҙе теләп алған ыуынан.*

Шағирәнең күҙәтеүсәнлеге, беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡта атлаған һайын тип әйтерлек осрап торған тиҫкәре күренештәрҙе дөйөмләштереп, күргән-белгәндәрен художестволы образ юғарылығына күтәреү маһирлығы уның «Дауаханала тыуған уйҙар»ында ла сағыу кәүҙәләнеш тапҡан:

*Табип күрһәтмәһен утәй-утәй,*
*Көндәр бер-бер артлы ағыла.*
*Дауаханала ла Рәсәй-илдең*
*Бар булмышы, йөҙө сағыла.*

*Кешеләр ҙә, рентгенттағы кеүек,*
*Бында асығыраҡ күренә.*
*Ошонда ла нәфсе микробтары,*
*Баҙар йыртҡыслығы терелә.*

Ниһайәт, «Таң алдынан күргән төш». Формаһы менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә – ҡойоп ҡуйған шиғыр. Миңә иһә, әйткәндәрҙән сығып, Әнисә Таһирова – бөгөнгө башҡорт поэзияһының ныҡлы һәм ышаныслы терәге, тип өҫтәйһе генә ҡала.

Ә.Таһирова кеүек, яңы быуаттың тәүге ун йылында Гөлфиә Юнысова менән Факиһа Туғыҙбаева ла әүҙем эшләнеләр. Уларҙың поэтик әҫәрҙәре «Ағиҙел» биттәрендә әленән-әле күренеп кенә тора. Тәнҡитселәр ҙә битараф түгел был шағирәләрҙең ижад емештәренә. Ә бына **Зөбәржәт Йәнбирҙина** хаҡында мәҡәлә уҡырға тура килмәне. Хәлбуки, ул шаҡтай ғына үҙенсәлекле әҙибәгә оҡшап тора ине. Биобиблиографик белешмәләргә, күпмелер кимәлдә шағирәнең күңел донъяһын сағылдырған һүрәттәренә, лирик геройҙарының уй-кисерештәренә ҡарағанда, уның тормош юлы ла,

әҙәбиәт һуҡмағына аяҡланыуы ла башҡаларҙыҡынан күпкә айырыла. Шул айырмалыҡ шағирәнең ижадына ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр, моғайын. «Күк мунсаҡ» (1991) тигән йыйынтығына бирелгән аннотацияла быңдай юлдарҙы уҡырға мөмкин: «Зөбәржәт Йәнбирҙинаның ижады замандың ҡырҡыу проблемаларына мөрәжәғәт итә, тормоштоң ҡара яҡтарын ҡыйыу рәүештә асып һала. Репрессия, экологик катастрофа, бюрократлыҡ һ.б. көнүҙәк темалар ярылып ята уның шиғриәтендә».

Әйтергә кәрәк, ҡырҡыу мәсьәләләр Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Тик ҡунаҡҡа килдем», «Рәсәйем», «Бер автобус ирҙәр Себер китте» («Ағиҙел», 2010, 5-се һан) исемле һуңғы шиғырҙарында ла ярайһы уҡ ҡыйыу күтәрелгән. Төҙөлөштәре-формалары йәһәтенән ҡайһы бер ҡытыршылыҡтар күҙгә салынып киткеләһә лә, был шиғырҙарҙа ҡуйылған проблемалар ифрат киҫкен яңғырай. Уларҙа һүҙ башлыса әҙәм балаһының тыуып-үҫкән һәм көн иткән мөхите, уның шул мөхиткә мөнәсәбәте, шунда яулаған үрҙәре һәм биләгән урыны, үҙ илендә, үҙ ерендә үҙ хоҡуҡтарының һаҡланыуы-һаҡланмауы хаҡында бара. Бында автор, шағирә булып ҡына түгел, бәлки, ижтимағи-сәйәси, социаль-иҡтисади, мәҙәни, әхлаҡи-этик мәсьәләләрҙең тормошҡа ашыу-ашмауы тураһында уйланыусы һәм баш ватыусы ил инәһе һымағыраҡ та сығыш яһаған, дөрөҫөрәге – йәшәйешебеҙҙең күп яҡлы һәм ғәжәп ҡатмарлы проблемаларын образлы фекерләү аша күҙ уңынан уҙғарған. «Тик ҡунаҡҡа килдем» тигән шиғырҙың лирик героиняһы, мәҫәлән, ауырлыҡтар кисерә-кисерә, көс-хәл менән тиерлек ят яҡтарҙан тыуған төйәгенә ҡайтып төшкәс, эсенә һыймаған шатлығын бына нисек итеп белдергән:

*Эй Тыуған ил! Бөйөклөгөң белдем –*
*Рәхмәт инде ата-бабама.*
*Тыуған ер тип киҫектергән мине,*
*Өйрәтермен мин дә балама.*

Шағирә фекеренсә, һәр кем, һәр халыҡ үҙ еренә үҙе хужа булырға, уның тәбиғи һәм рухи байлыҡтарын әрәмшәрәм итмәҫкә, ә, киреһенсә, уларҙы артабан үҫтереү һәм арттырыу хәстәрен күрергә тейеш. Асылда иһә беҙ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быны̆ң киреһенә шаһит булып торабыҙ: үҙебеҙҙең типһә – тимер өҙөрҙәй аҫыл ир-егеттәребеҙ әллә ҡайҙарҙа олағып, бәхет эҙләп йөрөгәндә, башҡорт иле килмешәктәр менән тула:

*Аҙмы ни һуң беҙҙең һыуҙы эсеп,*
*Үҙ иленә ҡарап суҡынған.*
*Беҙ тораһы йортто биләп тороп,*
*Көлгән була беҙҙең тоҡомдан.*

*Ерен яҡламаған – илһеҙ ҡалған,*
*Был ерҙә лә һатлыҡ ерекмәҫ.*
*Күпме бүреккә һал, урман тиер,*
*Һөйләшкәндә һүҙе берекмәҫ.*

Атамалары менән бер-береһенән бик ныҡ айырылып торһалар ҙа, «Тик ҡунаҡҡа килдем»дәге тема һәм идея «Бер автобус ирҙәр Себер китте»лә лә дауам ителә. Тәүгеһендә кинәйәләберәк белдерелгән фекер быныһында асыҡтан-асыҡ әйтелгән. Лексикаһы, тел-стиль саралары, автор интонацияһы буйынса ла был ике әҫәр араһындағы яҡынлыҡ һәм уртаҡлыҡ күҙгә бәрелеп тора. Тәүгеһендә ерҙе һаҡламаған өсөн, үпкә белдерелһә, быныһында инде «яйлап күсә сит ҡулдарға Башҡортостан тигән башҡорт ере» тип туранан-тура ярып һалынған. Шиғырҙа өндәш ҡатыш бирелгән риторик һорау ҙа яңғырап китә:

*Салауаттар ерен һаҡлар халыҡ,*
*Ҡайҙа таралдығыҙ һеҙ, тоҡомом?!*
*Аҫабалар ере көтә күптән,*
*Мая булып ҡалып ил ҡотоноң.*

«Рәсәйем» – эзоп теле менәнерәк яҙылған шиғырға оҡшап тора. Әгәр Мостай Кәримдең «Россиянмын» шиғырындағы «Рус түгелмен, ләкин россиян мин» тигән юл Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Рәсәйем»енә эпиграф итеп ҡуйылмаһа, әҫәрҙең айышына, бәлки, тиҙ генә төшөнөп тә булмаҫ ине. Эпиграф иһә халыҡ шағирының бынан алтмыш йыл самаһы элек донъя күргән атаҡлы шиғыры «Рәсәйем» авторына ижади дәрт биреп, үҙенсә бер этәргес көс булып торғанлығын раҫлаусы дәлилдер, тимәксемен.

Йәшерә алмайым, Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Рәсәйем»ен тәү тапҡыр уҡып сыҡҡас, ул бер ни тиклем ҡаршылыҡлыраҡ фекер уятҡандай, хатта «Россиянмын» менән (айырыуса беренсе строфалағы «Тел әйләнмәй, әммә сараһыҙҙан «Россиянмын» тим дә сәсәйем...» тигән юлдар) асыҡ полемика рәүешендә яңғырағандай тойолдо. Ләкин был ике шиғырҙың йөкмәткеһенә үтеп инеп, уларҙың идея-эстетик әһәмиәте тураһында уйлана башлаһаң, теләйһеңме-теләмәйһеңме, тарихилыҡ принцибы тигән төшөнсәне иҫкә алырға тура килә: төрлө пафос менән һуғарылған ике шиғыр бер үк ерлектә ижад ителһәләр ҙә, тыуыу йылдары менән бер-береһенән бик ныҡ айырылып торған ике төрлө заманға ҡарайҙар.

З.Йәнбирҙинаның «Рәсәйем»е Ә.Таһирова менән Факиһа Туғыҙбаеваның (хәйер, бер улар ғына ла түгел!) ошо темаға арналған ярһыу ҙа, шул уҡ ваҡытта бер аҙ моңһоуыраҡ та яңғыраған айырым шиғырҙарын хәтерләтеп ҡуйыуы ла һис ғәжәп түгел. Сөнки яҙмыш уларҙың бөтәһенә лә стрелкалары ике яҡҡа ҡарап торған ике төрлө Ваҡыт арауығында йәшәргә һәм ижад итергә насип ҡылған. «Рәсәйем»дәге бына был юлдарҙағыса:

*Ҡояш ҡуянсығы кеүек, берсә*
*Уңға сыға, һулға гербыбыҙ.*
*Рәсәй, һинән оло булып булмай,*
*Ҡайҙа элһәң, шунда торорбоҙ.*

Әйтергә кәрәк, Зөбәржәт Йәнбирҙинаның быуат башындағы ижадында йәшәйешебеҙҙең ҡырҡыу проблемаларын күтәргән шиғырҙар түгел, ә тыуып-үҫкән төйәге, уның үҙенсәлекле тәбиғәте, ер-һыуы, шул мөхиттә үткән йәшлеге, тәүге мөхәббәте тураһында лирик уйланыуҙарҙан торғандары өҫтөнлөк итә. Шағирәнең 2003, 2004, 2005, 2007 йылдарҙа «Ағиҙел» биттәрендә баҫылып сыҡҡан ҡырҡҡа яҡын поэтик әҫәре – быға асыҡ дәлил. Уларҙың ҡайһы берҙәрен атап та китергә мөмкин: «Ҡабат-ҡабат», «Талдарым», «Далам – далан!», «Һағындым, Ҡыҙыл ярым», «Ауылымда», «Ах, Аҡкүлем!», «Юшатыр», «Һиңә ҡайтһам...», «Эй, тыуған яҡ».

Шиғырҙарҙың исемдәре үк авторҙың уй-кисерештәрен, эске халәтен, күңел донъяһын сағылдырып торғандай. Уларҙың байтағында шағирәгә таныш һәм яҡын тирә-йүндең колоритлы күренештәре йәнле итеп тасуирланған. Үҫмер ҡыҙ сағынан күңеленә һеңеп ҡалғандары ла күҙ алдына баҫтырылған. Шул төйәктәге ер-һыу атамалары ла уҡыусының күңел байлығына әүерелгән һәм уның хәтер һандығына инеп ятҡан. Диалект һүҙҙәр ҙә йыш ҡына осрай бында. Саманы онотмағанда, улар ҙа артыҡ түгелдер. Сөнки әҙәби телебеҙҙе, башҡа халыҡ теленән килеп ингән һүҙҙәр менән сыбарлауға ҡарағанда, республикабыҙҙың төрлө мөйөштәрендә әйләнешкә ингән диалект һүҙҙәр иҫәбенә байыҡтырыу хәйерлерәктер, маҡсатҡа ярашлыраҡтыр.

Өҫтә һанап үтелгән лирик шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәрендә һағыш ҡатыш моңһоуыраҡ ҡылдар ҙа сиртеп ҡуйғылай. Уларҙың күпселегե күләмдәре (юлдар һәм строфалар һаны)

йәһәтенән йыйнаҡтар, яңғыраштары буйынса ла һүҙ тейҙерерлек түгелдәр. «Ҡабат-ҡабат» тигән шиғырҙың йәше олоғайып барған лирик героиняһы, мәҫәлән, төшөндә гел ҡыҙ сағын – силәктәрен аҫып Имән бүләк буйындағы шишмәгә һыуға барған сағын күрә. Был хәл уны аптырашҡа ла һала, бер аҙ һағайта ла, «Ҡайтыр көндәремдең (тап Кәтибә Кинйәбулатовалағыса!) яҡынлығын аңғартамы кереп бер үк төш?!» тигән уйға ҡала. Артабан был моңһоу уйҙар һәм борсолоуҙар тағы ла көсәйә төшә, шул уҡ ваҡытта лирик героиняның характер үҙенсәлеге лә бер ни тиклем асыҡлана («Төшөнөп тә бөткәс йәшәү серен йәшәйһеләр килмәү, ти, ҡайҙа!») һәм һуңғы строфала уның күңелен тырнаған һорауҙарға яуап та табыла, шикелле:

*Ҡабат-ҡабат бер үк төштө күрәм,*
*Ҡабат-ҡабат бер үк уй саға.*
*Ҡабат-ҡабат күргән һайын һаман,*
*Сат йәбешкәнмен был донъяға.*

Шулай итеп, ҡарап тороуға юҡ-барҙан ғына башланған һүҙ ахыр сиктә уҡыусыны тәрән мәғәнәле һөҙөмтәгә алып килә: тормош һинең алдыңа ниндәй генә һынауҙарын ҡуймаһын, унан туймаҫҡа, тешең-тырнағың менән йәбешеп йәшәргә кәрәк.

Шиғыр һүрәтләү сараларының байҙыҡлығы менән дә иғтибарҙы үҙенә тартып тора. Әйтәйек, бәүелсәкте хәтерләткән баҫма бында алһыу таҫмаға тиңләнгән; һыу алырға килгән ҡыҙҙың нәҙек беләгенә ҡағылған талдар уның йәшлектә һөйгән йәре һымаҡ тойола, һ.б. Былар бөтәһе лә төштә генә күрелһә лә, асылда ысын тормоштағы шикелле ҡабул ителә.

Тал образы Зөбәржәттең тағы бер шиғырында кәүҙәләнеш тапҡан – «Талдарым». Тик был юлы ул икенсе төрлөрәк юҫыҡта күҙаллана. Апрель һыуығында уҡ бөрөләнеп, һыуға таянған талдар шағирә күңелендә, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, ышанысһыҙ ир-аттар һүрәтен тыуҙырған. Ошо ассоциатив уй-фекерен автор түбәндәге юлдар менән йомғаҡлап ҡуйған:

*Һыуға таянған да талдар кеүек,*
*Таяндырһаң, яҙмыш, Иҙелгә,*
*Көс бирә күр, нескә талдар кеүек,*
*Ауырлыҡты күркәм гиҙергә!*

3.Йәнбирҙинаның тыуған яҡтары менән ғорурланыуын, уға булған һөйөү хистәрен сағылдырған лирик шиғырҙарында пейзаж күренештәре ярайһы ғына һутлы итеп тасуирлана. Уларға иркенләп туҡтап тормаҫтан, ҡайһы берҙәренән айырым миҫалдар килтереү менән сикләнәйек: «Далам түшәк йәйгән, һай, күк үлән!»; «Болот юрған япҡас елдәр тартты ебәк сымылдығы-ҡорғанын»; «Өс түбәлә аҡ бәрхәттәй балҡып, гөрләп сәскә атҡан аҡ ҡылған»; «Иҙрәп ятам, һабантурғай күктә үрлеҡырлы килеп йыр һуҙа» («Далам – далан!»): «Бауырһаҡ ҡамыры кеүек, тупраҡҡайым яуында»; «Һағынам һалам ҡыйыҡлы, һыу үткән балсыҡ өйҙө» («Һағындым, Ҡыҙыл ярым»); «Ауыл күгендәге йондоҙҙар ҙа эрерәктәр, күк тәлгәшләп элгән»; «Ҡаҙлайырым аға йондоҙ йыуып, ай тәгәрләп күктә йырмоң тыңлай»; «Бесән еткән, еләк бешкән мәл бит, бытбылдыҡтар гел бер һүҙҙе игәй»(«Ауылымда»); «Өрпәләмә сабый ҡарҙар өркә аяҡ еленән»; «Буран көйөн көйләр елдең, әйтерһең, юҡ бер кеме»; «Ҡар диңгеҙе әйләнәмдә, ҡараһаң – күҙ бәйләнә» («Эй, аҡ ҡарҙар»); «Зәңгәр күктә ҡауырыйланып аҡ болоттар ҡанатланған, ҡайһылары яулыҡ болғай, ҡайһылары ат атланған» («Апрель»); «Күрегеҙсе, ана, алһыуланып дөйә сәнскәктәре гөлләнә»; «Тере төҫлө таштар, йәнең күккә аша, ошо хозурлыҡтан моң урһаң»; «Ер йылмая, бите шау бәпембә, әйтерһең, бер ҡыҙсыҡ һипкелле» («Эй, тыуған яҡ») һ.б.

Билдәле булыуынса, теҙмә әҫәрҙәрҙә лә, сәсмәләрендә лә тәбиғәт күренештәрен йәнле итеп һүрәтләү, уның иҫәпһеҙ-һанһыҙ биҙәктәрен бөтә байлығында һәм күркәмлегендә төҫмөрләү – еңел шөғөл түгел. Быны өсөн һүҙ ҡеүәһе лә, унан да бигерәк тирә-йүнде (ағы-ҡараһы, ыңғайы-тиҫкәреһе менән бергә) бөтә нескәлегендә һиҙемләү һәм тойоу һәләте кәрәктер. Ә ул инде талантҡа барып тоташа. «Тәбиғәттең ... күркәмлеген һүрәтләргә етмәй һүҙҙәрем», – тип тыйнаҡлыҡ күрһәткән З. Йәнбирҙина ошо һәләткә эйә булған шағирә ине, тимәксемен. Уның әле өҫтә килтерелгән юлдары ғына түгел, тотошлай пейзаж күренештәрен тасуирлаған шиғырҙары ла бар. Шулар араһынан «Тәңкә ҡарҙар!» тигәненә иғтибарҙы йүнәлтеп китмәксемен.

«Тәңкә ҡарҙар!» – дүртәр юллы алты строфанан торған традицион шиғыр. Ләззәтләнеп һәм һөйөп кенә уҡыр шиғыр, тип тә өҫтәргә була. Сәсмә әҫәр теленә күсереп тикшергәндә, ул былайыраҡ яңғырар ине: донъя аҡ нурҙарға ҡойонғас, тирә-яҡ аҡ моңдарға сумған. «Аҡ тәңкәне сәстәренә ҡушып үргән ҡайындар» уғата ла ағарып киткәндәй тойола шағирәгә. (Йәйәләр эсендә әйтәйем әле: икенсе бер шиғырында З. Йәнбирҙина, хатта, аҡ туҙҙары күренмәҫлек булып ҡарға күмелгән ҡайындарҙы төҙәнә белмәй кершәнгә ҡойонған ҡыҙҙарға тиңләгәйне.) Ап-аҡ донъяла «һүлгә-түлгә, һутҡа» тулышҡан «бөрөләр моң тыңлай». Яҙҙың һулышын белгерткәндәй, аҡ тәңкәләр таҡҡан ел иҫә. Ҡарҙар ҡай тарафтан килһәләр ҙә, уларҙың сафлығы шик уятмай. Үҙен – аҡ яулыҡлы илсе, тип танытҡас, лирик героиняның уға булған ышанысы артабан да арта һәм аҡ ҡарҙарға серҙәрен һөйләп, бушанып ҡала.

Шиғри телде проза теленә әйләндереү ҡайһы берәүҙәргә мәҙәгерәк тә тойолор, бәлки. Ләкин әҙәбиәт ғилемендә бөтөнләй үк кире ҡағылырлыҡ һәм ҡабул ителмәҫлек алым да түгелдер. Уҡыусылар икеле-микеле уй тыумаһын өсөн, шиғырҙың һуңғы ике строфаһын бында үҙгәрешһеҙ күсерәм, һәм уҡыусы аңлар: ҡышҡы тәбиғәттең бер мәлен шағирә иҫ киткес матур тасуирлап ҡына ҡалмаған, – тос фекер әйтеүгә лә ирешкән:

*Эй, аҡ ҡарҙар, һеҙ икәнһегеҙ бит*
*Иңгә ятып бәхет юраусы.*
*Именлеген илдең үтенеүсе,*
*Тик изгелек кенә юллаусы.*

*Ябалаҡлап тәңкә ҡарҙар яуа,*
*Күк ауҙар ҙа ары сап, имеш.*
*Ап-аҡ ҡарҙар, ҡайҙа һаҡландығыҙ*
*Ап-аҡ көйө, былай саф килеш?*

Тәбиғәттең бай һәм серле күренештәренә иғтибарлылығы, унда өҙлөкһөҙ барған хәрәкәт-үҙгәрештәрҙе тотоп ала белеү маһирлығы Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Өс минут», «Ҡантүшкәйҙәр», «Шәфәҡ балҡый» тигән әҫәрҙәрендә лә күҙгә бәрелеп тора. Уларҙың һәр ҡайһыһы – шағирә өсөн үҙе бер табыш. Кем белһен, әгәр һәр нәмәгә ифрат талапсан, йор һүҙле Назар Нәжми иҫән булһа, «ҡар – аҡ була инде, ҡыҙыл түгел» тип еңелсә генә шелтәләп тә алыр ине, бәлки. Ләкин хәҙер улар икеһе лә гүр эйәләре инде. Өҫтәүенә, «аҡ ҡар» бер Зөбәржәттә генә түгел, башҡа шағирҙарыбыҙҙа ла (исемдәрен атап тормайым!) осрап ҡуя, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Әлегә шуныһы мөһим: З. Йәнбирҙинаның был шиғырҙарында һүҙ башлыса тәбиғәт күренештәре хаҡында ғына барғандай тойолһа ла, шағирә уларҙан йыш ҡына шаҡтай фәһемле һығымта яһап ҡуйыусан. Әйтәйек, «Шәфәҡ балҡый»ҙағыса:

*Ғәзиз донъя, әлдә был донъяға*
*Аңһыҙ килеп, уйлы китәбеҙ.*

*Һүрентеләй генә ғүмерҙе лә*
*Оло итеп йәшәп үтәбеҙ.*
*Әллә ниҙәр эшләп бөтәбеҙ...*

Һуңғы йылдарҙа ижад иткән поэтик әҫәрҙәрендә шағирә ерҙә йәшәүҙең күберәк яҡты яҡтарын күрергә, унының мәғәнәһен тәрәнерәк аңларға тырышты. «Ҡыр ҡаҙҙары» тигән кескенә, әммә бик матур яңғырашлы шиғырҙа, мәҫәлән, лирик героиняның йөрәгенә йылы яҡҡа осоусы ҡоштар һалып киткән һағыш һәм ошо айҡанлы үткән ғүмер тураһында уйланыуҙары былдай юлдар аша белдерелгән:

*Ҡыр ҡаҙҙары, тағы ҡайтырһығыҙ,*
*Яҙҙар кеүек шаулап, әйләнеп.*
*Йәш ғүмер ҙә ҡабат ҡайтһа икән*
*Яҙ моңона ғына бәйләнеп.*

Шағирәнең ошоға тартым кәйеф-сафаһын һәм күңел торошон «Йән туңмай», «Һиңә ҡайтһам»,«Аһ, уйҙарым...», «Үпкәм дә юҡ», «Бар»,«Эй һин, ғүмер», «Тәрән һағыштарым», «Матурҙыр ул», «Үрмә гөл» тигән шиғырҙарында ла шәйләргә мөмкин. Миҫал итеп шуларҙың ҡайһы берҙәренән айырым строфалар килтерәйек:

*Ғүмер ахырында бар яҙмышым*
*Үҙемә лә үтә йәл кеүек.*
*Таңғы ысыҡ ҡына булғанһың бит,*
*Насип түгел һөйгән йәр кеүек.*

(«Эй һин, ғүмер»)

*Мин киткәс тә, ожмах кеүек ергә*
*Яҙҙар килер, ҡайтыр ҡошҡайҙарым.*
*Был донъяға мәңге килгән төҫлө*
*Йәшәр дошман, илар дуҫҡайҙарым.*

(«Тәрән һағыштарым»)

*Эй, һин, ғәзиз ғүмер, кире*
*ҡайтыр булһаң,*
*Аҡ ҡапҡалар асыҡ, бермә-бер.*
*Аһ!*
*Ҡайтыр юлың ябыҡ,*
*шуның өсөндөр ҙә*
*Матурһыңдыр, ғүмер – үрмә гөл!*

(«Үрмә гөл»)

Зөбәржәт Йәнбирҙина хаҡындағы һүҙемде уның 2003 йылда донъя күргән «Рәхмәт, ҡояш!» тигән шиғыры менән тамамламаҡсы булдым. Ул ни бары дүрт строфанан тора. Уның тәүге һәм һуңғы строфалары былай яңғырай:

*Рәхмәт, ҡояш! Ғүмерем буйы*
*Ихлас булдың һәр көн иртән,*
*Был донъяла күргән бәхет*
*Бөтәһе лә һинән икән!*
. . . . . . . . . . . .
*Рәхмәт, ҡояш, һәр таң миңә*
*Яңы ҡанат, көс биргәнһең.*
*Ун ике лә тәңремдең*
*Кендек бәйе һин икәнһең.*

Шағирә менән уның шиғырҙары аша ғына таныш булһам да, донъялыҡта ул бик ғәҙел, тура һүҙле, кәрәк саҡта бер аҙ уҫалыраҡ та, әммә үҙ баһаһын, үҙ ҡәҙерен, үҙ урынын үҙе белеп йәшәгән йән эйәһе булғандыр, тип уйлайым. Шуны әйткем килә: дуҫиштәре, замандаштары, фекерҙәштәре иҫән саҡта, донъянан киткәндәрҙең «Һайланма әҫәрҙәр»ен туплап, уларҙың үҙҙәре һәм әҫәрҙәре хаҡында кескенә булһа ла аңлатмалар биреп, китап итеп баҫтырып сығарыу хәстәрлеген күрергә кәрәк ине. Әгәр был тәҡдим ҡабул ителһә, ул халҡыбыҙҙың милли аңын уғата ла үҫтереүгә, рухи байлығын арттырыуға, эстетик зауығын күтәреүгә йүнәлтелгән бер сара булып торор. Ундай китаптарҙың мәктәп китапханаларында көтөп алынған һәм алыштырғыһыҙ хазинаға әүереләсәктәре хаҡында һөйләп тә тораһы юҡ.

**Әнғәм ХӘБИРОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

*(Аҙағы киләһе һанда.)*

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ФЕЛЬЕТОН

Башҡорт әҙәбиәтендә фельетон жанрының формалашыуы һәм үҫеше туранан-тура республика сатира һәм юмор журналы «Һәнәк» менән бәйле. Әҙәбиәт ғилемендә фельетон жанры махсус өйрәнелмәгән. Шулай ҙа ҡайһы бер ғилми китаптарҙағы айырым бүлектәрҙе, сатира өлкәһендә эшләгән авторҙарҙы һанап китергә була:К. Мәргән «Көлә белеү – күңел байлығы»; Ә. Харисов «Рухи тамырҙар» китабында «Бабич сатираһы» бүлеге; М. Ғәйнуллин «Сәғит Агиш ижадында сатира һәм юмор»; Ғ. Рамазанов «Мәжит Ғафури ижады» (монография); "Әҙәбиәт офоҡтары» китабында С. Агиш, Т. Арыҫлан ижады; К. Әхмәтйәнов «Фәһемле хикмәттәр», «Йөҙ ҙә бер хикмәт китабына баш һүҙ», «Шиғриәт иленә сәйәхәт» китабына «Тауҙар йырсыһы» бүлеге (Т. Арыҫлан), «Һайланма әҫәрҙәргә баш һүҙ»; Р. Байымов «Дан туртаһы»на баш һүҙ», «Ижади биҙәктәр» китабында А. Ғирфанов, С. Кулибай ижады; А. Ғирфанов, С. Кулибай ижады; Ғ. Ҡунафин «XIX быуат башы һәм XX быуатта башҡорт поэзиһында сатира», «Йыр һәм сатира жанр үҫеше», «Башҡорт нарратив поэзияһы»: «XIX быуат башы һәм XX быуаттар», «Жанр системаһы мәсьәләләре», «Мәҫәл тибындағы жанр барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше»; Ә. Сөләймәнов «Тормош-көнкүреш әкиәттәре», «Көтөлмәгәнлек һәм комиклыҡ», «Комик пафос»; Ғ. Хөсәйенов «Сәйфи Ҡудаш ижады», «Ш. Бабич – шиғыр оҫтаһы», «Тормош китабы» йыйынтығы «С. Агиш ижады», «Замандаштар ауазы», «Кәримовтар кесеһе», «Бөрө, сәскә, сәнске», «Йөрәк дауаһы» китабына баш һүҙ»; С. Галин «Тел асҡысы – халыҡта», «Башҡорт халҡының йыр поэзияһы» китабында «Шаян йырҙар» бүлеге; Т. Килмөхәмәтов «Халыҡсанлыҡ көсө» китабында «Комедияла телдең жанр биҙәктәре», «Башҡорт драматургия поэтикаһы китабында «Комедия бүлеге» һ.б.

Күренеүенсә, жанр хаҡында бер махсус хеҙмәт тә булманы, ләкин был, башҡорт әҙәбиәтендә фельетон һәм фельетонистар ижады хаҡында бөтөнләй һүҙ юҡ, тигәнде аңлатмай. Атап үтелгән авторҙар үҙҙәре тикшергән яҙыусыларҙың ижадында сатира һәм юмор хаҡында яҙалар, уларҙың әҫәрҙәрендәге художество һүрәтләү сараларына, сатира һәм юморға анализ яһайҙар.

Фельетон тарихына күҙ һалайыҡ, рус һәм башҡорт-татар әҙәбиәтендә ул ниндәй юл үткән, шуны күҙаллайыҡ.

Фельетон һүҙе француз теленән «бәләкәй ҡағыҙ киҫәге» тигәнде аңлата.

Фельетонды очерк-портреттың киреһе тиергә була. Сөнки унда ҡайһы бер кешеләрҙең йәмәғәт һәм әхлаҡ тәртиптәрен тупаҫ боҙоуы фаш ителә. Жанрҙың үҙенсәлеге һүрәтләнгән ваҡиғаларҙы ҡырҡа тәнҡит күҙлегенән көлкө аша баһалауға ҡайтып ҡала. Шуның өсөн унда, ғәҙәттә, ыңғай геройҙар булмай.

Рәсәйҙә XIX быуаттың утыҙынсы

йылдарында был бурысты «Телескоп» сатирик журналы үтәй. Баҫмала бығаса күрелмәгән хәлдә күпләп әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре нәшер ителә. Айырыуса Феофилакт Косичкин псевдонимы аҫтында яҙышҡан бер авторҙың фельетондары йыш баҫыла, ул – Рәсәйҙең билдәле шағиры А. С. Пушкин була. Пушкиндың әсе тәнҡит менән һуғарылған фельетондары дошмандары Ф. Булгарин менән Н. Гречҡа төбәлә. Билдәле рус яҙыусылары Ф. Достоевский, Н. Некрасов, И. Тургенев һәм башҡалар ҙа фельетон, тәнҡит мәҡәләләре яҙыу оҫтаһы булғандар. Шулай итеп, был ваҡытта фельетон Рәсәй баҫмаларында даими баҫылып килгән әүҙем жанрға әйләнә.

Башҡорт әҙәбиәтендә лә фельетон жанры оҙон һәм ҡатмарлы юл үтә. Ул Октябрь революцияһына тиклем үк барлыҡҡа килә. Октябрь революцияһына тиклемге башҡорт әҙәбиәтендә яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә (Тажетдин Ялсығолов, Һибәтулла Сәлихов, Ғәли Соҡорой, Әбделмәних Ҡарғалы) йәмғиәттәге тиҫкәре күренештәрҙе, байҙарҙы, наҙанлыҡты, иҫкелекте, һәм ғәҙелһеҙлекте ҡыйыу тәнҡитләп сыға. Рус ғалимы М. Лоссиевский, мәҫәлән, үҙенең бер хеҙмәтендә башҡорттарҙа сатирик шағирҙар осрауын, шундай ҡыйыуҙарының хатта түрәләргә тел тейҙереүен әйтә.

Башҡорт мәғрифәтселәре Мифтахетдин Аҡмулла, М. Өмөтбаев – башҡорт сатираһына ҙур өлөш индергән, рус ғилми фекерен һәм мәҙәниәтен яҡшы үҙләштергән шәхестәр. Мәҫәлән, М. Өмөтбаевтың «Ҡайыш илә йүкә» әҫәре. Шул уҡ Аҡмулланың тапҡыр телле, йор һүҙле күп шиғырҙары байҙарҙы, наҙан муллаларҙы, кеше иҫәбенә йәшәүсе чиновниктарҙы тәнҡитләп яҙылған. Октябрь революцияһына тиклемге башҡорт әҙәбиәтендә Аҡмулла, Өмөтбаев йоғонтоһонда артабан Ш. Бабич, М. Ғафури, С. Ҡудаш, Д. Юлтый, А. Таһиров, С. Агиш сатираға мөрәжәғәт итә. Уларҙың тәнҡит рухындағы хикәйәләре, шиғыр, мәҫәл, фельетондары Ырымбур, Ҡазан, Әстерхан ҡалаларында нәшер ителгән «Ҡарсыға», «Ялт-йолт», «Сүкеш», «Ҡармаҡ» кеүек баҫмаларҙа донъя күрә.

Был йылдарҙағы сатирик жанрҙарҙың төп темаһы булып иҫке йәмғиәт тәртиптәрен фашлау, иҙеүсе синыфтарҙан, муллаларҙан көлөү була. Был хәл, башҡорт сатирик матбуғаты тәүге аҙымдарын рус һәм татар сатирик журналдарына тотоноп атланы, тип әйтергә хоҡуҡ бирә. Әгәр Октябрь революцияһына тиклем баҫылған башҡорт-татар көлкө журналдарында сатира батша хөкүмәтенең серек терәүҙәрен ҡаҡшатыу, иҙеүселәр синыфын ҡолатыу өсөн кәрәкһә, революциянан һуң сыҡҡандарының маҡсаты – ил менән идара итеүсе хеҙмәтсәндәр синыфын яҡлау, яңы хакимиәттең ныҡлығы өсөн көрәшеү. «Яңы башҡорт сатираһы формалашыуына «Ҡарсыға», «Ялт-йолт», «Аҡмулла», «Сүкеш» кеүек баҫмалар – йәмғеһе 11 сатирик-юмористик башҡорт-татар демократик журналдарҙың йоғонтоһо ҙур була. Башҡорт сатираһы революциянан һуң сәскә ата. Аҡмулла, Бабич сатираһына нигеҙләнгән башҡорт сатираһының маҡсаты еңелеп бөтмәгән иҙеүсе синыфтарҙан көлөү, илдәге эске һәм тышҡы дошмандар менән алыш барғанда йәш совет матбуғаты илдәге етешһеҙлектәрҙе аса һәм тәнҡитләй. Сатира йәмғиәт төҙөүҙең алғы һыҙығында бара.

Үткән быуат башында үҙен Туҡайҙың шәкерте тип иҫәпләнгән Ш.Бабич оҫта сатирик булараҡ танылыу яулай. Туҡай поэзияһына һоҡланып, ул «Ғабдулла әфәнде Туҡаев» тигән шиғырын ижад итә. Ш. Бабич революцияға тиклем үк, йәғни 1916–1917 йылдарҙа ижад ителгән иң билдәле әҫәрҙәре «Ҡандала» балладаһы, «Ғазазил»

поэмаһы, «Китабеннас» эпиграммалары менән башҡорт сатираһының иң юғары нөктәһенә күтәрелә.

Мәҫәлән, «Ғазазил»да Алла Бабич өсөн кеше рухын быуыусы кәртәләр символы, ул башҡалар аҙ ғына булһа ла ситкә сыҡтымы, уға ҡаршы сыға. Әҫәрҙә Алла менән Иблис араһында ошондай һөйләшеү була:

*– Дәүләтеңде һанһынам,*
*әммә шуныһы –*
*Буйһоноръа кәмһенәм.*
*Сөнки мин нур, мин ъалим,*
*Үҙ-үҙемә кескенә бер алла мин.*

Иблистең һүҙҙәре Аллаға оҡшамай, әлбиттә, улар араһында конфликт башлана. Һәм ул Ғазазилдың, үҙ исемен юғалтып, ожмахтан ҡыуылыуы менән тамамлана.

Был хәлдән һуң Иблис ерҙә бөтә көсөн шарап эсеп, бар һәләтен кешеләрҙе аҙҙырыуға, яуызлыҡҡа йүнәлтә, ә Алланың уны тыйыуға ҡөҙрәте етмәй. Шулай итеп, поэма замана иблистәре һәм уларҙың халыҡҡа эшләгән яуызлыҡтарын фашлауға барып тоташа.

Октябрь революцияһына тиклем башҡорт сатираһында башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы яҙыусыларҙан Сәйфи Ҡудаш менән Мәжит Ғафури ҙа фельетон жанры үҫешенә ҙур өлөш индерә. Тик 1916-1917 йылдарҙа сыҡҡан «Ҡармаҡ» журналында ғына С. Ҡудаштың ун дүрт фельетоны баҫылып сыҡҡан, уларҙа автор ришүәтселәр, наҙан муллалар һәм ҡазыйҙарҙан көлә, тәртипһеҙлек, насар ғәҙәттәрҙе тәнҡитләй. 1917 йылда «Ҡармаҡ» ябылғас, С. Ҡудаш Өфөлә нәшер ителгән «Беҙҙең юл», «Алға» исемле сатирик баҫмалар менән хеҙмәттәшлек итә. Бына уның «Беҙҙең юл» гәзитендә баҫылған шиғри фельетонынан бер өҙөк:

*Әй, йыуан, туймаҫ, бирән,*
*Ҡорһаҡлы байҙар, туҡтаъыҙ,*
*Үҙ муйыныгыҙъа һалынмаһын*
*Элекке нуҡтаъыҙ. Туҡтаъыҙ!*
*Туҡтаъыҙ! /2/.*

С. Ҡудаштың 1917 йылда баҫылған «Аҡ билеттар» бәйетендә лә сатира төҫө бар, был айырыуса уның «Ахырзаман», «Ахрызаманға ғилеүә», «Билләһи» шиғырҙарында асыҡ сағыла. Граждандар һуғышы йылдарында яҙылған «Серәкәй» балладаһы, «Октябрь» исемле поэмаһы сатирик рухта ижад ителгән. Был әҫәрҙәре хатта бер ни тиклем Бабичтың «Ҡандала»һы менән ауаздаш та кеүек. С. Ҡудаш ҡан эскес Серәкәй хаҡында яҙғанда иҙеүсе синыфтарҙы күҙаллаһа, Бабичта ул Ҡандала образында кәүҙәләндерелә. «Октябрь» поэмаһында иһә революция дошмандары, халыҡ ижады әҫәрҙәрендәге кеүек, мең башлы аждаһалар рәүешендә һүрәтләнә, әҫәр аҙағында барыһының да яҙмышы еңелеү менән тамамлана.

Әлбиттә, революциянан һуң совет йәмғиәтенә сатира кәрәкме, әллә юҡмы, тигән һорау баҫа. Танылған рус фельетонсыһы Михаил Кольцов Рәсәй яҙыусыларының беренсе съезында һөйләгән телмәрендә: «Совет сатираһының мәғәнәһен инҡар итеү – пролетариат диктатураһы осоронда тәнҡиттең мәғәнәһен инҡар итеү менән бер ул», – тигән һүҙҙәр әйтә.

Үҙенең «Көләсәкбеҙ!» тигән мәҡәләһендә А. Луначарский ҙа: «Революция булыу менән көлөү һәм сатира ҡороманы, ә киреһенсә, яңы ерлектә үҫеп китте»,– тип билдәләй.

Һуғышсан пафослы әҫәрҙәр ижад итеүсе Бабич иһә: «Көлкө кешене рәхәтләндерә, күңелде аса. Көлкө ҡалыбына һуғылған ғәйептәрҙе халыҡ көлә-көлә ҡабул итә, көлкө һуғылған мәғәнәләр халыҡтың йөрәгенә мәңге онотолмаҫлыҡ булып ултырып ҡала...» – тип һыҙыҡ өҫтәнә ала. 1922 йылда Өфөлә «Бабич» исемле әҙәби-сәйәси көлкө

журналы барлыҡҡа килә. Ул Исмәғил Рәмиев, Дауыт Юлтый, Надир Ҡадиризарҙың тырышлығы менән асыла. Ләкин, үкенескә ҡаршы, журналдың ике генә һаны донъя күреп өлгөрә. Үткән быуаттың 20-се йылдарында баҫылған хәбәрҙәрҙән күренеүенсә, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре сатира һәм юмор журналын көтөп, хуплап ҡаршы алған. «Бабич» журналының төп маҡсат итеп тормоштоң ваҡ-төйәк кәмселектәренән көлөүсе еңел юмор түгел, ә социаль ҡаршылыҡтарҙы сағылдырыусы үткер сатира ҡуйыла. Ләкин халыҡ менән бәйләнеш булмау сәбәпле, журнал йәшәүҙән туҡтай.

«Бабич» – нэп дәүерендәге журнал, ундағы тәүге фельетондар һәм шиғырҙарҙың төп геройҙары – сауҙа әһелдәре. Баҫма, шул йылдарҙағы ҡайһы бер журналдарҙан айырмалы рәүештә, яңы иҡтисади сәйәсәттең асылына төшөнөп, уны капитализмға кире ҡайтыу тип түгел, ә ваҡытлы хәл тип аңлай.

Жанрҙар мәсьәләһенә килгәндә, әйтергә кәрәк, әле фельетондар урыны түрҙә түгел, баҫмала күберәген тәнҡит мәҡәләләре, таҡмаҡтар, рецензиялар урын ала. Республикала барлыҡҡа килгән тәүге сатира журналы булараҡ, ул шиғри шишмә кеүек. Башҡортостандың сатира көстәрен үҙ тирәһенә йыя. Был шишмәлә сатириктар: «Ғ. Ғүмәр, журналист-фельетонсы И. Рәмиев, Надир Ҡадиров сирҡаныс ала, «Бабич» киләсәктә нәшер ителәсәк «Һәнәк» һәм «Чаян» баҫмалары өсөн дә кадрҙар тәрбиәләй, Башҡортостанда тиҙҙән донъя күрәсәк «Һәнәк» журналының нигеҙ ташы һәм сығанағы була.

Яҙыусы-сатирик Марсель Сәлимдең билдәләүенсә, үткән быуаттың егерменсе йылдарында сатирик журналистиканың артабанғы үҫешен билдәләүҙә милли телдәрҙә баҫылған көлкө журналдарының әһәмиәте ҙур була, 1925 йылда сыға башлаған «Һәнәк» журналы шул осорҙа йәшәй башлаған «Чаян» (1923), «Шәпи» (1924), «Крокодил» (1922) журналдарына таянып үҫә. Уларҙа Башҡортостан хәбәрҙәре менән бергә ваҡ-төйәк етешһеҙлектәрҙе семеткән сигналдар һәм кескәй фельетондар, милли-ағартыу эштәрен йәнләндереү кеүек етди мәсьәләләр күтәрелә. Сатира уғы хужаһыҙлыҡ, эскелек, хеҙмәт тәртибен боҙоу кеүек кәмселектәргә ҡаршы йүнәлтелә. Баҫмала сатира һәм юморға ҙур урын бирелә, ләкин тәнҡит мәҡәләләре әле юҡ дәрәжәлә. Тәнҡит мәҡәләләрендә әҙәби алымдар түгел, ҡоро факттар өҫтөнлөк итә, шул сәбәпле күп авторҙар уҡыусы күңеленә һеңеп ҡалырҙай сатирик образдар тыуҙыра алмай. Ул йылдарҙа матбуғатта маңлайға терәп атыу – туранан-тура  фашлау алымы көслө була. 1922 йылда «Крокодил» барлыҡҡа килеү менән рус сатираһында ла көслө фельетонистар үҫеп сыға, М. Кольцов, И. Ильф менән Е. Петров, Д. Заславский, С. Нариньяни, И. Шатуновский, В. Надеин баҫмала совет власы яулап алған еңеүҙәрҙе нығытыу, совет кешеләренең социализм төҙөүҙәге фиҙакәрлеген яҡтыртыу мәнфәғәтендә үткер тәнҡит мәҡәләләре һәм фельетондар ижад итә. Ул йылдарҙағы фельетондарға хас дөйөмләштерелгән образдар: эске дошмандар, аҡ гвардеецтар менән тиңһеҙ алышта батырлыҡ күрһәткән ҡыҙыл комиссарҙар, Совет власына ҡаршы дошмандар. Бөгөнгө көн талаптарына яуап бирерлек кимәлдә ижад ителмәһә лә, ул заман фельетондары үҙ ваҡытының актуаль проблемаларын күтәргән, кеше аңына йоғонтолоғо, документаллеге менән айырылып тора.

Ләкин ваҡыт үткән һайын талаптар ҙа арта, үҙгәрә, сатира ла бер урында тапана алмай. Тәнҡит объектын сәнғәт призмаһы аша үткәрмәй тороп,

туранан-тура ҡағыҙға төшөрөү, етешһеҙлектәрҙән көлөүҙе һүгеү йәки мораль уҡыуға ҡайтарып ҡалдырыу уҡыусыны ҡәнәғәтләндермәй. Тормош үҙе үк уҡыусыны уйландырырлыҡ фельетондар, сәнғәтсә эшләнгән сағыу образдар тыуҙырыуҙы һорай. Бының өсөн, билдәле, көндәлек гәзит биттәре генә тар була башлай, махсус сатира һәм юмор журналы кәрәклеге ҡалҡып сыға.

«Бабич» ябылғандан һуң, уның дауамы булып «Һәнәк» тыуа... Башҡорт сатираһы һәм әҙәбиәте тарихында өрәңы дәүер башлана. Ул республикабыҙҙа сатирик жанрҙарҙың артабан камиллашыуына юл аса. «Һәнәк»кә Ғариф Ғүмәр, Сәйфи Ҡудаш, Мәжит Ғафури, Имай Насыри, Ғәйнан Хәйри, Ғәйнан Әмири, Ғәлимов Сәләм, Мәҡсүд Сөндөклө, Баязит Бикбай, Әкрәм Вәли, Булат Ишемғолов, Нәҡи Иҫәнбәт, С. Сүнчәләй, Т. Ченәкәй, К. Имаев, Н. Ҡадири, Ғ. Ғөзәй, Ғ. Сабиров һәм башҡа яҙыусылар килә. Башҡорт яҙыусылары Б.Бикбай, С. Агиш, И. Насыри, Р. Ниғмәти, С. Кулибай, Ғ. Ғүмәр, С. Ҡудаш «Һәнәк» биттәрендә юмористик хикәйәләре һәм фельетондары иң күп баҫылған авторҙар булып таныла. Илдә коллективлаштырыу һәм индустриаллаштырыу барған осорҙа тормоштағы төрлө етешһеҙлектәрҙе, кеше аңындағы үҙгәрештәрҙе, яңы тормошҡа аяҡ салыусылар, иҫкегә йәбешеп ятыусыларҙы ҡаты тәнҡит утында яндырыу – башҡорт матбуғаты һәм әҙәбиәтенең төп темаһы иҫәпләнә.

1938 йылда сығыуҙан ваҡытлыса туҡтатылып торған «Һәнәк» 1956 йылда ҡабаттан тергеҙелә, уның баш мөхәррире итеп шағир Назар Нәжмиҙе билдәләйҙәр. «Һәнәк»кә һуғыш яланынан иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан бер төркөм талантлы яҙыусылар эшкә килә һәм йылдар үтеү менән улар билдәле сатириктарға әйләнә, улар: И. Абдуллин, Р. Ғабдрахманов, Ғ. Рамазанов, З. Хисмәтуллин, Х. Ғиләжев, Т. Арыҫлан, Ш. Бикҡол. Шулай уҡ А. Ғирфанов, М. Басиров, Ғ. Вәлиев, К. Мәргән, Т. Сәғитов, Р. Ханнанов, Б. Рафиҡов, Ә. Атнабаев һ.б. «Һәнәк»тә сатира ҡәләмен үткерләп, шул өлкәлә уңышҡа ирешә. Шуларҙың береһе, мәҫәлән,– шағир Я. Ҡолмой. Ул үҙенең көндәлектәрендә: «Мин «Һәнәк» менән даими аралашыу һөҙөмтәһендә 50-нән ашыу мәҫәл ижад иттем»,– тип күрһәтә.

Башҡорт әҙәбиәтендә 1960–1980 йылдар фельетон жанрының сәскә атҡан осоро булараҡ иҫтәлекле. Ул йылдарҙа «Һәнәк»тең штаттан тыш хәбәрселәре лә күп булған. Фельетондар журналдың яртыһын тиерлек алып тора, журналдың ҡалған өлөшөн – көлкөлө һүрәттәр, карикатуралар, юмористик хикәйәләр, шиғри фельетондар биләй. Уларҙа төп тема – ауыл хужалығындағы етешһеҙлектәр, бюрократтар, эскеселәр, ялҡауҙар, мещандар, үҙ эшенә яуапһыҙ ҡараусылар, ыңғай фельетондарҙа иһә – социалистик хеҙмәт алдынғылары, хужалыҡ етәкселәре, биш йыллыҡ ударниктары маҡтала. «Республика тормошондағы етешһеҙлектәрҙе тулыһынса асып һалыу, ҙур һәм бөйөк эштәрҙе киләсәк күҙлегенән сығып баһалау, йәмғиәткә алға барыу өсөн ҡамасаулыҡ итеүсе һәр төрлө етешһеҙлектәрҙе тарих сүплегенә ырғытыу, эскеселәр, ялҡауҙар, дәүләт малын үҙ кеҫәһе менән бутаусылар, ялағайҙар, бюрократтар, эшлекһеҙ етәкселәр, яңылыҡҡа аяҡ салыусылар, юғары вазифа биләп шуның менән файҙаланыусылар, спекулянттар, эшкә яуапһыҙ ҡараусылар, алимент түләмәй ҡасып йөрөүсе ялҡау ирҙәр – бына 60–80 йылдар фельетондарының төп геройҙары.

Был йылдарҙа «Һәнәк» тағы ла бер төркөм билдәле яҙыусылар һәм журналистар Д. Исламов, Ш. Насиров, Ғ. Әхмәтшин, А. Игебаев, Г. Вәлиев, Й. Солтанов, М. Сиражи, И. Кинйәбулатов,

татар яҙыусылары Ү. Ғимаҙиев, Хәсән Саръян, Х. Гарданов эшләп китәләр, журналистар З. Әминев, З. Әхмәтов, Ф. Биишев, К. Аҙнаев, Х. Хәйретдинов, Ғ. Яруллин, М. Мусин, Ғ. Үзбәков, Б. Ғариповтың тәнҡит мәҡәләләре, скетч, интермедия, рецензия, реплика, эпиграмма, таҡмаҡ, пародия, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, афоризмдар, мәҫәлдәр, дүрт юллыҡтар менән сығыш яһап, үҙҙәрен маһир сатириктар итеп таныта.

1956 йылда «Һәнәк», беренсе йыл ғына сығыуына ҡарамаҫтан, журнал уҡыусыларҙан 1488 хат алған, шуның 496-һы журнал биттәрендә фельетон йәки тәнҡит мәҡәләһе булып баҫылған. Фельетон оҫталары С. Сафиуллин, Н. Ғәлимов, Н. Хафизов, Р. Тимершин, Х. Түләкәев, М. Сәлимов, М. Кәримов, Р. Ғабдрахманов, М. Азлыев популяр фельетонсылар иҫәпләнгән, ә рәссамдар А. Штабель, У. Ғәйфуллин, Р. Гәрәев журналды карикатуралар һәм күңелле һүрәттәр иҫәбенә тулыландырыуға өлгәшкәндәр. Баҫма республикала контроллек итеүсе барлыҡ йәмәғәт органдары һәм төрлө инспекция работниктары менән ныҡлы элемтәгә инә, йөҙәрләгән авторҙар менән хеҙмәттәшлек итеп, һәр ҡалала хәбәрсе посы ойоштора. Үкенескә ҡаршы, 1980 йылдар аҙағында – 1990 йылдар башында илдәге үҙгәртеп ҡороуҙар баҫманы ауыр һынау алдына ҡуйҙы. Шул сәбәпле «Һәнәк»тең тиражы ла ҡырҡа кәмене. Журналда бөгөн фельетон урынын юмористик хикәйәләр, ауыл мәҙәктәре, шиғри фельетондар, төрлө көлдөргөстәр, эпиграммалар, төртмәле дүрт юллыҡтар, дуҫтарса шаярыуҙар, шарждар яулай. Әлбиттә, яңы заман сатирик матбуғат алдына яңы бурыстар ҡуя. Йәмғиәтте үҙгәртеп ҡороу, баҙар шарттарына күсеү тәнҡитте бер яҡтан, кәрәк тип табып, журнал биттәрендә фельетондар күберәк яҙылырға тейеш кеүек күренһә лә, икенсе яҡтан, улар баҫмала үҙ урынын бәләкәй жанрҙарға һәм сатирик-юмористик шиғыр-хикәйәләргә бушата. Сәбәбе – йәмғиәттә тәнҡиттең баһаһы кәмеүҙә, тәнҡитләүҙең моданан төшөп ҡалыуындалыр. Шуға ҡарамаҫтан, «Һәнәк» республиканың иҡтисади үҫешенә, эш шарттарын яҡшыртыуға ҡамасаулаған етешһеҙлектәргә принципиаль тәнҡит күҙлеге аша ҡарарға, мөһим ижтимағи мәсьәләләр күтәрергә, тәнҡит уҡтарын тормошобоҙға ҡамасаулаған етешһеҙлектәргә тоҫҡарға тырыша. Шул рәүешле журнал биттәрендә йәмһүриәтебеҙҙең күп яҡлы тормошо үҙенсәлекле сағылыш таба.

Шулай итеп, башҡорт әҙәбиәтендә сатира һәм юмор бар һәм булған. Уның бер быуатлыҡ тарихы бар. Фельетон элеккеләй һуғышсан жанрҙан иҫәпләнмәһә лә, «Һәнәк» битендә йәшәүен дауам итә. Башҡорт яҙыусыларының иң аҫыл сатирик-юмористик әҫәрҙәре «Һәнәк», шулай уҡ «Башҡортостан», «Йәшлек», «Ҡыҙыл таң», «Өмөт», «Шоңҡар», «Толпар» һ.б. гәзит-журналдарҙа даими баҫылып килә. Дөйөмләштереп әйткәндә, республика сатира һәм юмор журналы үҙенең иң изге бурысы – башҡорт сатириктарын әҙерләүгә элеккеләй ҙур өлөш индерә. Тимәк, фельетон жанрының киләсәге өмөтлө һәм ул башҡа жанрҙар араһында үҙ урынын яулаған кәрәкле жанр булып йәшәүен дауам итә.

**Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА.**

## ТЕЛСЕНЕҢ ЯҠТЫ ИҪТӘЛЕГЕ

*(Күренекле телсе Таһир Байышевтың тыуыуына 125 йыл)*

*Филология фәндәре кандидаты Таһир Ғәләм улы Байышев 1886 йылдың 15 авгусында Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе Дыуан-Мәсетле олоҫоноң Иҫке Хәлил ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән. Арый ауылы мәктәбендә белем алғандан һуң, өс йыл шунда уҡ балаларға дини һабаҡ бирә. 1909 йылда 23 йәшлек Таһирҙы батша армияһына алалар, һәм ул Иркутск ҡалаһында артиллерия часында хеҙмәт итә башлай. Үҙенең автобиографияһында яҙылғанса, белемгә һыуһаған Байышев үҙе теләп фельдшерлыҡ мәктәбенә уҡырға инә һәм уны уңышлы тамамлай. Беренсе донъя һуғышы башланғас, герман фронтына ебәрелә. Контузияланған килеш дошман тарафынан әсир алына, ләкин яйын табып ҡаса.*

*Һигеҙ йыл батша армияһы һалдаты формаһында Таһир Байышев, Себер һәм Монголиянан тыш, Белоруссия, Польша, Латвия, Литва, Германия, Украина, Әзербайжан, Грузия, Әрмәнстан һәм Иранда булып, үҙе әйтмешләй, күп халыҡ менән аралашып, үҙаңы күпкә үҫеп ҡайта. 1918 йылда тыуған яғына ҡайтҡан 32 йәшлек ир уртаһы Байышев уҡытыусылыҡ, фельдшерлыҡ менән шөғөлләнә. Белем алыуын дауам итеп, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәре вазифаһына тиклем үрләй, башҡорт һөйләштәрен өйрәнеүгә күп көс һала, шул турала ғилми хеҙмәттәр яҙа.*

*Ғалимдың бик күп архивы ҡала. Мәҫәлән, башҡорт халыҡ уйындары, тел ғилеме тураһында мәҡәләләр, хәтерләү-иҫтәлектәр. Был материалдар араһында шулай уҡ КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетында, башҡа партия һәм совет органдарында эшләүсе башҡорт милли мәҙәниәтен ек күргән һәм уны үҫтереүгә аяҡ салған ҡайһы бер татар кадрҙарына ҡаршы көрәш менән бәйләнешле хаттары ла аҙ түгел. Үҙ халҡының эскерһеҙ патриоты, ныҡышмалы, принципиаль кеше булғаны өсөн уның фән буйынса үҫеүенә аяҡ салыу өсөн күрелгән саралар тураһында КПСС Үҙәк Комитетына тиклем яҙған хаттарының күсермәләре лә бар. Ләкин улар буйынса бер ниндәй ҙә саралар күрелмәгән. Үҙе иҫән саҡта ла, унан һуң да ғалимды иҫкә алыу, уның тураһында һөйләү-яҙыу тыйыла.*

*Башҡорт тел ғилемен үҫтереү башында торған шәхестең тыуыуына 125 йыл тулыу айҡанлы «Ағиҙел» үҙ уҡыусыларына уның бер нисә хеҙмәтен тәҡдим итә.*

# ТЫРЫШҠАН – ТАШҠА ҠАҘАУ ҠАҠҠАН

*Гел алға, баҫ көрәш сафына! Ауырлыҡтар аша еңеүгә, еңеүгә, бүтән — бер ҡайҙа ла.*

Н. А. Островский.

Шағир, яҙыусыларҙы юҡҡа ғына «кеше рухының инженеры» тип атамағандар. Назар Нәжми «Ауыр» тигән шиғырында минең турала, ғүмерем, кисергән ауырлыҡтар, тырышлыҡтар, еңеп сығыуҙар тураһында бик дөрөҫ итеп әйтеп биргән:

*Кеше өсөн еңел бер нәмә юҡ,*
*Бөтә нәмә ауыр.*
*Ауыр — тыуыу,*
*Ауыр — кеше булыу.*

Был тапҡыр һүҙҙәр бер миңә ҡарата ғына түгел, бәлки, меңдәргә төбәп тә әйтелгәндер. Шағирыбыҙ Ғариф Ғүмәр ҙә «Тупһанан түргә» үрләүен, Октябрь ҡояшының уятыусы һәм йән биреүсе нурҙары ярҙамында меңдәрҙең, мәхрүмлек, хурлыҡ, түбәнселектән ҡотола алыу бәхетен бик тапҡыр раҫлап биргәйне бит! Мин дә шул меңдәрҙең береһе булам.

Октябрь ҡояшы тыумаҫтан элек үлем түшәгенә ауған башҡорт халҡының ярлы, наҙан ғаиләһендә тыуып үҫеү, балалыҡтан сығыу миңә лә бик ауыр булды. Буй еткереү, егет булыу, дини мәктәптә мең төрлө хөрәфәт менән ағыуланыу, йәшәү һәм икмәк өсөн кәрәкле белемдән мәхрүм булыу ҙа бик ауыр булды. Бәхеткә күрә, 23 йәш менән барғанда бер һөнәргә лә эйә булмаған, русса бер ауыҙ һүҙ белмәгән көйгә һалдатҡа алыныу, унда энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙығандай белем ала башлау, тырыша-ныҡыша рус телен өйрәнеү ҙә бик, бик ауыр булды. Бәхеткә күрә, фельдшерлыҡ мәктәбенә алыныу, унда әле йүнләп белмәгән рус телендә медицина фәнен үҙләштереү ҙә еңел булманы. Мәгәр шуныһы яҡшы булды: наҙанлыҡ ҡараңғылығынан арына барыу шул мәктәптә башланды.

Тырышҡан — ташҡа ҡаҙау ҡаҡҡан. Тырыштым, ныҡыштым, бөтә ауырлыҡтарҙы еңгәндәй булдым. Мәктәпте уңышлы тамамлап, фельдшер дәрәжәһенә өлгәштем. Аң-рухымда ҙур һынылыш барлыҡҡа килде. Фельдшер эше миңә буш ваҡытты ла күп бирҙе. Рус теле һәм грамматикаһын үҙ аллы өйрәнеү өсөн «Самоучитель» дәреслектәрен почта аша алдырып, орфографияны, грамматиканы ныҡлап өйрәнергә тотондом. Ауыл мәктәбендә ғәрәп теле грамматикаһын яҡшы ғына үҙләштереп өлгөргәйнем. Рус һәм ғәрәп грамматикалары бер-береһенә яҡын булып сыҡты. Уларҙы сағыштырып өйрәнеү ауырлыҡтарҙы еңеләйтеп, рус теле грамматикаһына тулы эйә булыуға ярҙам итте. Тырыша торғас, русса хатаһыҙ яҙыу, һәр әҫәрҙе аңлап уҡыу бәхетенә ирештем.

Сит тел өйрәнеү, уның эсенә инеү — ғәжәп хәл икән дәһә ул! Бикле өйгә асҡысһыҙ инә алмаған кеүек, грамматикаһын белмәй тороп, сит

телдең эсенә инеп булмай икән ул. Ғәрәп грамматикаһын белеп алғас, ғәрәпсә телләгән бер әҫәрҙе уҡый алһам да, йөкмәткеһен аңлау өсөн шул телде белмәү ҡамасаулай ине. Рус телен өйрәнеүҙә лә шулай булып, минең алға әҙәби телдең һүҙ байлығына эйә булыу бурысы килеп баҫты. Русса-татарса һәм бүтән һүҙлектәр ярҙамында һүҙ байлығы даръяһынан тамсылар, йотомдар алыу, тиреү, сүпләү башланып китте.

Назар Нәжми әйтмешләй,

> *Кеше өсөн еңел бер нәмә юҡ,*
> *Бөтә нәмә ауыр.*
> *Бөтәһен дә күтәрә ала кеше.*
> *Кеше көслө, сабыр.*

Һалдатҡа алыныуымды «бәхеткә күрә» тип әйткәйнем. Ысынлап та, төпкөл башҡорт ауылынан сыҡҡан егет өсөн хәрби хеҙмәт беренсе көндән үк уҡыу йортона әүерелде. Фельдшерлыҡҡа уҡыу ғилем-фән өлкәһенә индереп ебәрһә, артабанғы хеҙмәтем мине сәйәсәт, ижтимағи фән, синфи көрәш, азатлыҡ, тиңлек өсөн алышҡа әйҙәне. Аң даирәһе байтаҡҡа киңәйҙе.

1912—1914 йылдарҙа Монголияла хеҙмәт иткәндә, Беренсе рус революцияһында ҡатнашҡаны өсөн һалдатҡа алынған студент Герасимов (исеме, атаһының исеме хәтерҙә ҡалмаған) 1913—1914 йылдың ҡышында әҙәби түңәрәк ойоштороорға рөхсәт алды. Кобдо ҡалаһындағы ете-һигеҙ кешенән торған түңәрәккә мине лә ылыҡтырҙылар. Герасимов башта беҙҙе рус әҙәбиәтенең тарихы, үҫеше, ҡаҙаныштары менән таныштырҙы, аҙаҡ А.Н. Радищев, А.С. Пушкин, В.Г. Белинский, М. Ю Лермонтов, Н.А. Некрасов, Н.Г. Чернышевский әҫәрҙәре тураһында мәғлүмәт бирҙе. Бөйөк яҙыусыларҙың ижады менән танышыу түңәрәкте йәшерен революцион ойошмаға әйләндереп ебәрҙе.

Ул саҡта мин сәйәси яҡтан шыр наҙан егет инем. Рус монархияһының ни икәнен белмәгән кеүек, уның яманлығын, иҫкергәнлеген ошо Герасимовтан башлап: «Яҡын йылдарҙа Рәсәйҙә монархия ҡолаясаҡ, республика буласаҡ», — тигән һүҙҙәрҙән һуң ғына аңланым. Өс йылдан был фараз раҫланды, Октябрь инҡилабы монархияны емереп, республика иғлан итте. Мин уның тере шаһиты булдым.

Ул йылдарҙағы закон буйынса һалдатҡа 20-21 йәше тулған егеттәрҙе алалар ине. Ләкин 1907 йылдың көҙөндә саҡырылып та, әллә шәкерт булғанға, әллә көс-хәлем самалы булғанға, мине ҡайтарып ебәрҙеләр. 1909 йылдың көҙөндә 23 йәшкә еткәс кенә һалдат булып киттем. Фельдшерҙар мәктәбенә теләк буйынса ғына алалар, сөнки унда бер йыл уҡыған өсөн өҫтәп тағы бер йыл хеҙмәт итергә кәрәк. Мин шартҡа күндем, сөнки һөнәр алырға теләнем. Өс йыл урынына дүрт йыл хеҙмәт итеп, 1913 йыл аҙағында мин тыуған яҡҡа ҡайтарылырға тейеш инем. Ләкин, һуғыш хәүефе бик ҡуйыртылыу сәбәпле, минең йылғы һалдаттарҙы ҡайтарыуҙы алты айға кисектерҙеләр. Инде ҡайтабыҙ тип йөрөгәндә, Беренсе донъя һуғышы ҡупты. 1914 йылдың көҙөндә беҙҙең хәрби часть һуғыш яланында ине.

Һалдат хеҙмәтен үҙем өсөн «юғары уҡыу йорто» тип атаһам, фельдшерҙар мәктәбе — беренсе, ә һуғышҡа тиклемге хәрби хеҙмәтем иһә икенсе факультет булды. Һуғыш барған бөтә илдәрҙә булыу, әсир төшөү, унан ҡасыу, артабан Төркиәгә ҡаршы һуғышыу өсөн Иранға ебәрелеү, нәтижәлә иллегә яҡын төрлө халыҡ вәкилдәре менән аралашыу — бөтәһе лә университетымдың өсөнсө, имтихан тотоу, диплом алыу факультеты булды. Был университет та, Назар Нәжми әйткәнсә, «бик, бик ауыр булды».

Февраль һәм Октябрь революцияларын Ирандың Урмия ҡалаһында ҡаршыланым. 1917 йылдың аҙағына Рәсәйҙә Советтар хакимлығы урынлашҡас, ғәскәребеҙ бынан сығырға тейеш ине. Буталыш китте. Совет Рәсәйенә ҡайтырға теләмәгән генералдар, офицерҙар армиянан китте, теләге һүнмәгәндәр погондарын ташланы ла, формаларын алмаштырып, сафта ҡалды. Иранда булған бөтә хәрби частар, ҡоралдар, хәрби йыһаз һәм запас аҙыҡ-түлек Совет власы тарафынан ҡуйылған комиссарҙар, һалдаттар ҡарамағына күсте.

Иран менән Рәсәй сигендәге Джульфа тимер юл станцияһында беҙҙең частар бөтә ҡоралы менән ҙур алты эшелонға тейәлде. Юлыбыҙҙың ахыры — Тифлис (Тбилиси) ҡалаһы. Ул көндәрҙә Кавказ аръяғы халыҡтары араһында үҙ-ара ҡаты һуғыш барып, бик күп станциялар емерелгән, рельстар ҡутарып ташланғайны. Джульфа менән Тифлистың ике тәүлеклек араһын юлды төҙәтә-төҙәтә, ай ярымда ғына үтә алдыҡ. Аҙыҡ-түлек бик мул алынғайны, шунлыҡтан асығыу тойғоһо кисермәнек, һимеҙ-һимеҙ консерваларҙан бешерелгән аштан хатта һимереп киттек. Шаян һалдаттар: «Курорт шәп булды, яҡшы һыйлайҙар», — тип көлдө.

Тифлиста ҡайтыр юлға сығыр алдынан митинг булып, йылы һүҙҙәр әйтелде. Совет власының ни икәнен, төп бурыс-маҡсаттарын, уны йәшәтеү өсөн көрәшергә кәрәклеген аңлаттылар. Өйҙәребеҙгә ҡайтҡас, был хаҡта халыҡҡа аңлатыу, власть өсөн көрәшергә тейешлегебеҙ тураһында ла һүҙ булды. Һигеҙ йыл ярымға һуҙылған ауыр, ғибрәтле, ҡатмарлы һалдат хеҙмәте мине өр-яңы эпоха — Совет дәүерен асыҡ аңларлыҡ башҡорт балаһы итеп, партияһыҙ большевик итеп тәрбиәләгәйне инде. Ләкин Коммунистар партияһының программаһын тулыһынса аңлаған актив коммунист дәрәжәһенә етмәгәйнем әле. Тормош тәжрибәм, белемем мул булһа ла, сәйәси һәм теоретик әҙерлек юҡ дәрәжәһендә ине.

Тифлиста беҙҙе тараттылар, ҡулыбыҙға документтар, ваҡытлыса йөрөгән ҡағыҙ аҡса бирҙеләр. Консерва, сохари кеүек юл аҙығы ла алдыҡ. Тимер юл менән Батумға, артабан пароходҡа тейәп Туапсе портына алып килделәр. Ары тауар вагондарына ултырҙыҡ.

... 1918 йылдың башы. Граждандар һуғышының ҡыҙған сағы. Бөтә юл буйы сыуалыш, бөлгөнлөк. Бик күп станциялар емерелгән. Паровозға тейәргә һыу ҙа, таш күмер ҙә юҡ. Һыуҙы станцияларҙа котелоктар менән ташыйбыҙ. Хәтәр бөлгөнлөк булыуға ҡарамаҫтан, Совет власын йәшәтеү өсөн коммунистар, ай-һай, хәстәрле: паровозға

яғыу өсөн утын йә станцияларға ташылған, йә станция араларындағы юл эргәһендә өйөлөп ята. Эшелон туҡтағас, беҙ, ҡырмыҫҡаларҙай һибелеп, утын ташыйбыҙ. Ҡайһы бер урындарҙа ватылған күперҙе төҙәткәндәрен көтөп, бик оҙаҡ торорға мәжбүр булабыҙ.

Туапсе портынан ҡуҙғалғандан һуң ике айлап үтте тигәндә, мин тыуған ауылым Иҫке Хәлилдә инем. 1918 йылдың 8 марты булды был хәл. Атай-әсәйемде, бөтә туған-тыумасаны бик, бик һағынғайным. Ауылымды, уның әтәс-тауыҡтарын, күгәрсен-сыйырсыҡтарын, илкәйемдең ҡыр-яландарын, шишмә-һыуҙарын, юл-һуҡмаҡтарын, сәскә-үләндәрен, урмандарын, ундағы ҡоштарҙы: кәкүк-һандуғастарҙы бик, бик һағынып ҡайттым. Улай ғына түгел, киләсәк тормошомдоң татлы хыялдарына сумып, дәртләнеп ҡайттым. Ғүмерлек юлдашым, йән дуҫым буласаҡ ҡыҙҙы һөйөү-иркәләү, ҡәҙерләү, матурматур балалар үҫтереү хыялына сумып ҡайттым.

Ул саҡта Башҡортостанда Совет власы урынлашмағайны. Батша генералдары, аҡ чехтар хакимлыҡ итә, ғәмәлдә иһә бер ниндәй власть, тәртип-хөкөм юҡ ине. Мәгәр әлегә бер ни аңламаған ауыл халҡы араһында Совет власы принциптарына ҡаршы фекер бик ҡуйыртылғайны. Шунлыҡтан мин шым ғына, боҫоп йәшәргә ҡарар иттем. Арый ауылында мин бала саҡта белем алып сыҡҡан дини мәктәп эшләй. 1918 йылдың көҙөндә мине шунда уҡытырға саҡырҙылар. 1918/19 уҡыу йылым шунда үтте. Башҡорт балаларына букварь, география, астрономия, ботаника, зоология, кеше анатомияһы һәм физиологияһы, һаулыҡ һаҡлау, әхлаҡтан башланғыс белем бирҙем. Ул саҡтағы дини мәктәптәрҙә был предметтар тураһында бер һүҙ ҙә әйтелмәй һәм башҡорт уҡыусылары был турала бер ни ҙә белмәй. Үҙем дә элек шундай наҙандарҙың береһе булып йөрөгәнмен.

1919 йылдың йәйендә Совет власы Башҡортостанда ла ойошторолдо. Арыйҙағы дини мәктәп совет мәктәбе булып китте, ә мин директор итеп тәғәйенләндем. 1920 йылдың яҙында бөтә Совет Рәсәйенә таралған тиф, ваба ауырыуҙары был яҡҡа ла үтеп инде, һәм медицинаны белгән кешеләрҙе мобилизацияларға бойороҡ сыҡты. Эпидемия менән көрәш сафына мине лә алдылар. Тәүҙә кантон үҙәге Үрге Ҡыйғы ауылында эшләнем. Йәй уртаһында Дыуан-Мәсетле башҡорттары ваба ауырыуынан ҡырыла башлағас, мине ашығыс шунда ебәрҙеләр. Тейешле саралар күреп, мин ауырыуҙы туҡтата алдым. Был осраҡлы хәл халыҡ алдында медицинаның һәм минең абруйҙы күтәреп ебәрҙе. Даным бөтә тирә-яҡҡа таралды, сөнки халыҡ араһында медицина әһелдәре юҡ дәрәжәһендә ине. Миңә хатта малдары ауырыған кешеләр ҙә мөрәжәғәт итә башланы. Үтенестәрҙе кире ҡағырға выждан етмәй, барам, малдарҙы үлемдән ҡотҡарам. Халыҡ ҡыуана, рәхмәт уҡый. 1920 — 1923 йылдар Дыуан-Мәсетле ауылында медицина һәм ветеринария фельдшеры булып эшләп үтте.

1923 йылда дауалау һөнәрен ташланым, сөнки уҡытыусылыҡ миңә яҡыныраҡ, белемде киңәйтеү, эш күрһәтеү өсөн ҡулайлыраҡ күренде. Шул йылда уҡ Дыуан-Мәсетле башланғыс терәк мәктәбенең

директоры булып киттем. Советтар өр-яңы власть булған кеүек, мәктәбе лә, уҡытыу принциптары һәм программаһы ла беҙҙең өсөн таныш түгел. Тырыштым, һалдатлыҡта «энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙып» алған белемемем ярҙам итте. Эш күрһәтеп, иғтибар ҡаҙандым. Ике йылдан мәктәбебеҙ тирә-яҡтағы белем усаҡтары өсөн өлгө булырлыҡ терәк мәктәпкә әүерелде. 1925/26 уҡыу йылы башында уҡ мине кантон мәғариф бүлегенә инспектор итеп үрләттеләр. Унда ла һыр бирмәнем. Ҡышҡы каникулда Өфөгә тәжрибә уртаҡлашырға саҡырҙылар. Күрәһең, миңә унда ла иғтибар иткәндәр. Башҡорттарҙан кадрҙар бик аҙ саҡ, уларҙы берәмләп, эҙләп табалар ине. 1926 йылдың мартында мин Башҡортостан Мәғариф комиссариатында инспектор булып эшләй башланым. Тырышып, бөтә ауырлыҡтарҙы еңә барыуҙың емеше шулай булды.

Ғүмер үтә торҙо. Өйләнеп, дүрт бала атаһы булып киттем. Үҙ тәрбиәмә олоғайған әсәйемде ле алырға тура килде. Ғаилә ҙурайып, мәшәҡәте күбәйгәс, ҡатыным эшләмәне. Балаларымды өҙөлөп яраттым, шул миңә көс, стимул бирҙе. Уларҙы дәүерҙең иң яҡшы, иң алдынғы кешеләре итеп тәрбиәләргә тырыштым. Эйе, 20—30-сы йылдар Совет иленең иң ауыр осоро ине. Ул ауырлыҡты хәҙерге быуындарға аңлатып биреүе лә бик ҡыйын. Шул ваҡытта бер үҙем эшләп, ете-һигеҙ тамаҡлы ғаиләне аҫрау ауыр, бик, бик ауыр булды.

30-сы йылдарҙа быға тиклем үҙ алдыма ғына уҡып алған белемдең бик дәррәү алға барған тормош өсөн етерлек түгеллеген аңланым. «Йә мин юғары мәктәптә уҡып, сәйәси, теоретик әҙерлеккә эйә булырға, йә тора-бара совет эпохаһы сүплегенә ташланырға тейешмен» тигән уй килде. Совет власын ойоштороп, ябай халыҡты мәңгелек ҡараңғынан ҡотҡарған В.И. Ленин һәм уның ярандары яңы дәүер өсөн яңы кадрҙар әҙерләү буйынса Октябрҙең тәүге көндәренән үк тейешле сара күрҙе. 1921 йылдың 11 февралендә Совнарком «ҡыҙыл профессорҙар» институтын ойоштороу тураһында декрет сығарҙы. Шул көндән башлап халыҡты марксизм-ленинизм тәғлимәте нигеҙендә тәрбиәләү өсөн ғалимдар, профессорҙар әҙерләнә башланы. 1921 — 1931 йылдарҙа ошо институтты тамамлаған кешеләр Башҡортостанда ла бар ине. Мин, мәҫәлән, рустарҙан Давыдов, Кийков, Копьев, башҡорттарҙан Мусаев һәм Абзановтарҙы хәтерләйем.

1931/32 уҡыу йылы башында Өфөләге педагогия институты эргәһендә ҡыҙыл профессорҙар аспирантураға әҙерлек буйынса ике йыллыҡ юғары курс ойошторҙо. 45 йәштә ете кешелек ғаилә башлығы була тороп та, мин дә унда уҡырға индем. Арыу ғына стипендия ла бирәләр. Шуның өҫтөнә пединституттың әҙерлек курстарында тел һәм әҙәбиәт, географиянан уҡыттым. «Башгосиздат»тан тәржемә итеү йә редакторлау эшен дә бирәләр. Ауыр булды, әммә түҙҙем. Курсты уңышлы тамамлап, 1933 йылдың көҙөндә дипломлы белгес булып киттем.

Беҙҙе марксизм-ленинизм классиктарының хеҙмәттәренә таянып уҡыттылар. Кешелек тарихын тәүтормош община ҡоролошонан

башлап хәҙерге көнгә тиклем өйрәндек. Йәмғиәттең синыфтарға бүленеүе, синфи көрәш һәм эшселәр хәрәкәте тарихынан системалы, ҡыҫҡаһы, марксизм-ленинизм тәғлимәтенән тулы белем алып сыҡтыҡ.

Совет кадрҙары әҙерләүҙә мөһим булған был курс мине өр-яңы дәүерҙең алдынғы кешеһе итте. Бер нисә йыл элек ҡуйған маҡсатыма өлгәштем. Күңелемдең ҡайһылыр мөйөшөндә ҡыҫылып-боҫоп йөрөгән иҫке тормош, иҫке идеология, хосуси милекселектең ике йөҙлөлөк тәбиғәте ҡалдыҡтарының, Совет йәмғиәтенә ят, күңелде ҡарайта, артҡа һөйрәй торған һәр төрлө шиктәрҙең әҫәре лә ҡалманы, һепереп түгелде. Күңелем, выжданым таҙарҙы, яңырҙы. Мин кешелек тарихын, киләсәген, артабан ҡайҙа барасағын коммунистарса аңлаған, дингә, буржуаз тәғлимәттәргә нәфрәт менән ҡараған кеше булып киттем. Ошо кульминациянан һуң ғына кешелек йәмғиәте, совет йәмғиәте ағзаһы булып йәшәүемдең мәғәнә-маҡсатын, ләззәтен таптым. Бары ошонан һуң ғына марксизм-ленинизм идеяларын Совет илендә йәшәтеү, уны «сәскә аттырыу» өсөн, һөйөклө Ватаным һәм халҡым бәхете өсөн иң һыҙғанып эшләргә, ауырлыҡтарҙы еңергә, хатта шул юлда ҡорбан булырға әҙер башҡорт балаһы булыу бәхетенә ирештем. «Арыҫланды еңгән түгел герой, үҙ-үҙен еңгән кеше герой» — мең-мең йыллыҡ тормош тәжрибәһе тыуҙырған афоризм шулай ти.

1933 йылдың көҙөндә мине ул саҡтағы милли культура фәнни-тикшеренеү институтына ғилми хеҙмәткәр итеп алдылар. Бик тырышып эшләнем, һәм минең фиҙакәрлекте баһаланылар, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләндем. 63 йәшем тулыр алдынан башҡорт һөйләштәре тураһындағы ғилми хеҙмәтем өсөн филология фәндәре кандидаты исеме бирелеү күңелемде үҫтереп ебәрҙе.

Йылдар уҙа торҙо, сәстәр ағарҙы, биткә йыйырсыҡтар йүгерҙе. Ҡартлыҡ етте. Ғүмерем үкенесле булманы, мең төрлө ауырлыҡтарҙы еңеп, дәүер кешеһе булдым. Һөйөклө Ватаным, халҡым, ғаиләм алдында бурысымды намыҫ менән үтәнем. Дүрт ул үҫтерҙем, береһе Ватаны өсөн һуғышта баш һалды, өсәүһе юғары белемле инженер булып китте.

1957 йылдың 1 октябрендә 71 йәшемдә мине хаҡлы ялға оҙаттылар. Совет илкәйем миңә ҙур рәхмәт әйтте, иң юғары пенсия бирҙе. Үҙемде төҙөк режим һәм ритмда йәшәргә күптән күндергәйнем. Пенсияға сыҡҡас та тормошомдо шул рәүешле дауам иттем. Һаулыҡты ныҡышмалы һаҡлау арҡаһында, рухым да, аҡылым да сәләмәтлеген, һәләтлеген юғалтманы. Әлбиттә, шулай йәшәргә, берҙән, медицинаны белеү; икенсенән, бөйөк рус физиологы И.П. Павловтың тәғлимәтен яҡшы белеү ярҙам итте.

Бына шулай. Мин, бер башҡорт балаһы, Октябрь революцияһы килтергән яңы дәүер кешеһе булыу бәхетенә ирештем, кешеләргә тәбиғәт тарафынан бирелгән бөтә юғары сифаттар, байлыҡ, саф тойғолар менән тулы файҙаланып, ләззәтләнеп йәшәнем. Ҡорһаҡ ҡоло, кейем ҡалыбы булып йәшәүҙән алыҫ торҙом. Ер йөҙөндә юғары аҡыл

эйәһе, тәбиғәт солтаны булған кешелек йәмғиәте күп быуаттар тыуҙырған культура, тел, сәнғәт, поэзия, йыр, музыка менән рухлана, ләззәтләнә белеү — ҙур байлыҡ.

Ул ғына түгел. Кеше үҙенең тән төҙөлөшө яғынан да Ер йөҙөндә зифа, һомғол, һылыу, матур аҫыл зат! Ул мең төрлө ауырлыҡ менән көрәшә-көрәшә, алға бара-бара, үҙен ошо һоҡланғыс гүзәл күренешкә килтереп еткергән. Ә һеҙ, хөрмәтле иптәш, ошо иҫерткес гүзәл сифатығыҙҙың ҡәҙерен, уларҙы һаҡлай һәм һоҡлана беләһегеҙме? Белһәгеҙ, һеҙ — кеше, белмәһәгеҙ, һеҙ — үлек йә хайуан.

Кешелек йәмғиәте һәр ваҡыт алға, камиллашыуға, яҡшырыуға ынтылған. Ләкин синфи йәмғиәт шарттарында үҙенең сабый аҡылынан уҙа алмаған. Уның балалыҡтан сығып, «буй еткереүе», аҡылға ултырыуы Совет илендә, синыфһыҙ йәмғиәтебеҙҙә башланды. Йыл артынан йыл, быуат артынан быуат уҙыр, кешелек алға, һаман алға атлар. Синфи йәмғиәт емерелә, ә синыфһыҙ йәмғиәт еңә барыр. Ваҡыты килер, кешелек йәмғиәте беҙҙең Совет иле үрнәгендә һәм етәкселендә сабыйлыҡтан тамам бушанып һәм, үҙенең йәшлеге аша, камил аҡыл эйәһе Оло Кеше булып өлгөрөр. Ана шул саҡта кеше тәбиғәт тарафынан бирелгән бөтә гүзәл сифаттарҙан файҙалана һәм һоҡлана белер, ысын тәбиғәт солтаны булып йәшәй белер. Шундай киләсәк гүзәл тормошҡа беҙҙең бөйөк илебеҙҙә нигеҙ һалынды инде.

**1972 йыл, март.**

## Урта быуаттарҙа уртаҡ яҙма телдәр

*(Латин, иҫке славян, төрки)*

Урта быуаттар, феодолизм дәүере идеологияһында төп урынды диндәр биләгән саҡта, латин һәм иҫке славян яҙма телдәренең бер үк диндәге халыҡтар өсөн уртаҡ булыуы тураһында китаптар уҡырға, абруйлы телселәрҙең лекцияларын тыңларға тура килде. Шул телдәр тураһында төплө фекер туплап, уларҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәре, эш итеү шарттары менән танышҡас, урта быуаттарҙа төрки яҙма теленең төрки халыҡтар өсөн дә уртаҡ булыуы бөтә асыҡлығы менән күҙ алдыма баҫты.

Тикшеренергә тотондом. Һөҙөмтәлә төрки яҙма теленең, ысынлап та, латин һәм иҫке славян уртаҡ яҙма телдәре кеүек роль башҡарыуын раҫлап бирҙе. Латин яҙма теле — Көнбайыш Европалағы күп төрлө халыҡтарға, иҫке славян яҙма теле — славян халыҡтарына, ә яҙма төрки теле төрки халыҡтарҙың барыһына ла уртаҡ әҙәби һәм рәсми тел булып хеҙмәт иткән.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы йылдарҙа уртаҡ яҙма төрки теле тураһында телсе-ғалимдарыбыҙ араһында төрлө хата ҡараштар таралып китте. Берәүҙәр уны «жаргон тел», икенселәр «юғары синыф һәм муллалар теле», өсөнсөләр «пантюркизм, панисламизм теле» тип атай башланы. Мин ошонан һуң ентекле генә тикшеренеү үткәреп,

кәрәкле материалдарҙы әҙерләнем дә СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында яҙма төрки теле мәсьәләһе буйынса семинар уҙғарыуҙы һораным. Семинар 1953 йылдың ғинуарында ике көн дауам итте. Өфөлә йәшәгән культура эшмәкәрҙәренән 70-ләгән иптәш ҡатнашты. Улар минең фекеремә тулыһынса ҡушылды, бер кем дә ҡаршы сыҡманы, төрки халыҡтар өсөн яҙма төрки теленең уртаҡ булыуын берәү ҙә инҡар итмәне. Докладымды тулыһынса хупланылар, ҡайһы бер мөһим ғилми фекерҙәр әйтеп, хеҙмәтемде матбуғатта баҫтырып сығарырға тәҡдим иттеләр. Ләкин, төрлө сәбәптәр арҡаһында, мин докладты матбуғат битенә сығара алманым. Шулай ҙа үҙ ваҡытында уҙғарылған был мөһим семинар яҙма төрки теленә ҡарата быға сә йәшәп килгән хата ҡараштырҙы юҡҡа сығарҙы. Хәҙер был тәңгәлдә бәхәс-фәлән юҡ. Шулай ҙа уҡыусыларҙы был мәсьәлә ҡыҙыҡтырыр, тип уйлайым.

* * *

Урта быуаттарҙа күп халыҡтар өсөн уртаҡ булған яҙма телдәр мәсьәләһенә керешмәҫтән элек, ҡыҫҡаса «тере» һәм «үле» телдәр менән танышып үтәйек. Тел халыҡ һәм уның эшмәкәрлеге һәм фекерләү һәләте менән бергә йәшәй. Халыҡтан башҡа тел булмаған кеүек, телдән башҡа халыҡ та булмай. Һуңғы йылдарҙа археология фәненең уңыштары, тарихи урындарҙа алып барылған ҡаҙыныу эштәре бик күп боронғо халыҡтарҙың ҡасандыр юғалыуын йәки үлеп бөтөүен, ҡайһы берҙәренең көслө һуғышсан халыҡтан тар-мар ителеп, улар тарафынан йотолоуын асыҡланы. Шуның менән бергә күп кенә боронғо юғары культуралы халыҡтарҙың яҙыу системалары, яҙма телдәре, яҙма әҫәрҙәре табылды. Мәҫәлән, хәҙерге Ираҡ дәүләтенең, Евфрат йылғаһы буйында ҡаҙыу эштәре алып барғанда, бынан алты мең йыл элек был урында бик юғары культуралы Шумер халҡы йәшәгәне асыҡланды. Ул халыҡтың бик төҙөк ҡалалары, ҙур-ҙур һарайҙары булыу өҫтөнә, үҙенең яҙма теле, бай әҙәбиәте булған. Әлбиттә, бик боронғо ул заманда яҙыу өсөн ҡағыҙ-фәлән булмаған, тире, туҡыма кеүек нәмәләр ҙә уйлап сығарылмаған. Шумерҙар үҙҙәренең яҙыуын, әҙәбиәтен ҡыҙыл балсыҡтан эшләнгән бәләкәй генә йоҡа таҡталарға яҙған. Һәр таҡта хәҙерге китаптарҙың бер бите урынына йөрөп, һәр береһенә тәртип һандары ҡуйылған. Яҙған саҡта балсыҡ, әлбиттә, сей, еүеш һәм йомшаҡ булған. Хәҙерге ҡәләм урынына улар ағас ҡәләм ҡулланған.Шуның менән йомшаҡ балсыҡҡа батырып үҙ яҙыуҙарын яҙғандар. Яҙып бөткәс, уларҙы киптереп, ҡыҙыу утта үртәгәндәр.

Шундай балсыҡ (көршәк) китаптар 5-6 мең йылдар буйына ер ҡуйынында боҙолмай, серемәй ятҡан һәм беҙҙең көндәргә килеп еткән. Был көршәк яҙыуҙы һәм әҙәбиәтте рус телендә «Шумер» яҙмаһы һәм әҙәбиәте» тип атайҙар. Беҙҙең Ленинград (Санкт-Петербург) телселәре ошо яҙыуҙы донъяла беренсе булып таный һәм уҡый алды.

Был Шумер үле теленән һәм яҙмаларынан тыш, төрлө илдәрҙең

археологтары һәм ғалимдары Мысырҙа, Төньяҡ һәм Көньяҡ Америка һәм башҡа илдәрҙә бик боронғо юғары культуралы халыҡтарҙың яҙмаларын тапты һәм, системаға һалып, уҡый алды. Бындай бик боронғо халыҡтар, уларҙың үле телдәре һәм яҙмалары тураһында бик аңлайышлы телдә яҙылған китаптар рус телендә лә донъя күрҙе. Ҡыҙыҡһынған кешеләр шундай китаптарға мөрәжәғәт итә ала. Шуның өсөн мин бындай «үле» телдәр һәм бик боронғо яҙмалар тураһында һүҙҙе оҙайтмайым, тик шуны ғына әйтергә теләйем: ғалимдар, хәҙерге көндә Ер йөҙөндә 2800 тере тел бар, ләкин «үле» телдәрҙең иҫәбе унан да күберәк булған, тиҙәр. Сөнки Ер йөҙөндә кешелек йәмғиәте миллион йылдар йәшәгәне билдәле. Был иҫ киткес оҙон ғүмер эсендә бер төрлө халыҡтар, беҙгә мәғлүм булмаған йәки мәғлүм сәбәптәр арҡаһында, Ер йөҙөнән юғала, ә һәр бер юғалған халыҡтың теле үҙе менән бергә юғала, улар менән теле лә юҡҡа сыға килгән. Әлбиттә, кешелек йәмғиәтенең башына килгән бындай ҡыҙғаныс хәлдәр беҙҙән бик күп быуаттар элек тә булғылаған. Ләкин ана шул бик күп үле телдәр араһында бер бәхетле тел, бик ғәжәп һәм ҡыҙыҡлы рәүештә, 15-16 быуат буйына «үлмәй» йәшәй. Хәҙер һүҙҙе ошо «үлмәҫ» телгә күсерәйек.

* * *

Беҙҙең эраға тиклемге V-VI быуаттарҙан алып беҙҙең эраның V быуатына тиклем хәҙерге Урта диңгеҙ ярҙары буйында боронғо Рим ҡол биләүселек империяһы йәшәгән. Хәҙерге Испания, Португалия, Франция, Германия, Италия, Греция, Төркиә, Төньяҡ Африка илдәре ошо империяға буйһонған. Беҙҙең эраға тиклемге III быуатта ошонда латин телендә Рим әҙәбиәте тыуа башлай. Был әҙәбиәт реаль тормош комедияларынан, эпик поэмаларҙан, нескә лириканан, әсе сатиранан, трагедияларҙан, тарихи әҫәрҙәрҙән ғибәрәт була. Уларҙың шундай ҙур классик әҙәбиәте һуңғы эра халыҡтары өсөн сикһеҙ идея һәм образдар шишмәһе, сығанағы булып хеҙмәт итте һәм итә.

Беҙҙең эраның V быуаты башланыуға, Рим империяһы тарҡала башлай һәм беҙҙең эраның 395 йылында ике өлөшкә: Көнсығыш һәм Көнбайыш провинцияларға бүленә. Көнбайыш провинцияла көн иткән герман ҡәбиләһенән булған готтар 410 йылда провинцияны үҙ ҡулына ала, Рим ҡалаһын талайҙар, емерәләр. Рим империяһының һуңғы императоры Ромул Августул ошо ваҡиғанан һуң Көнсығыш провинцияның императоры ғына булып ҡала.

Рим империяһы башына килгән бәләләр артҡандан-артып, 476 йылда баш күтәреүселәрҙең юлбашсыһы герман Одоакр Көнсығыш провинцияны ла баҫып ала һәм император Ромел Августулды тәхеттән төшөрә. Көнсығыш провинция Византия биләмәһенә әүерелә. Шулай итеп, быуат һуҙымында йәшәп килгән Рим ҡол биләүселек империяһы йәшәүҙән туҡтай.

Империяһы йәшәгән дәүерҙә уның хакимлыҡ итеүсе төп халҡы латин телендә һөйләшкән һәм яҙыусылары, шағирҙары ла ошо телдә ижад иткән. Күрәһең, был төп халыҡ йә аҙ һанлы булғандыр, йә, берәй

төрлө сәбәп арҡаһында, үҙенең тотороҡло йәшәү рәүешен юғалтҡан булғандыр. Шунлыҡтан ул төп халыҡ үҙҙәрен буйһондорған герман ҡәбиләһе — готтар тарафынан йотолған, тора-бара үҙенең ата-бабалар (латин) теленән ситләшкән, сит тел йоғонтоһона бирелгән. Һөҙөмтәлә боронғо латин теле һөйләүсеһе булмаған «үле тел» булып ҡалған. Ләкин ул «бәхетле» тел бары тик һөйләүсеһен генә юғалтҡан, бик күп боронғо телдәр һымаҡ, һөйләүселәре менән бергә ҡәбергә күмелмәгән. Ул бөтә урта быуаттар һуҙымында халыҡ-ара яҙма һәм рәсми тел, фән-ғилеме булып йәшәне. Урта быуаттарҙа Италияла һәм уға күрше илдәрҙә милләттәр һәм милли телдәр барлыҡҡа килеүгә ҡарамаҫтан, милли телдәрҙә түгел, бәлки һаман латин яҙма телендә ижад итеүҙе дауам итеп, нәфис һәм ғилми әҙәбиәт тыуҙырҙылар, ғилми йәмғиәттәрҙә, университеттарҙа лекциялар, докладтар һөйләп килделәр. Бары 1688 йылда Германияның Һалле ҡалаһы университетында тәү башлап немец телендә ғилми лекция уҡылды.

XVII быуатта, бигерәк тә XVIII быуат баштарында, Европа илдәрендә милләттәр һәм милли телдәр барлыҡҡа килә. Яңы телдәр барлыҡҡа килгәндән һуң латин яҙма теле был халыҡтар өсөн фән, философия һәм рәсми тел булыуҙан туҡтай. Ләкин үле латин теле был өлкәлә ҡулланыуҙан туҡтаһа ла, ике өлкәлә файҙаланыуын дауам итте: беренсенән, XVII быуаттан һуң да ул бөгөнгә тиклем католиктар диенендә сиркәү (ғибәҙәт) һәм богословие теле булып йәшәй; икенсенән, бөтә хәҙерге илдәрҙә, бөтә дәүләттәрҙә врачтар, фармацевтар теле булып «ҡала. Быларҙан тыш, ул тел ботаникала һәм зоологияла системаға һалыу теле булып ҡулланыла.

Тарихта ғәжәп бәхетле латин теленең мөғжизәләре былар менән генә бөтмәй. Рим ҡол биләүселек империяһы емерелгәндән һуң, VI—IX быуаттар араһында, латин теле менән нигеҙендә һинд-европа телдәренең бер-береһенә яҡын булған һәм «роман телдәре» тип аталған яңы төркөмө: француз, провансаль, итальян, сардин, испан, португал, каталон, ретороман, румын, молдаван телдәре барлыҡҡа килә.

Башта йәнле һөйләү теле булып, аҙаҡ үле яҙма телгә әүерелгән, шулай ҙа хәҙерге заманда фән һәм техника терминдарына сығанаҡ булып хеҙмәт итә торған латин теле менән юғарыла әйтелгәнсә булды. Хәҙер шул тел һымаҡ, күп халыҡтарға уртаҡ яҙма һәм дин-ғибәҙәт теле булып хеҙмәт иткән тағы ла берәй тел кешелек йәмғиәтендә йәшәмәнеме һәм йәшәйме икән? Хәҙер ошо мәсьәләгә күсәйек.

* * *

Латин яҙма теле яҙмышына оҡшаған икенсе яҙма тел Урта быуаттар тарихында булған. Ул телде хәҙерге әҙәбиәттә «иҫке славян яҙма теле» (старославянский письменный язык) тип, ҡайһы саҡта «боронғо славян сиркәү теле» (древне-церковнославянский язык) тип атайҙар. Тарихсыларҙың раҫлауынса, ул яҙма телдең тыуыу тарихы түбәндәгесә. Беҙҙең эраның I быуатында христиан дине барлыҡҡа килә. Ул аҙаҡтан «католицизм», «православие», «протестантизм» тигән өс

йүнәлешкә тармаҡлана. Юғарыла латин яҙма теле тураһында һүҙ алып барғанда, беҙ Рим ҡол биләүселек империяһының 395 йылда ике провинцияға бүленеүен әйткәйнек. Ул саҡта Византия империяһы биләмәләренә хәҙерге Болгария, Албания, Греция, Төркиә, Югославия һәм Румынияның бер өлөшө ингән. Бына ошо көслө Византия аша христиан диненең православие тармағы славян халыҡтары араһында тарала.

Ул саҡта Балкан ярымутрауында көслө Болгар батшалығы йәшәй. 803 — 927 йылдар араһында унда Симеон атлы батша хакимлыҡ итә. Уның заманында Болгария батшалығы хәрби-политик һәм мәҙәниәт өлкәләрендә Византия империяһы менән ярыша. Симеон батша, Болгарияны мәҙәниәт һәм сәйәсәт өлкәләрендә Византия йоғонтоһонан бер юлы ҡотҡарырға, уны үҙ аллы дәүләт итергә тырышып, тейешле саралар күрә. 894 йылда батша славян телен православие динендәге болгар сиркәүенең рәсми теле итеп иғлан итә. Уға тиклем сиркәүҙәрҙә ғибәҙәт грек телендә алып барылған була.

Симеон батша, үҙ маҡсатына ирешеү өсөн юл ярырға теләп, Византия империяһына ҡаршы һуғыш аса һәм уны уңышлы тамамлап, 919 йылда Болгарияны үҙ аллы батшалыҡ тип иғлан итә. Бынан һуң Симеонға император титулы бирелеп, Болгарияла үҙ аллы патриарх ойошторола. Бына ошо датанан һуң Болгарияла грек яҙма телен ҡулланыу туҡтатыла һәм славян яҙма теленә күсеү осоро башланып китә. Быға тиклем славяндар бөтә яҡтан: дин, яҙма тел, әҙәбиәт, алфавит һәм орфография буйынса Византияға буйһонған булһа, артабан үҙ славян яҙма телен һәм ул тел өсөн яңы славян алфавитын булдырыу сараһына тотона. (Беҙҙең СССР-ҙағы аҙ һанлы халыҡтар һәм милләттәр өсөн хәҙерге көндә мөһим булған ошо славян (рус) алфавиты тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт аҙаҡ бирелер.)

Бөтә славян халыҡтарының уртаҡ яҙма теле итеп төҙөлгән иҫке славян теле шул заманда (XI быуатта) Салуни (хәҙерге Салоники) ҡалаһы тирәһендә йәшәгән славян ҡәбиләләренең боронғо һөйләү теле нигеҙендә барлыҡҡа килә. Бынан X быуат, нәҡ мең йыл элек, төҙөлгән был яҙма тел, нигеҙҙә, яһалма тел була. Ул, нигеҙҙә һәм беренсе нәүбәттә, славян халыҡтарына православие динен таратыу, өйрәтеү һәм сиркәүҙәрҙә ғибәҙәт ҡылыу йолаларын үтәү маҡсатын ҡуя. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, иҫке славян теле бер үк ваҡытта бөтә Балкан ярым утрауында, Рәсәйҙә, бер ни тиклем ваҡыт Моравияла һәм Чехияла дөйөм рәсми һәм әҙәби тел булып та хеҙмәт итә. Уның рус әҙәби телен үҫтереүҙә уйнаған роле бик ҙур. Был яҙма телдең боронғо әҙәби мираҫы X— XI быуаттар эсендә барлыҡҡа килә. Хәҙерге көндә ул ҡиммәтле әҙәби мираҫ славян халҡының тарихын, үткәндәге культураһын өйрәнеү өсөн файҙаланыла.

Был тел славян халыҡтарын идея, политик, ғилем-фән һәм башҡа яҡтарҙан берләштереүгә, дуҫлаштырыуға, үҙ дошмандарына ҡаршы берҙәм көрәшеүгә ярҙам итте. Шуның менән бергә славян халыҡтары IX — XVIII быуаттар һуҙымында бөтә кешелек донъяһындағы ваҡиғалар,

хәл-әхүәлдәр менән танышып, хәбәрҙәр булып, ғилем-фән, культура шишмәһенән рухи аҙыҡ алып торҙо.

XVIII быуатта славян халыҡтарының һәр ҡайһыһы айырым милләт булып ойоша һәм үҙенең һөйләү теле нигеҙендә әҙәби тел тыуҙыра. Ошо тарихи ваҡиғаларҙан һуң иҫке славян яҙма теле бөтә славян халыҡтарына уртаҡ әҙәби тел булыуҙан туҡтай. Бынан һуң ул бөгөнгө көнгә тиклем тик православие сиркәүенең, сиркәүҙәрҙә ғибәҙәт йолаларын үтәү теле генә булып йәшәп килә. Хәҙер ҡыҫҡаса ошо алфавиттың тарихы һәм әһәмиәте менән ҡыҫҡаса танышып үтәйек.

Славян халыҡтары менән башта, грек алфавиты нигеҙендә, ике алфавит төҙөлә. Уның береһе «криллица», икенсеһе «глаголица» тип атала. Тәүгеһе IX быуатта Византия миссионеры сифатында Моравияла һәм Паннонияла йәшәгән ғалим, философ Кирилл (Константин) тарафынан ижад ителгән. Шуның исеменә уны «кириллица» тип атағандар.

Болгарияла славяндар өсөн яңы алфавит төҙөгәндә ошо Кириллицаны нигеҙгә алғандар. Был алфавит үҙ ваҡытында бөтә славяндар илендә ҡулланыла һәм үҙенең йәшәү дәүерендә бер нисә тапҡыр реформаға дусар ителә. 1708 йылда, Петр I батшаның указы буйынса, уны граждандар шрифты итеп үҙгәртәләр. Бынан һуң ул тағы ла бер нисә ҡабат үҙгәртеүҙәргә осрай һәм Октябрь социалистик революцияһына тиклем Рәсәй империяһында, Болгарияла һәм Югославияла ҡулланылып килә.

Шуны ла иҫкә алырға кәрәк. Бөйөк Октябрь революцияһынан күп йылдар элек сыуаш, мари, удмурт, коми, яҡут халыҡтары, Себерҙәге һәм Алтайҙағы төрки ҡәбиләләр ошо кириллица алфавитына күсте. Һәр ҡайһыһы үҙ әсә теленә хас булған үҙенсәлекле өндәр өсөн айырым хәрефтәр эшләп алды. Бына ошо халыҡтар, Октябрь революцияһына тиклем һәм унан һуң да, ғәрәп алфавитын ҡулланған бөтә төрки халыҡтарға ҡарағанда күп яҡтан отошта булды һәм Октябрҙән һуң да отошта йәшәй.

Октябрь революцияһына тиклем ғәрәп алфавитын ҡулланған төркиҙәр 1929 — 1930 йылдарҙа латин алфавитына күсте. Бынан һуң ғәрәп алфавитында уҡый-яҙа белгән оло быуын кешеләренең бер өлөшө «грамотаһыҙ» кеше булып торҙо ла ҡалды. Был — бер. Икенсенән, латин алфавитында ни бары 26 ғына хәреф булғанлыҡтан, һәр телдең үҙенсәлекле өндәрен биреү өсөн яңы хәрефтәр эшләп алырға тура килде. Өсөнсөнән, латин нигеҙендәге башҡорт алфавиты йәмғиәтебеҙ өсөн икмәк-һыуҙай мөһим булған рус телен өйрәнеүгә әйтеп бөтөргөһөҙ дәрәжәлә ауырлыҡ тыуҙыра. Дүртенсенән, ул мәлдәрҙә башҡорт мәктәбе уҡыусылары үҙ аллы ике — латин һәм рус алфавиттарын өйрәнергә мәжбүр ителде.

Латин алфавитының ошондай етешһеҙлектәре асыҡланғас, уға күскән бөтә төрки халыҡтар 10 йылдан һуң, йәғни 1939 — 1940 йылдарҙа кириллицаға (рус) алфавитына күсергә мәжбүр булды.

Артабан башҡорт балалары бер алфавитты ғына өйрәнде. Шуның

өҫтөнә хәҙерге башҡорт алфавиты уҡыусыларға артабан рус телен тиҙерәк өйрәнеүҙе еңелләштерҙе.

Октябрь революцияһына тиклем ғәрәп алфавитында уҡып-яҙышҡан, аҙаҡтан — латинға, унан рус алфавитына күскән халыҡтар өсөн тағы ла бер ҙур бәлә ҡалды. Ул тарихыбыҙҙың, бик күп әҙәби мираҫыбыҙҙың — ғәрәп, бер өлөшө — латин алфавитында яҙылыуында. Хәҙерге йәш быуын, бигерәк тә тарихсылар һәм ғалимдар, тарихыбыҙҙы, әҙәби мираҫыбыҙҙы өйрәнеү өсөн ғәрәп һәм латин алфавиттарын өйрәнергә һәм улар нигеҙендә ижад ителгән әҙәбиәтте уҡый белергә тейеш. Был хәл йәш ғалимдарға хисапһыҙ ауырлыҡ һәм мәшәҡәттәр тыуҙыра, күп ваҡыт ала.

Хәҙерге көндә СССР-ҙағы күпселек халыҡтарҙың алфавиты кириллица нигеҙендә эшләнгән. Әммә әрмән һәм грузин халыҡтары үҙҙәренең күп быуатлыҡ алфавиттарында яҙыша, уҡый. Латыш, литва, эстон халыҡтары латин алфавитын ҡуллана. Сит илдәрҙән Болгария, Монголияла кириллица эш итә. Югославия кириллица менән латин алфавитын ҡушып файҙалана.

Кешелек тарихының урта быуаттарында күп халыҡтар өсөн уртаҡ яҙма (әҙәби) тел булып хеҙмәт иткән латин һәм иҫке славян телдәренең яҙмышы бына шулай булды. Был телдәрҙән башҡа урта быуаттарҙа ҡайһы бер халыҡтар өсөн тағы ла берәй өсөнсө уртаҡ яҙма тел тыуҙырылманымы һәм йәшәмәнеме икән? Хәҙер һүҙҙе ошо мәсьәләгә күсерәйек.

* * *

Кешелек йәмғиәтендә теге йәки был ҡитғала йәшәгән төрлө халыҡтар өсөн уртаҡ хәлдәр була. Халыҡтар ул хәлдәрҙе башынан кисермәй, татымай тороп, ары китә алмай. Юғарыла беҙ латин һәм иҫке славян яҙма телдәренең бер дингә буйһонған күп халыҡтар өсөн уртаҡ тел булыуын әйтеп үттек. Билдәле, ул телдәр Урта быуаттарҙа, феодализм йәки уның тарҡала барыу осоронда һәм йәмғиәттә юғары синыф менән дини фанатиклыҡ хакимлыҡ иткән осорҙарҙа барлыҡҡа килде. Ул заманда юғары синыф вәкилдәре ошо уртаҡ яҙма тел аша халыҡтарҙы бер дин идеологияһына буйһондороу, шуның менән хеҙмәтсәндәр өҫтөнән хакимлыҡ итеү маҡсатын алға һөрҙө. Әгәр шулай Урта быуаттарҙағы юғары синыф вәкилдәре төрлө халыҡтарҙы бер христиан диненә буйһондороу маҡсаты менән латин йәки иҫке славян уртаҡ яҙма телдәрен тыуҙырған икән, шул уҡ осорҙарҙа барлыҡҡа килгән ислам диненә төрки халыҡтарҙы буйһондороу маҡсаты менән юғары синыф вәкилдәре уларға уртаҡ яҙма тел тыуҙырыуы үҙенән-үҙе аңлашыла түгелме? Әлбиттә, аңлашыла. Үҙәк һәм Урта Азиялағы боронғо төрки халыҡтар өсөн уйлап сығарылған уртаҡ яҙма тел «төрки тел» исемен алып киткән. Хәҙер уның нисек барлыҡҡа килеүе, йәшәүе һәм тарихҡа китеүе менән танышайыҡ.

Беҙҙең эраның VII быуатында Ғәрәп ярымутрауында, хәҙерге Мәккә, Мәҙинә ҡалалары тирәһендә йәшәгән ғәрәп халҡы араһында

ислам дине барлыҡҡа килә. Шул уҡ илдә бер үк ваҡытта ғәрәп халҡының феодалдар хәлифәте (политик власть дин башлыҡтары ҡулында тупланған идаралыҡ — теократия) ойошторола. Аҙаҡтан был хәлифәт, ғәскәр туплап, сит илдәрҙе, күрше-тирә халыҡтарҙы баҫып алырға, үҙенә буйһондорорға тотона. Уңышлы походтар яһап, VII, VIII, IX быуаттарҙа бик күп илдәрҙе баҫып алып, үҙ биләмәләрен ныҡ киңәйтеүгә ирешә. Бөтә Ғәрәп ярымутрауын үҙ ҡулына алыу менән бергә, көнсығышта Үҙәк һәм Урта Азияны баҫып ала, унан уҙып, хатта хәҙерге Ҡытай сигенә барып етә. Көнбайышта, Төньяҡ Африка ярҙары буйлап барып, хәҙерге Исландияны һәм Португалияны буйһондора.

Ул саҡта хәҙерге Үҙәк һәм Урта Азияла будда йәки ламаизм диндәрендә булған күп кенә төрки һәм башҡа халыҡтар йәшәгән. Билдәле, ғәрәптәрҙең хәлифәт башлыҡтары был халыҡтарҙың да феодалдарын һәм руханиҙарын ислам динен ҡабул итеүгә димләй, кәрәк урында көс ҡуллана, ирекһеҙләй. Ислам диненең урындағы боронғо дингә ҡарағанда өҫтөнлөгөн иҫбатларға тырышалар. Әлбиттә, урындағы феодалдар, өҫтөн синыф һәм руханиҙар вәкилдәре ихтыяри ҙа, мәжбүри ҙә ислам динен ҡабул итә.

Ярай, яңы динде ҡабул иттеләр ҙә, ти. Хәҙер уларҙың алдына үҙ халҡын, ябай хеҙмәт эйәләрен ошо дингә күндереү, өндәү, уны өйрәтеү бурысы килеп баҫа. Ә халыҡты өндәү, төшөндөрөү өсөн тел тигән ҡорал, шул телдәге әҙәбиәт кәрәк. Төрки халыҡтар иһә ғәрәп телен белмәй, аңламай. Бына шул саҡта, славян халыҡтарына православие динен өйрәтеү өсөн уртаҡ яҙма әҙәби тел эшләнгән кеүек, төрки халыҡтар өсөн дә уртаҡ яҙма тел булдырырға кәрәк була. Ислам динен ҡабул итмәҫтән бик күп заман элек Үҙәк һәм Урта Азияла йәшәгән үзбәк, уйғур кеүек халыҡтарҙың үҙенең боронғо алфавиты, әҙәби теле йәшәгән һәм әҙәби мираҫы тупланған була. Ислам диненә күскәс, боронғо алфавиттарын ташлап, ғәрәп алфавитын алалар. Яңы динде өйрәнеү-аңлатыуға бәйләнгән әҙәбиәтте ғәрәп алфавитында, ләкин төрки телдә тыуҙыра башлайҙар. Ғәрәп телендә яҙылған дини әҫәрҙәрҙе, Ҡөрьән аяттарын, хәҙис өҙөктәрен шул телгә тәржемә итәләр. Әлбиттә, был әҙәби телгә исламға бәйле ғәрәп һүҙҙәре күпләп инә башлай.

Мәшһүр тюрколог С. Е. Малов «Боронғо төрки яҙма ҡомартҡылары» тигән мөһим әҫәрендә ошо телдең барлыҡҡа килеүе, артабанғы яҙмышы тураһында былай тип яҙа: «Боронғо үзбәк һәм уйғур алфавитын оҙаҡ заман ҡулланғандан һуң, төрки халыҡтар (уларҙың бер өлөшө), исламды ҡабул итеү менән, ғәрәп алфавитына күсә.

Үҙәк Азияла дин менән бергә яҙыуҙы һәм хатта телде алмаштырыу осоро XI — XIV быуаттарға тура килә. Исламды ҡабул итеү һәм уны халыҡҡа еткереүҙең тәүге мәлдәрендә был динде таратыусыларға монгол шаманизмы һәм уйғыр буддизмы менән көрәшергә тура килгән. Үҙ халҡына исламды тиҙерәк таратыу теләге менән, Бохара муллалары хатта айырым фәтүә (ҡарар — **Т. Б.**) сығара, был фәтүәлә «алла теле» менән яҙылған Ҡөрьәнде төрки теленә тәржемә итеү

рөхсәт ителә. Хәҙерге көндә ғәрәп һәм уйғыр алфавиттарында яҙылған боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларын тарихи күҙлектән ҡарап өйрәнгәндә, аҡрынлап төрки телдең, уның алфавиты менән йөкмәткеһенең генә түгел, хатта уның бөтә йөҙө-һыны ни рәүешле үҙгәргәнен самалап була. Бөтә Үҙәк Азиялағы китап теле алға барған һайын, Көнбайыш йоғонтоһона бирелә бара. Аҙаҡтан килеп ул уйғыр дәүерендәге телдән аҡрынлап сығатай теленә, артабан, Совет осоронда, Урта Азияла, Үзбәкстанда, үзбәк теленә әүерелә».

Ысынлап та, VIII — IX быуаттар араһында тыуҙырылған яҙма төрки тел XX быуат башынаса дауам иткән 10-11 быуатлыҡ ғүмерендә бик күп реформаларға дусар ителгән. Ул ошо оҙон ғүмерендә тик ислам динен һәм уның ҡанундарын таратыу теле генә булмаған. Латин һәм иҫке славян яҙма телдәре һымаҡ, үҙ ғүмерендә күп төрки халыҡтар өсөн, шул иҫәптән башҡорттар өсөн дә, дөйөм әҙәби һәм дөйөм рәсми (канцелярия) тел булып та хеҙмәт иткән. Ләкин, латин һәм иҫке славян яҙма телдәренән айырмалы рәүештә, ул ғибәҙәт ҡылыу теле булмай. Ғибәҙәт ғәрәп теле, Ҡөрьән телендә алып барыла. Башҡорт һ. б. төрки халыҡтарҙан булған мәғрифәтселәр, яҙыусылар үҙ әҫәрҙәрен уртаҡ яҙма төрки телдә ижад итте. Әҙерлектәренә, ғәрәп-фарсы телдәренә ни дәрәжәлә эйә булыуҙарына ҡарап, улар ошо төрки телгә ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен төрлө дәрәжәлә индерҙе. Шуның өсөн уларҙың әҫәрҙәре теге йәки был төрки халыҡтың һөйләү теленән алыҫ, ул халыҡтарға аҙ аңлайышлы булды. Ул уртаҡ яҙма тел XX быуат башына тиклем илебеҙҙең аҙ һанлы уҡымышлылар һәм дин әһелдәре өсөн ғилем теле булып хеҙмәт итте.

Уҡый-яҙа белмәгән, ябай ҡул хеҙмәте кешеләре ғүмер баҡый үҙенең әсә телендә һөйләште һәм бай фольклорын тыуҙыра килде. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, грамотаһыҙ ябай хеҙмәт кешеләре ошо яҙма төрки тел аша, уҡымышлы кешеләрҙең уҡығанын тыңлап булһа ла, халыҡ-ара культура, әхлаҡ, сәнғәт, эстетика байлыҡтарынан файҙаланып, үҙҙәрен һәм йәш быуынды тәрбиәләп килде. Шуның өсөн беҙ хәҙерге көндә ул төрки телде тыуҙырыусыларға рәхмәттәр уҡыйбыҙ. Сөнки 10-11 быуат хеҙмәт иткән ошо яҙма тел ярҙамында тарихыбыҙҙы, ата-бабаларыбыҙҙың изгелектәрен, героик көрәшен, әҙәби мираҫтарын өйрәнәбеҙ.

**Таһир БАЙЫШЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

**Редакциянан.** *Был мәҡәлә ғалимдың архивында гәзиттән («Совет Башҡортостаны» булһа кәрәк) ҡырҡып алынған килеш һаҡлана. Ул 60-сы йылдарҙың икенсе яртыһында донъя күргән.*

# МӘҒӘНӘҺЕҘЛЕКТӘГЕ МӘҒӘНӘ

*(Рус яҙыусыһы Сергей Довлатовтың тыуыуына 70 йыл)*



*Рәсәй эмигранттарының өсөнсө тулҡыны вәкиле Сергей Донат улы Довлатов 1941 йылдың 3 сентябрендә Өфөлә Ленинградтан эвакуацияланған театр режиссеры ғаиләһендә тыуған. 1944 йылда был ғаилә кире Ленинградҡа ҡайта.*

*Буласаҡ яҙыусы, урта мәктәпте тамамлағас, ике йыл ярым Ленинград дәүләт университетының филология факультетында уҡый. Өлгәшмәү сәбәпле уҡыу йортон ҡалдырғас, әрмегә алына. Коми Республикаһындағы холоҡ төҙәтеү лагерҙарында эске ғәскәрҙәр сафында хеҙмәт итә. Иосиф Бродский билдәләүенсә, Сергей Довлатов әрменән, "Толстой Ҡырымдан ҡайтҡандағылай, бер төргәк хикәйәләр, тормошҡа һиҫкәнгән ҡараш менән ҡайта".*

*Күп тиражлы гәзит редакцияһына хәбәрсе булып урынлаша, Ленинград дәүләт университетының журналистика факультетында уҡый, хикәйәләр яҙа. 1972—1975 йылдарҙа — Эстонияла "Совет Эстонияһы" гәзите хеҙмәткәре. 1975 йылдан йәнә — Ленинград. "Костер" журналы редакцияһында эшләй. Үҙнәшер ысулы менән китаптар сығара.*

*1978 йылдан — эмиграцияла. Нью-Йоркта төпләнә. Көн дә сығыусы "Яңы американлы" гәзитен (эмигранттар даирәһендә оло абруй ҡаҙанған баҫма) ойоштора, баш мөхәррир вазифаһын башҡара.*

*1980 йылдар уртаһынан Сергей Довлатов, яҙыусы булараҡ, киң билдәлелек яулай. Бер-бер артлы китаптары донъя күрә ("Ундервудтағы соло", "Килешеү", "Зона", "Ҡурсаулыҡ", "Яңғыҙактар маршы", "Беҙҙекеләр", "Энтузиастар демаршы", "Сумаҙан" һ.б.), әҫәрҙәре иң үтемле журналдарҙа баҫыла. 1995—2005 йылдарҙа иһә тыуған илендә "Һайланма әҫәрҙәр"е, ике, өс, дүрт томлыҡтары нәшер ителде.*

*Сергей Довлатов 1990 йылда Нью-Йоркта йөрәк өйәнәгенән вафат була.*

*Әҫәрҙәре европа һәм япон телдәренә тәржемә ителгән.*

*Уның ижады ентекле өйрәнелә: А.А. Генис. Довлатов и окрестности (М., 2001); А. Ковалова, Л. Лурье. Довлатов (СПб., 2009); Л. Сальмон. Механизмы юмора (М., 2008); И.Н. Сухих. Сергей Довлатов. Время, место, судьба (СПб., 2010); В. Г. Попов. Довлатов (М., 2010).*

* * *

Сергей Довлатов әҫәрҙәре нигеҙендә, – асылда, автор биографияһы. Үҙе иҫкәртеүенсә, "Исемдәр, ваҡиғалар, ваҡыт арауығы – бөтәһе лә нисек булған шулай. Бигүк әһәмиәте булмаған деталдәр генә уйлап сығарылған". "Зона"ла, мәҫәлән, лагерь күҙәтеүсеһе яҙмалары – яҙыусының хәрби хеҙмәттәге мәле, "Килешеү" – Эстонияла йәшәү дәүере, "Ҡурсаулыҡ" – Пушкин тауҙарында экскурсовод булып эшләгән ваҡыты һ.б.

Һәр осраҡта ла төп герой бюрократик системаға, алдаҡҡа, төрлө кимәлдәге шымалауҙарға ҡаршы сыға, рух азатлығы өсөн ысын мәғәнәһендә көрәш алып бара, үҙенсә протест белдерә. Был – әрме тәртиптәре менән ризалаша алмаған һалдаттың эске ойоштороуында ла, төрмәләгеләрҙең үҙхөкөмгә ынтылыуҙарына ҡамасаулауҙа ла (”Зона”), Пушкин мираҫын ҡалыплашҡан алымдар аша күҙаллаусыларҙы һөйһөнмәүендә лә – сөнки генийҙы бюрократик ҡоршауҙар менән уралтыу бөгөнгө талантарҙы тейешенсә баһаларға ла ҡамасаулай (”Ҡурсаулыҡ”), үҙ күләгәһенән үҙе ҡурҡҡан матбуғат хеҙмәткәрҙәренән әсе көлөүендә лә (”Килешеү”) сағыла. Был йәһәттән танылған әҙәби тәнҡитсе Бенедикт Сарновтың, Сергей Довлатов 1970 – 1980 йылдарҙа художестволы сатира өлкәһендә Михаил Зощенко традицияларын уңышлы дауам итте, тип билдәләүе менән килешмәү мөмкин түгел.

Кешеләрҙе яҡшыға-яманға ғына бүлеп ҡарауҙың мәғәнәһеҙлеген асыҡлай яҙыусы. Уның уйынса, әҙәм балаһы – әлегеһе мәлдәге хәл-ваҡиғалар емеше. Тап улар уға хәл иткес йоғонто яһай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яҡшылыҡҡа илтеүсе һуҡмаҡтар аҙыраҡ. Әҙиптең төп фекере: изгелек менән яуызлыҡ йәнәш йөрөй, хәл-ваҡиғаларҙың һаҙлыҡҡа этәреүенән Хоҙай һаҡлаһын! Йыш ҡына осраҡлылыҡ бөтәһен дә аҫтын өҫкә әйләндереүе ихтимал. Бер үк кешенең мәленә ярашлы яҡшыға ла, этлеккә лә һәләтле булыуы бар.

Классик рус әҙәбиәтенән айырмалы рәүештә, Сергей Довлатов әхлаҡи проблемаларҙы яҡтыртыуҙы, ниндәйҙер идея үткәреүҙе маҡсат итмәй, ә, фотографтай, реаль тормошто сағылдыра. Шуға ла ул әҙәбиәт донъяһында Достоевский менән Толстойға түгел, ә Фолкнер менән Хемингуэйға өҫтөнлөк бирә.

Сергей Довлатовтың лагерға бәйле әҫәрҙәре, һүрәтләү объектының уртаҡлығы аша Александр Солженицын, Варлам Шаламов ижадын иҫкә төшөрә. Ҙур айырмалыҡ иһә шунда: тәүгеләре ваҡиғаларҙы хөкөм ителеүселәр күҙлегенән тасуирлаһа, Сергей Довлатов төрмә һаҡсыһы булараҡ (надзиратель) баһалай, күбеһенсә яланғас факттар менән эш итә, әгәр шулай әйтергә яраһа – художестволы яҡтан эшкәртелмәгән, дөйөмләштерелмәгән, психологик йәһәттән нигеҙләнмәгән күренештәргә өҫтөнлөк бирә. Был күренештәрҙең ябай логика менән яраша алмауын асыҡлай. Ә төптәнерәк уйлаһаң, әҙәм балаһын ҡыҙғаныс хәлгә төшөргән бюрократик система фашлана. Был королошто бар итеүсе, йәшәтеүселәр ҙә шул уҡ кешеләр бит, тигән уйҙарға һала. Көндәлек тормоштоң мәғәнәһеҙлеге тотош ысынбарлыҡтың мәғәнәһеҙлеген тыуҙыра түгелме?

Әҙәбиәтсе А. Арьев раҫлауынса, С. Довлатовтың ижад кредоһы – кешеләрҙең берсә һағышлы көлөп, берсә көлкөлө һағышланып йәшәүҙәрен күрһәтеү. Ысынлап та, әҙиптең тасуирнамәһендә ҡапма-ҡаршылыҡлы, әммә парадоксаль, трагик һәм комик хәл-ваҡиғалар бер-береһенә тығыҙ үрелә, хатта төрмәләгеләр менән уларҙы һаҡлаусылар араһында әллә ни ҙур айырмалыҡтар ҙа юҡ кеүек. Мәҫәлән, әле генә һаҡсы булған хикәйәләүсе үҙе һаҡ аҫтына алына, дуҫы, уставҡа буйһоноп, уға ҡаршы ҡорал күтәрергә мәжбүр. Автор, тыйыуҙарҙың ике яғында ла бер бөтөн, йәнһеҙ донъя ине, тип һығыҡ өҫтөнә ала. Шул нигеҙҙә лагерь – тотош илдең бәләкәй күсермәһеләй күренә башлай. Шуныһы мөһим: тегендә лә, бында ла изгелек тә, яуызлыҡ та йәнәш йөрөй. Тәү ҡарамаҡҡа мәғәнәһеҙ күренгән күренештән дә әҙип ниндәйҙер фәлсәфи һығымта яһай. Дөрөҫөрәге, тасуирнамәләрҙең һөҙөмөн уҡыусы үҙе сығара. Был иһә – ижадтың тормошсанлығын ғына түгел, ә авторҙың донъяға үҙенсәлекле ҡарашын да күрһәтеүсе билдә ул.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

# Тубыҡланған килеш

## Инеш

Был яҙмалар еңел әҙәбиәт һөйөүселәрҙең зауығына тап килмәҫ. Ҡайһы бер фекер-һығымталарҙың, киреһенсә, кемдәрҙеңдер кәйефен ҡырыуы ла ихтимал. Ләкин был яҙмаларҙа ялған юҡ. Улар ысынбарлыҡҡа таяна. Тормош байрамдарҙан ғына тормаған һәм кеше организмы ла тәм-том менән бергә тоҙ-боросҡа мохтажлыҡ кисергән кеүек, йәшәйештең дә әсе мәлдәре күберәктер. Ни өсөн беҙ, мәҫәлән, йыл һайын фашистик Германияны ҡыйратыуҙы бар донъяның иҫен китерерлек дәрәжәлә байрам итеп тә, тормош сифаты буйынса ата-бабаларыбыҙ туҡмаған немецтарҙан күпкә ҡалышабыҙ? Ни өсөн ҡайһы бер һөнәр эйәләре, эшләп йөрөп тә, тамаҡ аҫрарлыҡ ҡына хаҡ менән мөрхәтләнергә мәжбүр? Үҙенә хеҙмәт хаҡын йөҙәр мең һумдан ҡуйған депутаттарҙың йәшәү минимумын унан егерме тапҡырға кәмерәк кимәлдә законлаштырыуға нисек намыҫы етә? Берәүҙәр кеҫә телефоны, башҡа ваҡ-төйәк урлап иректән мәхрүм ителһә, миллиондарҙы һелтәгән вазифалы әҙәмдәр һыуҙан ҡоро сыға йәки шартлы срок менән ҡотола?

Ни өсөн? Үрҙә һанап үтелгән һорауҙарҙы бер епкәрәк теҙгән яуап ғәмәлдә бер фекергә тоташа: беҙҙә аңлы граждандар йәмғиәте юҡ. Шуға күрә лә чиновник көслө, байҙар ҡотора – һөҙөмтәлә йәмғиәт һаман да кисәге көндә йәшәй, тормош яҡшырмай. Бәлки, мин хаталанамдыр?

«Бер кеше тарафынан да ҡотҡарыла алған халыҡ сыбыртҡы менән һуҡтырыуға мохтаж», – тигән бер немец аҡыл эйәһе. Ысынлап та, император, хан һәм батшалар дәүере XIX, XX быуаттар тарихы саңында күмелеп ҡалды. Уға алмашҡа кешелек донъяһы аңлы граждандар тарафынан конституцион нигеҙҙә идара ителгән королош – парламент республикаһы барлыҡҡа килтерҙе. Европа, АҠШ һәм инглиздәр ҡорған башҡа цивилизациялар – Канада, Яңы Зеландия, Австралия һ.б. күптән башҡаларға ла өлгө булырлыҡ дәрәжәлә донъя көтә. Власть граждандар тарафынан һайлап ҡуйыла, граждандарҙың даими күҙәтеүе аҫтында эшләй, шуға күрә лә тормош сифаты юғары.

Йәмғиәттең тын алышын, кәйефен өйрәнгән фән бар – социология. Демократик ҡоролоштар үҙҙәренең теге йәки был аҙымын мотлаҡ социологик мәғлүмәттәргә таянып яһай, хаталарҙан да арына. Ләкин Советтар Союзында, кибернетика кеүек үк, социология ла буржуаз ҡалдыҡҡа иҫәпләнде. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был ауыр мираҫтан йәмғиәтебеҙ әле лә арынып бөтмәгән. Мәҫәлән, Башҡортостанда йәмәғәтселек фекере йәмәғәтселеккә еткерелмәй. Бәхеткә күрә, үҙәк матбуғатта ундай мәғлүмәттәр тулып ята. Шуға күрә түбәндәге яҙмаларҙа Рәсәй социологтарына таянырға тура килде.

## Статистика бәхәскә урын ҡалдырмай

2010 йылдың ноябрендә Мәскәүҙә БМО-ның «Халыҡтарҙың ғәмәли байлығы: кешене үҫтереү юлдары» тигән доклады тыңланды. Унда тикшерелгән төп мәсьәлә – «кешелек потенциалы» теге йәки был илдең һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, килемдәр, белем алыу мөмкинлеге кеүек социаль күрһәткестәр нигеҙендә тупланған. Йәмғиәттең демократик булыу-булмауы уларға йоғонто яһамай, ти белгестәр. Рәсәйҙең индексы – 0,719, беҙ Румыния, Болгария, Сербия, Украина, Белоруссия кеүек илдәрҙән ҡалышабыҙ. 2010 йылда беҙҙә кешенең уртаса ғүмере 67 йәш булһа, Белоруссияла – 70, Украинала – 69. Кешелек потенциалы индексы буйынса Норвегия, Австралия, Яңы Зеландия таблицаны башлап ебәрһә, Нигерия, Конго, Зимбабве – тамамлай. Албания, Перу, Коста-Рика, Ҡаҙағстан, Әзербайжан, Босния – беҙгә күрше. Ә бит илебеҙҙең иҡтисади потенциалы һанап үтелгән илдәрҙекенән күпкә юғары. Тимәк, ул шул ҡеүәтте барлыҡҡа килтергән кеше мәнфәғәттәрендә файҙаланылмай.

Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 7-се статьяһында, Рәсәй Федерацияһы – социаль дәүләт, һәм ул граждандарҙың лайыҡлы тормошо тураһында хәстәрлек күрә, тиелгән. Ғәмәлдә лә шулаймы? 2010 йылда Рәсәй Фәндәр академияһында йәмғиәтебеҙҙең психологик индексын иҫәпләп ҡарағандар. Был мәғлүмәт үҙ-үҙенде үлтереү (суицид), һиҙеү һәм нервы системаһы, психик сәләмәтлек, кеше үлтереү, ғаиләләр тарҡалыу, етемдәр иҫәбе буйынса дөйөмләштерелеп сығарыла. Көнбайыш Европа дәүләттәренең индексы күпкә юғары. Мәҫәлән, Францияла – 8, Рәсәйҙеке иһә – 5, йәғни был йәһәттән беҙ Украина менән Белоруссиянан да артта ҡалабыҙ. Суицид буйынса беҙҙе Финляндия ғына уҙып киткән. Хатта Африка, Латин Америкаһы илдәрендә лә был хәл һирәгерәк осрай. Беҙҙә АҠШ-ҡа ҡарағанда – дүрт, Европаға ҡарағанда 10 тапҡырға күберәк кеше үлтерәләр.

Килемдәр (доход) араһында айырма ни тиклем ҙурыраҡ булһа, тыуым да шул саҡлы кәмерәк, ти демографтар. Рәсәйҙә был айырма 30-ға етә, тимәк, беҙ социаль революция алдында торабыҙ. Йәмғиәт сәләмәт түгел икән, тимәк, әхлаҡи боҙоҡлоҡ нормаға әүерелгән. Рәсәй Фәндәр академияһы белгестәренең Мәскәү дәүләт университетының иҡтисад факультеты студенттары араһында 20 һорауҙан торған белешмә буйынса үткәргән тикшереүе тап ошо хаҡта һөйләй. «Һеҙҙең өсөн игелек һәм яуызлыҡ төшөнсәләре бармы?», «Үҙегеҙҙе нисек тотоу тураһында кемдәрҙән өйрәнәһегеҙ?», «Хәҡиҡәтте йыш әйтәһегеҙме?», «Оялыу тойғоһо кисерәһегеҙме?», «Ғәйебегеҙҙе һәр саҡ танный̆һығыҙмы?», «Тыйылмаған бөтә нәмә лә мөмкин», тигәнде нисек ҡабул итәһегеҙ?» һ.б. кеүек һорауҙар бирелгән. Респонденттарҙың 5 проценты самаһы – төҙәлмәҫ кешеләр: улар игелек менән яуызлыҡты бөтөнләй айырмай, оло йәштәгеләрҙе ихтирам итмәй – ғалимдар шундай һығымтаға килгән. Ә 60 процентҡа яҡыны «шыма» яуап бирергә өйрәнгән, тимәк, улары үҙҙәрен хәлгә ҡарап тотоу һәләтенә эйә. Белгестәр фекеренсә, 5 процент та күп, сөнки был студенттар артабан етәксе булып китеп, күптәрҙең эшмәкәрлегенә һәм, әлбиттә, яҙмышына йоғонто яһаясаҡ. Шул иҫәптән – киреһен дә.

Мәҡәләлә Иҡтисад юғары мәктәбенең Демография институты директоры Анатолий Виноградовтың аңлатмаһы ла урын алған. «Мәғлүмәттәр иҫ китерлек, – ти ул. – Хәлде нисек яҡшыртырға? Мин, мәҫәлән, белмәйем. Иң элек эскелеккә ҡаршы саралар күрергә кәрәктер. Ләкин нисек?» Үлем Советтар Союзында 60-сы йылдар уртаһында уҡ арта башланы, тип шәхси фекерен белдерә Мәскәү дәүләт университетының социология факультеты профессоры Анатолий

Антонов. Ләкин уны йәмәғәтселек иғтибарынан йәшерҙеләр. 1970 йылда профессор проблеманы өйрәнә башлай, әммә уға был эште туҡтатырға ҡушалар. «Ирҙәрҙең үҙен һаҡламауы Рәсәйҙә борон-борондан килә, сөнки XX быуатта илебеҙ гел генә һуғышып торған», – ти Антонов.

Рәсәй Фәндәр академияһының Социология институты белгесе Владимир Магун, Рәсәй ҡиммәттәр базаһы буйынса Европа илдәренән ҡырҡа айырыла, тигән фекерҙә. Беҙҙең граждандар иң элек шәхси мәнфәғәттәренән сығып эш итә. Был кәмселектән арыныуҙы хәстәрләү урынына, «Рәсәй мәҙәни матрицаһының тотороҡлолоғо» яҡлылар уны артта ҡалғанлыҡты йәшереү өсөн файҙалана. Йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү буйынса институт йыйған мәғлүмәттәр араһында ғибрәт алырҙайҙары аталғандар менән генә сикләнмәй. Хатта бер үк социаль төркөмдә лә мәнфәғәттәрҙең ҡырҡа айырылыуы күҙәтелә. Иң ҙур етешһеҙлек шунда: беҙҙең граждандар үҙ мәнфәғәттәрен яҡлау өсөн берләшергә әҙер түгел. Ошо хәл үҙе үк йәмғиәтебеҙҙең XXI быуатта ла етлегеп етмәүе хаҡында һөйләй. Әгәр ҙә Көнбайыш илдәрендә – быға быйыл ғәрәптәр ҙә өҫтәлде – граждандар үҙ мәнфәғәтен яҡларға бер кешеләй тотонһа, Рәсәйҙең бай һәм ярлылары, оптимист һәм пессимистары, традиционал һәм модернистары ундай дәрәжәгә етеүҙән йыраҡ әле.

Ҡараштар айырмаһы граждандарҙың социаль сығышы менән дә сыбарлана. Мәҫәлән, ауылда йәшәгәндәрҙең – 51, ҡалаҡылыларҙың 38 проценты «дәүләт һәр кемдең, шул иҫәптән милек буйынса ла, тиң хоҡуҡлылығын тәьмин итергә бурыслы» тип иҫәпләй. Миллионлы ҡалалар халҡының яртыһы теге йәки был инициативаға өҫтөнлөк бирһә, ауылдан ҡалаға килеүселәрҙең 61 проценты – традицияларҙы һаҡлау яғында. Ғөмүмән, күпселек күнегелгән йәшәү рәүешенә өҫтөнлөк бирә. Отошломы был, юҡмы? Күнегелгән традициялар йәшәү рәүешен яҡшыртырға ҡамасаулай икән, тимәк – юҡ. Перспективаларға ла мөнәсәбәт төрлөсә. Ҡала халҡының 46 проценты, бер нәмәне лә алдан планлаштырып булмай, тиһә, 38-е иһә, бер-ике йылға мөмкин, тип иҫәпләй. Ауылда йәшәгәндәрҙең ҡарашы тағы ла төшөңкөрәк: 71 проценты, бер нәмәне лә планлаштырып булмай, тигән фекерҙә. Был иртәгәһе көнгә ышаныстың юҡлығы һәм, әлбиттә, дәүләт, граждандар институттарының эшлекһеҙлеге хаҡында һөйләй.

Дәүләт институттары йәмәғәтселек аңында ыңғай баһаланмай. Модернизацияны тәьмин итеүҙә төптән егелеп ҡатнашырға бурыслы был органдарға Ватан йәмәғәтселеге ышаныс белдермәй. Мәҫәлән, мәхкәмәләргә респонденттарҙың 19 проценты ышанһа, өсләтә күберәге – кире мөнәсәбәттә. Хоҡуҡ һаҡлау органдары һәр бишенсенең генә ышанысы менән файҙалана. Президентҡа респонденттарҙың – 71, федераль хөкүмәткә 54 проценты ыңғай мөнәсәбәт белдерә. Граждандарҙың яртыһы «дәүләт шәхестең түгел, йәмғиәттең мәнфәғәтен күҙәтергә бурыслы» тип иҫәпләй. Был йәһәттән йәмәғәтселегебеҙ Көнбайыштағынан ҡырҡа айырыла, һәм уның гносеологик тамырҙары тәрәндән килә. «Батша закондары – мәғәнәһеҙ, императорҙарҙыҡы ят булды, – тигән билдәле урыҫ революционеры А. Герцен бынан быуат ярым самаһы элек. –Тегеһе лә, быныһы ла көслө дәүләт ҡороуға булышлыҡ итте. Шәхесте баҫып, улар ҡурҡыныс империя урынлаштырыуға өлгәште. Англосакс халыҡтары йәмәғәт башланғысын инҡар итеп, шәхесте азат итһә, урыҫ халҡы шәхесте йотоу иҫәбенә общинаны һаҡлап ҡалды».

Һүҙ һәм йыйылыш азатлығы демократик йәмғиәттең төп йөкмәткеһенән һанала. Был өлкәлә лә ватандаштарыбыҙҙың ихтыяры аңлашылмай. Мәҫәлән, уларҙың һәр икенсеһе генә азатлыҡты тейешенсә баһалай, унан башҡа йәшәү мәғәнәһе ҡалмай, тип иҫәпләй. Ә бына матди етешлекте азатлыҡтан өҫтөнөрәк

күргәндәр – 44 процент. Йәмғиәттең яртыһынан күберәгенең «граждандар үҙҙәренең иҡтисади хоҡуҡтарын яҡларға хаҡлы» тигән фекерҙә тороуына ҡарамаҫтан, уны ғәмәлдә танығандар һирәк, сөнки күпселек профсоюз ойошмалары, сәйәсмәндәр, ижтимағи институттарға ышанмай. Инициативалы кешеләргә ҡушылырға теләүселәр һирәк. Респонденттарҙың 80 проценты «граждандарҙан бер ни тормай» тигән төшөнкө фекерҙә. Йәмәғәтселектең өстән ике өлөшө, үҙгәрештәр «юғары»нан, йәғни властар күҙәтеүендә үткәрелергә тейеш, тип иҫәпләй. Ҡалғаны граждандар һәм йәмғиәттең сәләмәт көстәренә өмөт бағлауын белдерә. Ижтимағи тормоштоң төрлө өлкәләре эшмәкәрлегендә граждандарҙың һәр өсөнсөһө генә ҡатнаша. Башҡалар был мәшәҡәтте ситтә тороп күҙәтеүҙе хуп күрә. Был осраҡта нисек итеп «Иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр» тигән әйтемде иҫкә төшөрмәйһең?

Социология институты директоры Михаил Горшков фекеренсә, халыҡ модернизацияны чиновниктар тотҡарлай, тип иҫәпләй. Иҡтисадты яңыртыу, өҫтөнлөклө милли проекттарға ҡарата ватандаштарының битараф мөнәсәбәтенә бәйле «Огонек» журналы һорауҙарына «Левада-центр» директоры Лев Гудков былай яуаплай: «Был проекттар тураһындағы хәбәр күптәргә аңлашылмай. Ғөмүмән, беҙҙә кешеләр үҙенең шәхси тормошона ҡағылмаған проблемаға вайымһыҙлыҡ күрһәтә. Уларҙы ғаиләһе, балалары, һаулыҡ мәсьәләләре генә ҡыҙыҡһындыра». Тимәк, кешеләрҙә тупланырға теләү тойғоһо юҡ. Ижтимағи институттарҙың ошолай баҫылып ҡалыуынан йәмәғәтселек беренсе нәүбәттә үҙе зыян күрә. Граждандарҙың 70 процентының кешеләргә ҡарата мөнәсәбәттә һаҡ булырға ынтылыуы – ысынлап та, бер нисек тә аңлатып булмаған хәл. Сит илдәрҙә ул ике тапҡыр һирәгерәк осрай.

«Бөтәһе лә 90-сы йылдар аҙағында Кремлгә авторитар етәксе килеүҙән башланды, – тип дауам итә Гудков. – Һуңғы өс-дүрт йылда граждандар сәйәсәттән тамам ситләштерелде, һайлауҙар исем өсөн үткәрелә. Кешеләр полициянан бандиттарға ҡарағанда нығыраҡ ҡурҡа, матбуғат, шул иҫәптән телевидение ла, ысынбарлыҡты сағылдырмай». Ләкин ниндәйҙер социаль революция көтөргә ярамай, тип тынысландыра «Левада-центр» етәксеһе. Беҙҙә ҡәнәғәтһеҙлек серек ағастың быҫҡып яныуы кеүек кенә барасаҡ, сөнки халыҡ коррупцияға күптән өйрәнгән. Улар үҙҙәре лә ришүәт бирә һәм ниндәйҙер дәрәжәлә, мин дә властарға йоғонто яһайым, тип уйлай. Яҡын арала ижтимағи хәлдең яҡшырыуына иҫәп тотоуы ҡыйын, сөнки хоҡуҡи дәүләт ҡороу өсөн иҡтисади үҙгәрештәр генә етмәй, етди үҙгәрештәрҙең ижтимағи аңда булыуы кәрәк. Тағы ла бер парадокс: башлап барыу – отошло түгел, ә ҡаза күреүең бик тә ихтимал.

Граждандарҙың 56 проценты Рәсәйҙе – территорияһы, теүәл яртыһы хәрби ҡеүәте һәм ядро ҡоралы йәһәтенән «бөйөк» тип иҫәпләй, ти «Левада-центр». Тик 3 проценты, граждандар хоҡуҡтары, көнкүреш шарттары буйынса «бөйөк», тигән фекерҙә. Ысынлап та, аслы-туҡлы, ярым яланғас булһа ла, «бөйөк держава»-ла йәшәүе менән маһайғандарҙы гражданлыҡ аңы менән үлсәүе ҡыйын.

2008 йылда бөтә донъя финанс кризисынан беҙ башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ зыян күрҙек, эшһеҙлек, фәҡирлек көсәйҙе. Әлбиттә, бында дәүләт органдарының ғәйебе лә хәл иткес дәрәжәлә ҙур булды, сөнки триллион һумдар иҡтисадты үҫтереү, технологияларҙы яңыртыуға йүнәлтелмәне, сит илдәргә китте. Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге (ВЦИОМ) мәғлүмәттәре буйынса, граждандарҙың өстән ике өлөшө, илдә эшһеҙлектең артыуында федераль властарҙы ғәйепләй икән, бында ғәжәпләнерлек бер ни ҙә юҡ. Ә 28 проценты иһә тағы ла ҡәтғиерәк: властар эшһеҙлекте бөтөрөү сараһын күрмәй. Дәүләт Думаһының хеҙмәт һәм социаль сәйәсәт комитеты рәйесе, «Берҙәм

Рәсәй» фирҡәһе ағзаһы Андрей Исаев иһә, төп бурысы граждандар мәнфәғәтен күҙәтеү булыуға ҡарамаҫтан, ҡаршы төшә: «Кешеләр проблема тураһында хәбәрҙар түгел, – ти ул. – Эшһеҙлеккә ҡаршы саралар көрәү буйынса беҙ – алдынғылар рәтендә». Хәйер, белешмәләр буйынса эш иткән депутатҡа шулай тойолалыр, әммә башҡа фекер ҙә бар. «Эшһеҙлек үҙәктәренә сараһыҙҙар ғына мөрәжәғәт итә, шуға күрә күптәр статистикаға эләкмәй. – Был Рәсәй Фәндәр академияһының социаль сәйәсәт үҙәге етәксеһе Евгений Гонтмахер фекере. – Эшһеҙлек эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү өсөн шарттарҙың самалы булыуына бәйле». Мәҫәлән, Бойондороҡһоҙ социаль сәйәсәт институты директоры урынбаҫары Лилия Овчарова ла шундай фекерҙә: «Рәсәйҙә эшҡыуарлыкты үҫтереү буйынса һүҙ иң юғары даирәләрҙә алып барылыуға ҡарамаҫтан, арзан һәм оҙайлы кредит биреү системаһы көйләнмәгән, страховка – юҡ дәрәжәһендә, эш башлап ебәреү өсөн урындар етешмәй». Иң мөһиме, яңы эш башлау өсөн капитал кәрәк.

Тармаҡ проблемаһы хаҡында быйыл февралдә «Газета.ру» интернет баҫмаһы былай тип яҙҙы: «Рәсәйҙә эшҡыуарлыкты үҫтереү – элекке кеүек үк ауыр мәсьәлә. Идара органдары, һанһыҙ тикшереүселәрҙең яһаҡ талап итеүе, биналар етешмәү, арзан ставка менән оҙайлы кредит алыу проблемаһы, «көс» структуралары яғынан рэкет эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүҙе хәүефле эшмәкәрлеккә әүерелдерә. Баҙар иҡтисады башланыуға өсөнсө тиҫтә йыл китеүгә ҡарамаҫтан, илдә демократик властың төп таянысы – урта синыфты ишәйтеү өсөн бер ниндәй ҙә сара күрелмәне. Шуға күрә йәштәрҙең йә дәүләт органдарында, йә эре компанияларҙа эшләргә ынтылыуы, һис юғында сит илдәргә сығып бәхет эҙләүе – ғәжәп түгел».

Фәҡирлек, йәғни хәҙерге ваҡытлы матбуғат телендә аталыуынса, «аҙ тәьмин ителгәнлек» – Советтар осоронан айырмалы рәүештә, Рәсәйҙең йөҙөн билдәләгән күренештәрҙең береһе. Ул, һис шикһеҙ, гражданлыҡ тойғоһон үҫтереүгә булышлыҡ итмәй, киреһенсә, протест кәйефтәрен генә көсәйтеп, дәүләт институттарына ышанысты бөтөрә. «Росстат» мәғлүмәттәре буйынса, 2010 йылда ватандаштарыбыҙҙың 18,5 миллионы, йәғни 13 проценты фәҡирлек сигенән дә түбән килемгә көн иткән. Граждандарҙың 80 проценты үҙен урта синыфҡа индерә алмай, ти белгестәр. 2010 йылдың дүртенсе кварталында йәшәү минимумы (4,3 мең һум) буйынса Рәсәй менән Ҡаҙағстан БДБ илдәре араһында насар күренмәй кеүек. Статистикаға таянып, Европа союзында халыҡтың 17 проценты фәҡирлек сигенән түбән килемгә көн күрә, тип ҡаршы төшөүселәр ҙә булыр. Эйе, Евросоюз мәғлүмәттәре буйынса, Латвия, Румыния, Болгарияла был күрһәткес иң юғарыһы – 20 – 26 процент. Чехияла – 9, Нидерланды менән Словакияла – 11, Дания, Венгрия, Австрия, Швейцарияла – 12. Ләкин Европала фәҡирлек, Рәсәйҙәге кеүек, йәшәү минимумы менән үлсәнмәй. Ул Евросоюз буйынса уртаса килемдең 40 – 60 процентына торош итә, йәғни беҙҙең «минимум»дан бер нисә тапҡыр күберәк. Шуны ла әйтергә кәрәк: «Рәсәй минимумы» кешенең торлағы булыу-булмауын иҫәпкә алмай. Ике-өс «минимум» килем алғандар фәҡирҙәр иҫәбенә индерелмәһә лә, аҙ килемлеләр рәтенә ҡарай.

«Европала фәҡирлек менән тиң хоҡуҡһыҙлыҡ бер-береһенә бәйле ҡарала, – ти Лилия Овчарова. – Евросоюз үлсәме менән иҫәпләгәндә, беҙҙә фәҡирҙәр 26 проценттан да кәм булмаҫ ине. Киреһенсә, Рәсәй күҙлегенән ҡарағанда, Европала фәҡирҙәр юҡ». Рәсәй Фәндәр академияһының Иҡтисад институты директоры Руслан Гринберг фекеренсә, «Беҙҙәге халыҡтың 20 процентын урта синыфҡа индерергә мөмкин булһа, Европала ул 70 процентҡа етер ине. Серегән байҙар беҙҙә ике процент булһа, ҡалғандары ғәмәлдә йән аҫрау өсөн көс түгә.

Ысынлап та, 30 миллион самаһы эшсе айына 10 мең һумдан кәмерәк эш хаҡына йөрөй, улар – эшләүсе фәҡирҙәр. Европала пенсия эш хаҡының 60 – 80 процентына торош итһә, беҙҙә 30 проценттан уҙмай. Иң мөһиме, фәҡирлекте бөтөрөү өсөн бер ниндәй ҙә өмөт һиҙелмәй».

## Кеше – кешегә бүре

«Сәләмәт йәмғиәттә илдең киләсәген һәм бөгөнгөһөн элита хәстәрләй, ләкин Рәсәй элитаһына яуапһыҙлыҡ тойғоһо ғына хас, – тип яҙа «Независимая газета». – Ул һаман да байлыҡ туплау менән мәшғүл, тарих һабаҡтары (әлбиттә, 1917 йылғы Октябрь революцияһы) менән иҫәпләшергә теләмәй». Граждандар властан ситләшә, шуның менән бергә йәмғиәт үҙен сәйәси-ижтимағи процестарҙа ҡатнашыуҙан мәхрүм итә. Элиталар сәләмәт конкуренция шарттарында бер-береһен алмаштырғанда ғына тормош алға бара, граждандар араһында сәләмәт бәйләнеш урынлаша. «Хәҙер Рәсәйҙә бөтөнләй икенсе элита. В. Путин заманында был төркөмгә эләгеү өсөн Питерҙан йәки чекист булыу кәрәк ине. Кремлдең бөтә власты үҙ ҡулында туплауы Совет власы йылдарындағы кимәлгә етте». Кризис Рәсәйҙә дәүләт һәм ижтимағи институттарҙың эшлекһеҙлеген тағы ла бер тапҡыр раҫланы. «Рәсәй элитаһы плебейҙарҙан ҡойма һәм торлаҡҡа юғары хаҡтар менән аралана, – тип яҙҙы былтыр «Российская газета». – Хәҙер ҡала тибындағы ҡасабаларҙың да үҙ «Рублевка»лары бар. Бындай бейек ҡоймалар демографик һәм социаль хәүеф тыуҙыра, цивилизацияның киләсәген шик аҫтына ҡуя. Артабан был байҙарға балалары өсөн махсус мәктәп, институт, ахыр килеп, тыныс һәм бай ил кәрәк буласаҡ. Ләкин Рәсәйҙәге урта синыф илдә берҙәмлекте финансларға теләмәй.

Сит илдәрҙә, мәҫәлән, Европала нисек? Бөйөк Британияла, һуңғы быуаттарҙа революция бөтөнләй күҙәтелмәгән дәүләттә, байҙар һәм ярлылар бер-береһенән күптән айырым көн итә. Бай кварталдарға фәҡирҙәр килеп тә урамай, сөнки бындағы хаҡтар, көнкүреш шарттары улар өсөн түгеллеген яҡшы беләләр. Фәҡирҙәр өсөн күп ҡатлы социаль торлаҡ төҙөлгән, унда аҙым һайын полицейский йөрөп ята. Ләкин бай йорттар бейек ҡойма менән уратылмаған, булғанының да бейеклеге тубыҡтан юғары түгел, ҡарауыл да күренмәй. Һаҡсы ролен видеокамералар башҡара. Лондонда байҙар – Кенигстон энд Чесли, ҡара тәнлеләр – Брикстон, Яҡын Көнсығыштан килгәндәр Эзгивиа Роуд райондарында көн итә. Голдерс Гринда ҙур йәһүд общинаһы үҙенә уңайлы мөхит тапҡан. Парижда иһә башҡасараҡ – байҙар Виллы Монморанси төбәген төйәк иткән. Лондондан айырмалы, уны һаҡлайҙар, сөнки Африка йәштәренең 2005 йылғы сыуалышынан һуң Францияла хәүеф арта төшкән.

Рәсәйҙә оло йәштәгеләрҙең үҙ байрамы бар. Йыл һайын 1 октябрҙә уларға ҡәҙер-хөрмәт күрһәтелеп, ҡалған 364 көндө ҡарттар ауырлыҡ менән үткәрә. ВЦИОМ мәғлүмәттәренә ярашлы, респонденттарҙың өстән ике өлөшө, илдә ҡарттарҙың хоҡуҡтары күҙәтелмәй, тигән фекерҙә. Оло йәштәгеләрҙең һәр дүртенсеһенең ауыр тормоштан туйып, үҙ-үҙенә ҡул һалырға әҙерлеге шул хаҡта һөйләй. Теге йәки был хәжәткә аҡса етмәү, табиптарҙың вайымһыҙлығы, кешесә аралашырға мөмкинлек булмау һ.б. оло йәштәгеләрҙе ныҡлы борсоуға һала. Мәҫәлән, Новосибирск ҡалаһында йәшәгән Игорь Царевтың үҙен бензин һибеп яндырыуын бөтә Рәсәйгә күрһәттеләр. Аҡса еткерә алмаған ҡарт ҡалалағы фатирын һата ла бәләкәйерәк Черепаново ҡалаһында арзанырaҡҡа өй ала һәм айына 2500 һум түләп тороу шарты менән унда кешеләр индерә, үҙе ауылға китеп, картуф, йәшелсә үҫтереү менән шөғөлләнә. Кәрәк-ярағына субсидия һорап барғас, уға, фатирыңды ҡуртомға биреп аҡса эшләйһең, тип ярҙам күрһәтеүҙән баш тарталар. Түҙеме шартлаған бабай һуңғы сараға тотона.

Оло йәштәгеләрҙең үҙ-үҙенә ҡул һалыуы буйынса беҙ – донъяла беренсе урында. Новосибирскиҙа ҡарттар үҙ профсоюзын ойошторорға итеп тә ҡараған, хатта «Кәмһетелгәндәр» тигән исем дә тапҡандар. Әммә, эшсе коллективтар ғына ойошторорға хоҡуҡлы, тип профсоюзды теркәүҙән баш тартҡандар. Уҡыусының: Башҡортостан пенсионерҙары нисек йәшәй?», – тигән һорау биреүе ихтимал. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ыңғай информация ғына яҙырға күнеккән беҙҙең матбуғатта ундай мәғлүмәт бөтөнләй осрамай.

Илебеҙҙә граждандар йәмғиәте ойошоуға аяҡ салған күренештәрҙең береһе, моғайын, уның күп милләтлелегендәлер. Хәйер, бөтә донъяла тиерлек шундай хәл. Төрлө социаль-иҡтисади шарттарҙа көн иткән, һиммәттәре, дине яғынан айырылған халыҡтарҙы берләштереү бик ауыр. Былтыр декабрҙә Мәскәүҙең Манеж майҙанында этник ерлектә (Төньяҡ Кавказ халыҡтары вәкилдәре һәм урыҫтар менән) сыуалыштар булып үтте. Уны оппозицион баҫмалар «этник экстремизм һәм раса түҙеп торғоһоҙлоғоноң кәүҙәләнеше» тип баһаланы. «Экстремизм донъяла киң таралған күренешкә әүерелде. Ул йәмғиәттәге тотороҡлолоҡто юҡҡа сығара, дәүләт институттарын көсһөҙләндерә, тарҡалыу күренештәрен, сепаратистик кәйефтәрҙе көсәйтә. Иң мөһиме, демократик үҫешкә ҡамасаулай», – тип яҙа «Независимая газета».

Ләкин 182 этнос йәшәгән Рәсәйҙә күпселек халыҡтар этник йәмғиәт булып үҙ ерлегендә формалашты һәм быны менән иҫәпләшмәү мөмкин түгел. Үкенескә ҡаршы, сәйәсмәндәр башлыса өҫтә ятҡан мәғлүмәттәр – һандар менән эш итә, «Ни өсөн?» тигән һорау өҫтөндә уйланмай. Мәҫәлән, 2004 йылда илдә 130 экстремизм күренеше теркәлһә, 2009 йылда 548-гә еткән, йәғни дүрт тапҡырға артҡан. Был йәмһеҙ күренеш айырыуса Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларына, Мәскәү, Ленинград, Түбәнге Новгород, Ярославль өлкәләренә, Алтай крайына, Владивосток ҡалаһына хас. Ысынлап та, уның гносеологик тамырҙары ҡайҙа?

Рәсәй Фәндәр академияһының Этнология һәм антропология институты тикшеренеүҙәренән күренеүенсә, теге йәки был төбәктең ситтән килгән кешеләрен социаль үҙенсәлектәре буйынса түгел, ә этник сығышы буйынса билдәләү (мәҫәлән, «национал») ғәҙәткә ингән. Йәмәғәтселек фекерен өйрәнеүҙә ҡатнашҡандарҙың өстән бер өлөшө ситтән килгәндәргә насар мөнәсәбәттә булыуын йәшермәй. 60 проценты өсөн барыбер. Ләкин һуңғы тойғоноң шартына ҡарап үҙгәреүе бик ихтимал. Ваҡытлы баҫмаларҙың ҡайһы берҙәре быны сәбәбен иң элек йәшәү рәүешендә күрә. Миграцияның файҙаһы тураһында аңлатыу эштәренең алып барылмауына ла һылтанма бар. Респонденттар, күрәһең, башлыса урыҫтарҙан, сөнки «Үҙегеҙҙекеләр тип кемдәрҙе иҫәпләйһегеҙ?» тигән һорауға 81 проценты – «Үҙәк Рәсәйҙәгеләрҙе», 79-ы – «Себерҙәгеләрҙе», 74-е «Алыҫ Көнсығышта йәшәүселәрҙе» тип яуаплай. Ошо ерҙә тыуып үҫеүгә ҡарамаҫтан, кавказдарҙың «үҙебеҙҙеке» булып китеүе мөмкин түгел. Урта Азиянан килгәндәрҙең береһе лә «үҙебеҙҙекеләр» булып китә алмай, тип иҫәпләгәндәр – 68 процент. Ошоларҙан сығып, белгестәр түбәндәге һығымта яһай: 1) Ватан йәмәғәтселегенең этник толерантлыҡ потенциалы; 2) граждандлыҡ үҙаңы түбән. Йәмғиәттә дөйөм граждандлыҡ теләктәшлеген нығытыу буйынса пропаганданы көсәйтергә кәрәк.

Манеж проблемаһына Американан ҡараш киңлеге менән айырыла. Майҙанға «Славянская сила» ДПНИ (миграцияға ҡаршы хәрәкәт) төркөмдәре сыҡты, тип хәбәр итә «Голос Америки» радиостанцияһы. Шуныһы ғәжәп: полиция бында бер ниндәй ҙә экстремизм күрмәй. ВЦИОМ мәғлүмәттәренә ҡарағанда, респонденттарҙың 29 проценты «кавказдарҙы яратмай». 65 проценты – чечендар, 63-ө ғәрәптәр менән «никахҡа инергә теләмәй». «Урыҫтарҙы үлтерәләр икән, тимәк,

уларҙы (кавказдарҙы – **М.Х.**) ла үлтерергә мөмкин, тип иҫәпләүселәр араһында мәҙәниәтле кешеләр ҙә юҡ түгел. Манеждан һуң күп кенә урыҫ ҡалаларында манифестациялар булып үтте, тип дауам итә радиостанция. Уларҙың маҡсаты ла бер: славяндар күпселекте тәшкил иткән ҡалаларҙан кавказдарҙы һәм Урта Азиянан килгәндәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарырға. Был экстремизмдан нимәһе менән айырыла?

«Рәсәй – урыҫтар өсөн». «Левада-центр» мәғлүмәттәре буйынса, респонденттарҙың 58 проценты был лозунгыны хуплай, ә 56-һы, Рәсәйҙе милли ерлектә ҡанлы бәрелештәр көтә, тигән фекерҙә. Миграцияны сикләргә кәрәк, тигән ҡараш торған һайын нығына. «Рәсәй халҡының күпселеген тәшкил иткән урыҫтарға, – тип яҙҙы ошо хаҡта «Газета.ру». – үҙҙәренең империяса бөйөклөгө менән хоҡуҡһыҙлыҡ һәм фәҡирлек сигендә һуғылыуҙан арынып, аңын таҙартыу зарур. Үкенескә ҡаршы, улар батша заманында ла, Советтар осоронда ла милли аҙсылыҡтарҙан өҫтөнлөгөн, Рәсәйҙең икһеҙ-сикһеҙ киңлегендә «бөйөклөгө»н тойоп йәшәне. Ә бына «икмәк серетеүселәр»ҙе улар ирекка ебәрергә теләмәй, Рәсәйҙең, тарҡалып, ус аяһындай ғына ҡалыуынан ҡурҡа».

АҠШ политологы Збигнев Бжезинский был тәңгәлдә тағы ла конкретыраҡ. «Әгәр ҙә урыҫтар башына ла килтермәгән бәхетһеҙлек ғәмәлгә ашһа, дәүләтте киҫәктәргә бүлгеләһәләр, мең йыллыҡ тарихы менән таланған һәм алданған халыҡ япа-яңғыҙ ҡалып, ҡасандыр «туған» булған халыҡтар үҙ мөлкәтен тейәп, «милли кәмәләр»ҙә бата башлаған караптан ҡасһа, беҙгә барыр урын ҡалмаясаҡ, – тип яҙа ул «Бөйөк шахмат таҡтаһы» тигән хеҙмәтендә, билдәле шәхестең фекерен һүҙмә-һүҙ килтереп. – Урыҫ империяһын сәйәси, иҡтисади һәм рухи яҡтан кәүҙәләндергән Урыҫ дәүләтселеге яңынан тергеҙеләсәк. Ул мең йыллыҡ батшалыҡ тарихы һәм көҙ асып йомған арала үткән 70 йыллыҡ Совет тарихының иң яҡшы өлөштәрен үҙ эсенә аласаҡ».

Манеж ваҡиғаларына илдең күренекле шәхестәре лә үҙ фекерен белдерҙе. Мәскәү дәүләт университеты профессоры, Сәйәси фәндәрҙең халыҡ-ара ассоциацияһы вице-президенты Елена Шестопал, мәҫәлән, «был протест кәйефтәренең оҙаҡ йылдар баҫылып килеүенә ризаһыҙлыҡты, илдә милли сәйәсәттең дөрөҫ алып барылмауын күрһәтте» тип иҫәпләй. Рәсәйҙең Ислам комитеты рәйесе Гейдар Джемал, был – фәҡирлеккә дусар ителгән күпселек ауазы, тиһә, «Яблоко» фирҡәһе лидеры Сергей Митрохин иһә, полиция был хаҡта белә тороп та сара күрмәгән, сөнки нацистарға теләктәшлек белдерә, тигән фекерҙә. Режиссер Павел Бардинса, социаль эшмәкәрлек, мәҫәлән, эшһеҙлек, милли һәм миграция сәйәсәте етди алып барылһа, бындай хәл килеп сыҡмаҫ ине.

Закон күҙлегенән баһаны Конституцион суд рәйесе Валерий Зорькин бирҙе. Уныңса, милләтселекте еңеп сығыу өсөн илдә хоҡуҡи нигеҙ етерлек. Совет интернационализмы шарттарында тәрбиләнгән юристы был ваҡиға ғәжәпкә ҡалдырған. «Беҙгә, – ти ул, – законлылыҡтың ҡәтғи режимын урынлаштырыу зарур». Ә кем ҡаршы һуң? Тик ни рәүешле? Был һорауға, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, баш юрист яуап бирмәй. Ғөмүмән, ошондай сетерекле урындарҙы урап үтергә тырышыу аҙым һайын осрай. «Закон алдында барыһы ла: олигарх та, студент та, ябай журналист та, эшсе лә тиң. Кемдәрҙер өҫтөнлөктән файҙалана икән, ысынлап та йәмғиәттә тарҡалыу күренештәре башлана. Программаның күпселеге тәрбиә менән бәйле булырға тейеш», – тигән һығымта яһай Конституцион суд башлығы. Ысынлап та, Вашими устами да мед пить…

Үрҙә килтерелгән социологик мәғлүмәттәр Ватан йәмәғәтселегенең йөкмәткеһен асып еткермәй. Беҙ ниндәй йәмғиәттә йәшәгәнебеҙҙе белмәйбеҙ. Ысынлап та, үҙ өйөндә ниҙәр булып ятҡанын күршеңдән һораш, тип тиккә әйтмәйҙәр икән. 2011 йылдың 15 февралендә Интернет селтәрендә Украинаның

УНИАН баҫмаһының «Крах русского мира: кризис, гниение, распад» тигән күләмле аналитик мәҡәләһен уҡыһаң, сәстәр үрә торорлоҡ. «Яҡын арала был бик ҙур илдең юҡҡа сығыуы ихтимал. Системаның тағы ла биш йыл йәшәй ала-сағы ышандырмай, – тиелә баҫмала. – Бжезинскийҙың мәғлүмәте буйынса, Рәсәй 2012 йылда тарҡаласаҡ. Рәсәй Фәндәр академияһының Социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр институты мәғлүмәттәре буйынса, илдә 4 миллион асарбаҡ, 3 миллион фәҡир, 5 миллион ҡараусыһыҙ бала күренә. Вокзалдарҙа фәхишәлек итеүсе 3 миллион ҡатын-ҡыҙ милицияла иҫәптә тора, яҡынса 1,5 миллионы сит илдәрҙә ошондай кәсеп менән аҡса таба». Тағы ла 6 миллион психик ауырыу бар, дауаханаларҙа урын булмағанлыҡтан, улар урамдарҙа Ленин, Сталин, хатта Гитлер булып спектакль ҡуйып йөрөй. 5 миллион – наркоман, 6 миллион – СПИД йоҡторғандар. Ә күпме кеше табиптар тарафынан асыҡланмаған сир таратып йөрөй – билдәһеҙ. Балалар фонды директоры Алихановҡа һылтанып, етем балалар иҫәбе Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағынан (678 мең) да артып китте, тип хәбәр итә УНИАН. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, «Бөйөк Рәсәй»ҙә алкоголиктар 37 – 42 миллионға етә. Йән башына 14 литр саф спирт ҡулланыу «урыҫ донъяһы авангарды»н Ер шарында лидер яһай. Илдә 20 миллион мосолман йәшәп, уларҙың эскелеккә аҙыраҡ дусар ителеүен иҫәпкә алғанда, саф спирт ҡулланыу 14 литрҙа ғына тормай.

Йыл һайын 3 миллион кеше енәйәт ҡыла, 80 меңгә яҡын кеше үлтереү осрағы теркәлә. 700 мең урынға иҫәпләнгән колонияларҙа 1 миллиондан ашыу тотҡон көн күрә. Хатта 30-сы йылдарҙа ла улар 200 меңгә кәмерәк булған. 100 мең кешегә тотҡондар иҫәбе буйынса ил донъяла беренсе – 800 – 810 кеше. Юл фажиғәләренә йыл һайын 200 мең кеше эләгеп, 30 меңе һәләк була. Афғанстанда ун йыл тороу ҙа ул тиклем үлемгә килтермәне. Рәсәйҙәр уртаса 64,8 йыл ғүмер кисерә. АҠШ-та был күрһәткес – 75, Ҡытайҙа – 71,3. Белоруссия менән сағыштырғанда, балалар ике тапҡыр күберәк үлә. Йылына 10 мең аборт яһала. 7 миллион ғаилә бала тәрбиәләмәй генә йәшәй.

XIX быуатта Украина, Польша, Балтик буйы илдәре, Белоруссия, Финляндия, Урта Азия Рәсәй империяһына ингәндә губерналар 69 булһа, бөгөн улар – 86. Халҡы ике тапҡырға күберәк Ҡушма Штаттарҙа ла 52 штат иҫәпләнә. Иң ҙур чиновниктар армияһы Рәсәйҙә – 1,1 миллион кеше Сталин заманында ла улар ярты миллион самаһы ғына булған. Генераль штаб офицерҙары Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы күберәк. 1991 йылдан хәрби көстәр биш тапҡыр ҡыҫҡарыуға ҡарамаҫтан, тыны ҡыҫылып, быуындары саҡ ҡуҙғалған, ҡорһаҡлы «ил һаҡсылары» вазифа биләүен дауам итә.

Тормош сифаты буйынса Рәсәй нефте лә, газы ла булмаған белорустарҙан (56) түбәнерәк урын биләй – 60-сы. Миллиардерҙар иҫәбе буйынса ул – етенсе урында. Путиндың олигархтары донъяла иң түбән – 13 процент һалым түләй. Францияла байҙар ҡаҙнаға шәхси килеменең – 57, Данияла – 61, Италияла 66 процентын ысҡындыра. Ил байлығының яртыһы – йәмғиәттең 1,5 проценты ҡулында.

Күмер сығарыу буйынса Рәсәй – 1957, йөк автомобилдәре етештереүҙә – 1937, иген комбайндары буйынса – 1933, тракторҙар эшләп сығарыуҙа – 1931, вагон һәм туҡыма етештереүҙә – 1910, аяҡ кейемдәре буйынса 1900 йылғы тулайым күрһәткестәргә тиңләште. Йән башына иҫәпләгәндә, банкта эшләүселәр иҫәбе буйынса уға бер ил дә етә алмай. Бөтә донъя банкы мәғлүмәттәре буйынса, 173 ил араһында коррупция буйынса Рәсәй – 96-сы урында. 10 баллы шкала менән иҫәпләгәндә, дәүләт идараһы һөҙөмтәлелеге – 3,8, законлылыҡ йәһәтенән 1,9

тәшкил итә. Был күрһәткестәр буйынса ил Африка дәүләттәре менән генә ярыша, сөнки етәкселек тулыһынса булдыҡһыҙҙар ҡулында.

Һуңғы 20 йылда 23 мең ауыл юҡҡа сыҡҡан, – тип дауам итә баҫма. – Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҡалаларҙа халыҡ, киреһенсә, дәррәү арта, һәм был бер заман транспорт, электр энергияһы менән тәьмин итеү, экология буйынса ҙур ҡазаларға килтереүе ихтимал. Ҡалалар буйвол, кенгуру ите менән хушланырға мәжбүр, сөнки ауыл хужалығы ил халҡын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итергә һәләтһеҙ. Йәштәрҙең 90 проценты эшләргә әҙер түгел, ә ауылдарҙа эскелек «сәскә ата». Рәсәйҙең ҡолауы теләһә ҡайһы мәлдә башланыуы ихтимал.

Бындай ҡот оСҡос статистика өсөн, әгәр ул ялған булһа, Рәсәй властары баҫманы судҡа бирергә тейеш ине. Ләкин был мәғлүмәттәрҙе кире ҡағырға баҙнат итеүсе күренмәй.

Карнеги фондының Мәскәүҙәге вәкиле Лилия Шевцованың 2010 йылдың 3 декабрендә «Новая газета»ла донъя күргән «Деградация» тигән аналитик мәҡәләһе был мәғлүмәттәргә бер ни тиклем аңлатма бирә кеүек. «Тотороҡлолоҡ күрһәткесе итеп урамдарға сығыусыларҙы алһаҡ, беҙҙә Италия менән Францияның тынысыраҡ, – ти автор. – Тимәк, властың 2011 – 2012 йылдарҙа үҙен һаҡлап ҡалырға мөмкинлеге бар. Был түбәндәге бер нисә факторҙан да күренә. Мәҫәлән, властар Көнбайыш менән ниндәйҙер дәрәжәлә уртаҡ тел тапты кеүек. Рәсәйҙе үҙгәртеп булмай, тинеләр океан аръяғында, ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, Кремль менән хеҙмәттәшлек итергә кәрәк». Шул уҡ ваҡытта Көнбайыш даирәләрендә ныҡлы яҡлау тапҡан либерализм Рәсәйҙә инҡар ителгән кеүек тойолоуға ҡарамаҫтан, ғәмәлдә хөкүмәт тап ошо мәнфәғәттән сығып эш итә. Унда тап шул сәйәсәтте кәүҙәләндергән чиновниктар эшләй. Улар йәмғәтселекте, ил ҡырҡа үҙгәрештәргә әҙер түгел, аҡрынлап эш итергә кәрәк, тип ышандырырға маташа, ләкин ғәмәлдә бер ни ҙә үҙгәрмәй. Бүреләр ҙә туҡ, һарыҡтар ҙа иҫән кеүек тойолған был сәйәсәт Көнбайыш алдында либерализм идеяларына тоғролоҡто һаҡлауҙы күрһәтергә, ә ил эсендә йәмғиәтте Көнбайыштан айырыу өсөн милли державасылыҡ курсын үткәрергә мөмкинлек бирә. Ошондай гибрид-режим либералләштереүҙең төрлө ынтылыштарын юҡ итә лә инде.

Хәҙерге дәүләт идараһының төрлөсә күҙ буяуы оппозицияның эш итеү даирәһен юҡҡа сығара. Хатта В. Путин да үҙгәрештәр яҡлы икәнлеген белдереүҙән тартынмай. Медведев иһә модернизация тураһында тылҡыуҙан эшкә күсергә ашыҡмай, тимәк, яңырыу процесын тотҡарлай. (Шул да ғәжәпләндерә: сәйәсмәндәрҙең күбеһе башлыса ошо ике шәхес тураһында ғына һүҙ йөрөтөп, ғәмәлдә һайлаусыларҙы ла шуға әҙерләй, тимәк, В. Путин менән Д. Медведев мәнфәғәттәрен хәстәрләйме икән?)

Хакимлыҡ итеүсе элита илдә «Горбачев синдромы» ҡабатланыуҙан ҡурҡа. Путиндың власть биләүҙән арыуын белә тороп, уға таянырға теләй. Һыналған кеше бит, тип дауам итә автор. Ләкин «процесс китте», Рәсәй бөгөн СССР яҙмышын ҡабатлауға яҡын тора, сөнки Путин ҡоршаған «власть вертикале» чиновниктан эш түгел, һис һүҙһеҙ буйһоноуҙы ғына талап итә. Кущевская станицаһы – власть тарҡалыуҙың бер кәүҙәләнеше. Ҡасандыр дәүләт эсендә төрлө проблемаларҙы хәл иткән ҡорал – коррупция хәҙер дәүләттең тотороҡлолоғон ҡаҡшата. Күҙ буяу сәйәсәте лә үҙен күрһәтә: парламент эшмәкәрлеге граждандарҙы ышандырмай. Мәҫәлән, Дәүләт Думаһына ышаныс белдереүселәр 24 процент булһа, Федерация Советына ышаныс 20 проценттан артмай. Ә бөтөнләй ышанмағандар – ярашлы рәүештә 17 һәм 13 процент.

Ике йөҙлө сәйәсәт кешеләрҙең асыуын ҡабарта. Хәҙер элита ла, беҙҙә

демократия бар: партиялар халыҡ тураһында хәстәрлек күрә, суд бойондороҡһоҙ, хөкүмәт тә көн-төн йәмғиәт өсөн бил бөгә, тип ышандырырға ашыҡмай. Халыҡ мәнфәғәтен бөтөнләй инҡар итеү – Ватан идара итеү системаһының тарҡалыуын күрһәткән дәлил. Система үҙенә ҡаршы китте. Коррупция менән ысынлап көрәшә башлаһаң, ултырған ботағыңа балта сабаһың; көрәштән баш тартһаң, үҙ-үҙеңде аҡрынлап юҡ итәһең. «Власть вертикале»нән баш тартыу – сәйәси үлемгә тиң. «Вертикаль»де дауам итеү – СССР яҙмышын ҡабатлау. Системаның киләсәге юҡ, уға реформа үткәреү мөмкин түгел. Бөгөн системаның ҡолауы Рәсәйҙең юҡҡа сығыуына килтермәйәсәге хаҡында уйларға кәрәк, тигән күңелһеҙ һығымта яһай Швецова.

2010 йылда Ярославль ҡалаһында үткән сәйәси форумда сығыш яһап, Дмитрий Медведев, мин Рәсәйҙә демократия юҡ, авторитар режим ғына бар, тигән фекер менән килешмәйем, тине. Һис шикһеҙ, Рәсәйҙә демократия бар, эйе, ул өлгөрөп етмәгән, тәжрибәһеҙ. Беҙ – юл башында һәм беҙгә эшләйһе бар әле. Беҙ ирекле.

Президенттың фекере шундай һәм ул, әлбиттә, ирекле. Теләгәйне – милициянан полиция яһаны, Кремль башлығының алты йылға һайланасағына өлгәште. Хатта коррупцияға ҡаршы көрәш асты. Ләкин асарбаҡ ирекләме икән? Йәки балаларын нисек туйҙырырға белмәгән ғаиләләр? Әлбиттә, дәүләт башлығы булараҡ, Дмитрий Медведев ҡапма-ҡаршы фекер әйтә алмай ине. Был уның үҙ-үҙен юҡҡа сығарыуға тиң. Әммә Кремль етәксеһенең фекерләүе ысынбарлыҡтан йыраҡ. Беҙ – юл башында, тимәк, демократияға инергә генә торабыҙ. Тәжрибәһеҙ, тимәк, бер көн дә йәшәп ҡарамаған.

Бәлки, граждандлыҡ тойғоһо баҙар шарттарында үҫкән йәш быуын араһында сағыуыраҡ балҡыйҙыр? Сөнки улар 1993 йылда ҡабул ителгән демократик Конституция рухында тәрбиә алды. Үкенескә ҡаршы, бында ла өмөттәр аҡланырлыҡ нигеҙ күренмәй. Генераль штаб мәғлүмәттәре буйынса, былтыр хәрби хеҙмәткә 271,02 мең үҫмер саҡырылырға тейеш ине. Улар араһында 10 –12 мең үҫмер енәйәт яуаплылығына тарттырылып та өлгөргән. Хәрби көстәрҙәге яманаты сыҡҡан «дедовщина»ны дауам итергә ошонан да әҙерлекле һалдаттарҙы ҡайҙан табаһың? Етмәһә, 100 меңләп егет хәрби хеҙмәткә барыуҙан баш тарта. Ундайҙар Башҡортостанда ла быйыл 2,3 меңгә етте. Ә 10 меңләп егет хәрби хеҙмәттән сит илдәрҙә ҡасып йөрөй. Федераль ҡаҙнала оборона сығымдары милитаристик дәүләт кимәленә еткерелгән мәлдә армияла ожмах тыуырға тейеш ине лә баһа! Ғәмәлдә унан үлем еҫе сыҡҡан ҡот осҡос хәбәрҙәр генә килә.

Экстремистик төркөмдәрҙе һәм уларҙың башлыҡтарын асыҡлау – махсус хеҙмәттәрҙең эше, ләкин милицияныҡы түгел, ти белгестәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙәге махсус хеҙмәттәр кеше хоҡуҡтары менән иҫәпләшеүҙе даулаған аҙ һанлы төркөмдәр менән алышыуҙан башҡаға һәләтһеҙ. Манеж ваҡиғаларынан һуң Интернетта Кавказ вәкилдәрен Киев вокзалы янында йыйылырға саҡырыу яңғырағас, унда көн уртаһына табан ОМОН тейәлгән ете «Урал» машинаһы, бер нисә тиҫтә милиция автобусы килеп туҡтаны, тип хәбәр итте «Новые Известия» гәзите. Һуңыраҡ уларға эске хеҙмәт һалдаттары тейәлгән 15 машина ла өҫтәлеп, славяндарға оҡшамаған кешеләрҙе тота башланылар. Кискә табан ҡулға алыныусылар иҫәбе меңгә яҡынлашты.

Ә бына славяндарҙы йыйылырға саҡырған Смоленская туҡталышына милиция килмәне...

## Әруахтар менән алышырға көс тә, аҡыл да кәрәкмәй

2011 йылдың апрелендә «Известия» гәзитендә, батша хөкүмәтенең XX быуат башындағы рәйесе Петр Столыпиндың тыуыуына 150 йыл тулыу айҡанлы, «Пророк модернизации» тигән интервью донъя күрҙе. Рәсәй Дәүләт архивы белгесе, тарих фәндәре докторы Александр Репниктың фекеренсә, совет тарих фәнендә кире баһаланған был шәхес «ғилемле, пассионар, намыҫлы кеше булған», имеш. Ләкин уның «йәмғиәттә яҡлау таба алмауы» йәмәғәтселекте ғәйепләү кеүек яңғырай. Ысынлап та, Столыпиндың, Көнбайыш өлгөһөнә эйәреп, крәҫтиән общинаһын бүлгеләргә ынтылыуы уңышһыҙлыҡҡа осраған, үҙен Киев ҡалаһында атып үлтергәндәр. Ә ул шәхестең XIX быуатта Петр I ике быуат элек башлаған үҙгәртеп ҡороуҙы дауам итергә, йәғни Рәсәйҙе Көнбайыш тормош рәүешенә күндерергә теләүен күптәр, моғайын, белеп еткермәйҙер. Ғәҙеллек өсөн шул заман кешеһенең фекеренә мөрәжәғәт итәйек.

«Рәсәйҙе һәм урыҫ халҡын ҡапма-ҡаршылыҡтар аша ғына һүрәтләргә мөмкин, – тип яҙа күренекле урыҫ философы Николай Бердяев «Истоки русского коммунизма» тигән хеҙмәтендә. – Унда дәүләткә хас ҡанһыҙлыҡ, анархистарса ирек һөйөү ҙә, милләтселәргә хас мин-минлек тә, киң күңеллелек тә, яфалар килтереү һәм йәлләү тойғоһо ла етерлек. Урыҫтар – Көнбайыш идеяларын өйрәнеүгә, һәм үҙенсә эшкәртеүгә һәләтле халыҡ, әммә үҙләштереүгә түгел. Ләкин урыҫ ерлегендә был тәғлимәт догматикаға әйләнә. Урыҫтар тарихи процестың сағыштырмасалығын, күп баҫҡыслылығын айырмай, улар абсолютлыҡҡа ынтыла». Күренеүенсә, Бердяев үҙе йәшәгән мөхитте яҡшы белгән.

Столыпин һуңлаған, ти Репник, һәм был уның һәләкәтенә килтергән. Бәлки, был кешенең хөкүмәт башлығы итеп тәғәйенләнеүе башта уҡ хата булыуы хаҡында һүҙ алып барырға кәрәктер? Эйе, һуңғы йылдарҙа ҡайһы берәүҙәр батша Рәсәйе шәхестәрен күккә күтәреп маҡтарға тотондо, хатта Граждандар һуғышы усағына утын өҫтәгән генералдарҙы ололаған кинолар ҙа ижад ителә. Әммә шуны ла танырға кәрәк: Столыпиндың урыҫ общинаһын бүлгеләү буйынса күргән саралары ғәмәлдә күптән түгел генә крепостной хоҡуҡтан ҡотолған крәҫтиәндәр тормошона тупаҫ ҡыҫылыу булып сыҡҡан. Кем әйтмешләй, игелек йоҙроҡло икән – унан ни файҙа?

Ә хәҙер ил тарихында Советтарҙан һуң яманаты сыҡҡан Сталин шәхесенә мөрәжәғәт итәйек. Петр I, Столыпиндар кеүек, «ҡаты ҡуллы»лығы менән тарихҡа ингән был шәхесте тәнҡитләү модаға инеп китте. 2009 йылда «Новая газета», Берләшкән социал-демократтар фирҡәһе «Яблоко» сталинизм өҫтөнән үҙенсәлекле Нюренберг процесы ойошторорға тәҡдим итә, тип хәбәр итте. Сөнки был хоҡуҡи-сәйәси акт Рәсәйҙең киләсәге өсөн мөһим. Улар фекеренсә, илдә ижтимағи-сәйәси хәл ҡатмарлы һәм артабан да насарайыуын дауам итә. Күрәләтә идара итеүҙең иң насар алымдары тергеҙелә, сәйәси үлтереүҙәр йышайҙы. Ғәмәлдә бер партиялылыҡ хөкөм һөргән, мәғлүмәт саралары бер ҡулда булған, бойондороҡһоҙ суд, киреһенсә, булмаған, һайлауҙарҙың йәшерен һәм ярышһыҙ үткән мәлдә кеше хоҡуҡтарын, конституцион принциптарҙы һаҡлау мөмкин түгел.

«Сталинизм һәм большевизмды хөкөм итеү Икенсе донъя һуғышынан һуң Германияла үткәрелгән денацификация (нацизмға ҡатнашы булған бөтә нәмәнән баш тартыу – **М.Х.**) кеүек булырға тейеш, – ти хөкөм инициаторҙары. – Бының өсөн 1917-1918 йылдарҙа большевиктарҙың власты баҫып алыуы, илгә террор ярҙамында идара итеүе, төп идеолог Сталиндың һ.б. эшмәкәрлеге кешелеккә ҡаршы енәйәт тип баһаланыуы мотлаҡ. Хәҙерге Рәсәй 1917 йылдың

октябренә тиклемге Рәсәй империяһының вариҫы икәнлеген нығытырға кәрәк, сөнки Рәсәйҙе Ойоштороу йыйылышын ҡыуып тараткан большевиктарҙы халыҡ һайламаған. Сталин режимы ҡулланған идара итеү системаһын тамырынан ҡоротоу буйынса киҫкен саралар күрергә, сәйәси золомдо аҡларға маташҡан граждандарҙың тәртибен Енәйәт кодексының тейешле статьяһы буйынса баһаларға. Совет террорын тарих дәрестәрендә ентекле өйрәнергә, уға ҡатнашы булған большевиктарҙың исемен йөрөткән ҡала һәм ауылдарға, урамдарға элекке исемдәрен ҡайтарырға. Сталин мираҫын бөтөрмәй тороп, илдең киләсәге юҡ», – ти «Яблоко» ағзалары.

Тәү ҡарашҡа, мөһим, әммә сетерекле тема. Уны ентекле ҡарап сығыу өсөн, моғайын, бер китапҡа торошло хеҙмәт яҙыу кәрәктер. Ләкин беҙ төп һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ: ғәйеп Сталинда ғынамы икән? «Один в поле – не воин» ти бит урыҫтар. Быйыл июнь урталарында «Аргументы и факты» аҙналығына интервьюһында Кеше хоҡуҡтарын һаҡлау буйынса Мәскәү-Хельсинки төркөмө етәксеһе Людмила Алексеева ла шундай ҡараш белдерҙе: «Сталин үҙе генә бер ни ҙә ҡыра алмаҫ ине». Сталинизм – ул урыҫ дәүләтенең уға тиклем дә күп быуаттар элек барлыҡҡа килгән ҡанһыҙ системаһы емеше. Был хаҡта XVII быуатта уҡ күренекле славян мәғрифәтсеһе, сәйәсмән һәм яҙыусы-публицист, Загреб, Болон һәм Рим университеттарында белем алған хорват Юрий Крижанич та яҙып ҡалдырған. «Батша – Аллаһыҙ итсе, «король» атамаһынан баш тартып, римдарҙың бер нигә ярамаған «царь» исемен алып, Иван дөрөҫ эш итмәй. Римдар һәм немецтарҙың ике башлы сәмреғошон дәүләт гербына әйләндереп, халҡына бик күп яфалар килтерә. Үҙ халҡы традицияларынан баш тартып, сит илдең тәртибен, телен көсләп тағыу – ил өсөн афәт ул»,– ти Крижанич. Был шәхес замандында антик һәм Көнбайыш Европа телдәрен өйрәнгән, философия, тарих, юриспруденция, математика һәм астрономия буйынса ла яҡшы белем алған. 1659 йылда ул Рәсәйгә килеп, батша Алексей Михайловичта хеҙмәт итә башлай, ләкин, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында, ике йылдан Тобольскиға һөргөнгә ебәрелә. Рустә ниндәй режим хөкөм һөрөүен аңлау өсөн хорват ғалимына ике йыл да етә. Идараның ҡанһыҙлығын ул биләмәләрҙең ҙурлығы, халыҡтың аҙ йәшәүе, эскелектең киң таралыуы менән аңлата.

Ошондайыраҡ фекерҙең яңы тарихта яралғаны ла бар. «Петрҙың эш алымдары большевиктарҙыҡы кеүек була. Ул иҫке Мәскәү Рәсәйен тамырынан юҡ итергә ынтыла, – тип яҙа Николай Бердяев. – Ленин менән Петрҙы сағыштырырға мөмкин: шул уҡ түңкәрелеш, тупаҫлыҡ, көс ҡулланыу, тәбиғи үҫеш юлын инҡар итеү, традицияларҙы кире ҡағыу, бюрократияны үрсетеү, самаһыҙ үҙәкләштереү, цивилизацияның төрөн ҡырҡа үҙгәртеү һ.б. Петрҙың Рәсәйҙе Көнбайыш юлына баҫтырырға маташыуы халыҡ менән идара итеүсе юғары синыф араһындағы бушлыҡты киңәйтә. Ундай хәл башҡаса бер илдә лә күҙәтелмәй. Петр заманында империя донъяла иң ҙурға әүерелеүгә ҡарамаҫтан, унда эске берҙәмлек булмай».

Күрәһең, империя башҡаса йәшәй алмай торғандыр.

«Сталинизм кешелек тарихында иң ҡот осҡос кешелекһеҙлек, гуманитар һәләкәт булып сыҡты», – тип яҙа «Ведомости» гәзитендә Кирилл Рогов. Тик автор «һәләкәт»тең сәбәптәре тураһында бөтөнләй уйланмай. Ләкин 2009 йылда, «Левада-центр»ҙың мәғлүмәттәре буйынса, граждандарҙың 49 проценты Сталин ил тормошонда ыңғай роль уйнаған, тигән ҡараштa торған. 33 проценты ғына кире фекер белдергән. Бәлки, Сталиндың илде индустриялаштырыуҙағы, һуғыштан һуңғы Рәсәй империяһын ҡайтанан тергеҙеүҙәге роле иҫәпкә алыналыр. Рустар өсөн, мәҫәлән, былар мөһим фактор бит. Автор шулай уҡ

немецтарҙың өстән бер өлөшөнөң нацизм тураһында ыңғай фекерҙә булыуын да әйтеп үтә. Ни өсөн? Был һорауға ла яуап юҡ. Сталин миллиондарса кешене үлтергән, ти Рогов. Ә Петрҙың мәйеттәр өҫтөнә ҡала төҙөтөп, уға «Санктъ-Петербург» тигән исем биреүен бер кем дә иҫкә алмай. Германиялағы денацификация мәҡәләлә урынһыҙ иҫкә алына, сөнки ул АҠШ хакимиәте тарафынан үткәрелгән, һәм беҙҙә ундай йоғонтоло көс юҡ. Сталинизм сәйәсәтенә килгәндә, батша Рәсәйе уны башҡорттарға ҡарата XVIII быуатта уҡ киң ҡулланған.

Сталинизмды кемдәр йәки ниндәй көстәр йәшәтә һуң? «Халыҡтар атаһы»ның вафатына ла 58 йыл тулып үтте. «Ведомости» баҫмаһының «Рәсәй – виртуаль мафиоз дәүләт» тип аталған мәҡәләһе был һорауға өлөшсә яуап ҡайтара. Бөйөк Британияның «Гардиан» гәзитенә АҠШ белгестәре тарафынан бирелгән документта шулай тип әйтелә, тип хәбәр итә гәзит. Ҡорал контрабандаһы, «аҡса йыуыу», шәхси байығыу, енәйәтсел әҙәмдәрҙең хөкөмгә тарттырылмауы, теге йәки был хеҙмәт өсөн аҡса талап итеү, капиталды күпләп сит илдәргә сығарыу… Ҡушма Штаттар дипломаттары Рәсәй ысынбарлығында асыҡлағандар бының менән генә сикләнмәй. Ришүәт әйләнеше йылына 300 миллиард долларға етә. Криминал менән хөкүмәт эшмәкәрлеген бер-береһенән айырып та булмай.

Документтарҙа урыҫ шпиондарының сит илдәргә ҡорал һатыуы, милиция һәм махсус хеҙмәттәрҙең аҡса өсөн енәйәтсел төркөмдәрҙе «ҡыйыҡ аҫты»на алыуы, улар араһында ришүәтселектең киң таралыуы, Испанияла урыҫ мафияһының тулы исемлеге асыҡланыуы, В. Путиндың юғары вазифала эшләгәндә бик күп аҡсаны үҙ иҫәбенә сит ил банкыларына күсереүе кеүек документтар бар. Испания прокуроры Хосе Гонсалес раҫлауынса, Рәсәйҙә дәүләт аппараты менән ойошҡан енәйәтселек араһындағы сик тойомланмай. Мәҫәлән, Курдистанға ҡорал һатыу, Иранға ПВО ракеталарын йәшерен оҙатыу буйынса меңдәрсә видеояҙма бар, ти прокурор. «Криминал әҙәмдәрҙе закон эҙәрлекләүенән йәшереү өсөн, – ти АҠШ илсеһе Джон Бейрл, – уларҙы сәйәсәткә (рәсми вазифаға урынлаштырып – **М.Х.**) йәлеп итәләр.

Ә йәмғәтселек был процестарҙы нисек күҙәтә? Миҫал килтереп үтәйек. 2011 йылдың мартында «Эхо Москвы» радиостанцияһы эфирында Матвей Ганапольскийҙың «Берҙәм Рәсәй» фирҡәһен тәнҡитләп яһаған сығышынан һуң Интернет төрлө аңлатма менән тулды. «Фаворитлыҡ, коррупция, тәрилкә тотоу Рәсәйҙә урыҫ халҡы йәшәй башлаған осорҙарҙан килә. «Аллаһы тарафынан һайлап алынған халыҡ» йәшәгәнгә тиклем һаҡланасаҡ ул. Был хөкүмәт башлығын ҡыуып ебәргән Англия түгел шул. Ошондай маҡсат менән урамға 200 – 300-ләп кенә кеше сыға. Ә ҡалғандары йә тәрилкә ялай, йә ишетмәһендәр өсөн ике-өс ҡат юрған ябынған килеш Путинды әрләп ята», – тип яҙа «Макнамара». «Шитник» исеме аҫтындағыһы тағы ла уҫалыраҡ: «Власть үренә әшәке, принципһыҙ, бур һәм имәнес әҙәмдәр генә үрләтелә. Тәрилкә тотоу – «Берҙәм Рәсәй»ҙең төп принцибы. Слиска тап шул арҡала депутатлыҡҡа эләкте».

Быныһы «Наутилус»тың фекере: «Шундай мәл килер: хәҙерге етәкселәрҙең портреттарын аяҡ аҫтына һалырҙар, ә уларҙың варисҭары үҙҙәренең сығышын йәшерергә тырышыр. Барыһы ла үҙ исеме менән аталып, тарихҡа инер. Тик ул саҡта Рәсәй тигән дәүләт булмаҫ, тип ҡурҡам. Тарих беҙҙең көсһөҙ, әхлаҡһыҙ йәмғиәтте йотасаҡ. Рәсәйҙе яҡларға тырышыусылар, моғайын, булмаҫ».

«Румбараш»тың да фекерҙәре иғтибарға лайыҡ. «Ә миңә, Матвей, был урыҫ ҡатыны оҡшай, – ти ул (Һүҙ «Берҙәм Рәсәй» фирҡәһе ағзаһы Лапшинаның Дәүләт Думаһына депутат булып үтеүе хаҡында бара – **М.Х.**). – Хатта уның ҡайҙан булыуы ла символик: Төньяҡ Кавказ йәки Татарстандан түгел. Ул киң урыҫ күңеленән сыҡҡан һүҙҙәрҙе эскерһеҙ әйткән. Ни эшләтәһең, 150 йыл буйы

крепостной хоҡуҡ эҙһеҙ үтмәгән. Ҡолдар тап шулай эш итә. Ә ни өсөн Төньяҡ Кавказ йәки Татарстан түгел? Уларҙа крепостной хоҡуҡ булмаған».

«Барин приехал». Федераль хөкүмәт рәйесе В. Путиндың телеэкрандар аша йыл һайын халыҡ һорауҙарына яуап биреүе айҡанлы, «Ведомости» шундай мәҡәлә яҙҙы. «Миллиондар уға «эсэмэска» ебәрҙе, меңдәр шылтыратырға тырышты. Милли лидерға бирелгән һорауҙарҙың күпселеге төбәк башлыҡтарына, тимер юлсыларға, медицина, спорт чиновниктарына, коммуналь хужалыҡ етәкселәренә һ.б. тәғәйенләнергә тейеш ине. Ләкин дәүләттә идара итеү механизмы тулыһынса «вертикал»ға көйләнгәс, улар Путинға бирелә. Элекке йылдарҙағы кеүек: «бына барин килер ҙә бөтәһен дә яйлар». Бындай фекерҙе ишетеүе ауыр, ләкин ул ғәҙел. Илгә идара итеү империя Рәсәйендәге, артабан Советтар осорондағы кеүек Мәскәү ҡулына күсеп бөткәс, урындарҙа бер кемдең дә яуаплылыҡ алғыһы килмәй.

Ғөмүмән, Рәсәйҙең икенсе президенты шәхесенә бәйле шаҡ ҡатырлыҡ комплимент та ысҡындырыла. Моғайын, билдәле маҡсат менән. Мәҫәлән, Йәмәғәт палатаһы ағзаһы Сергей Марков фекеренсә, «Путин шәхесе йәмәғәтселек өсөн дәүләт институттарынан да мөһимерәк». Ә Свердловск өлкәһенең элекке губернаторы Эдуард Россель иһә унан да уҙҙырған: «Ә мин ошо залда ултырғандарҙың барыһының да «Берҙәм Рәсәй» өсөн тауыш биреүен теләйем. Сөнки беҙ Владимир Владимировичҡа уның беҙгә кәрәклеген иҫбат итә алһаҡ, ул ҡайтасаҡ». (Әйткәндәй, Росселгә барыбер вазифаһын ҡалдырырға тура килде.) «Рәсәй милли лидер яғынан отто, – тине Федерация Советының элекке рәйесе Сергей Миронов. – Президент курсын дауам итеү өсөн Владимир Путиндан да яҡшыраҡ кадр юҡ». КПСС-тың Татарстан өлкә комитеты пропаганда бүлегенең элекке мөдире, Дәүләт Думаһының алмаштырғыһыҙ депутаты Олег Морозовтың түбәнселеге иһә бер ҡалыпҡа ла һыймай: «Әгәр ҙә Путин ете йыл президент булмаһа, беҙ бында булмаҫ һәм әҙәбиәт тураһында фекер алышмаҫ, ни өсөн яҙыусылар араҡы эсә, тип һөйләшер инек». Шуныһы ғәжәп: ни өсөн элекке коммунист шәхси фекерен йәмғиәткә тағып маташты икән?

«Киләһе быуындарҙы тәрбиәләү хәл иткес дәрәжәлә мәғариф системаһын яңыртыу менән бәйләнгән, – тине Дмитрий Медведев 2011 йылға Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтендә. Президент хатта Бөйөк Британияның мәрхүм премьер-министры Уинстон Черчиллдең «мәктәп уҡытыусылары хөкүмәт башлығы хыял ғына итә алған властан файҙалана» тигән һүҙҙәрен дә килтерҙе. Ләкин Британия демократияһы менән Британия мәғарифын Рәсәйҙеке менән сағыштырыу ул сысҡан менән филде бергә ҡуйып, улар типә-тиң тип әйтергә теләүҙе хәтерләтмәйме? Кремль фекеренсә, «яңы мәктәп проектын да уҡытыусылар менән ата-әсәләр эшләргә бурыслы» ине. Әммә уның авторҙары иҡтисади үҫеш министры, яҡташыбыҙ Э. Нәбиуллина менән уның йәмәғәте, Юғары иҡтисад мәктәбе директоры Я. Кузьминов икәнлеген быйыл май сығарылышында «Совершенно секретно» баҫмаһы хәбәр итте. Улар, күрәһең, халыҡты «мәшәҡәтләп» тороуҙы артыҡҡа һанаған.

Бәлки, буласаҡ граждандар мәктәптәрҙә үҫәлер? «Мәктәптә граждандар тәрбиәләү мәсьәләһенә хатта 1913 йыл менән сағыштырғанда ла иғтибар аҙыраҡ бүленә. Петр I заманында ла Ватанға файҙа килтергән граждандар тәрбиәләгәндәр». – Мәғариф стандартын эшләүселәрҙең был фекерен быйыл «Коммерсант» гәзите үҙ уҡыусыһы иғтибарына еткерҙе. Император Рәсәйе менән хәҙерге баҙар Рәсәйе алдында торған проблемалар менән, күрәһең, стандарт авторҙары иҫәпләшмәй. Ә бит яңы стандарттарға ҡаршы сыҡҡан ғалимдар Кремлгә генә түгел, федераль хөкүмәткә, Дәүләт Думаһына мөрәжәғәт итеп ҡараған. Рус теле,

тарих, математика уҡытыуҙы базис программаһынан төшөрөп ҡалдырыу дөрөҫ түгел, ти улар. Аңлашыла, ул былай ҙа үткер булған «ата һәм улдар» проблемаһын тағы ла көсәйтәсәк, сөнки «яңы ҡараш» менән элеккеһе мәктәп араһында яһалма кәртә барлыҡҡа килтерә. Нисек инде, ти ғалимдар, мәктәпте дәүләт теленән, үҙе тағы ла бер «тел» булған математиканан тыш күҙ алдына килтерергә мөмкин?

Проекттағы яңылыҡтар ысынлап та «Америка аса». Мотлаҡ предметтар араһында «Россия в мире», физкультура, «Основы безопасности жизнедеятельности» һәм һәр уҡыусы үҙе һайлап ала торған шәхси проект бар. Бынан тыш, уҡыусы өҫтәмә рәүештә алты-ете предметты, мәҫәлән, рус теле һәм әҙәбиәтен, сит тел, математика һәм информатика, тәбиғи фәндәрҙе һайлап уҡый ала. Бының менән дәүләт һәр уҡыусыға мөмкинлек бирә, уҡытыусыларға ике йәки бер нисә мәктәптә эшләүҙе тыймай кеүек. Ғәмәлдә, мәрхүм Виктор Черномырдин әйтмешләй, «хотели, как лучше, получилось, как всегда» килеп сыҡмаҫмы?

«Основы безопасности жизнедеятельности» предметын өйрәнеү кәрәктер ҙә, ти «Коммерсантъ». Айырыуса террор менән бәйле һуңғы ваҡиғаларҙан һуң. Һәр кем үҙен-үҙе яҡлай алһа, эске эштәр министрлығы, прокуратура, именлек хеҙмәте, ахыр сиктә граждандар институттары һ.б. нимәгә кәрәк? Ә бына «Россия в мире» тип аталған предмет менән проект авторҙары үтә ныҡ тырышлыҡ күрһәткән, сөнки уның нигеҙҙәрен тарих, география, йәмғиәтте өйрәнеү дәрестәре лә етерлек бирә. Күрәһең, кемдәрҙер реформаға шәхси өлөшөн шул рәүешле индерергә тырышҡан. Әлбиттә, бушлай түгел. Ләкин, социаль хәленә ҡарап, уҡыусыларҙың һәр береһе уны үҙенсә ҡабул итәсәк. Фәҡир ғүмер сиккән балалар өсөн, мәҫәлән, уның кәрәге шик тыуҙыра.

Дәүләт Думаһы депутаты, коммунист Олег Смолин фекеренсә, әфәнделәр «Тыуған ил» менән «дәүләт органдары» төшөнсәләрен бутай һәм хөкүмәткә ихтирам менән ҡарауҙы талап итә. Хәйер, «Рухи һәм әхлаҡи үҫеш концепцияһы» тигән документ быны йәшермәй. «Тәрбиә» граждандар һәм ижтимағи ойошмалар яғынан дәүләт институттарына ҡарата ышаныстың артыуына булышлыҡ итергә бурыслы», – тиелә унда. «Бында ла төшөнсәләр урындарын алмаштырған, ышанысты арттырыу – дәүләт институттарының бурысы», – ти коммунист-депутат.

Педагогтар үҙҙәре гражданлыҡты дөрөҫ аңлаймы? 2009 йылда «Независимая газета»ла донъя күргән «Гражданское счастье» тип аталған бер битлек мәҡәләнең авторы, педагогия фәндәре докторы, Рәсәй мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы Ольга Заславская, Макаренкоға һылтанып, гражданин булыу – ул йәшәү бәхетен үҙ-үҙеңдә тойоу, шәхси бәхеткә ынтылышты тәьмин итеү, тигән фекер үткәрә. Беҙ бәхетле кешеләр тәрбиәләргә бурыслы һ.б. Үкенескә ҡаршы, мәҡәлә бер ниндәй ҙә проблема ҡуймай, булғандарының хәл итеүлеү юлдарын күрһәтмәй. Унан ниндәй ҙә булһа һығымта сығарыуы ҡыйын, сөнки авторҙың гражданлыҡ тураһында белеме самалы икәнлеге күҙгә бәрелеп тора. Шул уҡ Макаренкоса, йәмғиәттә бәхетле булыу өсөн шарттар самалы йәки бөтөнләй юҡ икән, уға өлгәшеү мөмкинме һуң? Һүҙ бит бәлиғ булғандар түгел, ә мәктәп йәшендәгеләр хаҡында бара.

Мәғариф реформаһы, тармаҡ закондарының сифаты менән ҡәнәғәт булмағандар педагогтар араһында ла күп. Тармаҡ закондарының сифатына дәғүә белдереүселәр ҙә күренгеләй. «Ватан мәғарифы торғонлоҡ ҡына түгел, тарҡалыу кисерә, – ти Рәсәй Мәғариф академияһының мөхбир ағзаһы Александр Абрамов. – Йәмәғәтселектең ҡырҡа ҡаршылығына ҡарамаҫтан, «мәғарифты яңыртыу»ға ышыҡланып күп кенә закондар ҡабул ителде». Шулай итеп,

кемдәрҙер «эш күрһәтте», был «эшмәкәрлек»тең йәмғиәткә зыян килтереүе менән иҫәпләшеүсе генә булманы. «Ғөмүмән, – ти ғалим, – беҙгә закондарҙың һәр юлына түгел, ә төп принциптарына ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙе белдерергә кәрәк. Мәғариф – үтә мөһим тармаҡ, уны сәйәсмәндәр менән юристарға ҡайтарып ҡалдырыу – оло хата».

Яңы ғына диплом алып сыҡҡан уҡытыусы күҙлегенән мәктәп тормошо нисегерәк күренә? Ошо хаҡта 2011 йылдың 10 февралендә «Комсомольская правда» гәзитендә «Дневник уфимской учительницы» тигән ғибрәтле мәҡәлә донъя күрҙе. «Дәрескә мин юҡҡа әҙерләнеп барғанмын икән, – тип яҙа көндәлек авторы. – Уҡыусылар күберәк мине күҙәтеү менән мауыҡты. Артҡы партала ултырған зәңгәр күҙле Саша көтмәгәндә: «Ә һеҙ кейәүҙәме? Юҡ? Ә сығырға әҙерһегеҙме? Мәҫәлән, миңә?» – тип шаҡ ҡатырҙы. Ә ҡыңғырау шылтырағас, яныма 8-се класс етәксеһе килде лә, яурыныма дуҫтарса һуғып: «Һине ҡоҙалайҙар, тип ишеттем», – тип һушты алды…»

Артабан уҡыйыҡ. «7-се «б» класында ултырғысында бәүелеп ултырған Пастухов:

– Ысынлапмы, Шурик һеҙгә өйләнергә тәҡдим яһанымы?– тип һораны.

– Юҡ, әлбиттә, – тинем мин, уйлап та тормайынса…»

«Икеле» ҡуйыуҙан файҙа юҡ, – тип дауам итә автор. – Унан уҡыусылар ҡурҡмай ҙа, сөнки ахырҙа мин насар уҡытыусы булып сығам. Балаларҙың бер өлөшө мәктәптә иҫәптә тора, милицияла теркәлгәндәре лә бар.

8-се «а» класында таҡта сепрәген мөйөштән мөйөшкә бәреп, мине тамам сығырҙан сығарҙылар. Спорт залына саҡлы йүгерҙем. Физкультура уҡытыусыһы араҡы ҡойоп бирҙе:

– Эс!

– Юҡ, эсмәйем.

– Эс, тим бит!

Күҙемде йомоп, эсемлекте йоттом. Күҙ йәштәре үҙен-үҙе туҡтаны. Ләкин мин ҡабат дәрескә барманым».

Көндәлек авторы коллегалары – уҡытыусыларға ла бер аҙ баһа биреп үткән. Насар баһа. Ул да күңелһеҙ һығымталарға этәрә. «Әсәйем, минең эш хаҡымды белгәндән һуң: «Өйҙә ултырыуың яҡшыраҡ булыр» – тине. 18 сәғәтлек эш аҙнаһы өсөн 4200 һум, йәш белгес булараҡ – 15 процент өҫтәмә һәм дәфтәр тикшергән өсөн дә – шул саҡлы. Йәш уҡытыусының айлыҡ эш хаҡы – 5- 6 мең һумдан артмай.

Өс айҙан һуң минең педагогик эшмәкәрлек тамам булды, – тип йомғаҡлай йәш белгес. – Миңә «аҡыл, игелек һәм мәңгелек сәсеү» кәрәк түгеллеген аңлау өсөн шул да етте».

«Балаларҙы тәрбиәләү – мәғарифтың ғына түгел, тотош мәҙәниәттең бурысы» тип инде нисә йыл тәҡрарлай Кремль. Тимәк, унда ысынбарлыҡты белмәйҙәр, бәлки, уның менән иҫәпләшергә теләмәйҙәрҙер. Ни тиһәң дә, икеһе ике донъяла йәшәй бит. Әммә шуныһы ла бәхәсһеҙ: фәҡир һәм түбәнһетелгән мәҙәниәт үҙе кеүектәрҙе генә тәрибәләй ала. Был – аксиома. Кремлсә, мәҙәниәтле йәмғиәт тәрбиәләү өсөн грант системаһы ла ярап бөткән. Грант – Көнбайыш ҡаҙанышы, ул эш хаҡын яҡшы алған белгестәрҙә өҫтәмә стимул булараҡ ҡыҙыҡһыныу уята. Рәсәйҙәге ише финанс проблемаһын хәл итеү өсөн түгел.

Һәр ваҡыттағыса, Дмитрий Медведев йәштәргә патриотик тәрбиә биреү мәсьәләһенә лә ҙур иғтибар бүлергә кәрәклеген иҫкәртте. Ләкин ас кешегә сағыу буяуҙар менән төшөрөлгән ҡурылған тауыҡ йәки итле аш, боҫорап торған былау күрһәтеп, «былар иҫ киткес тәмле» тиеү менән генә уның тамағы туймай.

«Беҙгә дәүләт идараһы һәм хеҙмәттәр күрһәтеүҙә яңы стандарттар кәрәк, – тине артабан Рәсәй Президенты, – суд һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарының сифатлы эшенә, граждандарҙың тыуған ҡалаһы һәм ауылы тормошонда ҡатнашыуына, уларға йоғонто яһай алыуына өлгәшергә кәрәк. Чиновниктарҙың эше дәүләт абруйын төшөрөүгә юл ҡуймаҫҡа тейеш».

Билдәле хәҡиҡәт, һәр хәлдә Советтар хакимиәте лә шул хаҡта тылҡый ине бит.

## Бер сиктән – икенсеһенә

Йәмғәтселектең күпмелер өлөшө дингә мөкиббән китеп инанған, хатта дәүләт башлыҡтары сиркәү юлын йыш тапаған – тимәк, граждандарға өлгө күрһәткән мәлдә атеистарға ни эшләргә? Улар мәнфәғәтен бөгөн бер институт та яҡламай бит. Был бер сиктән икенсеһенә һуғылыу түгелме? Ошо хаҡта 2009 йылда «Литературная газета»ла донъя күргән «Уголовным правом – по атеизму» тигән мәҡәлә ысынлап та тәрән уйға һала. Индустриаль-иҡтисади колледж студенттарының ғаризаһы буйынса Хабаровск ҡалаһы прокуратураһы философия уҡытыусыһы Владислав Радченкоға ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатҡан, тип асыҡлыҡ индерә баҫма. Йәнәһе, ул, вазифаһынан файҙаланып, дингә ышаныусыларҙың конституцион хоҡуғын боҙған. Һүҙ – философтың дингә ышанған студенттарҙың үҙ фәне буйынса зачет йәки имтиханды бирә аласағына шик белдергәне өсөн ғәйепләнеүе тураһында. Ил властарының сиркәүгә ҡарата сәйәсәте эҙмәэҙлекле һәм конституцион түгел. Шул арҡала дингә ышаныусылар менән атеистар араһында йыш ҡына конфликттар килеп сыға. Рәсәй Конституцияһында нығытылған донъяуи принцип (14-се статья) менән дингә ышаныусыларҙың хоҡуҡтары араһында айырманы беҙ һаман бер нисек тә билдәләй алмайбыҙ, тип дауам итә гәзит. Дингә күберәк әһәмиәт биреп, дәүләт атеистарҙың да хоҡуғы барлығын бөтөнләй онотто.

Донъя тарихында атеизм мәғрифәтле аңдың теизмға, йәғни бөтәһен дә Аллаһы Тәғәлә исеме менән бәйләгән тәғлимәткә ҡаршы сығыуы ғына ижтимағи аңдың үҫешенә килтерә. Тап шул арҡала күпселек илдәрҙә дин дәүләттән айырылған. Хәҙерге шарттарҙа православие сиркәүенең, дәүләт институттары ярҙамынан файҙаланып, йәмғиәткә йоғонтоһон көсәйтергә ынтылыуы дингә ышанмаған граждандарҙа ҡаршылыҡ уята. Мәҫәлән, тап шул арҡала 2008 йылда Италияның атеист студенттары Ватикандың университеттарҙа дини йоғонтоно көсәйтергә ынтылыуына ҡаршы протест белдереп сығыш яһаны. Лондонда ла автобустарҙа дини реклама урынлаштырыуға ҡаршы булып, ҡапма-ҡаршы йөкмәткеле реклама ҡуйыу тәҡдиме менән сығыш яһаған бер төркөм граждандарҙың бер тәүлектә ошо маҡсат өсөн 47 мең фунт-стерлинг йыйыуы инициативаның популярлығы хаҡында һөйләй. Хәйер, быға ғәжәпләнергә лә урын юҡ. Инглиздәр – борон-борондан азат фекер йөрөтөргә өйрәнгән халыҡ. Уларҙың XVII быуатта уҡ 8 сәғәтлек эш көнө урынлаштырыу буйынса хәрәкәте, АҠШ, Канада, Яңы Зеландия, Австралия кеүек британдар демократияһына таянған илдәрҙең үҫеше лә бәхәскә урын ҡалдырмай.

2007 йылдың йәйендә Рәсәйҙең 10 академигы, православие сиркәүе әһелдәренең мәктәптәрҙә дин нигеҙҙәрен мәжбүри уҡытыуҙы индереү, теологияны ғилми белем иҫәбенә индереү буйынса башланғысына ҡаршы сығып, Рәсәй Президентына хат яҙҙы. Әммә яуап булманы, киреһенсә, Дәүләт Думаһы менән Йәмғәт палатаһының ҡайһы бер вәкилдәре ваҡытлы матбуғат аша хат авторҙарын тәнҡиткә дусар итте.

Был мәсьәлә буйынса, тип дауам итә «Литературная газета», ғалимдар яғында

ла хата бар кеүек, сөнки быҙай һорау менән туранан-тура ил башлығына мөрәжәғәт итмәйҙәр. Мәғариф министрлығы бар бит әле. Шул уҡ ваҡытта Президент та, Рәсәй Конституцияһы гаранты булараҡ, илдең донъяуи характерын һаҡлауҙа үҙ властын күрһәтергә бурыслы. Радченко яғында ла ғәйеп бар: уның студенттарҙан дини инаныуҙарҙан баш тартыуҙы талап итергә хоҡуғы юҡ. Ләкин атеист-уҡытыусы бер мәсьәләлә һис шикһеҙ хаҡлы: атеизм юҡ икән, тимәк, материализм да, фән дә, төрлө асыштар ҙа юҡ тигән һүҙ. Мәҫәлән, техника, көнкүреш кәрәк-яраҡтары үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәй. Кеҫә телефоны менән дин әһелдәре лә теләп файҙалана. Иң мөһиме, хәҙерге заманда дәүләт мәғарифы донъяуи характерҙа ғына була ала. Дәүләткә был йәһәттән үҙ линияһын ҡәтғи тотоу кәрәклеге бәхәсһеҙ.

Астың күҙе – икмәктә, туҡтың күҙе – хикмәттә, ти халыҡ. Күрәһең, байлыҡҡа сумған Мәскәүҙә, ундан да зиннәтлерәк Кремлдә донъя алһыу төҫтәрҙә күренәлер. Ике йыл элек Дмитрий Медведевтың «Взгляд» интернет-баҫмаһында донъя күргән «Россия, вперед!» тигән мөрәжәғәте быға теләмәһәң дә ышандыра. Сеймал менән сауҙа итеүгә нигеҙләнгән иҡтисадтан, хроник коррупциянан, дәүләткә һалышыуҙан (патернализм) тәүәккәл арынырға кәрәк, тигәндә, Кремль башлығы һис һүҙһеҙ хаҡлы. Артабан ул ни маҡсат менәндер барыбыҙға ла билдәле етешһеҙлектәрҙе берәмләп һанап сыҡты. «Беҙ кризистан барыһына ҡарағанда ла нығыраҡ зыян күрҙек, сөнки беҙҙә граждандар йәмғиәте көсһөҙ, ойошоу, үҙ-үҙеңә идара итә белеү етешмәй, – ти Медведев. Демократия институттары бар һәм тотороҡло эшләй, ләкин идеаль эшкә йыраҡ». Ни өсөн икәнен Президент әйтмәй, бәлки, теләмәйҙер. Төньяҡ Кавказдағы хәлдәрҙе иҫкә алып ул «беҙгә быуаттар буйы алға барырға ҡамасаулаған алама ғәҙәттәрҙән арынырға» кәрәклеген иҫкә төшөрҙө. «Рәсәйҙең демократик юлдан үҫергә мөмкинлеге барын иҫбатларға бурыслыбыҙ». Ниндәй ысулдар менән? Президент был һорауға ла яуап эҙләп ҡараманы шикелле. Әммә мөрәжәғәтенең аҙағында ул системаның асыҡлығына өлгәшәсәгенә ышандырырға онотманы. Ҡыйыу фекер, ләкин быуаттар буйына нығынған системаны бер кешенең емерә алыуы ышандырмай.

Мөрәжәғәткә дәлилле яуап көттөрмәне. «Новая газета»ла философия фәндәре докторы Игорь Чубайс («прихватизатор» Анатолий Чубайстың туғаны – **М.Х.**) «Куда идет Россия?» тигән күләмле мәҡәлә менән сығыш яһаны. Статьяның (Россия, вперед! – **М.Х.**) ни методологик, ни концептуаль нигеҙҙәре юҡ, унда тик ҡараштар ғына урын алған. Илдең үткәне тураһында Медведевтың насар фекерҙә булыуы дәүләт башлығын биҙәмәй, тип төрттөрә Чубайс. Рәсәйҙең быуаттар буйы артта ҡалыусы түгеллеген дәлилләгән мәғлүмәттәр ҙә килтерә. Һуңғы 80 йылда ил тәү тапҡыр индустриаль, хатта аграр дәүләт булыуҙан туҡтаны. Демографик проблема – дәүләт сәйәсәте һөҙөмтәһе. Капиталды күпләп сит илдәргә сығарыу һаулыҡ һаҡлауҙы көрсөккә терәтте. Артабан автор алкоголь, тәмәке тартыу менән бәйле проблемаларҙы атай. Наркоконтроль эшләй башлағандан бирле Рәсәйҙә наркомандар 5 – 7 тапҡырға артты,– ти ул.

Бюрократия ла урап үтелмәгән: режим үҙен граждандар өҫтөнә ауған каток кеүек тота, өҫтәл хужалары илгә түгел, үҙҙәренә хеҙмәт итә. Был йәһәттән күптән һүҙ бутҡаһы бешереүҙән арынып, проблеманы хәл итеүгә тотонорға ваҡыт. Хрущев үҙ заманында армияны 600 меңгә ҡыҫҡартыуға өлгәшкән. Ниндәйҙер ведомство үҙ бурыстарын үтәмәй икән, ул таратылырға тейеш.

«Ә ҡайҙа демократия, билдәлелек? 20 йыл буйы ниндәй ҡоролошта йәшәгәнебеҙҙе лә белмәйбеҙ, – тип дауам итә Чубайс. – Мәғариф министры фекеренсә, юғары мәктәптең 90 проценты вуздар кимәлендә эшләмәй. Гуманитар әҙерлек

ҡалманы. Рәсәй – социаль дәүләт түгел. Шуваловтың декларацияһында 360 миллион иҫәпләнә, тимәк, ул көн һайын 1 миллион «эшләй». Батурина (Мәскәү ҡалаһының элекке мэры Ю. Лужковтың ҡатыны – **М.Х.**) 2010 йылда 7 милиард һумға байыған. Был 50 мең уҡытыусының йыллыҡ эш хаҡы!

2010 йылдың 24 ноябрендә Рәсәй Президенты үҙенең видеоблогында сәйәсәттә торғонлоҡ күренештәренең барлыҡҡа килеүенә борсолоуын белдерҙе. «Намыҫлы көрәштә еңеп сығыу мөмкинлеге булмаһа, – тине ул, – ҡаршы көстәр маргиналлаша башлай». Медведевтың был тезисына яуап рәүешендә Дәүләт Думаһының элекке депутаты Владимир Рыжковтың түбәндәге фекере иғтибарға лайыҡ. «Иң юғары дәрәжәле чиновниктар яҡлауына таянған «Берҙәм Рәсәй» партияһы менән конкуренцияға ирешеү мөмкин түгел, – ти ул. – Мурманск өлкәһе губернаторы Евдокимовты власть фирҡәһен тәнҡитләгән һәм Мурманск ҡалаһы башлығы вазифаһына һайлауҙа «власть партияһы»на ҡаршы кандидатураны яҡлаған өсөн эшенән ҡыуҙылар. Хәҙерге Рәсәй хакимиәт башлыҡтарына төп талап итеп халыҡ хаҡында хәстәрлек күреү түгел, ә Кремлгә ярай белеү ҡуйыла. Шуға күрә «Берҙәм Рәсәй» күберәк тауыш йыя ла инде. Граждандар йәмғиәте яғынан демократик контроль булмай тороп, власть эшмәкәрлегенең үтә күренмәлелегенә, Конституция һәм закондарҙың ҡәтғи үтәлешенә өлгәшеү, байлыҡтың берәүҙәргә сикһеҙ, икенселәр фәҡир булыуына сик ҡуйыу, коррупцияны ауыҙлыҡлау мөмкин түгел», – ти Рыжков.

Кремль башлығы сәйәси фирҡәләрҙең эшмәкәрлеген ыңғай баһалауға ҡарамаҫтан, үҙенең һәм В. Путиндың бер партияла ла тормауы, Дәүләт Думаһына тик фирҡәләр аша ғына үтеүҙе тәьмин иткән закондарҙы яҡлауы Рәсәй Президентының ҡарашы ғәҙел түгеллеге тураһында һөйләй. Ни өсөн, мәҫәлән, Дмитрий Медведев власҡа үҙ фирҡәһен ойоштороп һәм һайлауҙарҙа еңеп сығып килмәй? Демократия ҡануңдары шулай ҡуша түгелме ни? Ә В. Путиндың «Берҙәм Рәсәй»ҙә ағза булып тороуҙан баш тартыуын, милиондарса ағзаһы булған «номенклатура отряды»н буксир итеп кенә файҙаланыуын әҙәпһеҙлек тип кенә баһаларға мөмкин.

Ватан йәмәғәтселегенең эске йөҙөн тулыландырған тағы бер миҫал. «Власть обязана ответить на вопрос: что мы строим?» Был күләмле мәҡәлә лә ике йыл элек «Литературная газета»ла баҫылып сыҡты. Уның авторы – Лев Гранин. Һорауын автор, – күрәһең, ашығыслыҡ менән – властарға төбәгән. Ә бит уны йәмғиәт, граждандар хәл итә. «Беҙҙең холоҡ шундай, – ти автор, – һәр нәмәлә һуңғы сиккә етеү. Иҡтисади либераллаштереү – олигархтар власына, конкуренция монополияларға килтерҙе, демократия иһә бер фирҡәлелек урынлаштырҙы. Беҙҙә – милек үҙ-үҙенә. Уның халыҡҡа хеҙмәт итмәүе лә Рәсәй Конституцияһында (35-се статья) нығытылған: «хосуси милек закон тарафынан һаҡлана». Ләкин ҡайһы бер дәүләттәрҙә хосуси милектең башҡа бурыстары ла бар. Мәҫәлән, Италия конституцияһы буйынса, уның барлыҡҡа килеүе һәм унан файҙаланыу бөтәһенә лә етерлек дәрәжәлә социаль бурыс үтәүенә бәйле. Япония менән Төркиә конституцияларында, хосуси милектән файҙаланыу йәмғиәт мәнфәғәттәренә зыян килтермәҫкә тейеш, тиелгән. Илдең бөтә байлыҡтары ла, кем ҡулында булыуына ҡарамаҫтан, дөйөм мәнфәғәттәрҙә хеҙмәт итә. Был – Испания конституцияһынан. Германияның төп законы ҡәтғи: хосуси милек мәжбүр итә, унан файҙаланыу дөйөм мәнфәғәткә хеҙмәт итергә бурыслы.

Гранин ҡапма-ҡаршы йөкмәткеле ике миҫал килтерә. 30 йыл элек Крайслер (АҠШ) компанияһы банкрот хәленә ҡалғас, уның президенты хеҙмәттәштәрен эш хаҡын сәғәтенә 1 долларға кәметергә саҡырҙы. Ә үҙенә хаҡты йылына…

1 долларға ҡалдырҙы. Уға ышандылар, ти автор, компания ауырлыҡты еңеп сыға алды. Икенсе миҫал. 2007 йылда «РАО ЕЭС» акционерҙар йәмғиәтен бөтөрөү башланды. Үҙ теләге менән эштән киткән топ-менеджерҙарға 650 миллион һум, йәғни 40 мең эшсенең… йыллыҡ эш хаҡын түләнеләр. Урыҫтар әйтмешләй, широко шагаешь.

Илдә милли-сәйәси тыныслыҡты һаҡлау XXI быуат башы өсөн иң көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһенә әүерелде. Ләкин күп милләтле, хатта империя һыҙаттары юғалып бөтмәгән, киреһенсә, ҡайһы бер өлкәләрҙә күрәләтә тергеҙелгән илдә уға нисек өлгәшергә? Был ауыр мәсьәләне хәл итеүҙең анһат юлы бар икән дә баһа, йәғни «Рәсәй милләтле» халыҡ барлыҡҡа килтереү. Дмитрий Медведев та был асышты күтәреп тигәндәй алды, хатта «Ҡушма Штаттарҙа «Америка милләте» бар бит, ниңә беҙгә унан оялырға?» тигән риторик һорау ҙа ҡуйып маташты. Кремль башланғысын беҙҙә бик тиҙ күтәреп алалар. «Политика» фонды президенты Вячеслав Никонов фекеренсә, илдең мең йыллыҡ дәүерендә бер кем дә иҫкә алмаған Рәсәй милләте идеяһы ысынлап та йәшәүгә хаҡлы. Берҙәм граждандар милләте ойоштора алмау арҡаһында, тип асыш яһай Никонов, тәүҙә Рәсәй империяһы, һуңынан Советтар Союзы юҡҡа сыҡты. Ә хәҙер шул дәүер кешеһен тыңлап ҡарайыҡ. «Император Рәсәйенең тарҡалыуы күптән башланғайны, – тип яҙа Бердяев үрҙә аталған хеҙмәтендә. – Һуғыш уны аҙағына еткерҙе. Монархияны Февраль революцияһы ҡолатты, тип әйтергә ярамай, сөнки батшаны бер кем дә яҡламаны. Коммунистар еңеүе менән һуғышҡа бурыслы. Рәсәй коммунизмы бәхетһеҙлек ерлегендә барлыҡҡа килде һәм ул шуның менән насар. Һуғышты дауам итергә теләмәү, ерҙе – крәҫтиәндәргә, завод-фабрикаларҙы – эшселәргә вәғәҙә итеү большевиктарға еңеү бүләк итте». Күренеүенсә, бер ниндәй ҙә милли фактор юҡ. Тик авторҙың был фекере ни өсөн хәжәт? Әллә ул «совет халҡы»н әүәләүҙең дә барып сыҡмауын инҡар итергә маташамы? Тырма башына ике тапҡыр баҫмайҙар бит.

Артабан фонд етәксеһе РФ Конституцияһын тәнҡитләүгә күсә. Йәнәһе, унда «беҙ күп милләтле Рәсәй Федерацияһы халҡы» тигән «кәрәкмәгән» юлдар бар. Автор Лениндың «Рәсәй – халыҡтар төрмәһе» тигән билдәләмәһен иҫкә төшөрөп, большевистик этномилләтселектең әле лә көслө булыуына борсолоу белдереүгә тиклем барып етә.

Никонов Рәсәй Фәндәр академияһының Этнология һәм социология институты директоры Валерий Тишковтың, милләт – ул бер дәүләттә йәшәгән халыҡ, тигән «асыш»ына һылтана һәм күп этнослыҡ граждандар милләте барлыҡҡа килеүгә ҡамасаулай, тигән хәтәр һығымта яһап ҡуя. Идеяның маҡсаты, әлбиттә, – урыҫ телле халыҡ әүәләү. Уның менән батша Рәсәйендә лә шөғөлләнеп ҡарағандар, Советтар ҙа был өлкәлә иң һыҙғанып эшләне. Әммә төркиҙәрҙе, фин-уғыр халыҡтарын һ.б. урыҫлаштыра алманылар. Ни өсөн? Ошо айҡанлы мәшһүр тарихсы З. Вәлидиҙең түбәндәге фекере иғтибарға лайыҡ. Башҡорттар бик күп йылдар урыҫтар менән хәрби хеҙмәт үтәгән, һуғыштарҙа ҡатнашҡан, ләкин урыҫлашмаған, тип яҙа ул граждандар һуғышы осорондағы бер запискаһында. Ә бит уға ла 90 йыл уҙып киткән.

Әлбиттә, фонд етәксеһе XX быуат Британияһы, Франция, Германия, Испания тәжрибәһен дә иҫкә ала. Бөйөк Британияның – Шотландия, Англия, Төньяҡ Ирландиянан, Францияның Бретань һәм Корсика провинцияларынан һ.б. тороуын әйтеп үтә. Ҡытай – 205, Камерун – 279, Һиндостан – 407, Нигерия – 470, Индонезия – 712, Папуа-Яңы Гвинея – 807 этностан тора, ти ул. Батша Рәсәйе лә этник биләмәләргә бүлгеләнмәгән. Рәсәй дворяндары араһында урыҫтар иң аҙы булып, татар, литва, поляк һәм немец фамилиялары күберәк булған. Никоновса,

батша хөкүмәте халыҡтарҙы ассимиляциялау түгел, ә уларҙы лояль булған мәҙәниәткә еректереү бурысын ҡуйған. Этностар бер-береһенән үсеш кимәле менән айырыла. Мәҫәлән, шул уҡ Ҡытайҙа үҙ дәүләтен ҡорорға дәғүә иткән уйғырҙар менән тибеттар ғына билдәле. Был миҫалын автор нимәне булһа ла иҫбатлау өсөн түгел, ә албырғатыу өсөн килтерә.

«Урыҫ карта»һын «Независимая газета»ла иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Ләкин был юлы ул Балтик буйы республикаларында йәшәгән урыҫтарҙың Мәскәү һәм Рәсәй партиархы Кириллға мөрәжәғәте айҡанлы баҫылған. Рәсәйҙең вазифалы кешеләре «по-русски» һүҙен ҡулланмай, тиелә мөрәжәғәттә. Был хәл сит илдәрҙә йәшәгән урыҫтарҙың милли йөҙөн һаҡлап ҡалыу буйынса ауырлыҡтар тыуҙыра. Сиркәү урыҫ халҡын туплау буйынса эшкә тотона алыр ине. Мәҡәлә Манеж ваҡиғаларына ла ҡағыла. Сөнки был мәсьәлә, имеш, элек күләгәлә ҡала килде. Ни өсөн – бәлки, үҙбилдәләнешкә хоҡуҡты танымай, ғәмәлдә урыҫ булмағандарҙы икенсе сортлы халыҡ итеп күреүҙе йәшереү өсөндөр? Ошо айҡанлы баҫмала Рәсәйҙең тәүге президенты Борис Ельцин яҡлаған «суверенитеттар парады» ла тәнҡитләнеп, урыҫ хатта бөтә ил буйынса «титуллы милләт» булып китә.

Мәҡәлә, милләтселәрҙең бер яҡлы эш итеүе Рәсәйҙең тарҡалыуына килтереүе ихтимал, тип борсолоу белдерә һәм урыҫ йөкмәткеһен көсәйтеүҙе яҡлай. Ә бит тарихта урыҫ йөкмәткеһен көсәйтергә тырышыуҙың бер ҡасан да туҡталғаны юҡ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, унан һабаҡ алыусылар ғына күренмәй.

Рәсәйҙең өсөнсө президенты демократияны үҫтереү өсөн бер ни ҙә эшләмәй, тип әйтергә йыйынмайым. Ләкин эшмәкәрлектең дә төрлөһө була. «Мин күрһәтмә бирҙем» тигәндәре күберәк булып китте. Ә был осраҡта нисек итеп башҡорттоң «Эт – эткә, эт – ҡойроҡҡа» тигәнен иҫкә алмайһың?..

Дмитрий Медведевтың күп һанлы терәк пункттарының береһе – Хәҙерге үсеш институты (ИНСоР) «Обретение будущего: стратегия – 2012» тигән доклад эшләгән. «Авторҙар ысынлап та Шнобель ( Нобелдең киреһе – **М.Х.**) премияһына дәғүә ителергә хаҡлы, – тип яҙҙы был хаҡта «Газета.ру». – Улар донъяла бер ҡасан да күрелмәгән, бер ниндәй сәйәси теория тәҡдим итмәгән ысул уйлап тапҡан. Авторитар режимды авторитар яңыртыу тураһында. Йәнәһе, барыһын да шул килеш ҡалдырып, президент фекер төрлөлөгө, мәнфәғәттәрҙе яраштырыу, йәмғиәт сәйәси тормошҡа ҡушылһын өсөн уңайлы шарттар тыуҙырырға ниәтләй. Үкенескә ҡаршы, авторитар режимдарҙы яңыртыу тәжрибәһе бер цивилизацияға ла билдәле түгел. Иҫкәрмә рәүешендә ҡала-дәүләт Сингапурҙы ғына күрһәтергә мөмкин. Ләкин уның башлығы Ли Куан Ю кеүектәрҙең башҡаса осрағаны булманы, – тип бәхәс тыуҙыра баҫма. – Шул уҡ ваҡытта ИНСоР белгестәре ҡайһы режимды яңыртырға кәрәклеген дә атап әйтмәй. Ә Рәсәйҙә идара итеүсе режимдың шәхси байығыу маҡсатында тик үҙҙәре тарафынан ғына яҡланыуын күптәр һәм күптән белә. Был режим илгә идара итеүҙә халыҡтың ҡатнашыу юлдарын күптән бикләгән, сәйәси конкуренция менән граждандар контроле бөтөнләй мөмкин түгел. Дәүләткә идара итеүҙә властарҙы закон сығарыу, башҡарма һәм мәхкәмә тармаҡтарына бүлеү кеүек конституцион принциптар эшләмәй: улар берҙән-бер власть – президентҡа буйһона. Был федератив принципҡа (РФ Конституцияһының 1-се статьяһы) ҡаршы килә, ә «власть вертикале» башындағылар олигархик капиталдың аманаты ролен башҡара һәм үҙ аллы ҡарар сығарыу хоҡуғын күптән юғалтҡан.

Идара итеүсе режимды сәйәси конкуренциялы демократия ҡанундарына таянғанына алмаштырыу күптән зарур, – тип дауам итә «Газета. ру». – Уның ике юлы билдәле: революция һәм оккупация (берәй дәүләттең баҫып алыуы). Ләкин ил өсөн уларҙың береһе лә отошло түгел. Сәйәси хәлде граждандар акцияларын күпләп үткәреү, «түбәндән» баҫым яһау аша ғына үҙгәртергә кәрәк».

Башҡа тәҡдимдәр ҙә ишетелгеләй. «Урыҫ идеяһы» тип аталғаны менән 2011 йылдың мартында «Новая газета» таныштырҙы. Унда ысынлап та ғибрәт алырлыҡ урындар бар. «Хәҙерге сәйәсәт фәнендә ҙур белгестәрҙең береһе булып йөрөгән, ҡасандыр хөкөм эскәмйәһендә ултырған Глеб Павловскийҙың фекерҙәше Валерий Абрашкиндың «төрмә субкультураһы – беҙҙең милли тәртип өлгөһө, ғәҙеллекте халыҡса аңлау» тигән һүҙҙәрендә ниндәйҙер дәрәжәлә урыҫ күңелен аңлау өсөн асҡыс бар кеүек, – ти гәзит. – Төрмә әхлағы һәм лексикаһы киң массалар тарафынан еңел үҙләштерелә. Шулай уҡ – ҡағиҙәләр ҙә. Мәҫәлән: «Бер кемгә лә ҡыҫылма! Һәр кем үҙе өсөн яуап бирә».

«Был төшөнсәләрҙе бер кем дә махсус рәүештә уйлап сығармаған», – тип дауам итә ул. – Улар халыҡтың ғәҙеллеккә ынтылышы нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Төрмә төшөнсәләре хатта Ярослав Мудрыйҙың «Русская правда»һында ла осрай. Күпселек «авторитеттар»ға ҡарағанда аҡыллыраҡ. Мәҫәлән, губернаторҙарҙы һайлап ҡуйыуҙы ла бөтөрҙөләр». Абрашкин шулай фекер йөрөтә. Тик былар йәмғиәт өсөн идея була аламы? Уның менән нисек Европа союзында ағза булып тормаҡ кәрәк?

Ғөмүмән, «урыҫ идеяһы»нда баш әйләндерерлек тезистар бар. Иң мөһиме, тимәк, уҙған быуаттар халыҡты бер нигә лә өйрәтмәгән.

Граждандар йәмғиәте институттары үҫешә алмағанлыҡтан, власть, – бәлки, Евросоюз алдында күҙ буяу өсөндөр – Йәмәғәт палатаһы тигән ойошма уйлап тапты һәм унда эшләйәсәк кешеләрҙе үҙе үк билдәләп ҡуйҙы. Палатаның файҙалы эш коэффициенты тураһында йәмәғәтселек хәбәрҙар түгел, бәлки, ҡыҙыҡһынған кеше лә юҡтыр. Ә бит ошондайыраҡ миссия алып барған башҡа структуралар – фондтар ҙа байтаҡ. Дөрөҫ, уларҙы сит ил бағымсылары үҙ аҡсаһына аҫрай. РФ Президенты ҡарамағындағы Граждандар йәмғиәтен һәм кеше хоҡуҡтарын үҫтереү советы тураһында әйтеп китеү урынлы. Уның етәксеһе Элла Памфилованың былтыр август баштарында оставкаға китеүе институт тирәләй барған ваҡиғаларҙың иң юғары нөктәгә етеүен күрһәтте. Дмитрий Медведев бер ниндәй аңлатмаһыҙ отставканы ҡабул итеп, бер аҙҙан яңы етәксе тәғәйенләп тә ҡуйҙы. Ваҡытлы матбуғатҡа интервьюһында Памфилова, отставкаға китеүемде ике һүҙ менән генә аңлатыуы мөмкин түгел, тип белдерҙе. Ләкин оҙаҡ ваҡыт үҙемде власть менән йәмғиәт араһындағы вәкил итеп түгел, ә һандал менән сүкеш араһында кеүек хис итергә тура килде.

Граждандарҙың митингыға хоҡуғы боҙолоуға ҡағылып, Памфилова, был Рәсәй Конституцияһында нығытылған мөһим положениеның милиция тарафынан түгел, ә властар яғынан боҙолоуы арҡаһында хәл ошондай дәрәжәгә етте лә инде, тигән фекерҙә. Минең китеүем бушҡа булмаҫ, власть даирәләрендә демократияны яҡлау буйынса саралар күрә башлар, тиеүе, күренеүенсә, раҫланырға оҡшамаған. Һәр хәлдә яңы вәкил – М. Федотовтың бер ниндәй ҙә инициативаһы һиҙелмәй.

## Киләсәккә ышаныс юҡ

Тубыҡланған килеш йүгереп, йәки юғары ҡарап буламы? Әлбиттә, уға маһирҙар осраһа, махсус күнекмә эшләгәндәр араһында ғына осрар. Ә бына йәмғиәтебеҙҙең тәртибе ана шул тубыҡланған кешенең хәлен аңлатмаймы икән?

«Трудно строить будущее, не веря в него». Былтыр «Независимая газета»ла донъя күргән мәҡәләнең авторы – журналист Светлана Бабаева. Был аналитик хеҙмәттә телгә алынған факттар XXI быуат Рәсәйе өсөн ысынлап та борсоулы. «Уның тураһында насар һөйләһәләр, Рәсәйгә оҡшамай. Ул үҙен ихтирам итеүҙе, хатта унан ҡурҡыуҙарын талап итергә әҙер. Ләкин дәүләтте эске ҡоролошона, эске сәйәсәтенә ҡарап та баһалайҙар,– ти автор. Ошо күҙлектән ҡарағанда,

йәмғиәтебеҙҙең әхлаҡи нормалар структураһы бөтөнләй юҡ, бөгөн ул нисек булырға теләй – билдәһеҙ». Бына шулай журналист һәр кем иғтибар итеп бармаған күренештәргә мөрәжәғәт иткән.

Киләсәкте хәстәрләүҙә үткәндәр ҙә мөһим роль уйнай. Икенсе донъя һуғышында еңеп сыҡҡан илдең данға һәм ҡанға күмелгән үткәне уға алға барырға ҡамасаулай. Экономист Александр Аузан әйтмешләй, ҡасандыр империя үҙәктәре булған дәүләттәр бөгөн ауыр хәлдә, киләсәккә хыялдар кисәге көндә ҡалған ҡаҙаныштар менән тотҡарлана. «Нимәгәлер тотоноп, уны логик ахырына еткерергә «оноталар», – тип дауам итә баҫма. – Өҫтөнлөклө милли проекттар хаҡында, мәҫәлән, бөгөн иҫкә алған кеше лә юҡ. Ә бит һаулыҡ һаҡлауҙа, мәҫәлән, ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшелмәне». Мәҡәләлә ауыл хужалығы, торлаҡ төҙөлөшө, мәғариф тураһында иҫкә алынмай, улары ла ярты юлда туҡтап ҡалды түгелме ни? Сочиҙа дауам иткән быуат төҙөлөшө нимә бирер? Рәсми булмаған сығанаҡтарҙан ишетелеүенсә, унан эшҡыуарҙар ҡасып бөткән, сөнки кемдең бушҡа яһаҡ түләгеһе килһен?

Ниндәйҙер проект эшләүгә меңдәрсә чиновник, эшҡыуарҙың йәлеп ителеүе, отчеттар яҙылыу, миллиардтарса һум тотонолоуы ниндәйҙер мөһим эш башҡарылыуына ишаралай кеүек. Уның ни хаҡына атҡарылыуын аңламау аҙағына еткерергә ҡамасаулай, барыһын да юҡҡа сығара. Теләһә ниндәй эшмәкәрлек йәмғиәттең ихтыярынан тыш бойомға ашырыла, хатта уның мөнәсәбәтен һорап та тормайҙар. Мәҫәлән, Эске эштәр министрлығында реформаны Дмитрий Медведев йәмәғәтселек фекерен өйрәнмәй, уға таянмай ғына башланы. Артабан милицияны полицияға әйләндереү ҙә Кремлдең бер яҡлы инициативаһы буйынса дауам итте. Әйтерең бармы, «вот барин приедет, он и рассудит».

Ләкин исемде алмаштырыу менән генә есем үҙгәрмәй бит. Полицияға ла шул уҡ егеттәр килеп, шул уҡ тәртиптәрҙе йәйелдерәсәк. Ғөмүмән, хәҙерге идара системаһы тышҡы импульстарға һиҙгерлекте күптән юғалтҡан, шуға күрә ул үҙгәрештәргә һәләтһеҙ, тигән һығымта яһай Бабаева. Ғәҙәттә, консерваторҙар Рәсәйҙең үҙенсәлекле дәүләт (особость – **М.Х.**) булыуына ышыҡланырға ярата, әммә был сәбәп түгел, һылтанма ғына. Рәсәйҙә күптәр үҙ илен яҡынараҡ иҫәпләргә күнеккән, ә бына яҡшының нисек дәлилләнгәнен улар атай алмай. Күпселек граждандарҙың интегеп йәшәүенә иғтибар итмәгән система тарҡала, сөнки уға йәшәү биргән тамырҙар юҡ.

АҠШ дәүләте барлыҡҡа килгән йылдарҙа уның конституцияһын яҙған күренекле сәйәсмән һәм дәүләт эшмәкәре Томас Джефферсон былай тигән: «Мәжбүр итеү нимәгә килтерә? Кешеләрҙең бер өлөшө иҫәргә әүерелә, икенсеһе – ялағайлыҡты үҙләштерә». Ә бит Рәсәйҙә был тезисҡа, айырыуса икенсе өлөшөнә ҡағылғанына, миҫалдарҙы күпләп килтерергә мөмкин.

Мәҡәләлә статистика ла байтаҡ урын алған. «Дәүләт именлеге өсөн кешеләр ҡайһы саҡ ҡорбандар бирергә бурыслымы?» тигән һорауға респонденттарҙың 7 проценты ғына «эйе» тип яуаплай. Һуңғы 20 йылда бында үҙгәреш күренмәй. Граждандарҙың 82 проценты «дәүләт кешеләр тураһында хәстәрлек күрергә бурыслы» тигән ҡарашта. Бында үҙгәреш ҙур, хатта күпкә ауырыраҡ 90-сы йылдарҙа ундайҙар 57 проценттан артмаған. «Кешеләр үҙҙәре инициатива күрһәтергә, үҙен-үҙе хәстәрләргә бурыслы» тигән фекер яҡлылар һәр дүртенсенән һигеҙенсегә тиклем кәмегән. «Дәүләт кешеләр тормошона мөмкин тиклем һирәгерәк ҡыҫылырға тейеш» тип иҫәпләүселәр ни бары 6 процент. Иң мөһиме, 20 йыл эсендә үҙгәреш күренмәй. «Дәүләт бөтә граждандар тураһында хәстәрлек күрергә, лайыҡлы тормош тәьмин итергә бурыслы» тигән ҡарашты уртаҡлашыусылар 71 проценттан 63-кә тиклем аҙайған.

Йәмғиәттә база һиммәттәре буйынса бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Мәҫәлән, респонденттарҙың өстән бер өлөшө хосуси милеккә хоҡуҡты мөһим тип иҫәпләй. 1994 йыл менән сағыштырғанда, үҫеш 4 процент. Һүҙ азатлығын рәсәйҙәрҙең 28 проценты ғына баһалай. Дөрөҫ, һуңғы 15 йылда ундайҙар 10 процентҡа артҡан. Һөнәр буйынса яҡшы хаҡ түләнгән эшкә хоҡуҡты һәр икенсе респондент ҡына белә. 1994 – 2009 йылдарҙа улар ни бары 2 процентҡа артҡан. Бәлки, шуға күрәләр ҙә сәйәси фирҡәләр дөйөм вәғәҙәләрҙән ары китмәйҙер. Әйтәйек, АҠШ-тағы кеүек һалымдар, кредит ставкаһын төшөрөү тураһында һүҙ ҙә ҡуҙғатмай.

«Урыҫ халҡы, – ти Николай Бердяев, – ирекле дәүләт йәки дәүләттәге ирек тураһында түгел, ә дәүләттән азат булыу хаҡында хыяллана». Был да ниндәйҙер дәрәжәлә энергия һәм уға ыңғай йүнәлеш бирә белеү мөһим. Теге йәки был йәмғиәттә кешеләр энергияһын туҡтауһыҙ эшмәкәрлеккә йәлеп итеү – социаль психолог Эрих Фромм раҫлауынса – социаль дәүләттең бурысы. Бөгөн Рәсәй йәмғиәтенең энергияһы йән аҫрауға, ауыр шарттарҙа юғалып ҡалмаҫҡа сарыф ителә. Ундай кәйеф менән сәскә атыусы дәүләт ҡорорға ынтылыу, моғайын, ҡомдан арҡан ишергә маташыуға тиңдер.

Социаль ышаныс кәмей. Власть әһелдәрен һайлап ҡуйыу хоҡуғын белмәү – Ватан йәмәғәтселегенең иң ҙур етешһеҙлеге. Дөрөҫ, бында ла тотороҡлолоҡ юҡ. 15 йылда үҫеш 9 проценттан 13-кә еткән. Информацияға хоҡуҡ иһә 2001 йылғы 26 проценттан 14-кә тиклем кәмегән. Социолог Борис Дубин фекеренсә, граждандар бер-береһен ике сифаты буйынса ғына баһалай: файҙалымы әллә хәүефлеме? Был критерийҙың береһе лә юҡ икән, ул кеше менән ҡыҙыҡһыныу бөтә. Бер ваҡыт француз аристократы А. Герценға былай тигән: «Һеҙ, урыҫтар, йәки бөткән батша ҡолдары, йәки… анархистар. Һеҙ бик оҙаҡ азат булмаясаҡһығыҙ әле».

Йәшәүгә хоҡуҡты белгәндәр 63 проценттан 58-гә тиклем кәмегән. Медицина ярҙамына – респонденттарҙың өстән ике өлөшө, торлаҡтың тейелгеһеҙлегенә 45 процент (элек 55 булған) ышана. Әйткәндәй, 2001 йылда торлағын, британдар кеүек, ҡәлғә урынына күргәндәр 65 процент булһа, алты йылдан 38-гә тиклем кәмегән. Дәүләттең йәшәү минимумы тәьмин итәсәгенә һәр өсөнсө генә өмөтләнә.

Ватан йәмәғәтселегенең киләсәге нисек? 2010 йылда ваҡытлы матбуғатта Милли стратегия институтынан бер төркөм сәйәсмәндең «Выбор России: катастрофа или революция» тигән доклад баҫылып сыҡты. Авторҙар – Михаил Ремизов, Никита Кричевский, Роман Карев, Дмитрий Верхотуров, Марк Фейгел, Станислав Белковский – сәйәсәттә лә, иҡтисадта ла яңы кешеләр түгел. Улар ҙа, илгә идара итеүселәр шәхси байығыуҙы ғына ҡайғырта, тигән фекерҙе ҡабатлай. 2008 йылғы донъя финанс кризисында башҡарма власть олигархтар мәнфәғәтен хәстәрләне. Сит илдәрҙә урынлаштырылған Рәсәй капиталы иһә эске ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереүгә тотонолмай. Резерв фондынан банкыларға ярҙам йөҙөндә бирелгән аҡса шунда уҡ валюта фондына йүнәлтелеп, һумды нығытыу буйынса күрелгән сараларҙы юҡҡа сығарҙы, ти авторҙар.

Йәмәғәтселек властарҙы хуп күрмәй, сөнки идара итеүсе аппарат халыҡ менән аралашмай, уның ихтыярынан тыш эш итә. Бындай принцип В. Путин идара иткән йылдарҙа айырыуса нығыны. Был «короналанмаған» монархтың тәнҡиттән өҫтөн һәм закондан азат булыуы әлеге системаның нигеҙен ҡаҡшата. Президент власының кризисы Рәсәй дәүләтенең иртәгәһенә хәүеф менән янай. Ил яҙмышы 1915 – 1916 һәм 1989 – 1990 йылдарҙағы хәлдәрҙе хәтерләтә. Дәүләт революцион кәйефле халыҡ тарафынан емерелә башламаһын өсөн, системаны

«юғары»нан үҙгәртергә кәрәк, тиелә докладта. Был иң элек дәүләттең идеологик яңырыуына ҡағылып, властарҙың конституцион бурыстарын еренә еткереп башҡарырға тейешлеген аңлата. Дәүләт институттарын нығытыу, социаль ҡатламдарҙың «серегән» бай һәм «бөткән» фәҡирҙәргә бүленеүен сикләү, эшҡыуарҙар өсөн яңы ҡағиҙәләр булдырыу, иҡтисадҡа ярҙам итеп, эшһеҙлекте бөтөрөү, яңы үҫеш нөктәләрен билдәләү – кисектергеһеҙ мәсьәләләр. Уларҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн яуаплы хөкүмәт кәрәк, сөнки быныһының ҡулынан килмәй. Премьер-министрҙың тейелгеһеҙлеге ил өсөн һәләкәтле, сөнки хәҙерге хөкүмәт яуапһыҙ ғына түгел, уға контроль дә юҡ. Ҡылған эштәре өсөн теләһә ҡайһы чиновник яуап бирергә бурыслы. Конституция нормаһына ярашлы, президент һәм парламент алдында тулыһынса яуаплы хөкүмәт – хәҙерге сәйәси хәлдең төп талабы.

Докладта сәйәси фирҡәләрҙең үҙ-ара конкуренцияһы мәсьәләһе лә күтәрелә. Дәүләт Думаһында конституцион өҫтөнлөктән файҙаланған «Берҙәм Рәсәй» партияһы яуаплы көскә әүерелмәне һәм улай буласағы ла юҡ. Системалы коррупцияны ҡырҡа ауыҙлыҡлау буйынса авторҙар уҙған быуаттың 90-сы – 2000-се йылдарҙағы бөтә илгә яңғыраған «коррупцион эш»тәрҙә ҡатнашҡан чиновниктарҙы енәйәт яуаплылығына тарттырырға, хөкөм ителгәндәрҙең мөлкәтен тартып алырға тәҡдим итә.

Авторҙарҙың фәҡир халыҡтың килемен арттырыу буйынса ла саралары бар. Һалымдың килем артыуға ҡарап үҫә барған шкалаһын индереү (35 процентҡа тиклем), топ-менеджерҙарҙың саманан тыш юғары эш хаҡына өҫтәмә һалым, түбән эш хаҡы алғандарҙы һалымдан азат итеү һ.б. – шулар иҫәбендә. Әйткәндәй, бындай тәҡдимдәр 20 йыл буйы әйтелә килә, ләкин Кремль дә, Дәүләт Думаһы ла, федераль хөкүмәт тә «а Васька слушает да ест»тан ары китмәй.

Фекерҙәр күп. Рәсәй Фәндәр академияһының ИМЭМО институты профессоры Виктор Шейнис фекеренсә, 2011-2012 йылдарҙағы һайлауҙарҙа киң ҡулланылған күҙ буяу бөтөрөлмәһә, беҙҙә яҡты киләсәк көтмәй. Һайлау системаһын үҙгәртеүҙе йәмәғәтселек иғтибары үҙәгенә сығарыу мотлаҡ. Үҙгәрештәр губернаторҙарҙы һайлап ҡуйыуҙы тергеҙеүҙе, Федерация Советы ағзаларын туранан-тура һайлауҙы, РФ Президенты менән Дәүләт Думаһының полномочиелары ваҡытын ҡыҫҡартыуҙы һ.б. күҙ уңында тота.

Дәүләт Думаһына мандат алған дүрт сәйәси фирҡә тотош Ватан йәмәғәтселегенең мәнфәғәтен сағылдырып бөтмәй, ти Шейнис. Һайлау исемлегендәге «бөтәһенә лә ҡаршы» тигән графаны тергеҙеү ҙә зарур. Һайлау һөҙөмтәләрен асыҡлауға йәмғиәт контролен камиллаштырыу, тауыштарҙы һанауҙы йәмәғәтселек иғтибарына еткереп тороу, күҙәтеүселәрҙе төрлө сәбәптәр табып ҡыуыуҙы тыйыу, һайлау закондарын боҙған граждандарға ҡарата ҡатыраҡ саралар күреү ҙә файҙа бирәсәк.

ЦИРКОН тикшеренеү төркөмө етәксеһе Игорь Задорин менән ошо ойошма хеҙмәткәре Дмитрий Зайцев һәм ИНДЕМ фондының социология бүлеге мөдире Владимир Римскийҙың тәҡдимдәре лә иғтибарға лайыҡ. Граждандар йәмғиәтенең үҫеше ил өсөн ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеге хаҡында һөйләмәгән сәйәсмән ҡалманы. Ләкин ошоноң менән уртаҡлыҡ тамам. Хатта граждандар йәмғиәте тураһында дөйөм фекер ҙә күҙәтелмәй. Шуның менән бергә аңлы йәмғиәт ойошоуҙа власть органдары, эшҡыуарҙар, ижтимағи ойошмаларҙың роле ҙурлығын барыһы ла таный. Был структураларҙың йоғонтоһо маҡсатҡа ярашлы булһа, граждандар йәмғиәтенең ойошоуы тиҙерәк барасаҡ.

Граждандар йәмғиәте киләсәген күҙаллау өсөн Ватан ерлегендә нигеҙ юҡ тиерлек, тигән күңелһеҙ һығымтаға килә авторҙар. Беренсенән, бындай йәмғиәт тарихы бик ҡыҫҡа; икенсенән, күҙәтеүҙәр, статистик мәғлүмәттәр ҙә самалы.

2009 йылда 80 кеше ҡатнашлығында үткәрелгән социологик күҙәтеүҙәр ҙә ижтимағи ойошмалар, дәүләт һәм муниципаль органдар, граждандар йәмғиәтенә финанс ярҙамы күрһәткән хосуси фондтар, проблеманы өйрәнеүсе белгестәр ҡатнашҡан. Үкенескә ҡаршы, улар араһында фекер берҙәмлеге күҙәтелмәй. Мәҫәлән, берәүҙәр (90 – 100 процент) граждандар йәмғиәтен үҫтереүгә эшҡыуарҙарҙың финанс ярҙамына ышанһа, икенселәр шикләнә – 30 проценттан да аҙыраҡ.

Белгестәрҙе власть органдарының граждандар йәмғиәтенә баҫымды көсәйтергә, финанс ярҙамын кәметергә маташасағы борсоуға һала. Дөйөм алғанда, Ватан йәмәғәтселектең киләсәге ниндәй юлдан үҫешәсәген самалап та булмай. Быға өлөшсә граждандарҙың тупланыуына булышлыҡ итеүсе көстәрҙең булмауы ла ҡамасаулай.

Ә бит ошо рәүешле көсһөҙлөк Кремлдә генә түгел, Рәсәй парламентының юғары палатаһы – Федерация Советында ла күҙәтелә. «Төбәктәрҙә йәшәгән граждандарҙың йәшәү сифаты» тигән темаға үткәрелгән ултырышта билдәләнеүенсә, иң байҙар менән фәҡирҙәр килеме араһында айырманың 100-ҙән дә артып китеүе илдең киләсәген хәүеф аҫтына ҡуя. Рәсми статистика был йәһәттән төплө картина бирмәй, ти сенаторҙар, сөнки уртасалаштырылған мәғлүмәттәр менән генә эш итә. Бөгөн граждандарҙың 17 – 30 проценты үҙенең тормошон бер нисек тә яҡшырта алмай, иртәгәһе көн өсөн ҡурҡа. Дәүләт тә, эшҡыуарҙар ҙа тормоштоң яҡшырыуына булышлыҡ итмәй, эшҡыуарлыҡ мөхите коррупция менән ағыуланған, улар тик байлыҡ туплап ҡалыуҙы хәстәрләй. Хатта иҡтисади үҫеш тә тормош шарттарының яҡшырыуына булышлыҡ итмәй. Һалым системаһы байҙарҙың нығыраҡ байығыуына, фәҡирҙәрҙең тиҙерәк ярлыланыуына ғына булышлыҡ итә.

Ғәжәп, һүҙ бит парламентта бара. Әйтерһең дә, уларға тейешле законлар сығарыуға, уларҙың үтәлешен парламентта тыңларға кемдер ҡамасаулай. Ысынлап та, кемдәр? Олигархтармы?

Барҙан юҡ булмай, юҡтан бар булмай, тип өйрәтә материалистик ҡараш. Рәсәй йәмәғәтселегенең психологияһын, эске донъяһын уның тарихын белмәйенсә аңлау мөмкин түгел. Беҙ үрҙә Крижанич, Герцен, Бердяевтарҙың ошоға бәйле фекерҙәрен телгә алдыҡ. Эйе, хәҙерге Рәсәй йәмғиәтен урыҫ психологияһынан айырып ҡарау объектив булмаҫ ине. Был милләт ил тарихын ғына түгел, киләсәген дә билдәләйәсәк. Ошо йәһәттән Н. Бердяевтың һығымталарына ентеклерәк туҡталыу зарур.

«Үҙенең эске донъяһы буйынса урыҫтар – Көнсығыш халҡы, – ти ул үрҙә аталған хеҙмәтендә. – Уның бәхетһеҙ һәм михнәтле тарихи яҙмышы һәләкәтле тиҙлектә, өҙөклөктәр һәм цивилизацияның тиҙ алмашыныуы аша барған. Урыҫ күңеленең ҡапма-ҡаршылығы уның яҙмышының ҡатмарлылығына бәйле: унда Көнсығыш һәм Көнбайыш йәшәү рәүеше өлгөләре көрәшә. Ғәйәт ҙур киңлектәргә хужа булыу халыҡ күңелендә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған: сикһеҙлек, формаһыҙлыҡ, билдәһеҙлеккә ынтылыу һәм киңлек… Урыҫ халҡы үҙенең икһеҙ-сикһеҙ биләмәләренең, тәбиғәттең стихиялы булыуының ҡорбанына әүерелгән, тип әйтергә мөмкин.

Бердявса нигилизм Көнбайышта осрамай, ул да саф урыҫ күренеше булып, православие тәрбиәһе ерлегендә генә яралырға мөмкин. Уның нигеҙендә байлыҡты гонаһ кеүек ҡабул итеү ята. Урыҫ нигилизмы – ғәҙелһеҙлек ихтилалы, цивилизация ялғанына ҡаршы тороу, шуға күрә улар һөргөнгә лә киткән, аҫып ҡуйыуға ла ризалашҡан. Урыҫ нигилизмы «халыҡты ҡоллоҡҡа төшөргән» дәүләтте лә гонаһ итеп ҡарай.

Анархизм да, нигилизм һәм народниклыҡ кеүек, урыҫ күңеленә хас тойғо, һәм ул урыҫ холҡоноң ҡапма-ҡаршылығынан килә. Урыҫтар – дәүләт халҡы, ул бөйөк дәүләт төҙөү өсөн материал булырға еңел ризалаша, шул уҡ ваҡытта фетнә күтәреүгә лә оҫта. Урыҫ интеллигенцияһы дәүләтте яратмаған, уны үҙенеке тип иҫәпләмәгән, сөнки дәүләттең әһәмиәтен аңламаған һәм уға эйә булыу хаҡында уйланмаған, ти философ.

1905 йылғы урыҫ революцияһы алдынан урыҫ мәҙәниәтенең юғары һәм түбәнге ҡатламдарын бер ни ҙә бәйләмәй улар икеһе ике планеталағы кеүек көн күрә. Либераллек идеялары менән һуғарылған Кадеттар фирҡәһе рәйесе П. Милюков төркөмөнөң Дәүләт Думаһындағы ыңғай эшмәкәрлеге лә хәлде үҙгәртә алмай. Социаль тормошто яҡшыртырға тейешле идеялар урыҫ донъяһы өсөн ят булып сыға. Ә бына большевизмды урыҫ традицияларына яҡынырaҡ, социаль ғәҙеллек эҙләгән өсөн ҡабул итә.

Коммунистик революцияның Рәсәйҙә генә булыуы мөмкин ине. Көнбайыш кешеләре Рәсәй коммунизмын азиат коммунизмы кеүек ҡабул итә, – тип дауам итә философ. – Рәсәй коммунизмы – ул саф урыҫ күренеше. Унда йәһүдтәрҙең әүҙем ҡатнашыуы ла урыҫ халҡына хас. Ленинда урыҫ интеллигенты-сектанты менән урыҫ ерҙәрен йыйыусылар холҡо бергә тупланғайны. Ул партия эсендәге азатлыҡты инҡар итә һәм һуңынан Рәсәйҙә лә шундай тәртип индерә. Был кешелә элекке урыҫ интеллигенцияһының революционлыҡ һәм тарихи властың ҡанһыҙлығы бергә ҡушыла. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, большевизм – урыҫ бөйөк державасылыҡ шовинизмының өсөнсө сағылышы, – тигән һығымта яһай Бердяев. – Уның беренсеһе – Мәскәү батшалығы, икенсеһе – Петр империяһы.

Коммунизм урыҫ интеллигенцияһы эшмәкәрлеге нигеҙендә тыуа. Социаль ғәҙеллеккә ынтылыш, тиңлек һәм хеҙмәтсәндәр синыфын кешелектең иң юғары тибы һанау, капитализм һәм буржуазияны инҡар итеү, сәйәси элитаға дошман ҡарау, рухи һиммәттәрҙе ҡабул итмәү, материализмға аллаларса тәҫ биреү һ.б. унда бергә ҡушыла. Ленин фекеренсә, хатта сәйәсәт тә иҡтисадтан өҫтөн тора, капитализмдан коммунизмға күсеү осоронда көс ҡулланыуһыҙ мөмкин түгел».

Урыҫ коммунизмы – донъяла берҙән-бер тоталитар дәүләт, һәм был элекке урыҫ дәүләтселеге традицияларына тап килә. Ләкин урыҫ халҡы Мәскәүҙең Өсөнсө Рим тураһындағы мессианлыҡ идеяһын ғәмәлгә ашыра алманы. 1812 йылғы Ватан һәм 1941 – 1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғыштары – быға асыҡ миҫал. Тәүгеһендә рус армияһы башлығы Михаил Кутузов французлдарҙы империянан ситтә эҙәрлекләүгә ҡаршы төшкән өсөн Александр I уны ғәскәргә етәкселек итеүҙән ситләткән. 1944 йылда ла гитлерсыларҙы Польша, артабан Германия ерендә туҡмауға ҡаршы сығыусылар булған, әммә уларҙы тыңламағандар. Был да шул мессианлыҡ идеяһы менән ағыуланыу һөҙөмтәһе түгелме икән? Ә бит ике һуғышта ла был идеяға бер мөнәсәбәте лә булмаған башҡорттар ҙа күпләп һәләк булған.

«Урыҫ халҡы ғүмер-ғүмергә буржуазлыҡтан азат булыуға ҡарамаҫтан, Совет Рәсәйендә буржуазлыҡ хасил булыуы бик ихтимал. Ул урыҫ халҡының дини энтузиазмы кеүек социализм төҙөүгә ынтышылы бөткәндән һуң барлыҡҡа киләсәк». – Күренекле философтың XX быуаттың 30-сы йылдарында уҡ бөгөнгө Рәсәй ысынбарлығын күҙ алдына килтереү һәләте уның мәшһүрлегенә ишаралай. Буржуазлыҡтың да ниндәйе әле! Хәҙерге буржуазияның эске йөҙөн Савва Морозов, Гучков, бер туған Коноваловтар һ.б. батша дәүеріндәге меценаттар менән сағыштырғанда, ер менән күк араһы!

Идара итеүсе даирәләрҙең Рәсәйҙе Европаның бер өлөшө итеп күрергә һүнмәҫ ынтылышына үҙенсәлекле баһаны исеме үрҙә телгә алынған Збигнев

Бжезинский ҙа биргән. «Рәсәй Евразия дәүләте булып ҡала, ти ул аталған хеҙмәтендә. – XX быуаттың 20-се йылдарында уҡ кенәз Трубецкой былай тип әйтеп ҡалдырған: «Коммунизм – европалылыҡтың боҙолған варианты, ул Европа менән Америкала хакимлыҡ иткән материалистик критерийҙың уникаль урыҫ йәмғиәтенең рухи нигеҙҙәре емерелеүенең сағылышы. Беҙҙең бурыс –Европаныҡына оҡшамаған өр-яңы мәҙәниәтебеҙҙе булдырыу. Шул саҡта ғына Рәсәй Европа цивилизацияһының боҙолған варианты булып түгел, ә Бөйөк Сыңғыҙ хан мираҫына аңлы Рәсәй Евразияһына әүереләсәк».

Быға аптырарға түгел, Трубецкой – Алтын Урҙа мырҙалары вариҫы бит.

Евразиясылыҡҡа ялтырауыҡ төҫтө йыш телгә алынған тарихсы, географ, этнограф Лев Гумилев биргән, тип дауам итә Бжезинский. Урыҫ этносының үҙенсәлектәрен билдәләгән евразиясылыҡ урыҫ һәм далаларҙы төйәк иткән урыҫ булмаған халыҡтарҙың ҡабатланмаҫ мәҙәниәте ҡушылмаһынан хасил булған. Гумилевса, Көнбайышҡа яраҡлашырға тырышыу урыҫ этносының үҙенсәлекле «йән»ен юғалтыуға килтерәсәк.

Эйе, Европа – үҙ урынында, Рәсәй – үҙенекендә, һәм быны бер нисек тә үҙгәртеп булмай. «Рожденный ползать, летать не сможет», ти бит урыҫ әйтеме лә. Был фекергә быйыл июнь аҙаҡтарында «Коммерсантъ» гәзитендә донъя күргән «Россияне устали от политики» тигән мәҡәлә тағы ла ышандыра төшә. Граждандарҙың 75 проценты тап егерме йыл элек сәйәсәттән арыуы тураһында белдерә, сөнки, ти улар, хәлде яҡшыртыу өсөн бер ни ҙә эшләнмәй, алдашыу дауам итә. Иң аянослоһы шунда: респонденттарҙың 81 проценты киләһе һайлауҙарҙа ҡатнашырға йыйынмай. ВЦИОМ етәксеһе Валерий Федоров фекеренсә, граждандарҙың күпселеге сәйәси тормошта ҡатнашмай, егерме йыл инде уны ситтән күҙәтә.

Германияның Фридрих Эберт фонды менән РФ Фәндәр академияһының Социология институты үткәргән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе лә өмөтләндермәй. Әйтергә кәрәк, был сарала чиновниктар, эшҡыуарҙар, сәйәсмәндәр ҡатнашмаған, үҙ фекерен ябай ҡала һәм ауыл халҡы белдергән. Доктор Райнхард Крумм фекеренсә, һуңғы егерме йылда Рәсәй дәүләте Рәсәй йәмәғәтселеген ихтирам итмәгән. Ошо уҡ фекерҙе Рәсәй оппозицияһы һәм Көнбайыштың Рәсәй йәмғиәтенә ҡарата мөнәсәбәте тураһында ла әйтергә мөмкин. Һөҙөмтәлә Рәсәй властары ниндәй йәмғиәт менән эш иткәнен дә белмәй. Был фекергә аңлатма кәрәкме икән?

Дәүләт Думаһына быйылғы һайлауҙар Ватан йәмәғәтселегенең артабан ниндәй курс һайлауын асыҡ дәлилләйәсәк. Әгәр ҙә ул илдең элеккесә углеводородтар менән һатыу итеүсе үҫеш юлына баҫҡан дәүләт булып ҡалыуын теләй икән, әлбиттә, «Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты» өсөн тауыш бирәсәк. «Серегән байҙар артабан да байыһын, фәҡирҙәр тамам бөлһөн, «мәғариф реформаһы» әлегесә дауам итһен» тигәндәр «Берҙәм Рәсәй» платформаһын һайлаясаҡ. «Республикалар башлыҡтары батша дәүерендәге кеүек тәғәйенләнһен, эш хаҡтары СССР кимәленән дә түбән ҡалһын» тигәндәр әлеге курс өсөн тауыш бирәсәк.

Бәлки, барыһынан да туйған граждандар күҫәк тотоп урамдарға сығыр? Бына быныһы ысынлап та кәрәкмәй. 1917 йылда Рәсәй халҡы бер тапҡыр тырмаға баҫҡайны бит инде.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

## ИЛЕ МЕНӘН БЕРГӘ КҮРҘЕ

*Күпме йылдар үтеп, күпме һыуҙар аҡкан, гөлдәр үҫкән, елдәр иҫкән! Нисә быуат артта ҡалһа ла, ата-бабаларыбыҙҙың ауыр яҙмышы тураһында уйланырға мәжбүрбеҙ. Эйе, заман менән заман уралған, үткәндәрҙе белмәй тороп хәҙергене төшөнөү ҡыйын. Бөгөнгөнө аңламайынса ла киләсәкте күҙаллау мөмкин түгелдер... Тарих – таҡыр юл ғына түгел, уның соҡор-саҡыры, һикәлтәләре, үрҙәре, хатта тар ғына һуҡмаҡтары ла бар. Был матур тормошта йәшәүемә лә инде ярты быуат. Ошо яҙмам яҡын кешеләрем: олатайым, уның ағаһы, улы тураһында. 20 йыл инде атайым мәрхүм һөйләп ҡалдырған ваҡиғаларҙы күңелдән үткәргәндә, уларҙың ни тиклем ауыр, ҡыҙғаныс, ғибрәтле булыуына йән әсей.*

XIX быуаттың 90-сы йылдары аҙағы. Ауылдың буйынан-буйына һуҙылған соҡорҙарҙан аҡкан шишмәләрҙән халыҡ эсергә һыу ала. Урамдың уртаһында – Шәңгәрәй ҡарт тирмәне. Лаяшты ауылы өйҙәре тирмәндең ике яғында ла урынлашҡанлыҡтан, береһе – «арьяҡ», икенсеһе «бирьяҡ» тип атала.

Көн сығышынан ҡояш байышына һуҙылған Бөрө – Минзәлә юлы (халыҡ телендә – Себер урамы) тип аталған телеграф бағаналы, ҡом һибелгән урамдың уртаһында – Мутиковтар йорто. Ҡояш байыш яҡ – «Этлекәй саллығы», арьяҡтағыһы «Таҙлар урамы» тип атала. Көньяҡтан килеп инә торғаны, соҡор буйында булғанлыҡтан, – «Аҫҡы урам», ә ситтәгеһе, тау башындағыһы, «Починка» тип йөрөтөлә. Шул тау итәгендәге өй Сәлиғәскәр тигән кешенеке булғанға, тауға «Сәри тауы» тигән исем бирелгән. Арғы яҡта айырым «Типтәр урамы» һуҙылып китә. 1917 йылға тиклем өс өйлө кешеләр – һигеҙ ғаилә, ике өйлөләре – 44, ә ҡалғандары – бер өйлө. Ҡалай түбәле йорт берәү. Типтәр урамында өс өйлө кешеләр юҡ, ике өйлөләр – ун кеше, ҡалғандары, йәғни күпселеге – бер өйлө. Ике мәсет бар. Береһендә – ике мулла менән бер мәзин. Икенсеһендә – бер мулла һәм бер мәзин. Һыу тирмәне – икәү, ә ел тирмәне – берәү. Ашлыҡ урыусы машиналар ҙа бар. Тимер һабан – ике кешелә. 200 - 300 дисәтинәләп иген сәскәндәр – икәү, 30 дисәтинәгә ҡәҙәр – берәү, 20 дисәтинәгә тиклем – биш-алты кеше. Байҙарға хеҙмәт итеп кенә тамаҡ туйҙырыусылар бер-ике байғош булһа, үҙ хужалығында ла, кешегә лә эшләп көн иткәндәр – 50-ләп йорт. Ҡалғандары үҙ хужалығында ғына эшләп көн күрә.

Революцияға тиклем гәзит алдырып уҡыусылар өс кенә кеше күренә. Халыҡ, ғөмүмән, гәзит һүҙенә ышанмаған. Сит губерналарға китеп белем алыусылар ни

бары дүртәү: бер туған Билал, Роза, Васфетдин Мутиковтар һәм исеме билдәһеҙ тағы бер кеше. Мутиковтарҙың атаһы Ғилметдин йәш сағында ауыл муллаһында уҡыған. Атаһы ҡаршы килеүгә ҡарамаҫтан, ул Әсән олоҫо Өсбүлә ауылы имамы Ҡадиррахман Кучиев мәҙрәсәһенә уҡырға барып инә. Ул ваҡытта тирә-яҡта дан тотҡан мәҙрәсә шунда ғына була. Буш ваҡыттарында Ғилметдин хәҙрәттәргә, олораҡ шәкерттәргә ашарға әҙерләй. Хәҙрәттең ҡар баҙына боҙ һалыу, мал ҡарау кеүек эштәрҙе лә башҡара. Тырышып алған белеме менән Ғилметдин Мутиков мәзин булырлыҡ дәрәжәгә етә, 1885 йылда ғаилә ҡора. 1900 – 1903 йылдарҙа Лаяшты ауылында ер аҡсаһы йыйыусы итеп һайлана. Уларҙың ике бүлмәле бәләкәй генә өйҙәре, һалам түбәле келәте, мунсаһы була. Ғилметдиндең тырышып донъя көтөүе, ҡышын балалар уҡытыуы күптәргә оҡшамай. Байҙарҙың уға ҡарашы ҡырҡа насарая.

Минһажетдин, Тимершәйех, Ғизетдин, Ҡаһтаран байҙар һ.б. бер нисә кеше ялыу яҙып, «хөкүмәт аҡсаһын ашаусы» тип, Ғилметдинде «һөргөнгә ебәртеү» өсөн халыҡтан ҡултамғалар йыя. Малы, һауыт-һабаһы, ҡойма-бураларына тиклем һанап сығалар. Тикшереү ваҡытында олоҫ идараһы ҡағыҙҙары араһынан 40 һумлыҡ түләү документы килеп сыҡҡас, «эш» туҡтатыла. Был ваҡиғанан һуң Ғилметдин Мутиков крәҫтиәнлек һәм балалар уҡытыу менән сикләнергә мәжбүр була. 1907–1908 йылдарҙа күрше ауылдарҙан, артабан ҡаланан килгән ауырыуҙарҙы дауаларға тотона. Бының өсөн ғәрәпсә, төркисә яҙылған китаптарҙы өйрәнә. Төрлө үләндәрҙән төнәтмәләр яһай, аптекаларҙан да һатып ала. Ошо һөнәре менән 1910–11 йылдарҙа айырыуса ныҡ шөғөлләнә. Көнсөл байҙар тағы ла земство башлығына, урядник-приставтарға ялыу төшөрә. «Рөхсәтһеҙ дарыу һата», – тип яҙа улар. 1910 йылда Ғилметдиндең өйөнә ете-һигеҙ тапҡыр тентеү яһала, ләкин ғәйеп таба алмайҙар. Әммә байҙар бының менән генә сикләнеп ҡалмай – ауылдан ҡыуыуҙы һорап, тағы ла ғариза яҙалар. Аптыраған Мутиков Өфө губернаһының табиплыҡҡа рөхсәт биреүсе ойошмаһына барып, кәрәкле ҡағыҙ алып ҡайта. 1911 йылда ауыл мәзине үлеп ҡалғас, урынына Ғилметдинде һайлайҙар.

Бер көн Исмаил ауылынан Имаметдин исемле кеше ауырыу бажаһы өсөн дарыу һорап килгәс, Ғилметдин дарыу бирә һәм нисек эсергә кәрәклеген өйрәтә. Ләкин дарыуҙы артыҡ күп эскәнлектән, был әҙәм Бөрөгә барған юлда үлә. Фажиғәле хәл буйынса һорау алғанда Имаметдин дарыуҙы Мутиковтан алыуын, тимәк, бажаһының үлеүендә ғәйеп унда булыуын әйтә. 1916 йылдың октябрендә барлыҡ дарыуҙарын тартып алып, Мутиковты хибескә* алып китәләр. Ғилметдин Бөрө төрмәһендә бер нисә ай ятҡандан һуң, Имаметдин бажаһының үлемендә уның ғәйебе юҡлығын, мәрхүмдең үҙе ғәйепле икәнлеген әйтеп, яңы ғариза биреүгә ҡарамаҫтан, Мутиковты сығармайҙар. Улы Билал Дүртөйлө, Бөрө, Өфө тарафтарына йөрөп, атаһының ғәйепһеҙлеген юллап ҡарай. Имаметдиндең тәүге ғаризаһы иҫбатланманы тип табылғас, 1917 йылдың апрелендә генә Ғилметдин Мутиковты азат итәләр. Мәрхүмдең дарыуҙы һалдат хеҙмәтенән ҡалыу өсөн күп эсеп ағыуланыуы асыҡлана. Имаметдиндең тәртибе ҡурҡыуҙан тип, уны ла ғәйепләүҙән ҡотҡаралар.

1915 йылдың көҙөндә Васфетдин Мутиков Дүртөйлөгә 40 бот 20 ҡаҙаҡ борсаҡ һатырға бара. Ҡағыҙында «бер йорт, ҡырҡ бот» тип яҙылған булһа ла, егет кассаға килгәс: «Нисә бот һалдың?» – тигән һорауға: «40 бот 20 ҡаҙаҡ», – тип яуап

*Хибес — төрмә, зиндан.

бирә. Уны тотоп алалар ҙа, акт төҙөп, хибескә оҙаталар. «Хәреф таный тороп, ярлыҡты ҡарарға тейеш ине, подделка яһаған», – тип Васфетдинде бер йылға иркенән мәхрүм итәләр. Февраль революцияһы был срокты алты айға ҡалдыра. Керенский хөкүмәте сығарған ҡанун буйынса төрмәләгеләр үҙ ихтыяры менән ғәскәри хеҙмәткә барырға мөмкинлек ала. Васфетдин дә ғариза биреп, һаулығын комиссия тикшергәндән һуң, ғәскәри хеҙмәткә алына. Ауылда йыйын йыйып, муллалыҡ эшен тапшырыу (Васфетдин ошо вазифала тора – **Д.М.**), өйҙәгеләр менән хушлашыу өсөн егетте 10 көнгә ауылға ҡайтаралар.

...Йома көн. Ауыл ҡуштандарынан Ғизетдин бай, Лихман, Сәғи ҡарттар Васфетдинде: «Һин аристан. Һиңә мәсеткә инергә ярамай», – тип ҡаршы ала. Мутиков: «Ундай хәл шәриғәттә күрһәтелмәгән», – тип ҡаршы төшһә лә, уны тортҡоләп мәсеттән ҡыуып сығаралар. Васфетдин Өфөгә килеп, 103-сө полкта хеҙмәт итә башлай. Ай ярымдан һуң ауырып китеп, ике айға өйгә ҡайтарыла. Һуғыш ваҡыты булғанлыҡтан, ауылда ҡарттар ҙа байҙар ғына. Улар хаслыҡ ҡылыуын дауам итеп, Васфетдинде муллалыҡтан төшөрәләр ҙә Ҡоро Аласыҡ ауылынан Рәхимйән исемле бирәүҙе ҡуялар. Ике айҙан егетте ғәскәри хеҙмәттән бөтөнләйгә азат итәләр. Муллалыҡтан идара тарафынан төшөрөлөү тураһында ҡарар булмағас, ул был вазифаны яңынан үтәй башлай.

Ляаштының көнсөл кешеләре Васфетдинде муллалыҡтан сығарыу өсөн ете ҡултамға йыйып, ғариза бирә. 1918 йылдың мартында идара улар һораған ҡарарҙы сығара. Нигеҙ итеп Мутиковтың олоҫ йыйылыштарына йөрөү, һалдаттан ҡайтҡан йәштәр менән усадьбаларҙы ҡырҡтырыу, ерҙе кеше башына бүлеү кеүек эштәрҙә ҡатнашыуын күрһәтәләр. Имеш, «имам булырға яраҡлы түгел». 1918 йылда ойошторолған боевой дружиналар ҙа Мутиковтарға йыш ҡына һуғылып йөрөй. Билал был ваҡытта һул социалистар фирҡәһендә булып, Өфөлә йәшәгәс, ауылда уның тураһында, «большевик икән» тигән хәбәр тарала.

1918 йылдың июнь баштарында аҡ чехтар Бәләбәй ҡалаһына яҡынлағанда, ауылдарҙа кулактарҙың баш күтәреүе сәбәпле, Ғәләүетдин мулланың үлтерелеүе, имеш, ғәйепле кешеләрҙең береһенең «Өфөнән Билал Мутиков ебәреүе буйынса килдек» тип ялғанлауынан файҙаланып, үсле кешеләр Ғилметдин менән Васфетдин Мутиковтарҙы хибескә һалдыра. Икенсе көнөнә үк улар бик күп халыҡ йыйып, «Ғәләүетдин хәҙрәтте үлтереүселәр шулар» тип, уларҙы юҡ итергә була. Тирә-яҡ ауылдарға: Андреевка, Исмаил һ.б. Әсән олоҫо ауылдарына бойороҡтар таратыла. Унда кеше үлтереүселәрҙе тотоуҙарын, ғибрәтле хөкөм буласағын, шуға күрә 18 йәштән оло ирҙәр һәм ҡатындар килергә тейешлеге әйтелгән була. Икенсе көндө иртәнге 9-ҙа бөтә ауыл халҡы йыйыла. Дүртөйләнән милиция начальнигы Мирзахан Мәҡсүтов 10-лап хәрби дружинник менән килеп, Васфетдин менән Ғилметдин Мутиковтарҙы уларға биреүҙе һорай. Ҡайһы берәүҙәр: «Әле һеҙ талаусыларҙы яҡлайһығыҙмы?» – тип ҡысҡырышып, дружинниктарға һөжүм итә. Дружина, мылтыҡтан ата-ата, Дүртөйләгә ҡаса. Шул ваҡыт Теләк Ҡабул тигән ауыл кулагы тимер таяғы менән Ғилметдиндең муйынына сәнсә. Был хәлде күреп торған Васфетдин: «Ниңә уны туҡмайһығыҙ, уны үлтергәнсе мине үлтерегеҙ!» – тип ҡысҡыра. Ғәләү мулланың тарантасына Ғилметдиндең мәйетен һалалар ҙа Васфетдингә арбаны һөйрәргә ҡушалар. Күпер янындағы үрҙә уның арбаны тартырға көсө етмәүен күреп, Түбәнге Әлкәш ауылынан Насип, Исмаил ауылынан Хәмзә һ.б. Васфетдингә бәке, беҙ менән сәнсепсәнсеп ала. Ауырыраҡ булһын өсөн, үҙҙәре лә арбаға ултырып-ултырып алалар.

Яланға сығыу менән өҫтәл ҡуйып, уны Лихман, Сафый ҡарт, Ғизетдин, Лоҡман, Теләк Ҡабул ауылы кулагы, Ситдиҡ муллалар һырып ала ла хөкөм башлығы

итеп Ҡоро Аласыҡ ауылынан Шәйҙулла мулланы ултырта. Васфетдиндән яуап алыу башлана. Ул атаһының да, үҙенең дә бөртөк тә ғәйебе юҡлығын иҫбатларға тырыша. Ҡайһы берәүҙәрҙең: «Сафый, юҡҡа кешене харап иттерәһең, уларҙың гонаһы юҡ бит», – тиеүенә ҡарамаҫтан: «Һәр кем Васфетдиндең битенә төкөрөргә тейеш», – тигән ҡарар сығарыла. Төкөрөүселәр була, йәлләп илағандарҙы туҡмап ташлайҙар. Мутиковты телеграф бағанаһына бәйләп: «Һәр кемгә һуғырға ирек», – тип иғлан итәләр. Асытамаҡ ауылынан берәү күсәк менән Васфетдиндең башын яра һуға. Ике мәйетте лә ҡыҙыл балсыҡ ала торған соҡорға күмәләр.

Ошо ваҡиғанан һуң Мутиковтарҙың өйө янына ҡарауыл ҡуйып, берәүҙе лә яҡын ебәрмәҫкә ҡушалар. Ҡайһы берәүҙәр: «Өйгә ут төртөргә, бөтә ғаиләһен яндырырға», – тип ҡоторһа ла, күптәр ҡаршы төшөп, таралышалар. Өйҙә әсә, балалары Роза, Васфетдиндең ҡатыны Ғәйшә ике йәшлек Рәсүл (атайым) менән бер йәшлек Рәйесен ҡосаҡлап, аҡылдан яҙырҙай хәлдә ҡурҡып ултыра. Яланда хөкөм башланыу менән Мутиковтарҙың яҡындарының исемлеген төҙөп, юҡ итергә ниәтләнһәләр ҙә, тегеләр быны алдан һиҙеп, ҡасып өлгөрә. Бына улар: Ғиззәт ҡарт, Ғәзиз, Шәриф, Мөхәмәтхан, Баһман, Сәмиғулла менән улы Рәхмәтулла, Шәрифйән, Зәки, Ғиниәтулла, Сафиулла, Хәкимйән, Мәскүрйән, Мырҙайән һ.б.

Бәләкәй саҡта Билалдың һис кенә лә уҡырға теләге булмай, сөнки башҡаларҙың уҡыуы ла уға ауыр тойола. Ул тамағын туйҙырып ала ла, аяғына йөн ойоҡ өҫтөнән сабата, башына ҡолаҡсын бүрек, өҫтөнә бишмәт кейеп, билен быуып, бәләкәй сана менән тау шыуырға китә. Атаһы уны көсләп тигәндәй уҡырға өйрәткәс, Билал яйлап күнегә. 1908 йылдың көҙөндә ул Лаяштынан һигеҙ саҡрымдағы Әсән ауылына уҡырға китә. Унда ике мәҙрәсә бар: береһе – Фәтхелислам мулланыҡы, икенсеһе – Сәхипзада Мәҡсүтовтыҡы. Тәүгеһендә дин ғилемдәренән генә һабаҡ бирһәләр, икенсеһендә төрлө фәндәр уҡытыла. Билал уҡырға һуңғыһына урынлаша. Тырышып белем ала, намаҙға йөрөргә лә өлгөрә. Уҡыуҙар тамамланғас, бөтә фәндәрҙе лә «биш»кә тапшырған Мутиков шаһаҙатнамә алып ҡайта. Атаһы хатта: «Мин һине киләсәктә ҡалаға ебәреп уҡытасаҡмын», – тип өмөтләндерә. Билал Дүртөйлө ауылына килеп, урыҫ балалары араһында яңғыҙы уҡый. Урыҫса бер генә һүҙ ҙә белмәгән малайға оят та, ауыр ҙа була. Атаһына ошо хаҡта һөйләп биргәс, ул Билалды Әсән мәҙрәсәһенә уҡырға ебәрә. Ике йыл уҡығандан һуң атаһы уны Бәйге ауылына уҡырға ебәрергә әҙерләй башлай.

Бәйге – уртаса ауыл булып, мәҙрәсәһе бәләкәй генә. Тик шуныһы: унда Төркиәлә ғилем эстәп ҡайтҡан мулла дәрес бирә. Ирҙәр мәҙрәсәһендә – 500-ләп, ҡыҙҙарҙыҡында 300-ләп кеше белем ала. Араларында фәҡирҙәр менән бергә байҙары ла бар. Шулай уҡ Петербург, Минск, Кавказ, Ҡырым, Төркөстан, Себер, Владивосток яҡтарынан килеп уҡыусылар ҙа байтаҡ. 1911 йылдың ғинуарында «Сарапулдан йәшерен полиция килә икән» тигән хәбәр ишетелә. Шәкерттәрҙең ҡайһы берәүҙәре сәйәси яҡтан шиклерәк күренгән ҡағыҙҙарын мейескә яғырға тотона. Билал да революция темаһына яҙылған шиғырҙарын шунда ырғыта. Төндә, шәкерттәр йоҡоға талғас, 40-50-ләп шымсы һәм полицейский ауылды килеп баҫа. Хәҙрәттәрҙе өйҙәренә бикләйҙәр, мәҙрәсә лә ябыла. Билалдың да фатирын тентеп, китаптарын алып китәләр. Мәҙрәсә иртәгәһенә лә асылмай. Өс көн тентегәндән һуң хәҙрәттәрҙе, бер нисә мөғәллимде, дүрт-биш атҡа тейәлгән китаптарҙы Сарапул ҡалаһына алып китәләр. Уҡыу туҡталмай, мөғәллимдәрҙе юғары синыфтарҙа уҡыған шәкерттәр алмаштыра. Аҙаҡ ҡулға алынғандарҙың ҡайһы берҙәре ҡайтып, уҡытырға тотона.

Йәйен хәҙрәттәргә хөкөм булып, уларҙың алтышар айға төрмәгә ябылыуы тураһында гәзиттәрҙән уҡып беләләр. Ҡазан яғындағы билдәле ҡәҙимсе Ишми ишан һәм муллалар улар өҫтөнән ялыу биргән икән. Мәхкәмәнән һуң мәҙрәсәне бөтөнләй ябалар. Билал Мутиков көҙөн Әгерже ауылында Ҡотдос Ғабдрахманов мәҙрәсәһендә бер йыл уҡығас, Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә бара. Хәлфә булырға, артабан белемен Төркиәлә дауам итергә хыяллана ул.

«Ғәлиә» мәҙрәсәһе Уфимская менән Нагорная урамдары мөйөшөндәге өс ҡатлы ҡыҙыл кирбес йортта урынлашҡан. Аҫҡы ҡатында – ашхана, уртала – ятаҡтар, ә өҫкөһөндә – уҡыу бүлмәләре. Мәҙрәсәне Өфө байҙары Шәмиғолов, Йәнтүрин, Нәзиров, Кәримов һ.б. үҙ аҡсаһына тота. Уҡытыусылар коллегияһы ла булып, уны Өфө муллаһы Зыяитдин Камали етәкләй. Урынбаҫары – мәҙрәсә уҡытыусыһы Ғабдулла Шонаси. «Ғәлиә» ике әҙерлек һәм дүрт әсаси синыфтарҙан тороп, барыһы алты йыл белем биреү ҡаралған. Беренсе әҙерлек синыфына инеү өсөн рөшди синыф дәрәжәһендә белем алыу мотлаҡ. Билал шунда урынлаша. Мәҙрәсәнең эске тәртиптәрен күҙәтеүсе мөдир Ғабдулла Шонасиҙың шәкерттәргә мөнәсәбәте бик ҡаты. Йыйылыштар, уйындар ойоштороу, театрҙарға йөрөү, төрлө ҡоралдарҙа уйнау тыйыла – шәкерт уҡырға ғына тейеш. Әлбиттә, шәкерттәр араһында тора-бара уҡытыу программаһы менән ризалашмаусылар күбәйеп, «исләхәт яһау» фекере көндән-көн нығый бара.

1913 йылдың февралендә шәкерттәр дәрескә инеүҙән баш тарта. «Долой Шонаси, долой ҡаты режим!» тигән һүҙҙәр яңғырай. Уҡытыусылар үҙ бүлмәләренә инеп боҫорға мәжбүр була. Шәкерттәр уларҙың ишеген шаҡый башлағас, Шонаси яланбаш килеш урамға сығып ҡаса ла, револьверын тотоп, ҡаршы тора. Билал бер нисә тапҡыр пугачтан атып ебәрә. Һәр кем үҙенсә ҡысҡыра, кемдең ни һөйләгәнен аңлар хәл юҡ. «Йәшәһен хөрриәт, йәшәһен фән-уҡыу, бөтһөн ҡыҫынҡы тормош!» тигән һүҙҙәр генә ишетелеп ҡала. Әммә оҙаҡламай Шонаси бер нисә жандарм эйәртеп килә. Полиция бүлмәләрҙә, коридорҙа йөрөп, ҡурҡыу һалып сығып китә. Ун биш көн самаһы уҡыуҙар туҡталып тора, мәҙрәсә шәкерттәр ҡулына күсә. Көнөнә бер нисә йыйылыш үткәреп, ниндәй фекергә килеү тураһында һөйләшәләр. Мәҙрәсә әһелдәре, уҡытыусылар һәм байҙар менән дә һөйләшеүҙәр алып барыла. Бер фекерҙә булып, теләктәренә ирешкәнсе уҡымаҫҡа ҡарар сығаралар. Бәләбәй кантоны Ҡаран ауылы хәҙрәтенең улы Хәмит Хәбибов, Бөрө кантоны Әсән ауылынан Шәйехзада Бабич ҡына был фекергә ҡушылмай. Уларҙың шәкерттәр араһындағы һүҙҙәрҙе уҡытыусыларға, байҙарға еткереүе лә асыҡланғас, икеһен дә йыйылыштарға индермәҫкә, бойкот иғлан итергә булалар. Бер саҡ «Мәҙрәсәне ябалар, ҡайһы берәүҙәрҙе ҡулға алалар» тигән хәбәр сыға. Шәкерттәрҙе йыйып: «Мәҙрәсәнең эске тәртибенә ризаһыңмы, юҡмы?» – тигән һорау ҡуйылғас, Мутиков риза түгеллеген белдерә. Уны төрлөсә ҡурҡыталар, «был – тәүфиҡһыҙлыҡ» тип дин менән өркөтөргә тырышалар.

120 шәкерттең 63-ө мәҙрәсәнән ҡыуыла. Улар коридорҙан «Марсельеза» йырлап сығып китә лә, һәр ҡайһыһы алдан әҙерләнгән фатирҙарға урынлаша. Билал Малокузнецкая урамындағы Сәлимгәрәй ҡартта йәшәй башлай. Мәҙрәсәнән ҡыуылғандарға ҡала халҡынан иғәнә йыйып бирелә. Приказчиктар ойошмаһының ярҙамы бигерәк тә ҙур була. Шәкерттәрҙең төп штабы Уфимская урамының 56-сы, 58-се йорттарында урынлаша. Уларға матди ярҙам йөҙөнән көн һайын төшкө ашҡа 10-ар тин бирәләр. Шәкерттәрҙең ҡайһы берҙәре ауылдарына таралыша, бер өлөшө ғариза биреп, мәҙрәсәгә ҡайта. «Ҡыуылып ҡайтҡан» тигән исем күтәреүе ҙур ғәрлеккә һаналғанлыҡтан, Билал ауылында ике көн генә тора ла Бәләбәй кантонының Баҡалы ауылына урыҫ мәктәбенә уҡырға инә.

Баҡалы – Ляштынан 60 саҡрымдағы ҙур ғына ауыл. Өс класлы башланғыс, ике һәм дүрт класлы мәктәптәре бар. Ул саҡта сәс үҫтереү, башҡа фуражка, аяҡҡа ботинка кейеү, кеше алдында тәмәке тартыу кеүек ғәҙәттәр насар иҫәпләнгәнлектән, ундайҙар тураһында «кафыр булған» тигәндәр.

1913 йылдың көҙөндә Билал тағы Өфөгә уҡырға килә һәм «Ғосмания» мәҙрәсәһенең беренсе иғдади синыфына уҡырға алына. Мәҙрәсәнең эске-тышҡы тәртибе «Ғәлиә»неке кеүек үк, уҡытыусылар араһында ла арыу кешеләр осрамай. Мәҫәлән, география уҡытыусыһы Һиҙиәт мөғәллим эшен Билал ҡәҙәре лә белмәй. Уҡытыусы Әфтәх Әсәҙуллиндың шәкерттәргә мөнәсәбәте бик яҡшы була. Тәфсир, ғәҡәид һәм фәләсәфәнән Йыһангир хәҙрәт дәрес бирә. Билал менән бергә Бөрө өйәҙе Мәскәү олоҫо Иҫке Яндыҙ ауылынан Ғәбделхаҡ мулланың улдары Әсләм һәм Фәтхелбаян Хәкимовтар көҙгә тиклем уҡып, ауылдарына ҡайта.

1914 йылдың июлендә Беренсе бөтә донъя һуғышы сығып, ирҙәрҙе фронтҡа ала башлайҙар. Исмаил ауылына һалдаттар, десятниктар килеп, баҫыуға һәм бесәнгә киткән халыҡты йыйып алып ҡайта. Халыҡ гөр килә: берәүҙәр йырлай, икенселәре илай. «Аллаһу әҡбәр, Аллаһу әҡбәр! Лә илләһы илла Аллаһы, валлаһи әҡбәр, Аллаһу әкбәр вәлилләһе хәмед...» – тип ҡысҡырып тәкбир әйтеүселәр ҙә бар. Хәрби хеҙмәткә алынғандар, арбаларға ултырышып, ауылдан сығып китә. Кешеләр ҡосаҡлашып, бәхилләшеп илай, хушлаша. «Был ниндәй һуғыш икән?» – тип һорауға: «Сербия кешеһе Австрия батшаһының улын үлтергән дә, шуға һуғыш башланған, ә Сербия батшаһы беҙҙеке менән дуҫ булғанлыҡтан, беҙ уны яҡлап Австрияға ҡаршы барабыҙ», – тигән ярты-йорто хәбәр генә ишетелә. Халыҡ Бөрө ҡалаһына йүнәлә. Юл ыңғай байҙарҙың Десяткин тауы янындағы баҡсаларының ҡоймаларын емереп, алмаһын йыйып алалар. Бөрөлә ығы-зығы. Урам тулып иҫеректәр аҡырышып, йырлап йөрөй. Икенсе көн ғауға тағы ла көсәйә. Араҡы һатыу тыйылғанлыҡтан, кешеләр араҡы складтарын таларға бара. Оҙон бүрәнәләр менән ишектәрҙе емермәксе булалар. Полиция ҡоторған халыҡты туҡтатырға сыға.

Көҙ еткәс, Билал «Ғосмания»ла уҡыуын дауам итә. «Ғәлиә» мәҙрәсәһенең уҡытыусыһы Ғабдулла Шонаси менән Закирел Ҡадири шунда эшкә күскән икән. Мәҙрәсәлә ремонт яһағандар, ятаҡ ҙурайтылған. Программала ла күп кенә үҙгәрештәр күренә. Дөйөм төрөк тарихы һәм төрки-татар теленән дәрес биреү өсөн Зәки Вәлидиҙе саҡырғандар. Ул шәкерттәрҙең иң яратҡан кешеһенә әүерелә, сөнки барыһына ла тигеҙ ҡарай, үҙен бик ябай тота, күп ваҡытын шәкерттәр янында үткәрә. Тарих дәрестәрендә, элекке уҡытыусылар кеүек, ул заманда ниндәй хөкүмәт булғанын, һуғыштар тураһында ғына һөйләп ҡалмайынса, шул замандың иҡтисади тормошонан һәм ғөрөф-ғәҙәттәренән мәғлүмәттәр килтерә. Уның төрөк, татар, башҡорт телдәренең килеп сығыу тарихын, әңгәмә, йыр, әкиәт, мәкәлдәре тураһында мәғлүмәте лә бик ҡыҙыҡлы. Яңы хәлфә, һөйләп кенә ҡалмайынса, шәхси китапханаһынан китаптар биреп тә торғолай. Уның дәрестәре шәкерттәрҙе үҙ аллы уҡырға-тикшеренергә өйрәтеү формаһында булғанлыҡтан, берҙәмлекте нығытыуға ярҙам итә. Вәлидиҙең шәкерттәр тормошона үҙаллылыҡ биреү яҡлы икәне лә уны яҡын күреүгә сәбәп була. Ашханаларҙа дежур тороу, уҡытыусылар коллегияһына шәкерттәрҙән вәкилдәр индереү, китапхананың уҡыусылар ҡулына күсеүе лә ҙур яңылыҡ була. Тәүҙә китапхана мөдире итеп Билал Мутиковты һайлайҙар. Ул иғәнә йыйыу, гәзит-журналдар алдырыу, китап таратыу эштәрен алып бара. Әҙәби кисәләр ойоштороу эшенә лә ул һайлана, шул уҡ ваҡытта театрҙа ла уйнай, тамашаларҙа ҡатнаша.

Уҡыусыларҙың йыйылыштары ла йыш үткәрелеп, эске һәм тышҡы тәртип, етешһеҙлектәрҙе тикшереү, кисәләр ойоштороу, китапхана эштәре мәсьәләләре ҡарала. Күп уҡырға ратҡанлыҡтан, Билал Ырымбурҙа сыҡҡан «Ваҡыт», Өфөләге «Тормош», Ҡазандағы «Йондоҙ», «Ҡояш» гәзиттәрен төнгө дүрттәргә тиклем уҡып ултыра.

1915 йылдың авгусында, йәштәре етмәһә лә, 1896 йылғыларҙы ла хеҙмәткә саҡыра башлайҙар. 1897 йылғы Билалды һәм уның йәштәгеләрҙе ноябргә тиклем ҡалдырып торалар. Егет тағы ла уҡырға китә. 1916 йылда ул Петроградҡа ғариза яҙып, уҡыуҙы бөтөргәнсе хәрби хеҙмәттән азат итеүҙе һорай. Күптәрҙең аяҡ шештереп һалдаттан ҡалыуҙарын ишетеп, ул да шул ысулды ҡулланып ҡарарға була, һәм һул аяғына биш укол ебәрә. Аяҡ көндән-көн шешеп, Билал баҫып тора ла алмай башлай. Май аҙаҡтарында уны ат менән Бөрөгә алып баралар. Резерв комиссияһының баш врачы Смородинов уны ҡарай ҙа асыулана:«Былай эшләйҙәрме ни, дарыу ғына еҫкәргә кәрәк ине!» Конвертҡа һалып 50 һум биргәс, табип «йомшара», сөнки ул ваҡытта ришүәтһеҙ бер эш тә сығарып булмаған. Икенсе көндө Билал комиссияға инә. Уға «Ике айға ҡалдырырға» тигән ҡағыҙ тотторалар. Һуңынан почта аша һуғышҡа алыныу тағы кисектерелә. Март баштарында почтальон Билалға йәшерен генә бер телеграмма күрһәтә. Унда Николай батшаның тәхеттән төшөрөлөүе, Петроградта сыуалыштар башланыуы тураһында хәбәр ителә. Халыҡтың батшаға асыуы ныҡ ҡабарған саҡ. Күптәрҙең телендә «Ниндәй хөкүмәт булыр, һуғыш туҡталырмы икән?» тигән һорауҙар ҡайнаша. Олоҫ йыйылыштары булып, унда старшиналарҙы төшөрөү, урядниктарҙың погондарын йолҡоп ташлау, батшаның һүрәттәрен алып ырғытыуҙар киткәс, ваҡытлы тәртип һаҡлау комитеттары ойошторола. «Һин грамотныйһың», – тип Билалды комитетҡа һайлап ҡуялар, секретарь эшен дә ул үҙе алып бара. Әсән ауылының мәҙрәсә хужаһы Сәхипзада Мәксүтов, мисәүле аттар егеп, төрлө урындарҙа йыйылыштар үткәреп йөрөй. Николай батшаның мосолмандарҙы суҡындырырға теләүен, һуғыш сығарып илде бөлгөнлөккә төшөрөүен, күп кешенең ерҙән файҙалана алмауын тәнҡитләй. «Мәсет һалыу өсөн рөхсәт һорап йөрөмәҫкә, муллаларға эш хаҡы түләргә, мәҙрәсәлә уҡытыуға ирек ҡуйырға» тигәнерәк дини-милли азатлыҡ хаҡында ҡарарҙар ҡабул ителә.

Мәксүтов етәкселегендә Дүртөйлө ауылында беренсе тапҡыр Май байрамы үткәрелә. Бай хөрриәт тураһында һөйләп, мосолманлыҡты алға ебәрергә, халыҡты уҡырға өндәй һәм эре ер биләүселәрҙән ерҙәр алынып, крәҫтиәндәргә биреләсәге хаҡында ла әйтеп үтә. Ауыл урамдары буйлап ҡыҙыл, йәшел флагтар күтәреп демонстранттар уҙа. Көҙөн «Бөтә Рәсәй Учредительный йыйылышына һайлауҙар була икән» тигән хәбәр сыға. Өфө губернаһы халҡы ҡарамағына 11-се исемлектәге кандидатуралар ҡуйылып, агитация башлана. 1-се мосолман дини зыялылар исемлеге лә төҙөлөп, муллалар халыҡты күберәк шул исемлеккә тауыш бирергә өндәй. Өсөнсө исемлек социал-революционерҙарҙыҡы, ул ере аҙ типтәр, ере булмаған башҡорттарҙан тора. «Башҡортостан автономияһы кәрәк» тиеүселәр 11-се исемлеккә тауыш бирергә тейеш була.

Билалдың һуғышҡа алыныр көндәре лә яҡынлай. Ул ваҡытта «Ғосмания» ҡарамағындағы иптидам мәктәбендә дәрес бирә. Кәшфи Ҡәрипов, Ғариф Ғиззәтуллин да ошонда уҡыта. Өфө ҡалаһында йәшәгән татар, башҡорт уҡытыусыларының йыйылышы үтеп, Мутиков та идараға финанстар өсөн яуаплы ағза итеп һайлана. Татар һәм башҡорт уҡыусыларының комитеты ла барлыҡҡа

килгәс, Билал унда ла ағза итеп һайлана. Ғәлимйән Ниғмәти комитет рәйесе була. Мутиков әҙәбиәт темаһына лекциялар уҡый. Ғалимдарҙы саҡырып, шәкерттәр өсөн әҙәби кисәләр үткәреү йышайып китә. Төрлө уйындар, йыр, хорҙар ойоштороу киң тарала. «Ғәлиә» менән «Ғосмания»ла һәм «Дәрелмөғәллимәт» тигән ҡыҙҙар мәҙрәсәһендә айырым хорҙар, оркестрҙар барлыҡҡа килә. «Ғосмания» мәҙрәсәһе янында ҡыҙҙар өсөн асылған «Ғәлиә абыстай» мәҙрәсәһенә ҡыҙҙар гимназияһы һәм башҡа урыҫ мәктәптәрендә уҡыған уҡыусылар ҙа йәлеп ителеп, улар менән дә эш алып барыла.

Манифестациялар милләт мәжлесе асылғанда һәм милли полк төҙөлөү уңайы менән үткәрелә. Мәҙрәсәнең үҙ флагы булып, унда «Йәшәһен тупраҡлы Башҡортостан!», «Йәшәһен Иҙел-Урал буйы!» тип яҙыла. Урамдан үткәндә күберәк «Марсельеза»ны йырлап, колоннаның командиры булып Билал Мутиков бара. 1917 йылдың көҙөндә «Власть большевиктар ҡулына күскән икән, уларҙың башында Ленин тигән кеше тора, ә Керенский ҡасҡан» тигән хәбәр тарала. Мәҙрәсәләрҙә йыйылыштар үткәрелеп, унда «Большевиктар һуғышҡа ҡаршы икән» тигән һүҙҙәр еткерелеү менән, һуғышҡа алынып өлгөрмәгәндәр, бигерәк тә шәкерттәр, Октябрь байрамын шатлыҡ менән ҡаршы ала. Әммә большевиктар фирҡәһенең көсө күпме булыуын, уларҙың программаһының асылын аңлатҡан кеше юҡ әле. Киреһенсә, Закирел Ҡадири коммунистар һәм большевиктарҙың насарлығы, динде танымауы, теләгән бер ҡатынға ҡул һуҙып, фәхешлек донъяһы ҡорорға йөрөүе тураһында һөйләй. Күптәр Зәки Вәлидиҙең лекция уҡыуын һорағас, ул Башҡортостанда ерҙең тигеҙ бүленәсәге, социализм ҡороласағы тураһында әйтә. «Иҙел-Урал буйы үҙәк татар автономияһын ҡорорға кәрәк, башҡорт һәм татарға бүленеү айырым милләтте ваҡлау була», – тип һөйләнеүселәр ҙә осрай. Өфөлә Шәмиғоловтар өйөндә «милли-мәҙәни мөхтәриәт» яҡлыларҙың милли мәжлесе асылып, унда Рәсәйҙең төрлө яҡтарынан вәкилдәр йыйыла. Араларында Саҙрый Маҡсуди, Ғаяз Исхаҡи, Ғүмәр Тереғолов, Фуат Туҡтаров, Ғәлимйән Ибраһимов, Муса Бигеев, Ғабдулла Сөләймәни һ.б. була. Бер ваҡыт Зәки Вәлиди «Урал» кинотеатрында сығыш яһағанда (Ғәлимйән Ибраһимов йыйылышҡа рәйеслек итә), һалдаттар араһынан бер нисә кеше: «Әле һин алпауыттарҙы яҡлайһың икән, башҡортҡа ғына ер биреп, беҙгә ер ҡалдырмаҫҡа итәң, «долой!» – тип ҡысҡырыша башлағас, Вәлиди йыйылыштан сығып китә. Ул ваҡытта һәр йыйылыш та тауышлы үтеп, ҡайһы ваҡытта хатта ултырғыстар менән дә һуғышыуға барып еткән.

Билал Мутиков башлыса мәҙрәсә эштәре менән мәшғүл. 1918 йылдың 10 ғинуарында, милли полк төҙөлөү айҡанлы, Ивановск майҙанында ҙур парад, унан һуң демонстрациялар үткәрелә. Милли алайҙың (полк) штабы үҙәк урамда элекке сауҙа мәктәбендә урынлаша. Ләкин оҙаҡламай: «Мәркәздең ҡарары буйынса һуғыш туҡтаған, Германия менән солох булған, ғәскәрҙәрҙе тараталар икән», – тигән хәбәр сыға. Һалдаттар ҙа ауылға ҡайтарыуҙы һорай башлай. Етәкселәр ғәскәрҙе таратмаҫҡа тырышһа ла, һалдаттарҙы тыйып тота алмайҙар. Шулай ҙа Мосолман хәрби шураһы тигән ойошма таратылмайынса, милли алайҙың бөтә ҡоралы уның ҡулында ҡала. Аҙаҡ Хәрби шура кешеләре: «Хөкүмәтте үҙ ҡулыбыҙға алырға кәрәк», – тип ҡотҡо тарата башлай һәм яйлап ҡына шәкерттәрҙе ҡоралландырырға тотона. Ҡайһы берәүҙәр атаҡҡа наган, штык, ҡылыс күтәреп ҡайта. Бер көн Хәрби шуранан вәкил килеп, өлкән шәкерттәрҙе йыя ла: «Милли алай таратылғас, һеҙҙең ҡулдағы ҡорал тартып алынасаҡ. Инҡилаб төрки-татар халҡына ҙур хәүеф менән янай, шуның өсөн хөкүмәтте Хәрби шура үҙ ҡулына

алырға уйлай. Был эштә шәкерттәр ҙә ҡатнашырға бурыслы, төркөмгә күп кенә кеше яҙылды. Хөкүмәт алмашыныу менән Һамарҙа ла шул уҡ хәл буласаҡ», – тип сығыш яһай. Тиҙ арала 70-ләп кеше йәшерен дружинаға яҙыла. Бер нисә көн үткәс, Хәрби шуранан тағы ла кешеләр килеп, шура торған йортто барып баҫырға кәрәклеген аңлата. «Беҙ һеҙгә ҡоралды аҙаҡ таратырбыҙ ҙа, губернатор йортонда урынлашҡан идараны баҫып алып, Өфөнөң үҙендә айырым хөкүмәт ҡоролоуы хаҡында әйтербеҙ», – тип был эштең бик йәшерен икәнен дә әйтәләр.

Икенсе көндө үк: «Милли алайҙың ҡоралдарын хөкүмәт үҙ ҡулына алған икән», – тигән хәбәр тарала. Ҡалала бер генә хөкүмәт барлығына ышана башлайҙар. Билал Иҙел-Урал буйы социал-революционерҙар фирҡәһенә инеү өсөн ғариза бирә. Ышаныслыһы итеп Сәләх Аҙнағоловты күрһәтә. Күп тә үтмәй, Мутиков партия ағзаһы булып китә. Партияның башында Әминев, комитет секретары Ғүмәр Әлмөхәмәтов, Дәүкәев, С. Аҙнағолов, Ғәлимйән Ибраһимовтар тора. Уҡыуҙар тамамланып ауылдарға таралышыр алдынан, шәкерттәр ниндәй һөнәр буйынса эшләйәсәге тураһында фекер алыша. Билалға: «Һиңә докторлыҡ һөнәре килешә», – тиҙәр.

Лаяштыла 15 көн торғандан һуң Мутиков тағы Өфөгә килә. Һуғыш бөтөп, әҙерәк тыныслыҡ урынлашҡан саҡ. Егеттең русса уҡып, университетҡа инеү ниәте ҙур була. Ләкин Һамар яғында чехтарҙың Совет власына ҡаршы баш күтәреүе тураһында хәбәр килгәс, фирҡә ағзаларына һуғышҡа әҙерләнеү бурысы мәжбүри ҡуйыла. Ул ваҡытта партиялылар ҙур хоҡуҡтар менән файҙалана: шикле кешеләрҙе тотоп ябыуҙан башлап «ғәйебе юҡ» тип табылғандарҙы төрмәнән сығарыуға тиклем. Бының өсөн ҡала эсендә йәшерен күҙәтеү эше лә алып барыла. Шулай итеп, июнь айы килеп етә. Фронт бик яҡын булыуға ҡарамаҫтан, уҡыусыларҙың губерна курсы ойошторолоп, уның дәрестәре «Ғосмания» мәҙрәсәһендә алып барыла. Унда 500-ләп кеше уҡый. Ҡалала башҡа зыялылар ҙа күп булғанлыҡтан, бер тапҡыр Благовещен заводына тиклем пароходта йөҙөү ойоштороla. Бер мәл Билал уҡытыусы Фатима Йосопова менән таныша. Ҡыҙ үҙенең дәрелмөғәллимендә уҡығанда уҡ уның менән танышырға, хатта уға кейәүгә сығырға теләүен йәшермәгән була. Билал: «Беҙ бит фронтҡа китергә торабыҙ», – тип дәртен һүндерергә тырышһа ла, ҡыҙ: «Мин һинән ҡалмайым, бергә китәм», – тип шаҡ ҡатыра. Ләкин был танышлыҡ оҙаҡҡа бармай. Июндең 7-8-ҙәрендә Билалға атаһы менән ағаһының үлтерелеүе хаҡында хәбәр еткерәләр. «Билал большевик булған икән, ҡайтһа, үҙен дә үлтерәсәктәр», – тип тә иҫкәртәләр. Ошо хаҡта комитетҡа барып әйткәс, Мутиковҡа отряд алып ауылға ҡайтырға кәңәш итһәләр ҙә, ул: «Үлгән – үлгән инде, ҡара халыҡты ҡырып, үс алыуҙан мәғәнә юҡ», – тип баш тарта. Күңелендә вәхшиҙәргә ҡарата ҡаты асыу ҡабарһа ла: «Аҡ чехтар килһә, ғаиләне бөтөнләй ҡырып бөтөрәсәктәр»,– тигән ҡурҡыу ҙа тыуа.

Чехтар Дүртөйләнө баҫып алғас та, игене ҡыҙылдар заманында тартып алынып, халыҡҡа таратылып бирелгән Минһажетдин бай чехтар штабына барып, «Иген алған кешеләр 24 сәғәт эсендә уны икеләтә арттырып түләмәһәләр, Дүртөйләнән отряд ебәреләсәк» тигән ҡағыҙ алып ҡайта. Халыҡ игенде ҡайтарырға мәжбүр була. Баҡалынан Дүртөйләгә ярҙамға барыусы һалдаттарға Лаяштынан да 20 атлыҡ кеше тейәлеп китә. Әсән ауылында аҡ чехтарҙың разведкаһы менән һуғышып, ике һалдатты әсир алалар. Ҡыҙыл командир Чеверев янына килтереү менән, былар үҙҙәре теләп ҡыҙылдар яғына сығыуына ышандыра. Чеверев уларҙы азат итә. Әммә Дүртөйләгә үҙ штабтарына ҡайтыу менән, чехтар, йәнәһе, Әсәндә әсир алынып, туҡмалғандарын «тасуир итә». Лаяшты кешеләрен

штабҡа саҡыртып, теге чех һалдаттарынан: «Уларҙың ҡайһыларын таныйһығыҙ?» – тип һорайҙар. Берәһе Ниғәмәтулла исемле кешене «таный» һәм: «Мине ана шул кеше туҡманы», – ти. Ниғәмәтулланы шунда уҡ атып үлтерәләр ҙә аттары менән тапап китәләр. Артабан Ләяштынан үтеүсе отряд булмай.

Дүртөйләгә Билал менән бергә ҡайтҡан Кәшфи Ҡәрипов Бөрөгә барып әйләнә. Ҡала аҡ чехтар ҡулында булғанлыҡтан, унан сығыу өсөн комендатуранан пропуск ала. Ә Кәшфиҙең мулла атаһын аҡ чехтар файҙаһына иғәнә йыйыуҙа ғәйепләп, Дүртөйләгә алып китәләр. Егет атаһын юллап бара, Чеверевҡа инеп, уны азат итеүҙе һорай. Ҡыҙып китеп: «Һеҙ кеше талаусы коммунистар», – тип ысҡындыра. Үҙенең коммунист булыуын белдереп, ағзалыҡ билетын сығара. Тентеү ваҡытында Кәшфиҙең кеҫәһенән Бөрөлә аҡ чехтар тарафынан бирелгән пропуск килеп сыға. Чеверев уның, партия билетлы шпион булыуынан шикләнеп, атаһы янына яптыра ла һуңынан икеһен дә аттыра.

Чехтар Сарапул яғына китеү менән, һиллек урынлаша, ләкин оҙаҡҡа бармай. Сентябрҙә Себерҙә, Урал буйында аҡ ғәскәрҙәр күренеүе хаҡында ишетелә. Шул уҡ айҙа Ләяштыға Бөрөнән Зәки Кучиев килә. Уның мәғариф эшендә булыуы үҙенә күрә һаҡланырға мөмкинлек бирә. Кучиев халыҡ менән кәңәшләшеп, мәктәп асырға, уҡытыусы итеп Билал Мутиковты һайларға, тигән ҡарарға киләләр. Ике комплектлы мәктәп асылып, уҡытырға Мутиков менән Борай олоҫо Мулла ауылы егете Сәрүәр Банисиев һайлана.

Октябрь баштарында Минзәлә яғына табан Колчак отрядтары үтә башлай. Һуғыштың Минзәлә тирәһендә барыуы хаҡында ишетелеп тора. Ләяштынан Прикамский, Бирский, Аскинский полктары уҙа. Улар артынан Өфө кавалерияһы исемле алты полк килеп, ауылға урынлаша. Һалдаттар аттарына ашатырға бесән-һолоно бушлай ала, икмәк тә бешертәләр. Шулай итеп, Ләяшты тотош бер ғәскәри лагерға әйләнә. Өфө атлы полкы офицерҙарҙан ғына тороп, Мутиковтарға 15 кеше төшә. Ҡаҙ ите, төрлө аштар бешертеп, хәмер эсеп, шау-гөр килеп, донъя ҡуптарып йөрөйҙәр. Ашап-эскән өсөн түләү урынына, улар Билалдың итектәрен, тунын, ҡырынғысын алып китә. Аҡтар киткән көндө үк Бәләбәй яғынан ҡыҙыл отрядтың Әсән ауылын баҫып алыуы ишетелә. Бишҡурай ауылы тирәһендә ҡыҙылдар әлеге офицерҙар полкына ҡапыл һөжүм итеп, полкты тарҡата. Ҡайһы бер офицерҙар яраланып, ауылға ҡайтып инә. Был хәл ҡыҙылдарҙың ҡыйыу эш итеүен күрһәтә. Аҡтарҙан тамам туйған ауыл халҡы тиҙерәк ҡыҙылдарҙың килеүен теләй.

Ноябрь баштарында Бәшәр, Күктау ауылдары яғында ҡаты һуғыштар бара. Ләяшты тулы ла ғәскәр. 18 саҡрымдағы Базы йылғаһы буйында, Үрге Йәркәй ауылы тирәһендә туптарҙан атҡан тауыштар ишетелә. Кискә табан аҡтар тәртипһеҙ рәүештә Әсәнгә сигенә. Хәлдәре мөшкөлләнгән колчаксылар мобилизация иғлан итә. Олоҫ үҙәге Әсәнгә барырға ҡушалар, буйһонмағандарҙың ауылын тупҡа тотоу, ҡаршылашыусыларҙы атыу менән ҡурҡыталар. Халыҡтың асыуы тағы ла ҡабара. Аҡ чехтар килеү менән ҡотороп йөрөгән Минһажетдин бай Базы буйындағы тирмәненә ҡаса. Колчаксылар ауылдан сигенеп бөткән булһа ла, ҡыҙылдар күренмәй әле. Бер нисә кеше, тиҙ генә кәңәшләшеп, Ишҡар ауылына вәкил ебәрә. Ҡыҙылдар ҙур тәртип менән ауылға инеп, ирекле ғәскәр йыйырға тотона. Тиҙҙән Әсән һәм уның янындағы ауылдар ҙа ҡыҙылдар ҡулына күсә. Ләяшты ауылына беренсе булып Симбирский полк инһә, аҙаҡтан Петроградский полкы үтә. Ирекле ғәскәргә яҙылыусылар күбәйә, фронт Бөрөнө лә уҙып китә.

Минһажетдинды тотоп алғас, ауыл халҡынан: «Уны берәйһе порукаға алырға теләйме?» – тип һорайҙар. Байҙы яҡлап берәү ҙә һүҙ ҡатмағас, атып үлтерәләр. Билалды ла ике тапҡыр штабҡа саҡыртып һорау алалар, ләкин бәйләнерлек сәбәп табылмай.

Граждандар һуғышы бит, тәғәйен генә фронт линияһы юҡ. Ауылға бер аҡтар бәреп инә, берсә – ҡыҙылдар. Шулай марттың бер көнөндә Лаяштының бер яғында, йәғни «силәбенекеләр» тип йөрөтөлгәнендә, Колчак фронтына оҙатыласаҡ һалдаттар тора, икенсе яғында түштәренә тәре, миҙал тағып, ҡулдарына ҡамсы тотоп, Бөрө тирәһенән алынған 600-ләп мари һалдаты йөрөй. Уларға әле ҡорал бирелмәгән... Бер ваҡыт мари отряды Мутиковтар өйө янына килә. Билал тиҙ генә инәһен, туғанын, ике балаһы менән Ғәйшә еңгәһен йәшереп, хәлде икенсе урам кешеләренә аңлатып бирә. Улар: «Һеҙгә зыян иттермәбеҙ», – тип, мылтыҡтарын алып, Мутиковтарҙың әйберҙәрен тейәп, урам буйлап барған мари һалдаттарына һөжүм итә лә аттарҙы, әйберҙәрҙе тартып ала. Өйгә барып керһәләр, ул бушап ҡалған, шкафтар ватып асылған. Отряд башлығы акт төҙөп алып китһә лә, файҙаһы теймәй.

Яңы алынған кешеләрҙе аҡтар көн һайын фронтҡа оҙатып тора. Лаяштыға ла мобилизация тураһында хәбәр килеп, Билал Мутиков та хеҙмәткә алынырға тейеш була. Бөрөгә комиссияға барғас: «Һин уҡытыусымы? Беҙгә һинең кеүек белемлеләр кәрәк тә инде», – тип ҡайҙа барырға тейешлеген әйтәләр. Билал Пенза яғындағы Прикамский полкына ебәреүҙәрен һорай, сөнки ҡыҙылдар яғына сығырға иҫәп тота. Көтмәгәндә биш көнгә ауылға ҡайтып килергә рөхсәт бирелә.

Апрелдә Билалдар төркөмөн Өфөгә ебәрәләр. Артабан улар тимер юл менән Һатҡы заводына килә, әммә унда ғәскәрҙе ҡабул итмәй, Мейәскә оҙаталар. 7-се Ковровский полкы штабына саҡыртып, Мутиковты писарь итеп тәғәйенләйҙәр ҙә 12-се ротаға ебәрәләр. Ротала 280 кеше булып, уларҙың күбеһе Билал менән таныш. Командирҙары – бик усал урыҫ ике көн буйы ҡысҡырып яуап бирергә өйрәтә. Егеттәрҙең руссаһы бөтөнләй юҡ, Билал тәржемә итә.

Һалдаттарҙың күп ваҡыты тәмәке тартып, әкиәт һөйләп үтә. Ҡайһы көндә командир килеп тә тормай, Мутиковҡа задание биреп кенә китә. Иптәштәре фронтҡа барғас нисек ҡыҙылдар яғына сығырға мөмкинлеген һораша. Бер аҙнанан тик ятыу ялҡыта, Билал иптәштәренә фронтҡа ебәреүҙәрен һорарға кәңәш итә. Командир: «Унда үләһең бит», – тип йәлләгән булып, ебәргеһе килмәгәнен белдерә. Икенсе көндө үк Мутиковҡа: «Фронтҡа 3-сө Уральский корпусының кейем склады менән поезд китә, һин дүрт һалдат менән ҡарауылсы булып барырһың», – тиҙәр. Кропачево станцияһына килеп, өс көн вагондарҙы һаҡлап яталар. Бынан көн дә Өфө яғына унар эшелон ғәскәр китә. Каппель отрядтары ла үтә. Уларҙың ашау-эсеү яҡшы, өҫ-баштары ла бик шәп: инглиз суконынан тегелгән шинель, мундир, салбар. Бер полктың кейеме ҡара төҫтә булһа, икенсеһе – йәшел.

Бер көн Мутиков Өфөгә барып килер өсөн старшинанан рөхсәт һорай. Тик юлы уңмай, поезд рельстан сығып, Билал бер нисә иптәше менән һикереп ҡотола. Ҡараһалар, паровоз юлдан түбән төшөп киткән, бер нисә вагон ауған. Сало, консервалар тейәлгән вагондар емерелеп, бөтә тауар таралып ята. Бер нисә атлы казак үлгән. Билалдың Өфөгә барыу маҡсаты Колчактың мосолман мәҙрәсәһендә уҡығандарҙы ғәскәри хеҙмәттән азат итеү тураһында бойороғо

булып, шул хаҡта юлламаҡсы икән. Өфөлә ул кәрәкле кешеләрҙе, хәрби хеҙмәткә саҡырылған урында писарҙы күреп һөйләшә. Уға 100 дана сигарет, япон папиростары һәм 50 һум тотторалар. Писарь икенсе көндө үк ғәскәри хеҙмәттән азат итеү тураһында документ бирә.

Бәләбәй тирәһендә ҡаты һуғыштар бара, ҡыҙылдарҙың ҡаты һөжүм итеүе тураһында хәбәрҙәр йөрөй. Билал төп документты үҙенең часынан ала ла, фронт аша сыҡҡанда шикләнерлек булмаһын тип, Мейәс ҡалаһына килә. Иптәштәре уға: «Их, бәхетле кеше һин, унда сыҡҡас (йәғни ҡыҙылдар яғына – **Д.М.**), таныштарға сәләм әйтерһең!» – тип ҡала. Златоусҡа килеп еткәс: «Өфө яғына поездар йөрөмәй, һуғыш унда ла яҡынлашҡан», – тиҙәр. Паровоз машинисы менән һөйләшеп, Билал күмер тейәй торған урынға йәшенә лә ыҫланып, ҡап-ҡара булып Иглин ауылына етә. Уға паровоздан төшөргә ҡушалар: «Өфөгә бер кеше лә ебәрелмәй», – тиҙәр. Юл буйы Себер яғына ҡасыусылар менән тулған. Билал поезд менән Благовещен заводына ҡарай китә. Унынса, шул тирәнән фронт аша сығырға мөмкинлек булырға тейеш. Юлда туҡтатып, документтарын тикшереп: «Һин лучше Бөрөгә бар», – тип кәңәш бирәләр. Ҡалаға килеп фатирға төшкәс, әле бында аҡтар икәнлеге асыҡлана. Икенсе көн иртә менән ҡаты һуғыш ҡуба, аҡтар сигенә. Ҡалаға ҡыҙылдар ингәнен күреп, Мутиков Иҙел буйына төшә лә һалдаттарҙы Иҙел аша сығарыша. Уны взвод командирына алып киләләр. Аҡтарҙың хәле, көсө тураһында ныҡлап белешкәндән һуң, ҡыҙыл командир уны дивизия штабына ебәрә. Суҡкул ауылындағы 27-се дивизия штабында ул аҡтар тураһында белгән-күргәнен һөйләп бирә.

Аҡтарҙан ҡасып ҡалған 300-ләп һалдатты тәүҙә Бөгөлмәгә, артабан Көнсығыш фронттың штабы торған Сембер ҡалаһына оҙаталар. Унда ла аҡтарҙан ҡасҡан меңдәрсә һалдат йыйылып киткән. «Мәскәү яғына 200 кеше кәрәк. Кем бара?» – тигәс, Билал үҙе теләп Ҡыҙыл Армияға яҙыла. Емерек поезд юлынан яйлап Мәскәүгә барып етәләр.

Тормош ауыр, алда ни күрәсегең билдәһеҙ. Ике көн ҡалала торғас, татар һәм башҡорт һалдаттарының йыйылышын үткәреп, ҡыҙыл ғәскәргә үҙ иректәре менән ҡушылыу өсөн, Мәскәү округы начальнигына барып һөйләшәләр. Икенсе көнө 650 башҡорт һәм татарҙы айырып, бер казармаға урынлаштыралар. Рустарҙан үҙҙәре теләп яҙылыусылар булмай. Мунса инеп, хәрби форма кейгәндән һуң, уларға «Татар-башҡорт батальоны» исеме биреп, Мутиковты рота командиры итеп тәғәйенләйҙәр. Ай ярым самаһы ваҡыт үтеп тә китә. Ашау-эсеү бик насар: тоҙло балыҡ ашы, бер тапҡыр тары бутҡаһы һәм тары кәбәгенән икмәк бирелә.

Деникинға ҡаршы бер башҡорт дивизияһының һуғышыуын ишетеп һәм шунда ебәреүҙе һорап, округ начальнигына инәләр. Бер-ике көндән фронтҡа китеүсе батальондар менән бергә Татар-башҡорт батальоны ла Ҡыҙыл майҙанда парадта була. Аҙаҡ уларҙы музыка менән вокзалға алып барып, фронтҡа оҙаталар. Төнөн Полтава губернаһының Рамазан станцияһында уларҙы башҡорт дивизияһы вәкилдәре ҡаршы ала. Үгеҙ итенән бик тәмле аш әҙерләгәндәр икән, ике-өс ай буйы итле аш күрмәгән һалдаттарға ул бик килешә.

Бер аҙна самаһы үткәс, Полтава тирәһенә фронтҡа китергә хәбәр килә. Ҡалаға 20 – 25 саҡрым етмәйерәк, Сагайдак станцияһына барып туҡтайҙар. Унда бер байҙы үлтергәндәр ҙә мөлкәтен крәҫтиәндәргә тараталар икән. Билал да ярты бот аҡ он, тоҙ күтәреп ҡайтып, бер украинға икмәк бешерергә ҡуша. Икмәктең яртыһын ашап, ҡалғанын тоҡсайҙарына һалып йоҡларға ятһалар, сафҡа

теҙелергә ҡушыла. Һирәк-мирәк пушканан атҡан тауыштар ишетелә. Ҡаршы яҡтан дошман броневигының йөрөгәне лә күренә. Төштән һуң һул яҡ флангынан ҡыҙылдар һөжүм итеп ҡарай ҙа сигенергә мәжбүр була. Дошман үҙе уң яҡ флангынан ҡаты һөжүмгә күсә.

Станцияға етәрәк ҡаршы яҡтан орудие атырға тотона. Деникинсылар отряды йылғаның түбәнге ағымынан үтеп, ҡыҙылдарҙың тылына барып сыҡҡан икән. Билалдар дивизияһына тағы ике дивизия ҡушылғас, ауылға һөжүм итеп, аҡтарҙы сигендерәләр. Башҡорт дивизияһына тимер юлдың ике яҡ участкаһын һаҡлау бурысы йөкмәтелә. Позиция һайлап, окоптар ҡаҙыу, разведка яһау менән тағы ике көн үтеп китә. Дошман һөжүм башлай. Башҡорт дивизияһының бронепоезы орудиеларҙан ҡаршы ут аса. Тиҙ арала һуғыш бөтә тимер юл буйлап ҡыҙып китә, ләкин башҡорт һуғышсылары сигенергә мәжбүр була. Элекке позицияға килеп етеүгә, деникинсыларҙың уң флангынан йырып сығып, тимер юлды киҫкәнлеге асыҡлана. Броневик ҡаланы ташлап, Рамазан станцияһына сигенә. Бер ауылда дошман ғәскәре арттан килеп, башҡорт дивизияһын ҡамай. Ҡаршы һуғышыуҙан башҡа сара юҡ. «Йәмле Ағиҙел буйҙары» көйөнә йырлап, аҡтарға ҡаршы ут асалар ҙа, ҡаты һөрән һалып, һөжүмгә күсәләр. Дошман ҡапыл атыуҙан туҡтай. Берҙәмлек, ныҡлы тәртип һәм ғәйрәт һөҙөмтәһендә 30-40 саҡрым араны йырып сығалар. Юғалтыуҙар күп булмай.

Артабан да һуғыша килеп, Бахмач ҡалаһының көнсығышындағы бер ауыл янында ялға туҡтайҙар. Икенсе көндө үк дошман ҡаты һөжүмгә күсеп, тағы сигенергә тура килә. Бер йылғаны аша сығып, позиция биләйҙәр. 15 көндән ярҙамға өҫтәмә ғәскәр килеүе ишетелә. Тиҙҙән Бахмач ҡалаһын алыу тураһында бойороҡ еткерелә. Фронтҡа килгәне бирле кейем-һалым бирелмәгәс, өҫтәгеләре, беренсенән, туҙған; икенсенән, йоҡа булғанлыҡтан, өшөтә. Һалдаттарға ботинкалар, һырыған фуфайкалар, шинель урынына халаттар, эске кейем дә таратылғас, һуғышҡа әҙерлек башлана. Разведка яһап, йылға аръяғындағы ауылда күпме көс барлығы беленгәс, артиллерия ауылды тупҡа тота. Йылға аша сығыр өсөн ике урында күпер төҙөй башлайҙар. Атлылар йөҙөп, йәйәүлеләр күпер аша сығып, артыҡ ҙур көс түкмәй генә, ауылды аҡтарҙан азат итәләр.

Деникинсылар хәҙер Бахмач тирәһенә сигенә. Ҡыҙыл ғәскәрҙең орудиелары ла күпер аша сығып, тейешле урынды биләй. Уларға дошманды уң флангынан ҡыуыу һәм Киевҡа илтә торған юлдан үткәрмәү бурысы ҡуйыла. Аҡтар аҡтыҡҡы көсөн йыйып ҡаршы тора. Бөтә позицияның буйынан-буйына орудие, пулемет, мылтыҡ тауыштары күк күкрәгән шикелле яңғырай. Ҡалаға етергә бер-ике саҡрым самаһы ҡалғас, ҡыҙылдар «Ура!» ҡысҡырып һөжүмгә ташлана. Дошман сигенһә лә, бронепоезд орудиеларын һәм пушкаларын эшкә ҡушып, һөжүмде туҡтатырға тырыша. Уның ике бронепоезы ҡыҙылдар ҡулына эләгеп, кешеләре төшөп ҡаса. Броневиктар был юлы дошмандың үҙенә ҡаршы ата башлай. Бахмач тулыһынса ҡыҙылдар ҡулына күсә. Өсөнсө көндө дошман ғәскәре Киевҡа илтә торған юл буйлап ҡаты һөжүм аса. Башҡа полктар, сигенеп, башҡорт полкына килеп етә. Бер аҙ алға барып, окоп ҡаҙып урынлашҡас, полк дошмандың һөжүмен туҡтата. Таң алдынан тимер юлға яҡын бер ауылға етеп, шунда урынлашалар. Яҡтырғас, «Ура!» ҡысҡырып, ҡыҙыл ғәскәр урманға килеп етә. Ә унда бер соҡорҙа сигенгән рус полкының 200-ҙән ашыу һалдатын деникинсылар әсир алып, ҡылыс менән сапҡылаған һәм кейемдәрен һалдырып алған. Бик ҡаты яраланып, ҡыуаҡтар араһында ятҡан командирҙы санитарҙар тылға оҙата.

Фронтта ҡыҙылдарҙың хәле яҡшырыу айҡанлы, көҙ етеү менән, Билал Реввоенсовтың бойороғона ярашлы, уҡытырға ҡайтарыуҙарын һорай. Дивизия начальнигы Тереғолов менән полк командиры Исхаҡов, үҙ-ара һөйләшеп, Мутиковты ауылына ҡайтарып ебәрәләр. Башта ул Новозыбково ҡалаһына килеп, поезд менән Брянскиға барып төшә лә Смоленск аша Мәскәүгә юл тота. Аҡсаһы тамам бөткәс, Рузаевка тирәһендә халатын һатып, ризыҡ ала. Сызранда уға икмәкте күлдәген һатып табырға тура килә. Поездан поезға күсеп, әйберҙәре иҫәбенә тамаҡ туйҙырып, Билал Шишмә станцияһына килеп еткәс, ҡалған 90 саҡрымды йәйәүләй.

Уның хәбәр бирмәй ҡайтып инеүенә өйҙәгеләр аптырай, сөнки уны, яҡты донъяла юҡтыр, тип күреүҙән өмөттәрен өҙгәндәр. Өйҙәгеләрҙең шатлығы эсенә һыймай, уны хатта аңлатып бирерлек тә түгел. Атаһы, ағаһы үлтерелгәндән һуң берҙән-бер таяныс булып ҡалған Билалдың да хәбәр-хәтерһеҙ юғалып йөрөүе уларҙы ярты хыялыйға әйләндергән.

...Ноябрь уртаһы. Бер аҙналай үткәс, Билал Бөрөгә барып, хәрби комиссариатҡа инә, мәғариф бүлегенә лә һуғыла. Шәйехзада Вахитов, Зәки Кучиевтарҙы осратып, Ляяштыға уҡытыусы итеп тәғәйенләнеп ҡайта. Ул саҡта бында ике комплектлы мәктәп ойошторолоп, Мәскәү олоҫо Илек ауылынан берәү дәрес биреп йөрөй. Этәй ауылында беренсе тапҡыр үткәрелгән олоҫ уҡытыусылары йыйылышына барып, Билал таныштарынан Нәрештә ауылы егете Әғзәм Мөхсиновты осрата.

Мутиковтың мәғариф өлкәһендәге эше ошо йыйылыштан һуң башланып китә. Уны профсоюз ағзаһы итеп алалар. Оҙаҡ та үтмәй, коммунистар фирҡәһенә инеү мәсьәләһе лә ҡалҡып сыға. Күптән партия ағзаһы булыуын йәшереп, Билал ғариза яҙа һәм башҡа иптәштәрен дә өндәй. Йыйылыштағы 60-лап уҡытыусының бишеһе ҡабул ителгәс, ячейка ойоштора ла, рәйесе итеп Килмәтов, секретарлыҡҡа Билал һайлана. Андреевка райкомында тиҙ арала күк тышлы ағзалыҡ билеттары тапшыралар.

Ғинуарҙа ғәскәрҙәр файҙаһына иғәнә йыйыу башлана. Агитация барған ҡаҙна йортонда Билал доклад һөйләгән саҡта берәү: «Етерлек таланығыҙ инде», – тип ҡысҡыра. «Кем ул? Алға сығып һөйләһен!» – ти Мутиков. Башҡалар ҙа: «Ул бер үҙе түгел, барыбыҙ ҙа шул һүҙҙе ҡеүәтләйбеҙ» ,– тип тауышланырға тотона. Урта хәлле крәҫтиән Ғилман Ҡаһарманов, батырайып, алға сыға. Фронтта йөрөп ҡайтҡан, ә үҙе байҙар фекерен ҡеүәтләй. Тауыштар көсәйә, хатта: «Өҫтәл тирәһенән алып ырғытырға кәрәк үҙҙәрен. Үлтерергә, үлтерергә!» – тигән янауҙар ҙа ишетелә. Билал: «Иғәнә көслөк менән алына торған аҡса түгел. Фронтта ҡан ҡойған иптәштәребеҙгә ярҙамға өндәү генә. Теләмәйһегеҙ икән – ихтыярығыҙ», – тип йыйылышты яба.

Баҙарҙы ябыу, сауҙагәрҙәргә һатырға ирек бирмәү, йәшерен сауҙа менән шөғөлләнеүселәрҙе ҡаты эҙәрләү, халыҡтың «артыҡ» игенен тартып алыу, Граждандар һуғышының һаман дауам итеүе халыҡ араһында ризаһыҙлыҡты көсәйтә. Байҙар, кулактар һәм алыпһатарҙарҙың, ошо ауыр хәлдән файҙаланып, Советтарға ҡаршы ҡотҡоһо, урта хәллеләрҙең дә улар яғына ауышыуы йышая. Коммунистарҙың сафы ла ишәйә, февраль баштарына Абдулла ауылында ғына 19 кеше партияға инеп, ячейка ойоштора. Ляяштыла ячейка президиумының киңәйтелгән йыйылышы үткәрелә. Ғәлләм мулла йортон Мулланур Вахитов исемендәге клуб итергә ҡарар сығаралар.

Бер мәл Билал янына дәрескә йөҙө ағарынған һеңлеһе Роза килеп инә. «Минзәлә яғында һуғыш башланған, олоҫто алғандар. Халыҡ тауышлана, мин ат ектем, әйҙә, хәҙер үк ҡасабыҙ», – ти ул. Атаһының ҡустыһы Мөхәмәтхан да:

«Ауыл остарына ҡарауыл ҡуйылған, бер кемде лә сығармайҙар. Ҡаҙна йортонда йыйылыш бара, шунда барып, халыҡ менән аңлашырға ине», – ти. Барһалар, өй эсе туп-тулы. Билал йырып үтеп, өҫтәл янына барып ултыра. «Минең һеҙгә зыяным тейгәне юҡ. Һәр ваҡыт кеше өсөн тырышып йөрөнөм, шуға күрә ҡасмай, һеҙҙең менән ҡалдым», – тип аңлата. Кемдер: «Үлтерергә кәрәк үҙен!» – тип ҡысҡыра. «Дөрөҫ!» – тип йөпләүселәр ҙә табыла. Ҡулына ҡамсы тотҡан Аҡһаҡ Миңләхмәт Билалға яҡынлай. Өҫтәл янында ултырған Хужиәхмәт менән Бикмөхәмәт халыҡты тынысландырырға тырыша. Элек солох судьяһы булып эшләгән Ғиззәт ҡарт: «Йәмәғәт, тынысланығыҙ әле! Минең дә һүҙем бар, – тип урынынан тора. – Беҙ фетнәнең ҡайҙан икәнен дә белмәйбеҙ, ғәскәр-фәлән дә күренмәй, – ти ул. – Билалдың беҙгә зыяны тейгәне юҡ. Беҙ уның атаһын, ағаһын үлтерҙек, ул шунда ла үҙен сабыр тотто. Ауылды көлгә әйләндерерлек көсө бар ине бит уның. Йәш булһа ла, беҙгә унан өлгө алырға кәрәк, үҙен һаҡларға кәрәк. Донъя ҡайһылай әйләнеп китһә лә, барыбер уҡымышлы кешеләр кәрәк буласаҡ». Халыҡ, тынысланып: «Дөрөҫ, дөрөҫ», – тип ҡысҡыра башлай. Барыһы ла таралышҡас, сығып барған Билалға Нурҡай ҡарт: «Әкиәт һабаҡтарынды уҡытма, дин уҡыт!» – тип өйрәтә.

Иртәгәһенә: «Этәй ауылында ячейка рәйесе Килмәтовты үлтергәндәр, Мисбахты туҡмағандар, Иғмәт ауылдары, Абдуллаға барып, Ғата Исхаҡиҙы, Вафа Йосоповты бик ҡаты туҡмағандар. Иғмәттә Сәхипгәрәй Йәрмиев үлем хәлендә ята икән», – тигән хәбәр тарала. Кәйефһеҙ генә уҡытып йөрөгәндә, Мөхәмәтхан ағаһы килеп: «Иғмәттәр һине лә үлтерергә самалай икән», – тип сығып китә. Бер аҙҙан ул тағы ла килеп: «Абдулла яғынан атлы ғәскәр килә, тиҙерәк ҡас!», – ти. Билал балаларға: «Хәҙер киләм, әҙ генә көтөп тороғоҙ», – тип Сәмиғулла Кәбировтың аҙбарына инә лә бесәнгә күмелеп ята. 22 генә йәшендә үлгеһе килмәй уның. «Ысынлап та үлтерергә килһәләр, бынан ғына табасаҡтар бит», – тип ихатаға сыға. Шул арала берәү килеп: «Хәҙер үк ҡағыҙ, ҡара ал да ҡаҙна йортона бар! Халыҡ һине яҙып-һыҙыу алып барырға саҡыра. Юғиһә ҡотҡарып булмаҫ», – ти. Үҙе риза булмаһа ла, Ғиззәт ҡартты – коммендант, Бикмөхәмәт Нурмөхәмәтовты – секретарь, Хужиәхмәт менән Шаһимөхәмәтте олоҫҡа йөрөргә вәкил итеп һайлайҙар. Билалға канцелярияла яҙыу-һыҙыу эшен тапшыралар һәм 20 – 45 йәшлек ир-егеттәрҙең исемлеген төҙөргә ҡушалар. Исемлеккә ингәндәрҙең ҡайһы берәүҙәрен – һыбай элемтәлә йөрөргә, икенселәрен урам остарында ҡарауыл торорға тәғәйенләйҙәр. Ҡалғандарҙан отряд ойоштороп, уға етәксе итеп ауылда бөтәһе лә ихтирам иткән йыуаш ҡына Әһлиуллаһы ҡуялар.

Баҡалы штабынан килгән бойороҡтоң 2-се пунктында властың, большевиктарҙан алынһа ла, совет власы булып ҡалғанлығы хаҡында әйтелеп, большевиктарға ҡаршы һуғышыу өсөн ғәскәр әҙерләргә ҡушыла. 3-сө пунктта:«Һәр ауыл үҙендәге коммунистарҙы ситкә сығармаҫҡа, үҙе хөкөм итергә тейеш», – тиелә. 4-се пунктта һалдаттарҙы өс отрядҡа бүлеп, береһен бойороҡ килеү менән һуғышҡа оҙатырға, икенсеһенә ауылды һаҡларға ҡушыла. Фетнә башланғандың дүртенсе көнөндә Дүртөйлөнөң ҡыҙылдар тарафынан алыныуы хаҡында ишетелгәс, Билалдың эсенә йылы инеп китә. Иртәгәһен уны канцелярияға саҡырталар. Бойороҡта отрядты сәғәт 12-ләргә әҙерләргә, аттарҙы егеүле торорға, башҡалар менән бергә Дүртөйлөгә һөжүмгә китергә ҡушыла.

*(Аҙағы киләһе һанда.)*

## ТӨБӘК ТАРИХЫ САҒЫЛА

**БӘЛӘБӘЙ** – республикалағы иң боронғо ҡалаларҙың береһе, уның халыҡ йәшәгән урын булараҡ теркәлеүе XVII быуатҡа ҡайтып ҡала. 1782 йылда, өйәҙ баш ҡалаһы булараҡ статус алғас, ул бөтә Рәсәй империяһына билдәле була. Ҡаланың тыуған көнө лә шул йылдан иҫәпләнеп, рәсми рәүештә билдәләп үтелә. 1982 йылда Бәләбәйҙе 200 йыллығы уңайынан «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләгәйнеләр.

Ҡаланың тарих-крайҙы өйрәнеү музейы ошо бай тарихты бер оло көҙгө һымаҡ сағылдыра ла инде. Күргәҙмә материалдар һигеҙ бүлектән тороп, Башҡортостандың иң бай музейҙарының береһе иҫәпләнә. Ниндәй бүлектәр улар? Тәбиғәт һәм хайуандар донъяһы; этнография; Бәләбәйҙең өйәҙ ҡалаһы сағы; революция һәм Граждандар һуғышы; Бөйөк Ватан һуғышы йылдары; ҡаланың бөгөнгөһө. Бынан тыш музейҙа күргәҙмәләр һәм экскурсанттар өсөн лекциялар залдары бар.

Ҡала Бәләбәй-Бөгөлмә ҡалҡыулығында урынлашҡан. Уның тәбиғәте ифрат бай: бейек убалар, урмандар менән ҡапланған ҡалҡыулыҡтар, йылға үҙәндәре, әрәмәлектәр. Тигеҙ баҫыуҙар ҙа етерлек. Ә инде шишмәләр иҫәбе өс меңгә яҡынлаша. Район биләмәләренең 34 проценты – урман. Республикалағы киң билдәле Өсән, Сәрмәсән, Ҡармасан йылғалары ошо тарафтан башлана. Шуға ла «Хайуандар донъяһы» бүлегендә бик күп йәнлектәр, ҡоштар һындары күренә. Айыуҙар тере кеүек баҫып тора. Тештәрен ыржайтҡан бүре лә. Әллә нисә балаһын эйәртеп сыҡҡан хәйләкәр төлкө уларҙы ауға йөрөргә өйрәтә кеүек. Ҡабан сусҡалары ла бына-бына сабып китергә әҙер. Юғалып барған, «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгән йәнлек һәм ҡоштар ҙа бар бында. Уларҙы хәҙер ошонда ғына күрергә мөмкин – музей шуныһы менән әһәмиәтле лә инде.

«Этнография» бүлеге хаҡында һүҙҙе кешелек тарихын һүрәтләгән экспонаттарҙан башлайыҡ. Таш быуатҡа ҡараған ҡомартҡылар ҙа байтаҡ: таш балта, сүкеш, һөңгө һәм уҡ остары, төрлө һауыттар. Иң боронғо кешене һүрәтләгән һын да тора. Музейға килгән экскурсанттар өсөн бай мәғлүмәттәр бик күп бында.

Был төбәктә төрлө милләт вәкилдәре күптән уҡмашып көн күрә. Иғтибарҙы иң тәүҙә боронғо башҡорттарҙың йәйләүен һынландырған бай экспозиция йәлеп итә. Унда – башҡорт тирмәһе, аласыҡ, уның янында ҡымыҙ бешеү өсөн гөбө, хеҙмәт һәм көнкүреш әйберҙәре, һауыт-һаба. Тирмә алдында ултырған башҡорт ҡатынына ҡарап, ул заманда ниндәй кейемдә йөрөгәндәрен шәйләргә мөмкин. Арттараҡ утлап йөрөгән аттар күренә.

Бәләбәйҙе торлаҡ пункты булараҡ нигеҙләүселәр тип сыуаштар иҫәпләнә. Шуға ла уларҙың көнкүрешен сағылдырған айырым экспозиция булдырыуға

ғәжәпләнергә түгел. Ул «Курная изба» тип аталған. Экспонаттар сыуаштарҙың көнкүреш үҙенсәлектәрен күҙалларға мөмкинлек бирә. Бәләбәй төбәгендә татарҙар ҙа байтаҡ. Уларға ла айырым мөйөш бирелеп, бик күп экспонаттар ҡуйылған. Йәнле кеүек ултырған ҡатынға ҡарап, кейем үрнәктәрен, биҙәнеү әйберҙәрен, эш ҡоралдарын беләбеҙ. Ә инде «Сауҙа лавкаһы» бүлеге урыҫ сауҙагәренең эшмәкәрлеген шаҡтай тулы кәүҙәләндерә, унда тауар өлгөләре лә ҡуйылған.

Әлеге Башҡортостан биләмәләре революцияға тиклем дүрт өйәҙгә бүленеп, береһенең үҙәге Бәләбәй ҡалаһында булған. Өйәҙгә хәҙерге ун район ауылдары буйһонған. «Бәләбәй өйәҙе XVIII – XIX быуаттарҙа» бүлегендә үткәндәрҙең ҙур дәүеренә сәйәхәт яһайбыҙ кеүек. Унда күп фактик мәғлүмәт бирелгән, шул осорға ҡараған һирәк экспонаттар менән дә танышырға мөмкин. Мәҫәлән, XVIII быуат сиркәү кенәгәһе, XIX быуатта яһалған сәғәт, ҡулъяҙмалар, тәүге гәзиттәр өлгөләре, 1786 йылда нәшер ителгән «Евангелие»ның һирәк данаһы. XX быуат башында Германиянан килтерелгән гәзит баҫыу станогы уҙған быуаттың 70-се йылдарында ла эшкә яраҡлы булып, район һәм ҡала гәзиттәрен шунда баҫтылар. XIX быуат аҙағында хәлле генә йәшәгән кешенең фатирын күрһәткән экспозицияла пианино, затлы стена сәғәте, яҙыу өҫтәле, биҙәнеү, уҡыу-яҙыу әйберҙәре, кейем өлгөләре менән танышҡас: «Ул заманда ла бай йәшәүселәр булған икән», – тип уйлап ҡуяһың.

«Революция һәм Граждандар һуғышы» бүлеге экспонаттарға айырыуса бай, сөнки 1918–1919 йылдарҙа Бәләбәй өйәҙе – һуғыш мәхшәрҙәрен үҙендә ныҡлы татыған төбәк. Ҡыҙылдар һәм аҡтар бер нисә тапҡыр ҡанлы бәрелештәрҙә осрашҡан. Шул осорҙағы күренекле шәхестәрҙән Михаил Фрунзе, Дмитрий Фурманов, Василий Чапаев, аҡ генералдарҙан Каппель да бында булып киткән. Революционер, һуңынан күренекле чех яҙыусыһы Я. Гашек ошондағы «Азатлыҡ» йортонда лекция уҡыған. Бәләбәйҙә Чапаев, Фурманов, Гашек исемдәрен йөрөткән урамдар ҙа бар. Хәҙер йәмғиәтебеҙ был дәһшәтле йылдарға икенсерәк күҙлектән баға. Әммә музей етәкселеге, тарих нисек булған – шулай яҡтыртылыуы зарур, тигән ҡараштა. Экспозициялар ҙа быны асыҡ дәлилләй.

Тәбиғи ки, Бөйөк Ватан һуғышына бағышланған бүлек – иң ҙурҙарҙан. Фронттарҙа Бәләбәй тарафтарынан 22 мең кеше һуғыша, шул иҫәптән – 395 ҡатын-ҡыҙ. Уларҙың яртыһы тиерлек Ватан азатлығы өсөн башын һала. 11 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ, дүртеһе – Дан орденының тулы кавалеры. Был ауыр йылдар хаҡында Сталинград һуғышын кәүҙәләндергән махсус диорама ла һөйләй. Ғөмүмән, был дәһшәтле, Көнсығыш фронт өсөн хәл иткес алыш тураһындағы экспонаттар айырыуса күп. Бәләбәйҙә ойошторолған 124-се махсус уҡсы бригада Сталин ҡалаһын һаҡлауҙа айырыуса батырлыҡ күрһәтә. Музейҙа был һуғыштың ике эпизоды кәүҙәләндерелгән: береһендә пулеметсы аталы-уллы Камаловтар дошман һөжүмен кире ҡаға; икенсеһендә данлыҡлы 64-се армияның штаб начальнигы генерал И. А. Ласкин блиндажда телефондан һөйләшә. Был шәхес Бәләбәй төбәгендә тыуып үҫкән, фашистарҙың 6-сы армияһы башлығы фельдмаршал Ф. Паулюсты әсир алыусы булараҡ дан ҡаҙанған. Волгоградта бер урам Бәләбәй исемен йөрөтә, беҙҙә лә Волгоград тигән урам бар. Бәләбәйҙә шулай уҡ 124-се махсус бригаданың командиры генерал В. Ф. Горохов исемендәге урам да бар.

Был бүлектә СССР Ҡораллы Көстәренең Генераль штабы башлығы маршал Б. М. Шапошниковҡа бағышланған стенд та ҡуйылған. Буласаҡ маршал бала

сағын һәм йәшлек йылдарын ошонда үткәргән, уны тыуған ҡалаһы иҫәпләгән. Маршалдың шәхси әйберҙәре лә һаҡлана: циркуль, лупа, авторучка, күренекле дәүләт һәм хәрби эшмәкәрҙәр менән бергә төшкән фотоһүрәттәр.

Тағы бер махсус стенд Советтар Союзы Геройы, атаҡлы хәрби осоусы, республика ҡатын-ҡыҙҙарынан шундай юғары исемгә бер үҙе лайыҡ булған Мәғүбә Сыртлановаға бағышланған. Ул да Бәләбәй ҡыҙы, 2-се урта мәктәптә белем алған. Музейҙа уның күп һанлы фотоһүрәттәре, хаттары, документтары бар.

Дәһшәтле һуғыш осорона ҡараған экспонаттарҙан – Советтар Союзы Геройы генерал Н. М. Хлебниковтың мундиры (уның эшмәкәрлеге лә беҙҙең ҡала менән бәйләнгән), Еңеү парадында ҡатнашҡан Н. И. Тезиковтың шәхси әйберҙәре (Бәләбәй кешеһе). Бик күп орден-миҙалдар, хәрби отличие билдәләре менән дә танышырға мөмкин. Уларҙы үҙҙәре иҫән саҡта ветерандар йә иһә уларҙың вафатынан һуң яҡындары тапшырған. Бындай экспонаттар арта бара.

Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығына бағышлап үткәрелгән музейҙар смотр-конкурсында 85 дәүләт һәм йәмәғәт музейы араһында Бәләбәйҙең тарих-крайҙы өйрәнеү музейы беренсе урынды алғайны. Был – Еңеүгә индерелгән өлөштөң, һәләк булғандарҙың иҫтәлеген мәңгеләштереүҙең сағыу миҫалы.

«Бөгөнгө Бәләбәй» бүлеге ҡаланың хәҙергеһен яҡтырта. Махсус стендтар иң ҙур предприятие – «Автонормаль» заводы һәм уның тәүге директоры М. Т. Әмиров, нефть һәм газ сығарыу идаралыҡтары, һөт-май комбинаты, араҡы-спирт заводы филиалы, икмәк комбинаты һ.б. коллективтар менән таныштыра. Күп һанлы хеҙмәт алдынғыларының фотоһүрәттәре ҡуйылған. Ҡала һәм районның мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәтенең үткәне, хәҙергеһе тураһында күп мәғлүмәт алырға мөмкин.

Бәләбәй махсус урта һәм һөнәри белем биреү үҙәге булыуы менән дә киң билдәле. Ҡалала Өфө, Һамар ҡалалары юғары уҡыу йорттарының филиалдары эшләй. Улар тураһында ла мәғлүмәттәр бар.

Бына музейҙың махсус күргәҙмәләр залы. Санкт-Петербургтағы атаҡлы балауыҙ фигуралар музейы үҙенең экспонаттарын ошонда бер нисә тапҡыр күрһәтте. Бында шулай республика музейҙарының күсмә күргәҙмәләре лә ҡуйылғаны булды. Урындағы рәссамдар, фотографтар әленән-әле үҙҙәренең яңы ижади эштәре менән таныштырып тора. Фотограф һәм коллекционер Рафиҡ Хәсәновтың шәхси күргәҙмәһе менән күптән түгел генә таныштырҙылар. Уның күп яҡлы талантына һоҡланмау мөмкин түгел. Күп һанлы фотолар, скульптураларҙан тыш, биш йөҙләп календарь, нумизматика бүлегендә күп йылдар элек һуғылған урыҫ һәм сит илдәрҙең тимер һәм ҡағыҙ аҡсалар менән танышаһың да, була бит шундай коллекционерҙар, тип һоҡланып ҡуяһың. Рафиҡ журналист та, ошонда уҡ уның ҡатнашлығында донъя күргән күп һанлы гәзиттәр ҙә ҡуйылғайны.

Музейҙың тарихы ла үҙенсәлекле. Иң элек Бәләбәй педагогия училищеһында ҡала һәм училищеның үткәненә бағышланған музей булараҡ ойошторолa ул. Экспонаттар арта барып, уны киңәйтеү һәм Бәләбәй төбәгенең тарих һәм крайҙы өйрәнеү музейына әйләндереү идеяһы тыуа. Бында һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Әмир ағай Насировтың да өлөшө ҙур. Музей башта йәмәғәт башланғысында эшләй, Әмир ағай төрлө ойошмалар, республика органдары, төрлө статустағы архивтар менән бәйләнешкә инә, бик күп учреждениелар тупһаларын

тапай, һәм һөҙөмтәлә 1979 йылда музей айырым бинала тантаналы рәүештә асыла. Уға был эштәрҙә тарих уҡытыусылары – крайҙы өйрәнеүселәр Т. И. Әминев, Т. К. Максимова, Д. И. Гущиналар ҙур ярҙам күрһәтә. Әмир ағай артабан вазифаны тарих уҡытыусыһы Хәлит Тәүхетдиновҡа тапшыра. Ә 1986 йылдан музей директоры булып П. А. Федин эшләй. Ул да – был өлкәлә ҙур белгес, үҙ эшенең оҫтаһы, энтузиаст, «Башҡортостан Республикаһының абруйлы крайҙы өйрәнеүсеһе» исеменә лайыҡ булған.

Бәләбәй музейына заманында бик күп Почет грамоталары, төрлө дипломдар бирелгәйне: КПСС Үҙәк Комитетынан, ВЦСПС-тан, ВЛКСМ Үҙәк Комитетынан һ.б. Музей Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт министрлыҡтарының дипломдарына ла лайыҡ булды. Бында йылына уртаса 25 мең кеше булып, экспонаттар менән таныша. Уларҙы ғилми хеҙмәткәрҙәр Н. И. Голубкова, Е. И. Федина, тәжрибәле экскурсоводтар Н. А. Хәсәнова, Т. В. Крамаренко яғымлы ҡаршы ала, бөтә һорауҙарға теүәл яуап бирә. Бында музейҙы ҡараусы Ф. Т. Ғиззәтуллинаның да хеҙмәтен билдәләп үтергә кәрәк.

Йылына музейҙа 750-ләп экскурсия үткәрелә. Килеүселәрҙең күпселеге – мәктәп уҡыусылары. Төп фондтарҙа 16400, ярҙамсы фондта 17630 экспонат иҫәпләнә. Залдарҙа 10242 экспонат ҡуйылған. Шуға ла Бәләбәй музейы республикала иң байҙар иҫәбендә. Коллектив Башҡортостандың Милли музейы менән даими бәйләнеш тота. Шулай уҡ күрше Туймазы, Октябрьский ҡалалары, Татарстандың Әлмәт ҡалаһы, Бишбүләк, Миәкә райондары музейҙары менән дуҫлыҡ бәйләнештәре бар, бер-береһенә методик, башҡа төрлө ярҙам күрһәтәләр.

Бәләбәй ҡалаһы һәм районында тағы ла егерменән ашыу музей бар. Улар – Халыҡ ижады музейы, урыҫ әҙәбиәте классигы С. Т. Аксаков, сыуаш әҙәбиәте классигы Константин Иванов, урыҫ шағирәһе Марина Цветаеваның йорт-музейҙары. Ҡалалағы дүрт милли гимназияның, шулай уҡ барса урта мәктәптәрҙең музейҙары эшләп килә. Ҡаланың тарих-крайҙы өйрәнеү музейы уларҙың барыһы өсөн дә – терәк.

Музей коллективы төп һәм өҫтәмә фондтарҙы даими тулыландырыу тураһында хәстәрлек күрә. Бигерәк тә һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары әһәмиәтле төрлө ҡомарҭҡыларҙы ошонда һаҡлауҙы һәм халыҡҡа күрһәтеүҙе намыҫ эше итеп ҡарай. Юғарыла әйтеп үтелгән генерал И. А. Ласкиндың шәхси әйберҙәрен, мәҫәлән, Мәскәүҙән яңыраҡ барып алдылар. Билдәле журналист, күп йылдар ҡала гәзите мөхәррире булып эшләгән, бер нисә китап авторы Денис Әхмәтйәновтың вафатынан һуң уның улы атаһының китаптарын, ҡулъяҙмаларын ошонда тапшырҙы.

Бәләбәй ҡалаһы музейы үҙенең коллекциялары менән дә дан тота. Минералдар коллекцияһында ғына ла 230 төр экспонат бар. Нумизматика кәштәһендә 820 аҡса берәмеге иҫәпләнә. Һирәк осрай торған китаптар ғына ла – 1500. XIX быуатта һәм XX быуат башында төшөрөлгән фотолар бөгөн ҡиммәтле экспонат иҫәпләнә, улар бында аҙ түгел.

**Хажи ӘХМӘТЙӘНОВ.**
**Бәләбәй ҡалаһы.**

***

Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың башҡорт һәм төрөк телдәрендә сыҡҡан шиғырҙар китабын әҙерләүселәр – журналист, Мәжит Ғафури исемендәге өлкә-ара йәмәғәт мәҙәниәт фонды директоры Мадриль Ғафуров, Мәжит Ғафури исемендәге мәҙәниәт фонды советы рәйесе Люциә Камаева, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Республика милли китапханаһының элекке хеҙмәткәре Альберт Ҡадиров ТӨРКСОЙ халыҡ-ара ойошмаһы тарафынан иҫтәлекле билдәләр менән наградланды. Билдәләрҙе Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының ТӨРКСОЙ-ҙағы вәкиле Әхәт Сәлихов тапшырҙы. Китаптағы баш һүҙ авторы – ойошманың генераль секретары Дюсен Касеинов.

Баҫмала Мәжит Ғафуриҙың ҡыҫҡаса биографияһы, шиғырҙары, ғаилә архивынан алынған фотографиялар урын алған.

***

„Урал батыр“ башҡорт халыҡ эпосын яттан һөйләү буйынса йәш сәсәндәр бәйгеһе быйыл Ҡандраҡүл буйында 13-сө тапҡыр уҙҙы. Конкурстың ойоштороусылары – Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы, Өфө ҡалаһы ҡала округының мәғариф бүлеге, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты һәм Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты.

Йәш сәсәндәр эпосты бер нисә телдә һөйләү буйынса ғына түгел, билдәле ғалим һәм яҙыусы Жәлил Кейекбаев, шағирҙар Ғәлимов Сәләм, Мөхәмәтйәров Хәй ижады буйынса ла көс һынашты.

Өс көн дауамында барған ҡыҙыу ярыштарҙа әҙәбиәтселәр тормошо һәм ижады буйынса викторинала Дүртөйлө районынан Г. Рафиҡова, үҙең тураһында „визит карточкаһы“ аша һөйләп таныштырыуҙа Туймазы районы командаһы, „Урал батыр“ эпосынан өҙөк күрһәтеүҙә ишембайҙар беренсе булды. Ә төп ярыш һаналған сәсәндәр бәйгеһендә Хәйбулла районы Әбеш мәктәбенән Ғәзиз Ишмөхәмәтов Гран-при яуланы. Беренсе урындарға Баймаҡ районы Мерәҫ мәктәбенән Ильяс Дауытбаев менән Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейынан Әлиә Әминева сыҡты.

***

Күгәрсен районының Мораҙым тарлауығында балалар араһында ойошторолған „Байыҡ“ республика башҡорт бейеүе конкурсының Гала-концерты уҙҙы. Сарала Башҡортостандың ҡала һәм райондарынан, Чечен, Ҡабарҙы-Балҡар республикаларынан, Тверь өлкәһенән, Ҡаҙағстандан, Дағстандан 3 йәштән алып 16 йәшкәсә 500-гә яҡын бәйгесе ҡатнашты. Бәйгеселәрҙе ҡотларға Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов килде.

Баһалама комиссияһы (жюри рәйесе – Башҡортостандың халыҡ артисы Радмир Бәҙретдинов) Благовар районынан Индира Сибәғәтуллинаны („Заһиҙә“) һәм Белорет районынан Айназ Низаметдиновты („Ҡарас сәсән“) бәйге еңеүселәре тип тапты – Гран-при уларға тапшырылды. Ансамблдәр араһында иң юғары урын Асҡын районының „Ынйылар“ бейеү коллективына бирелде. Парлы бейеүҙәрҙә Әлшәйҙән Камила Ғөбәева менән Линар Нәсибуллинға („Ҡороҡсолар“) етеүсе булманы.